# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ

# 5











# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ 5

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1 : 811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
Б28

## Шартлы тамғалар

– һүҙлек эше
– әҙәби-теоретик төшөнсә
– тасуири уҡығыҙ
– ятлағыҙ
– парлашып йәки төркөмдә эшләгеҙ
– иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ
– өҫтәмә уҡыу өсөн
– проект эше
– ижади эш
– дөрөҫ уҡығыҙ
‖ – тел материалына аңлатма
– өйҙә ололар ярҙамында эш
– тәржемә итегеҙ

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте**: уҡытыу рус телендә алып
Б28 барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [авт.-төҙ.: В. И. Хажин, Ә. Х. Вилданов, Ф. Ә. Аҡҡужина, М. И. Ҡарабаев, З. Р. Әминева]. — Өфө : Китап, 2017. — 296 бит.

ISBN 978-5-295-06739-6

**УДК 373.167.1 : 811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

© Хажин В. И., Вилданов Ә. Х., Аҡҡужина Ф. Ә., Ҡарабаев М. И., Әминева З. Р., 2017
© Кәримова З. И., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

**ТП – 075/17**

**ISBN 978-5-295-06739-6**

# КӨҘ

*Сөләймән Муллабаев*

## ШАТЛЫҠЛЫ ИРТӘ

Бөгөн тәүге көҙ айы,
Ниндәй шатлыҡлы иртә!
Ҡояш, ихлас йылмайып,
Беҙҙе бит тәбрик итә.
    Хуш киләһең, сентябрь —
    Уҡыу йылының башы!
    Дәрестәргә саҡырып
    Сыңлай ҡыңғырау тауышы.
Көнгә янған йөҙөбөҙ
Шатлыҡлы, ҡыуаныслы.
Дәртләнешеп атлайбыҙ,
Аҙымдар ышаныслы.
    Ҡанатланып, күңелдәр
    Ҡош кеүек оса ғына.
    — Һаумы, һөйөклө мәктәп,
    Ал беҙҙе ҡосағыңа!

1. *Көнгә янған йөҙөбөҙ, аҙымдар ышаныслы, ал беҙҙе ҡосағыңа* һөйләмдәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.
2. 1 сентябрь иртәһен шағир *шатлыҡлы иртә* тип атай. Шиғырҙа ул шатлығын нисек белдерә? Текстан миҫалдар килтерегеҙ.
3. 1 сентябрҙе шағир *тәүге көҙ айының башы* ти. Көҙҙөң тағы ниндәй айҙары бар? Уларҙың һәр береһендә нисә көн? Был айҙарҙа тәбиғәт нисек үҙгәрә? Күҙәтеүҙәрегеҙгә таянып, атай-әсәйҙәрегеҙҙән һорашып, уларға характеристика бирегеҙ.

4. Күңелдең ҡанатланыуын һеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Күңел торошо тағы нисек була ала икән? Мәҫәлән: *күңел асыу; күңел булыу...* Исемлекте дауам итегеҙ, һәр осраҡҡа аңлатма бирегеҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.
5. Яңы уҡыу йылына нисек әҙерләнеүегеҙ, 1 сентябрь көнө мәктәптә ниндәй тойғолар кисереүегеҙ, быйылғы уҡыу йылына пландарығыҙ тураһында фекер алышығыҙ.
6. Белем көнө һеҙҙең мәктәптә нисек үтте?
7. Шиғырҙағы *оса* һүҙе рус телендәге *оса́* (һағыҙаҡ) һүҙенән әйтелеше яғынан айырыламы?
8. Интернет селтәренән 1 сентябргә арналған открытка, һүрәттәр, ҡотлауҙар табып башҡортсаға тәржемә итегеҙ.

## Фонетика.
## Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре

Башҡорт телендәге күпселек өндәр әйтелеше яғынан рус телендәге өндәргә оҡшай. Мәҫәлән: **бал** (мёд) — **бал** (маскарад). Ләкин байтаҡ өндәрҙең әйтелеше тап килмәй. Шулай уҡ рус телендә булмаған өндәр ҙә бар. Бындай үҙенсәлекле өндәргә түбәндәгеләр инә:

*а) һуҙынҡылар (гласные)* — ***о*** (болон), ***ө*** (Өфө), ***ә*** (әсәй), ***ы*** (шыршы), ***ү*** (үлән), ***э(е)*** (эшсе);

*б) тартынҡылар (согласные)* — ***ғ*** (дуға), ***ҙ*** (ҙур), ***ҡ*** (ҡалаҡ), ***ң*** (һуң), ***ҫ*** (төҫ), ***уы*** (ауыл, ваҡ), ***һ*** (һыйыр).

**1-се күнегеү.** Ике телдәге өндәрҙе әйткәндә телмәр ағзаларының тороу урындарын сағыштырығыҙ.

| *башҡорт телендә* | *рус телендә* |
|---|---|
| он | он |
| алтын | алты́н |
| кем | кем |

**2-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

Ваҡыт, ауыл, көтөү, ватыу, ҡауын, һауыт, тәүҙә, Вәзир, тау, кеүек, ауырыу.

*Баязит Бикбай*

## ТУҒАН ТЕЛ

Ерҙә кеше һөйәгенән
Убалар үҫкән…
Тел — тере шишмә — үлмәгән,
Бөгөнгә еткән!

Шул тел менән тыуҙым, үҫтем,
Торам бөгөн дә.
Аңлай мине ғәзиз халҡым
Туған телендә.

Минең телем — тыуған ерем,
Әсәм тауышы,
Халҡымдың бай хазинаһы,
Таҙа намыҫы!

Ерҙә халыҡ йәшәй икән —
Теле лә йәшәй.
Телен асҡанда һәр бала
Әйтәсәк: «Әсәй!»

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе текстан табып, мәғәнәләренә төшөнөгөҙ.
2. Тәүге дүрт юлды иғтибар менән уҡып сығығыҙ, унда авторҙың нимә әйтергә теләгәнен аңлатығыҙ.
3. Шағир туған телен нимәләр менән сағыштыра? Һеҙ туған телегеҙ тураһында нимә уйлайһығыҙ? Туған телһеҙ кеше буламы?
4. Шиғырҙың һуңғы ике юлын тағы бер ҡат уҡығыҙ әле. Бөгөн һәр бер бала әсәһенә «әсәй» тип өндәшәме? Әллә «мама» тиме?

**3-сө күнегеү.** Түбәндә һаналған хайуан, йәнлек һәм ҡоштарҙың тауыш сығарыуҙарын белдергән һүҙҙәрҙе яҙығыҙ.

Ат, һыйыр, тауыҡ, ҡаҙ, өйрәк, эт, бесәй, бүре, кәкүк, һандуғас.

Өлгө: *үгеҙ үкерә.*

**4-се күнегеү**. Бирелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ, уларҙы ҡулланып, бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.

Күҙ, ҡояш, уҡыу, ҡанат, ҡош, аҫыл, күкһел, төҫ, мөғжизә, мышы, айыу, юғары, ҡул болғау.

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

Кеше үҙенең тормошон һәр саҡ матурыраҡ, күркәмерәк, күңеллерәк итергә тырышҡан — төрлө байрамдар уйлап сығарған, кейем-һалымын, өй йыһаздарын биҙәкләгән, йырҙар, бейеүҙәр ижад иткән. Уларҙы беҙ бөгөн, дөйөмләштереп, халыҡ ижады тип йөрөтәбеҙ.

Халыҡ ижады әҫәрҙәренең конкрет авторы юҡ. Улар, әлбиттә, ҡасандыр һүҙгә, моңға, фантазияға бай оҫталар тарафынан ижад ителгәндәр. Әммә быуындан быуынға күсә килә был оҫтаның исеме онотолған, ә ул ижад итеп ҡалдырған әҫәр артабан күмәк кеше ҡатнашлығында шымартылған, камиллаштырылған һәм дөйөм халыҡтыҡы булып киткән.

Ижад ителешенә, башҡарылыу һәм йәшәү рәүешенә ҡарап, халыҡ ижадын бейеү сәнғәтенә (халыҡ бейеүҙәре), музыка сәнғәтенә (йырҙар, көйҙәр), биҙәү сәнғәтенә (йорт-йыһазды, кейем-һалымды биҙәкләү) һ. б. бүлеп йөрөтәләр.

Ауыҙ-тел ижады (устное народное творчество) дөйөм халыҡ ижадының ҙур бер өлөшөн тәшкил итә. Ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре телдән ижад ителә һәм һөйләү юлы менән быуындан быуынға күсеп йәшәй. Шуға уны һүҙ сәнғәте (искусство слова) тип тә йөрөтәләр.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады бик бай. Унда, һеҙгә бәләкәйҙән таныш булған әкиәттәрҙән, йомаҡтарҙан тыш, бик күп эпостар, легендалар, риүәйәттәр, бәйеттәр, йырҙар, таҡмаҡтар, көләмәстәр, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр бар. Улар ауыҙ-тел ижадының жанрҙары тип атала.

Ауыҙ-тел ижадында халыҡтың көндәлек тормошо, йәшәү рәүеше, азатлыҡ өсөн көрәше, хис-тойғолары, уй-хыялдары сағыла. Унда күмәк быуындарҙың тормош

тәжрибәһе тупланған. Шуға уның тәрбиәүи әһәмиәте бик ҙур. Илен, халҡын, телен һөйгән, ата-бабалары тыуҙырған тарихты, уларҙан ҡалған күркәм традицияларҙы ихтирам иткән кеше ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрен өйрәнергә, ҡәҙерләп һаҡларға, килер быуындарға еткерергә бурыслы.

1. Үҙегеҙ ишеткәндәргә, уҡығандарға таянып, «Нимә ул халыҡ ижады?» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.
2. Халыҡ ижадының берәй төрөнә характеристика бирегеҙ.
3. Башҡорт халыҡ ижады яҙыусы ижадынан нимәһе менән айырыла?

## ӘМИНБӘК

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

### I

Борон-борон заманда бер ауылда бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Уларҙың Әминбәк исемле бер улдары булған. Ата-әсәһе Әминбәкте бай һатыусы итергә теләгән.

Бер көндө атаһы Әминбәкте янына саҡырып алған да:

— Улым, һин инде ир етеп киләһең, ә бер һөнәрең дә юҡ. Һөнәрһеҙ ир — ҡанатһыҙ ҡош ул. Бына һиңә йөҙ һум аҡса, шуны ал да, ҡалаға барып, һатыусы булырға өйрәнеп ҡайт, — тигән.

Әминбәк йөҙ һум аҡсаны алған да, тоҡсайын арҡаһына аҫып, юлға сығып киткән. Бер көн барған, ике көн барған Әминбәк. Шунан ул бер ҡалаға килеп еткән. Фатир алып ҡунған да, таң менән ҡапҡа алдына сығып ултырһа, урамда бер кеше:

— Кем дә кем һөнәр өйрәнергә теләй, шул кеше фәлән ерҙәге фәлән йортҡа барһын! — тип ҡысҡырып, хәбәр һалып йөрөй икән.

Әминбәк күп уйлап тормаған, тотҡан да шул йортҡа киткән. Барып тәҙрәһенән ҡараһа, өй эсендә йөрәкте өҙҙөрөп скрипка уйнайҙар икән. Скрипкалары шундай матур, күҙҙең яуын алып тора, ти: үҙенең бер ҡылы

алтын, бер ҡылы көмөш икән, ти. Әминбәк өйҙөң эсенә инә. Скрипка һөнәренә өйрәтеүсе уға:

— Йөҙ һум түләйһең дә бер йыл өйрәнәһең, — тигән.

Әминбәк йөҙ һумын сығарып биргән дә скрипка уйнарға өйрәнә башлаған.

Бер йыл тулғанда, ул шат кешенең шатлығын арттырырлыҡ, ҡайғылының ҡайғыһын таратырлыҡ, ауырыуҙы түшәгенән торғоҙорлоҡ итеп скрипка уйнарға өйрәнгән. Шуға ул, бик шатланып, ата-әсәһе янына ҡайтырға ашыҡҡан. Ҡайтҡас, атаһы:

— Йә, улым, ниндәй һөнәр өйрәнеп ҡайттың? — тип һораған.

— Мин скрипка уйнарға өйрәндем. Шат кешене тағы ла нығыраҡ шатландырам, ҡайғылының ҡайғыһын таратам, ауырыуҙы түшәктән торғоҙам! — тигән Әминбәк.

«Скрипка уйнау ҙа булғанмы һөнәр!» — тип ата менән әсә бик ҡайғырышҡандар. Шунан, күрше-күлән белеп ҡалмаҫ борон тип, Әминбәккә тағы ла йөҙ һум аҡса биргәндәр ҙә, ысын һөнәргә өйрән тип, икенсе ҡалаға ебәргәндәр.

Был ҡалала Әминбәк бер йыл эсендә бик оҫта итеп яҙыу яҙырға өйрәнеп ҡайта. Кем булып яҙырға теләй, шул булып яҙа ала икән. Ләкин ата-әсәһенә был да оҡшамай.

— Яҙыу яҙыу ниңә кәрәк ул, бар, берәй йүнлерәк һөнәр алып ҡайт! — тип, һуңғы йөҙ һумын биреп, атаһы уны өсөнсө ҡалаға ебәрә. Уныһында Әминбәк бик оҫта итеп сатраш уйнарға өйрәнеп ҡайта. Ул хатта өйрәтеүсеһенең үҙен дә еңә лә ҡуя икән.

— Сатраш та булдымы һөнәр! Шайтан уйыны бит ул! Бөлдөрҙөң бит, улым! Хәҙер инде бөтөнләй хәйерсе булып ҡалдыҡ. Кеше күҙенә күренеп йәшәр хәл ҡалманы. Бөгөн үк бынан күсенеп китәбеҙ, — тигән атаһы, ҡайғырып, һәм, мал-тыуарын, йорт-ерен һатҡан да, ваҡ-төйәк нәмәләрен арбаға тейәп, бисәһе менән Әминбәкте ултыртып, ауылдан сығып киткән, ти.

1. Текстан үҙегеҙгә таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, һүҙлек ярҙамында мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уларҙы ҡулланып, әкиәттең йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. Атаһы Әминбәккә: «Һөнәрһеҙ ир — ҡанатһыҙ ҡош», — ти. Был мәҡәлдең мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ? Текстан ошо мәҡәлдең дөрөҫлөгөн дәлилләүсе миҫалдар килтерегеҙ.
3. Ата-әсәһе Әминбәктең скрипкала уйнарға, сатраш уйнарға, яҙырға өйрәнеүен хупламай, уларҙы ысын һөнәргә иҫәпләмәй. Һеҙҙеңсә нисек? Текстан бының киреһен дәлилләүсе миҫалдар килтерегеҙ.
4. Текстан Әминбәктең һөнәрҙәрен тасуирлаған урындарҙы табып уҡығыҙ.

## II

Юлда быларҙың аҡсаһы төшөп ҡала, асыға башлайҙар. Шулай китеп барғанда, үтеп барған бер каруанға тап була былар. Шул саҡ Әминбәк:

— Атай, әсәй, һеҙҙең ошо көнгә ҡалыуығыҙға мин ғәйепле. Һеҙ мине анау үтеп барған каруан башлығына һатығыҙ ҙа шул аҡса менән көн күрегеҙ. Яҙған булһа, күрешербеҙ әле, — тигән.

Улар, каруан башлығы менән һөйләшеп, Әминбәкте һатып ебәргәндәр. Үҙҙәре улдарынан илай-илай айырылып тороп ҡалғандар.

Был бик алыҫтан килгән каруан икән. Бер нисә көн үткәс, каруандың юлға алған һыуы бөткән. Кешеләр генә түгел, хатта дөйәләр ҙә һыуһыҙлыҡтан интегә башлаған. Ҡояш та өтөп алып бара, ти. Бөтөнләй хәлдән тайған кешеләр алыҫта бер ҡара нөктә күргәндәр. Бөтә көстәрен һалып улар шул нөктәгә табан киткәндәр. Барһалар — ҡоҙоҡ икән.

Бау бәйләп, тиҙ генә силәк төшөргәндәр былар. Тартып ҡараһалар, ҡоро силәк килеп сыҡҡан, ти. Ни эшләргә? Шунан каруан башлығы былай тигән:

— Кем дә кем, ошо ҡоҙоҡҡа төшөп, һыу табып сығара, шул кешегә ошо каруан байлығының яртыһын бирәм.

— Мин төшәм, — тигән Әминбәк.

Уны силәк тағылған бауға бәйләгәндәр ҙә ҡоҙоҡҡа төшөрөп ебәргәндәр.

Ҡоҙоҡтоң төбө ҡоп-ҡоро булып сыға. Уның ҡарауы, Әминбәк унда ҙур бер алтын өйөмөн күреп ҡала ла, бауға бәйләп, өҫкә ҡырҡ силәк алтын сығара. Иң һуңынан, силәккә йәбешеп, үҙе сығырға булған. Ләкин каруан башлығы, алтындың яртыһын һорар был, тип бауҙы ҡырҡҡан да ебәргән. Әминбәк дөбөр-шатыр кире ҡоҙоҡҡа төшөп киткән, ти.

Бер аҙ иҫенән яҙып ятҡандан һуң, Әминбәк ҡараңғыла стеналарҙы һәрмәп йөрөй башлаған. Шулай һәрмәнеп йөрөй торғас, уның ҡулы бер ишек тотҡаһы кеүек нәмәгә тейгән. Ҡапыл тартып асып ебәрһә, Әминбәктең ҡото оса яҙған: өй эсендә бер ҡарт дейеү, бер уң яҡҡа, бер һул яҡҡа сайҡалып, аңҡы-тиңке килеп ултыра, ти. Әминбәк ни эшләһен — ҡасыр урын юҡ, шул өй кеүек ергә ингән дә ҡарт дейеүгә бик оҙаҡ ҡарап ултырған. Дейеү уға бер һүҙ ҙә өндәшмәгән. Шул ваҡыт Әминбәк стенала элеүле торған скрипканы күреп ҡалған. Уның уйнағыһы килеп киткән. Шунан ул, бар ҡыйыулығын йыйып, скрипка уйнарға дейеүҙән ымлап рөхсәт һораған. Дейеү ым менән рөхсәт биргән. Әминбәк скрипканы алған да, уны бик һәйбәтләп көйләгәс, яңғыратып уйнап ебәргән. Бик оҙаҡ уйнаған ул. Ә ҡарт дейеү, был уйнаған һайын, йәнләнә бара икән. Тора-бара ул сайҡалыуҙан туҡтаған, шунан телгә килгән. Ул егеттең кем булыуын, ни эшләп бында төшөүен һорашҡан. Егет бер нәмәһен дә йәшермәй һөйләп биргән, ҡырҡ силәк алтын сығарыуын да әйткән. Дейеү быға бик ҡайғырған.

— Ул алтын минеке ине, егет. Һин мине бөлдөргәнһең, — тигән дейеү. — Шулай ҙа мин һине ғәфү итәм, һин мине үлемдән ҡотҡарҙың. Мин һәләк булған улымдың ҡайғыһынан үҙем дә үлеп бара инем, һин, скрипка уйнап, миңә йән индерҙең. Йә, ни теләгең бар, шуны үтәйем, — тигән.

— Мине өҫкә сығар ҙа каруан артынан еткер, — тигән Әминбәк.

Дейеү Әминбәкте ҡоҙоҡтан осортоп алып сыҡҡан да шунда уҡ каруанға еткереп ҡуйған, ти. Каруан кешеләре, Әминбәкте күреп, бик аптырағандар, ти.

Шунан каруан башлығы тағы бер хәйлә ҡорған. Ҡалала торған ҡатынына хат яҙған да, алдан барып һөйөнсө алырға тип, атҡа мендереп, Әминбәкте ебәргән. Әминбәк атын саптырып барған-барған да: «Туҡта әле, был нимә яҙҙы икән?» — тип, атын туҡтатып, хатты асып уҡыған. Унда: «Мин ҡайтҡансы, ошо малайҙы үлтертеп, кәүҙәһен кеше тапмаҫ ергә йәшертеп ҡуй», — тип яҙылған булған, ти.

Әминбәк был хатты йыртып ташлаған да каруан башлығының үҙ ҡулы менән яҙған кеүек итеп: «Мин ҡайтыуға, ошо егеткә ҡыҙыбыҙҙы биреп, кейәү итеп ҡуй», — тип яңы хат яҙған. Хатты алғас, каруан хужаһының ҡатыны, таныш-белештәрен тиҙ генә саҡырып, һимеҙ ҡуй һуйып, ҡунаҡ һыйлап, егетте кейәү итеп тә ҡуйған, ти.

Төндә ҡаланың бөтә йорттарында ла ут һүнгән булған, тик бер генә йортта ут балҡып янып тора икән. Әминбәк шул утты күргән дә кәләшенән:

— Анау ниндәй йорт ул, ниңә унда һаман ут яна? — тип һораған. Кәләше уға:

— Ул — батша йорто. Батша сатраш уйнай. Кем дә кем уны бер рәттән өс тапҡыр ота, шул кешегә үҙенең батшалығын бирә, ә үҙе өс тапҡыр отһа, отолғандың башын ҡырҡа, — тигән.

Әминбәк батша янына киткән. Батша уға:

— Эй, егет! Ошо көнгә саҡлы мине сатраашта отҡан кеше булманы. Башың һау саҡта, ҡайтып кит! — тигән.

— Юҡ, уйнайым! — тигән Әминбәк.

Әминбәк бик тырышып, бөтә оҫталығын һалып уйнаған һәм батшаны өс тапҡыр отҡан, ти.

Батша ни эшләһен — вәзирҙәрен саҡыртып алған, бөтә ҡала халҡын уятҡан, оло байрам яһап, Әминбәкте тәхеткә мендереп ултыртҡан. Әминбәк шулай батша булып алған, ти...

Күп тә үтмәй, теге каруан ҡалаға ҡайтып еткән, ти. Каруан башлығы ҡатынынан:

— Йә, ҡатын, теге мин ебәргән малайҙы ни эшләттең? — тип һораған.

— Ни эшләтәйем, — тигән ҡатыны, — үҙең ҡушҡанса эшләнем. Ҡуй һуйып, ҡыҙҙы биреп, кейәү итеп ҡуйҙым.

— Алйот, мин һиңә уны үлтертеп, кеше тапмаҫ ергә йәшертеп ҡуй, тип яҙҙым бит!

Ҡатыны аптырауға ҡалған да ире яҙған хатты алып биргән. Ире хатты алып ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, ул үҙ ҡулы менән: «Мин ҡайтыуға, ошо егеткә ҡыҙыбыҙҙы биреп, кейәү яһап ҡуй», — тип яҙған. Шунан ул:

— Һуң ул ҡәһәр һуҡҡан кейәүең ҡайҙа? — тип ҡысҡырған.

Ҡатыны, ҡото осоп:

— Һин ауыҙыңды ипләберәк ас, хәҙер ул батшабыҙ бит! — тип аңлатҡан.

Каруан башлығы иҫенән яҙа яҙған. Шунан ул батша алдына барып тубыҡланып ғәфү үтенгән. Әминбәк уны ғәфү иткән.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, Әминбәк ата-әсәһен үҙ янына күсереп алған. Улар ғүмерҙәре бөткәнгә тиклем рәхәт көн күргәндәр, ти.

1. Скрипканан башҡа тағы ниндәй музыка ҡоралдарын беләһегеҙ? Башҡорт халҡының ниндәй музыка ҡоралдары бар?
2. Ни өсөн дейеү Әминбәккә ҡоҙоҡтан сығырға ярҙам итә? Дейеү образын тағы ниндәй әкиәттәрҙә осратҡанығыҙ бар? Ул һәр ваҡыт шулай ярҙамсылмы? Һеҙ дейеүҙе нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?
3. Әкиәт геройы, ғәҙәттә, өс төрлө һынау үткәс кенә, маҡсатына ирешә. Әминбәктең батша булып ултырғанға тиклем үткән һынауҙары тураһында текстан табып һөйләгеҙ. Башҡа әкиәттәрҙән дә быны дәлилләүсе миҫалдар килтерегеҙ.

**5-се күнегеү**. Бирелгән һорауҙарға яуаптар яҙығыҙ.

1. Йәй көнө ҡайҙа булдың? Ҡайҙа ял иттең?
2. Ауылда (лагерҙа һ. б.) күпме ваҡыт булдың?
3. Унда һиңә нимәләр оҡшаны?
4. Ауылда ниҙәр эшләнең?

5. Балыҡ тоторға йөрөй алдыңмы?

6. Урманда ниндәй еләктәр йыйҙың?

7. Экскурсияға барырға тура килмәнеме?

**6-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе яттан яҙығыҙ.

1. Ялҡауға үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын.

2. Эшле килер — эш арттырыр, эшһеҙ килер — эш ҡалдырыр.

**7-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙә нисә тартынҡы һәм һуҙынҡы өн бар?

Йәйәүләү, ауыраясаҡ, юясаҡ, уяныуы, юйыуы.

**8-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәр араһынан башҡорт һүҙҙәрен генә яҙып алығыҙ , уларҙы рус теленә тәржемә итегеҙ.

Ҡартлас, поход, офоҡ, һуҡмаҡ, ҡыяр, лагерь, игенсе, план, емеш, борғо, помидор, хеҙмәт, герой, баҫыу, рюкзак, сәйәхәт.

**9-сы күнегеү.** «Әминбәк» әкиәтенең һуңғы ике абзацынан башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен генә яҙып алығыҙ.

**10-сы күнегеү.** Бирелгән темалар буйынса бер-берегеҙ менән һөйләшегеҙ.

1. Һуңғы ваҡытта уҡыған китаптар араһынан ҡайһыһы һиңә нығыраҡ оҡшаны? Үҙеңдең фекереңде дәлилләә.

2. Йәйге походҡа иң кәрәк тип иҫәпләгән нимәләр алып барыр инең? Һәр әйберҙең ниңә кәрәклеген һөйлә.

3. Телефондан һөйләшеү. Иптәшеңдән йәйге каникулды нисек үткәреүе тураһында һораш. Үҙеңдең ҡайҙа булғаныңды һөйлә.

# АҠЪЯЛ БАТЫР

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

## I

Борон-борон заманда бер ауылда йәшәгән, ти, бер әбей менән бер бабай. Улар бик ярлы йәшәгәндәр, ти. Бер ваҡыт быларҙың ир балалары донъяға килгән. Малай түбәһенән алып ҡалаҡ һөйәктәре араһына тиклем етеп торған ап-аҡ оҙон сәсле, ти, үҙе. Шуға ҡарап, уға Аҡъял батыр тип исем ҡушҡандар, ти.

Был малай ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән: ете йәшендә бүрегә лә, айыуға ла бирешмәҫлек батыр булып етеште, ти. Ата-әсәһе үлеп, яңғыҙ ҡалғас, болан тиреһенән тегелгән тунын кейеп, бер батман уғын йөкмәп, осоп төшөп барған йөндө лә ҡырҡа ала торған үткер ҡылысын алып, донъя күрергә тип сығып киткән.

Аҡъял батыр ай киткән, йыл киткән, күп тауҙар, урмандар, йылғалар үткән. Бара торғас, бер бейек тау битендә хәл йыйырға ултырған. Шул саҡ ул саң борҡотоп, тау-таш аҡтарып йөрөгән бер кешене күреп ҡалған.

— Әй, ағай, һин кем? Нишләп улай саң борҡотоп йөрөйһөң бында? — тип һораған унан.

— Мин Тау батыр булам, — ти икән теге кеше. — Бына ошо тауҙарҙы күсереп йөрөйөм, минең эшем шул. Ә һин үҙең кем булаһың һуң?

— Мин Аҡъял батыр булам. Тыуған илемде ташлап, ер-һыу күрергә тип сыҡҡайным, бына һине осраттым.

Тау батыр:

— Үҙеңә юлдаш итһәң, мин дә һинең менән барыр инем донъя күрергә, — ти.

Берәүҙән икәү яҡшы, тип, Аҡъял батыр риза булды, ти. Киттеләр, ти, былар икәүләп сығып. Китеп баралар, китеп баралар, ти. Бара торғас, бер ҙур ҡалын урманға барып еттеләр, ти. Ә урмандан, шарт та шорт итеп, әллә ниндәй ҡурҡыныс тауыштар ишетелеп тора, ти. Аҡъял батыр менән Тау батыр урманға килеп инһәләр, унда

бер кешенең ағастарҙы, тамыры менән йолҡоп алып, бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөүен күреп ҡалғандар.

— Ағай, ни эшләп йөрөүең был? — тип һоранылар, ти, бынан батырҙар.

— Бынауында ағастар ҡуйырып киткән, шуларҙы икенсе ергә күсереп ултыртып йөрөйөм, — тип яуап ҡайтарҙы ла үҙе, батырҙарға яҡыныраҡ килеп: — Мин Урман батыр булам. Һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ? — тип һораны, ти, теге кеше.

— Мин Аҡъял батыр булам. Ил күрергә тип сыҡҡайным, бына Тау батырҙы осраттым. Берәүҙән икәү яҡшы, тип йөрөп ятабыҙ, — тип яуапланы, ти, Аҡъял батыр.

— Улай булғас, мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ, — тигән Урман батыр.

Берәүҙән икәү яҡшы, икәүҙән өсәү яҡшы, тип киттеләр, ти, былар өсәүләп. Эй киттеләр, эй киттеләр, әллә күпме ер үттеләр, ти, былар. Аҡъял батыр инде егерме йәшкә етеп, ғәләмәт ҙур кәүҙәле, киң күкрәкле, бер ашағанда бер бейә ашар, бер эскәндә бер биҙрә һыу эсер, бер йоҡлағанда биш көн, биш төн йоҡлар батыр булып етеште, ти. Иптәштәре уға ҡарап-ҡарап торалар ҙа: «Донъяла бынан да ғәйрәтлерәк батыр булмаҫ!» — тип ҡуялар, ти.

Берҙән-бер көндө был өс батыр ауылға оҡшаған бер ергә килеп сығалар. Килһәләр, төрлө яҡҡа таралып йөрөгән хисапһыҙ мал, йылҡы өйөрөнән башҡа бер йән эйәһе лә күрмәйҙәр. Бында кемдәр йәшәй икән, тип өй беренсә йөрөп сыҡтылар — бер генә кешене лә осратманылар, ти. Шунан Аҡъял батыр:

— Ярар, һин, Урман батыр, берәй бейәне һуйып, ашарға бешер, беҙ Тау батыр менән тирә-яҡты тикшереп, ҡарап сығайыҡ, — тине лә, Тау батырҙы алып, ҡоралдарын аҫып, сығып киттеләр, ти.

Урман батыр бер бейәне тотоп һуйҙы ла ҡаҙанға һалып бешерә башланы, ти. Шул ваҡыт бик яман итеп ишек ҡаҡтылар, ти.

— Кем бар унда? — тип һораны, ти, Урман батыр.

— Ас, мин — ҡунаҡ, — тигән тауыш ишетелде, ти, тыштан.

Урман батыр ишекте асып ебәрһә, тышта үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт баҫып тора, ти.

— Мине күтәреп индер! — ти икән ҡарт.

Урман батыр күтәреп индергән тегене. Өйгә ингәс:

— Мине күтәреп ултырт! — ти икән теге.

Урман батыр тағы тыңлай. Түргә менеп ултырғас, үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт:

— Ашарға бир! — тип ҡысҡырған, ти.

Урман батыр был ҡартҡа ҡаҙандан бер ҙур киҫәк ит алып бирә. Ҡарт итте унан-бынан ғына һоғона ла:

— Тағы бир! — ти. Урман батыр:

— Минең иптәштәрем бар. Улар ҡайтҡас, бергәләп ашарбыҙ, — ти.

— Мин һинең иптәштәреңде белмәйем. Әйткәс, һалып бир! — тип ҡысҡыра ҡарт.

Урман батыр ит бирмәй ҡарыша башлағас, ҡарт урынынан ырғып төшә лә, Урман батырҙы күтәреп алып, бармағын өрлөк ярығына ҡыҫтырып ҡуя. Шунан ҡаҙандағы итте ике-өс һоғоноуҙа ашап бөтөрә лә сығып та китә. Урман батыр яралы бармағына кейеҙ көйҙөрөп баҫты ла тағы ла ат һуйырға тип сығып китте, ти. Ул, бер атты тота һалып һуйып, тулы ҡаҙан ит бешерә башлай. Шул ваҡыт Аҡъял батыр менән Тау батыр ҙа ҡайтып төшәләр.

— Аш бештеме? — ти Аҡъял батыр.

— Беште.

Батырҙар ашарға ултыралар. Ашап, тамаҡ туйҙырғас, Урман батырҙан:

— Бармағыңа ни булды? — тип һорайҙар.

— Һуям тигәнсе ат тулап китте лә, аңғармаҫтан бысаҡ ҡулыма килде лә ҡаҙалды, — тип яуап бирә теге. Ә теге иргәйел ҡарт тураһында ләм-мим өндәшмәне, ти.

1. *Ҡалаҡ һөйәге* тип кеше тәненең ҡайһы өлөшөн әйтәләр? Ни өсөн ул ҡалаҡ һөйәге тип атала?
2. Бер батман яҡынса нисә килограмды аңлата?

**3.** Аҡъял батыр юлында кемдәрҙе осрата?
**4.** Тау батыр, Урман батыр нимә менән шөғөлләнәләр?
**5.** Урман батырға ҡарт ниндәй яуызлыҡ эшләй?
**6.** Урман батыр яраһын нисек дауалай?
**7.** Кем ул ҡунаҡ? Уға хас сифаттарҙы әйтегеҙ?
**8.** Ҡунаҡ тураһында ниндәй мәҡәл-әйтемдәр беләһегеҙ?
**9.** Иргәйел ҡарт — ҡунаҡмы?
**10.** Ни өсөн Аҡъял батырҙың иптәштәре көслө һәм ҡыйыу булһалар ҙа, ишек ҡағып килгән иргәйел ҡарттың ҡушҡан эштәрен ихлас башҡаралар?
**11.** Нимә ул кейеҙ? Күргәнегеҙ бармы? Кейеҙ нисек эшләнә?
**12.** Интернет селтәренән кейеҙ эшләү тураһында мәғлүмәттәр табып уҡығыҙ һәм белешмә төҙөгөҙ.

## II

Иртәгәһен Аҡъял батыр Тау батырға:

— Бөгөн һин ашарға әҙерләрһең, беҙ Урман батыр менән йөрөп киләйек, — тип әйтте, ти.

Улар китеү менән, Тау батыр, бер атты тота һалып һуйып, ҡаҙан тултырып ит бешерә башланы, ти. Шул саҡ берәү бик ҡаты итеп ишек дөбөрләтә башлай. Тау батыр:

— Кем бар унда? — тип һорауға, тыштан:

— Мин — ҡунаҡ, ас! — тигән тауыш ишетелде, ти. Тау батыр ишекте асып ебәрһә, ишек төбөндә әлеге үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт баҫып тора, ти. Тау батыр уға:

— Әйҙә, бабай, рәхим ит! — тиһә, теге:

— Һин мине күтәреп индер! — ти икән.

Тау батыр ҡартты, күтәреп индереп, түргә ултыртып ҡуя. Теге ҡарт:

— Миңә ашарға бир! — тип бойорҙо, ти.

Тау батыр, уға ҙур бер киҫәк ит алып биргәйне, иргәйел уны бер генә һоғондо ла тағы һорай башланы, ти. Тау батыр:

— Иптәштәрем өсөн бешергән итте һиңә генә ашатып бөтөр хәлем юҡ, — тигән икән, ҡарт ырғып төштө лә, Тау батырҙы өрлөктәге сөйгә ҡолағынан аҫып ҡуйып, ҡаҙандағы итте һоғона-һоғона ашап бөтөп, сығып та китте, ти.

Тау батыр, ҡолағын ысҡындырып, ҡаҙанды килеп ҡараһа, унда бер генә киҫәк тә ит ҡалмаған, ти. Тиҙ генә сығып, тағы бер атты һуйып, ҡаҙан тултырып яңынан ит бешерә башлауға, Аҡъял батыр менән Урман батыр ҙа ҡайтып инәләр. Өсәүләп ашарға ултыралар. Аҡъял батыр Тау батырҙан:

— Ҡолағың нишләне? — тип һораны, ти. Тау батыр:

— Ат тотоп йөрөгәндә, бер уҫалы тибеп ебәрҙе, шуның тояғы ҡолағыма эләгеп китте, — тип яуапланы, ти.

Иртәгәһен Аҡъял батыр иптәштәренә:

— Егеттәр, бөгөн һеҙ йөрөп ҡайтығыҙ, юҡһа бында йә бармағығыҙ ҡырҡыла, йә ҡолағығыҙ өҙөлә. Өйҙә мин ҡалайым, миңә ни булыр икән? — ти.

Тау батыр менән Урман батыр киткәс, Аҡъял батыр, бер һимеҙ бейәне һуйып, ҡаҙан тултырып ит бешерә башланы, ти. Шул ваҡыт ишек дөбөрләтә башлайҙар.

— Кем бар унда? — тип һорай Аҡъял батыр. Тыштан кемдер:

— Мин — ҡунаҡ! — тип ҡысҡыра.

Аҡъял батыр ишекте асып ҡараһа, әлеге үҙе бер ҡарыш, һаҡалы меҙ ҡарыш ҡарт баҫып тора, ти. Теге ҡарт:

— Мине күтәреп индер! — ти. Аҡъял батыр:

— Бында тиклем атлап килгәнһең бит, инерһең дә ултырырһың! — тип өйгә ингән дә киткән.

Иргәйел ҡарт үҙе өйгә инеп, үҙе түргә менеп ултырҙы ла:

— Ашарға килтер! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти. Аҡъял батыр:

— Беҙҙә ҡунаҡтар һорап ашамайҙар, һалып биргәнде көтәләр, — тигән икән, ҡарт:

— Әле һин минең менән әрепләшергә уйлайһыңмы ни? — тип, ырғып төшөп, Аҡъял батырҙы тотайым тиһә, Аҡъял батыр иргәйелдең һаҡалынан тотоп, өрлөктәге сөйгә аҫты ла ҡуйҙы, ти. Шунда бик яман тулай торғас, һаҡалы өҙөлөп, артына ла ҡарамай сығып ҡаса ҡартың. Күп тә үтмәй, Тау батыр менән Урман батыр ҡайтып инәләр. Аҡъял батыр уларға:

— Әйҙәгеҙ, тиҙ-тиҙ генә ашағыҙ ҙа, бер эш бар. Һеҙҙең бармағығыҙҙы ҡырҡҡан да, ҡолағығыҙҙы өҙгән дә ана теге һаҡалдың эйәһе булһа кәрәк, — тигән, ти.

— Дөрөҫ, батыр, шулай булды шул, — тип ауыр көрһөндөләр, ти, иптәштәре. Аҡъял батыр:

— Беҙгә ул ҡартты эҙләп табып, үсебеҙҙе алырға кәрәк, — тине, ти.

Өс батыр, ҡоралдарын алып, шунда уҡ юлға сыҡтылар, ти. Бик күп тауҙарҙы, урмандарҙы, яландарҙы үтеп, бер бик бейек тауҙың башына менеп етһәләр, берәүҙең саң туҙҙырып йүгереп китеп барғанын күреп ҡалалар. Аҡъял батыр:

— Егеттәр, ана, теге ҡарт беҙҙән ҡасып китеп бара, — ти.

Батырҙар йүгерә башлай. Эй ҡыуалар, эй ҡыуалар, ти, былар ҡартты. Бара торғас, был ҡарт юҡ булды ла ҡуйҙы, ти. Шул ергә барып ҡараһалар, ерҙе туп-тура өңөп төшкән төпһөҙ бер соҡорҙо күрә былар. Теге ҡарт шунда төшөп ҡасҡан инде. Аҡъял батыр иптәштәренә:

— Бында бер хикмәт булырға тейеш. Төшөп, ундағы хәлдәрҙе белергә кәрәк. Йә, батырҙар, ҡайһығыҙ төшә? — тине, ти.

— Мин төшөп ҡарайым, — ти Тау батыр.

Теге ҡарттың һаҡалынан оҙон арҡан ишәләр ҙә, Тау батырҙы шуның менән бәйләп, соҡорға төшөрә башлайҙар. Аҙ ғына төшкәс тә, Тау батыр ҡысҡырып ебәрә:

— Ай, төшә алмайым, зинһар, сығарығыҙ!

Быны кире тартып сығаралар. Аҡъял батыр:

— Тау батыр, һин батырлығыңды юғалттың. Батырҙар соҡор-саҡырҙан ғына түгел, үлемдән дә ҡурҡмайҙар! — тине, ти. Быны ишеткәс, Урман батыр:

— Ҡана, бәйләгеҙ, үҙем төшөп сығам! — ти.

Ләкин аҙ ғына төшә биргәс тә, ул да:

— Батырҙар! Мин төшә алмайым, зинһар, тартып сығарығыҙ! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти.

— Һинән дә эш сыҡманы, Урман батыр. Батыр һүҙе бер була. Үҙемә төшөргә тура килер, — тине лә, арҡанға тотоноп, соҡорға төшә башланы, ти. Үҙе Тау батыр менән Урман батырҙы:

— Һеҙ, егеттәр, мин әйләнеп сыҡҡансы, ошо ерҙән китмәгеҙ, көлдә күмәс бешереп, мине көтөп тороғоҙ, — тип иҫкәртте, ти.

Аҡъял батыр соҡор төбөнә төшөп етеп, тирә-яғына ҡарап тора ла төрлө яҡтарға таралып киткән юлдарҙың береһенән сығып китә. Бик оҙаҡ барғандан һуң, бер бик матур ҡаланың ситенә килеп сыға был. Ҡала ситендәге бер бәләкәй генә өйгә барып инһә, унда алама ғына кейенгән бер ҡарт менән әбей ултыра, ти. Аҡъял батыр уларҙан бындағы хәлдәрҙе һораша башлай. Шунан үҙе менән таныштыра.

Әбей менән бабай Аҡъял батырға инәлә башланы, ти:

— Балам, һин тиҙ генә һыуға барып кил инде. Беҙҙең һиңә сәй ҡайнатып эсерерлек тә һыуыбыҙ юҡ, — тинеләр, ти.

— Ниңә, әллә һеҙҙә һыу бик алыҫмы? — тип һораны, ти, Аҡъял батыр, аптырап.

— Беҙҙә һыуҙы үлсәп кенә бирәләр шул. Ә һиңә, ҡунаҡ кешегә, бер күнәк һыуҙы бер һүҙһеҙ бирерҙәр, — тинеләр, ти, ҡарттар.

Аҡъял батыр күп уйлап тормай, күнәк күтәреп, һыуға китә. Ҡаланың икенсе осондағы шаулап ағып ятҡан һалҡын һыулы йылғанан һыу алырға ғына торғанда:

— Һин ни эшләп һыуға килдең? Һин кем? — тигән ҡалын тауыш ишетелгән, ти. Аҡъял батыр:

— Мин — ҡунаҡ, — тигәс:

— Ярар, ҡунаҡ булһаң, бер күнәк һыу ал инде, — тигән теге тауыш. Аҡъял батыр һыуҙы өйгә алып ҡайтып ултыртыр-ултыртмаҫтан, әбей менән бабай уны ҡабаланып-ҡабаланып эстеләр ҙә бөттөләр, ти.

— Балаҡай, һин беҙгә көймә инде. Беҙҙең өс көн буйына һыу эскәнебеҙ юҡ ине, шуға бик һыуһағайныҡ, — тинеләр, ти, Аҡъял батырға, оялып.

Хәл юҡ. Был хәлгә бик аптыраһа ла, Аҡъял батыр, күнәген күтәреп, тағы киткән һыуға. Уның икенсе тапҡыр күнәк күтәреп китеп барғанын күреп торған ҡала халҡы бик аптыраған, ти.

Аҡъял батыр һыуға барып етә лә, өндәшмәй-нитмәй, күнәген тултырып һыу ала. Шул саҡ ҡайҙандыр теге

иргәйел ҡарт килеп сыға ла батырға ташлана. Аҡъял батыр йәһәт кенә ҡылысын һурып ала ла:

— Әһә, был һин икәнһең. Мин һине эҙләп бында килеп сыҡтым да инде. Минең иптәштәремде рәнйетеү генә етмәгән, һин бында бөтә ил халҡын һыуһыҙ интектереп ятаһың икән әле. Теге ваҡыт һаҡалыңды ғына өҙгәйнем, инде башыңды ла өҙмәй булмаҫ, — тип, иргәйелдең башын ҡыйып та төшөрә.

Урам буйлап ҡайтышлай Аҡъял батыр осраған бер кешегә:

— Һыу алырға барығыҙ. Мин һеҙгә һыу бирмәй ятҡан яуызды үлтерҙем, хәҙер һыуҙы теләгәнсә алығыҙ! — тип һөрән һалып уҙҙы, ти.

Аҡъял батыр тағы бер күнәк һыу күтәреп килеп ингәс, әбей менән бабай бик аптыраны, ти.

— Мин һеҙгә һыу бирмәй ятҡан иргәйелде үлтерҙем. Хәҙер һыуға аптырамаҫһығыҙ инде. Ана, бөтөн халыҡ шатлана-шатлана һыу ташый, — тине, ти, Аҡъял батыр. Быны ишетеп, әбей менән бабай, күнәк күтәреп, һыуға йүгерҙеләр, ти.

Иртәгәһен иртүк тороп тышҡа сыҡһа, Аҡъял батыр ҡаланың бер яҡ ситендә бик яман шаулашҡан тауыш ишетә. Өйгә кире инеп, ҡарттарҙан:

— Анау яҡта бик яман геүләшәләр, нимә булды икән? — тип һорай.

— Унда бөгөн беҙҙең батшабыҙ ярыш үткәрә. Уның бер бик һылыу ҡыҙы бар. Сәстәренең яртыһы алтын, яртыһы көмөш. Бына шул ҡыҙ: «Кем дә кем уҡ менән атып, балдаҡтан үтә сығара, шуға кейәүгә сығам», — тип әйтә, ти. Ә атаһы: «Ә мин шул кейәүемә бөтә малымды бирәм», — тип әйтә, ти, — тип аңлаттылар, ти, быны ҡарттар.

Быны ишеткәс, болан тунын кейеп, бер батман уғын, йәйәһен аҫып, ҡылысын тағып китте, ти, Аҡъял батыр тауыш килгән яҡҡа ҡарап. Килһә, майҙанға батшаның вәзирҙәре, бик күп халыҡ йыйылған, ти. Бөтәһе лә кейенеп-яһанып килгән, ти.

## III

Бына бер ваҡыт ярыш башланған. Аталар, ти, батырҙар, аталар, ти, бер-бер артлы, тик береһе лә балдаҡтың уртаһына атып тейҙерә алмай, ти. Шуның өсөн быларҙың һәр береһен таяҡ менән туҡмайҙар, ти. Байтаҡ кеше, шулай туҡмалып, майҙандан сығып киткәс, Аҡъял батырҙың сираты еткән. Аҡъял батыр, ҡабаланмай ғына төҙәп, атып ебәргәйне, уғы, балдаҡты эләктереп, батшаның һарайына барып ҡаҙалды, ти. Шунда бөтә майҙан гөж килеп ҡалды, ти. Батша:

— Минең кейәүем дә, тәхетемдең хужаһы ла ошо булыр, — тип, Аҡъял батырҙы һарайына алып инеп китте, ти.

Шулай итеп, Аҡъял батыр ярты сәсе алтын, ярты сәсе көмөш батша ҡыҙының кейәүе булып, үҙе тәхеткә менеп ултырҙы, ти.

Аҙмы-күпме ваҡыт үткәс, икенсе бер батшалыҡтан: «Батша ярыш ойоштора. Кем дә кем энә күҙәүенә уҡ атып тейҙерә ала, батша шуға ҡыҙын, батшалығын бирә», — тигән хәбәр килеп төшә. Үҙенең болан тунын кейеп, ҡоралдарын аҫып, Аҡъял батыр китте, ти, шул батшалыҡҡа. Килһә, бик күп халыҡ йыйылған. Батырҙар, бер-бер артлы килеп, йәйәнән аталар, тик береһе лә энә күҙәүенә тейҙерә алмай, ти. Уңышһыҙлыҡҡа осраған һәр батырҙың ҡулын ҡырҡтырта бара, ти, батша. Сираты етеп, Аҡъял батыр атып ебәргәйне, уның уғы энә күҙәүенә барып та тейҙе, ти. Аҡъял батыр шулай был батшалыҡтың да кейәүе булып, батша биргән бик күп мөлкәткә хужа булып, донъя көтә башланы, ти.

Ләкин күп тә үтмәне, тағы бер батшалыҡта ярыш үткәрелеүе тураһында хәбәр тарала. Унда үҙе батыр, үҙе һылыу бер ҡыҙ батша булып ултыра, ти. «Мине көрәштә еңгән кешегә кейәүгә сығам, батшалығымды ла уға бирәм», — тип әйтә икән был.

Был хәбәрҙе ишеткәс, үҙенең әлеге болан тунын кейеп, ҡоралдарын аҫып, Аҡъял батыр йәнә юлға сығып киткән, ти. Батыр ҡыҙ батшалығына килһә, ярыш

башланған, бер нисә егеттең башы бағана баштарына элеп тә ҡуйылған, ти. Ҡыҙ батшаның шарты шулай икән: көрәштә еңә алмаған кешенең башын сабып өҙөргә.

Аҡъял батыр бер аҙ ҡарап-ҡарап торған да, тағы бер нисә егеттең башы сабып өҙөлгәнен күргәс:

— Рөхсәт итһәгеҙ, мин дә көрәшеп ҡарайым әле, — тип, ҡыҙ батшанан рөхсәт һораған, ти. Аҡъял батыр килеп сыҡҡайны, ҡыҙ батша:

— Йә һуң, егет, бик теләгәс, көрәшеп ҡарайыҡ, — тип, таҫтамалын етеҙ генә егеттең биленә һалды, ти. Ул Аҡъял батырҙы ла баяғы егеттәрҙе ырғытҡан һымаҡ ҡына алып ырғытырға ынтылғайны ла, булдыра алманы, ти. Аҡъял батыр, ҡыҙ батшаны биленән ҡаты итеп ҡыҫып алып, һауаға сөйөп ебәрҙе лә, төшөп килгәнендә ҡабат тотоп алып, майҙан ситендәге затлы ултырғысына ипләп кенә алып барып ултыртты, ти. Шунан ҡыҙ батыр:

— Батырҙың батырлығы кейемендә түгел — көсөндә. Мин бөгөндән ғәйрәтле лә, әҙәпле лә ошо егеттең ҡатынымын, — тип, уға алтын балдағын бирҙе, ти. Ә Аҡъял батыр уға үҙ балдағын бирҙе, ти.

Ана шулай, Аҡъял батыр баһадир ҡыҙ батшаны ла үҙенә алып, ер аҫтындағы өс батшалыҡтың һис ниндәй дошман еңә алмаҫлыҡ хакимы булды, ти.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Аҡъял батыр ер өҫтөндә ҡалған иптәштәрен иҫенә төшөрҙө, ти. Шунан ул көрәшеп алған өс бисәһен дә эйәртеп, бик күп мал әйҙәп, башҡа төрлө байлыҡтар тейәп, ҡайтырға сыҡты, ти. Үҙе төшкән тау тишегенә килеп еткәс, ул Тау батыр менән Урман батыр әҙерләп ҡуйған арҡанға малдарын, байлыҡтарын бәйләп, берәм-берәм мендерә башлай. Шунан өс бисәһен мендереп ебәрә. Иң аҙаҡтан үҙе менә башлай. Аҡъял батырҙың менеп килгәнен күреп ҡалып, Тау батыр менән Урман батыр: «Әгәр беҙ уны сығарһаҡ, ул беҙгә бер нәмә лә бирмәҫ, әйҙә, кире төшөрөп ебәрәйек», — тип шыбырлашалар ҙа арҡанды ҡырҡалар ҙа ҡуялар. Китте, ти, Аҡъял батыр дөбөр-шатыр ер аҫтына төшөп. Ә хыянатсылар өс бисәне, бөтә байлыҡты алып, илдәренә ҡайтты ла киттеләр, ти.

Аҡъял батыр, соҡор төбөндә бер аҙ уйланып ултырҙы ла: «Әгәр мин батыр икәнмен, был хәлдән сығыу әмәлен табырға тейешмен», — тип, кире теге ҡалаға китте, ти. Ҡалаға килеп, баяғы әбей менән бабайҙың өйөнә килеп ингәйне, улар аптырап китте, ти. Аҡъял батыр уларға барыһын да һөйләп бирҙе, ти.

— Былай булғас, улым, һиңә ниндәй генә аҡыл бирәйек икән? Ер өҫтөнә сығырға бынан алыҫ түгел урманда йәшәгән сәмреғош ҡына ярҙам итһә итә алыр. Уның балаларын йыл һайын бер аждаһа ашап бөтөрөп тора. Әгәр шул аждаһаны үлтереп, сәмреғоштоң балаларын ҡотҡара алһаң, бәлки, ул һине яҡты донъяға алып сығыр, — тинеләр, ти, ҡарттар.

Ҡоралдарын аҫып, китте, ти, Аҡъял батыр теге урманға. Урмандың уртаһына килеп етә лә бер йыуан ағастың башында бик ҙур бер оя күреп ҡала. Ояла ҡош балаларының сырылдашҡаны ишетелә, ти. Ныҡлабыраҡ ҡараһа, урманды ярып, дауыл ҡуптарып, ағасҡа бер аждаһа-йылан яҡынлашып килә, ти. Аҡъял батыр, күп уйлап тормай, аждаһаның башын сабып өҙгән дә, кәүҙәһен турап, әрҙәнә итеп өйөп ҡуйған, ти. Аждаһанан ҡоттары осоп ултырған ҡош балалары, быны күреп, бик шатланғандар, ти. Шул ваҡыт, ҡанаттарын елпеүҙән ел-дауыл сығарып, сәмреғош ҡайтып төшкән. Аҡъял батыр уға үҙенең үтенесен белдерҙе, ти.

— Ярар, егет, һин минең балаларымды ҡотҡарҙың, мин дә һиңә ярҙам итермен. Тик һин миңә юлда ашарға бер тоҡ сыйырсыҡ, бер тоҡ сәпсек әҙерлә, — тине, ти, сәмреғош.

Аҡъял батыр тиҙ генә бер тоҡ сыйырсыҡ, бер тоҡ сәпсек әҙерләп алып килде, ти. Сәмреғош:

— Минең арҡама менеп ултыр. Юлда миңә, уңға ҡараһам — сыйырсыҡ, һулға ҡараһам, сәпсек һоғондороп барырһың, — тине, ти.

Осоп киттеләр, ти, былар. Бына теге тау тишегенән дә мендә башланылар. Менгән һайын, тау тишеге тарая бара, ти. Аҡъял батыр сәмреғошҡа, үҙе әйткәнсә,

сыйырсыҡтарҙы, сәпсектәрҙе берәм-берәм ҡаптыра бара, ти. Инде менеп еттек тигәндә генә, сыйырсыҡ та, сәпсек тә бөттө лә ҡуйҙы, ти. Инде ни эшләргә? Күп уйлап тормай, Аҡъял батыр сәмреғошҡа үҙенең балтыр итен ҡырҡып һоғондора башлағайны, ер өҫтөнә менеп тә еттеләр, ти. Менгәс, сәмреғош:

— Йә, егет, төш инде, — ти.

Аҡъял батыр ергә төшкәйне, аяғында баҫып тора алмай, йығылды ла китте, ти.

— Ни булды, егет? — тип аптыраны, ти, сәмреғош.

— Бүтән нәмә ҡалмағас, һиңә балтырымды ҡырҡып алып һоғондорғайным.

— Әйтәм, һуңғы ике йотомом бик тәмле булды. Ҡана, күрһәт әле.

Аҡъял батыр, балағын күтәреп, аяғын күрһәткән икән, сәмреғош балтыр итен кире ҡоҫто ла батырҙың аяғына төкөрөклəп йәбештереп тә ҡуйҙы, ти. Шунан Аҡъял батыр һин дә мин аяғына баҫты, ти. Ҡошҡа бик ҙур рәхмәттәр әйтеп, Аҡъял батыр иргәйел ҡарт артынан килгән юлы буйлап ҡайтырға сыҡты, ти.

Китеп бара, ти, был, китеп бара, ти. Китеп бара торғас, бер көтөү мал ҡыуып китеп барған иптәштәрен ҡыуып та етте, ти. Тау батыр менән Урман батыр, быны күреп, Аҡъял батырҙың аяғына йығылдылар, ти. Эшләгән яуызлыҡтарына бик үкенгәндәрен күреп, Аҡъял батыр уларҙы ғәфү итте, ти.

— Бынан һуң үҙегеҙ менән йөрөгән иптәштәрегеҙгә бер ваҡытта ла яуызлыҡ күрһәтмәгеҙ, — тине, ти, уларға. — Ҡарттар: «Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын», — тигәндәр. Мин һеҙҙең ташлап китеүегеҙгә үпкәләмәйем. Һеҙҙең бүтән бер ваҡытта ла улай итмәҫегеҙгә ышанам.

Аҡъял батыр ҡыҙ батырҙы үҙенә алды, ҡалған бисәләрен иптәштәренә бирҙе, ти. Малдарын, байлыҡтарын да тигеҙ итеп бүлде, ти. Шунан былар, һәр береһе үҙ иленә ҡайтып, малдарын ишәйтеп, үҙҙәре кеүек батыр малайҙар, матур ҡыҙҙар үҫтереп, донъя көтөп алып киттеләр, ти.

1. Нимә ул *тур башы?* Һеҙҙең өйҙә *тур башы* бармы, ҡайһы ерендә урынлашҡан? *Тур* һүҙенән тағы ниндәй яңы һүҙҙәр яһап була? Уларҙы теҙеп яҙығыҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ, һөйләмдәр төҙөгөҙ.
2. Текстан әкиәттәргә хас деталдәрҙе табығыҙ, уларҙы ысынбарлыҡ үҙенсәлектәре менән сағыштырығыҙ. Айырма нимәлә?
3. Һеҙгә өс батырҙың ҡайһыһы нығыраҡ оҡшаны? Ни өсөн? Һеҙ был батырҙарҙың ниндәй сифаттарына эйә булырға теләр инегеҙ?
4. Аҡъял батыр урынында булһағыҙ, Тау батыр менән Урман батырҙы ҡыуып еткәс, ни эшләр инегеҙ? Аҡъял батыр, уларҙы ғәфү итеп, дөрөҫ эшләгәнме?
5. Аҡъял батырҙы нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Уның һүрәтен төшөрөгөҙ.
6. Әкиәт батырҙарының иң йәше һәм олоһо кем? Нисек белдек?
7. Ер аҫты батшалығындағы өс һылыу ҡыҙға ниндәй исемдәр бирер инегеҙ?
8. Аҡъял батырҙың «Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын» тигән һүҙҙәрен аңлатып үтегеҙ. Дуҫлыҡ тураһында тағы ниндәй мәҡәлдәр һәм әйтемдәр беләһегеҙ?

**11-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙә нисә тартынҡы һәм нисә һуҙынҡы өн бар?

Ауыуы, ыуалау, яуыуы, әүрәү, юяйым.

## Башҡорт телендә [ўы] өнө

Башҡорт телендә [ўы] тартынҡы өнө һүҙ уртаһында һәм аҙағында ҡалын һүҙҙәрҙә **у**, нәҙек һүҙҙәрҙә **ү** хәрефе менән белдерелә. Шулай итеп, **у** һәм **ү** хәрефтәре башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башында һәм тартынҡыларҙан һуң һүҙ уртаһында һәр ваҡыт һуҙынҡы өндө, ә һуҙынҡынан һуң тартынҡы [ўы] өнө өсөн ҡуйыла: **у**рман, мат**у**р, к**ү**пер; а**у**ыр, ке**ү**ек, һы**у**.

## ӘКИӘТ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Әкиәт — ауыҙ-тел ижадының иң боронғо һәм иң киң таралған жанрҙарының береһе. Әкиәттәрҙә халыҡтың бәхет, ғәҙеллек, етеш тормош тураһындағы уй-хыялдары сағылған. Шуға ла уларҙа тылсым көсөнә ышаныу, һәр төрлө уйҙырма, ысынбарлыҡта булмаҫтай хәл-ваҡиғаларҙы һөйләү ҙур урын ала.

Һеҙҙең бала саҡтан уҡ ҡуян, төлкө, айыу, арыҫлан һәм башҡа йәнлектәр тураһында әкиәт тыңлағанығыҙ бар. Башланғыс кластарҙа ундай әкиәттәрҙе уҡып та белдегеҙ. Бындай әкиәттәрҙе **хайуандар тураһындағы әкиәттәр** тип йөрөтәләр.

«Аҡъял батыр» әкиәтенең геройҙары иҫ киткес ҙур физик көскә эйә. Урман батыр, мәҫәлән, ҙур-ҙур ағастарҙы бер урындан икенсе урынға күсереп ултырта, ә Тау батыр тотош тауҙарҙы шыуҙырып йөрөтә ала. Уғатар, Йүгерек, Күлуртлар, Ҡамыр батырҙар ҙа төрлө көскә эйә. Улар бергәләшеп халыҡты интектереүсе яуыз көстәрҙе еңеп сығалар. Әкиәттәрҙең бындайҙарын **батырҙар тураһындағы әкиәттәргә** индерәләр.

Ҡайһы бер әкиәттәрҙең геройҙары яуыз көстәргә — һәр төрлө аждаһаларға, дейеүҙәргә, мәскәй әбейҙәргә ҡаршы тылсым көсөнә эйә булған нәмәләр (алтын балдаҡ, таяҡ, көҙгө, тараҡ һ. б.) ярҙамында көрәшә. Уларға йыш ҡына эт, бесәй, айыу кеүек йәнлектәр, бер һелтәүҙә мең дошмандың башына етер алмас ҡылыс, уҡ үткәрмәҫ сәкмән, хужаһын кешегә күрһәтмәҫ бүрек кеүек серле әйберҙәр ярҙамға килә. Әкиәттәрҙең был төркөмөн **тылсымлы әкиәттәр** тип йөрөтәләр.

Ә бына әлеге «Әминбәк», «Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәттәрендә ысынбарлыҡта булған йәки булыуы мөмкин булған ғәҙәти ваҡиғалар һүрәтләнә, ғәҙәти кешеләр тураһында һүҙ бара. Бындай әкиәттәрҙә бер ниндәй мөғжизә лә, тылсым көсө лә, ғәжәп ҙур көскә эйә булған батырҙар ҙа, хайуандарҙы кешегә хас сифаттар менән һүрәтләү ҙә юҡ. Бындай әкиәттәрҙе **тормош-көнкүреш әкиәттәре** тип атайҙар.

Әкиәттәрҙең бөтә төрҙәрендә лә ыңғай геройҙар кире геройҙарға ҡаршы көрәшә. Улар, ғәҙәттә, өс төрлө һынау аша үтәләр һәм мотлаҡ рәүештә еңеп сығалар.

1. Ҡайһы берҙә кешегә: «Етер, әкиәт һөйләмә!» — тиҙәр. Бының менән нимә әйтергә теләйҙәр икән? Рустар был осраҡта нимә ти?
2. Йөкмәткеһенә геройҙарының кем булыуына ҡарап, әкиәттәрҙең төркөмләнешенә иғтибар итегеҙ. Һәр төркөмгә миҫал өсөн берәр әкиәт алып, уларға ентекләберәк анализ яһап ҡарағыҙ. Шул нигеҙҙә улар араһындағы (мәҫәлән, хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең тормош-көнкүреш әкиәттәренән, тылсымлы әкиәттәрҙең батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙән) айырмалы һәм оҡшаш яҡтарҙы табырға тырышығыҙ.
3. Әкиәт русса нисек атала? Белгән әкиәттәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, уларҙы башҡортса һөйләгеҙ. Берәй башҡорт әкиәтен русса һөйләп ҡарағыҙ.
4. Бер ниндәй әҙерлекһеҙ телдән әкиәт уйлап сығарып ҡарағыҙ. Кемдеке яҡшыраҡ килеп сығыр?
5. «Аҡъял батыр» әкиәтенең йөкмәткеһен иптәштәрегеҙгә һөйләп ишеттерегеҙ.
6. «Аҡъял батыр» һәм «Әминбәк» әкиәттәренең аҙағы бер-береһенән нимә менән айырыла?

*Нәжиб Иҙелбай*

## ДҮРТ МИҘГЕЛ

Яҙһылыуҙы алмаштырған
Йәмле йәй ҙә үтә икән,
Ерҙең йөҙөн алтынлаған
Аҫыл көҙ ҙә етә икән.

Күктән ҡарап, Ҡояш апай
Һаман алсаҡ көлә икән,
Атланып аҡбуҙ атына,
Ҡыш бабай ҙа килә икән.

Йәшел, һары, ҡара ялан
Таң атҡансы ап-аҡ булған.

Ҡарар күҙҙең яуын алып,
Биҙәкләнеп тәҙрә туңған.

Инде тәү күргәндәй, быға
Иҫ-аҡылың китә икән:
Ер, сумып татлы йоҡоға,
Йәнә яҙҙы көтә икән.

1. Шиғырҙы уҡыу барышында үҙегеҙ аңламаған бөтә һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, һүҙлектән ҡарап, мәғәнәләренә төшөнөгөҙ, улар менән бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
2. *Иҫ-аҡыл* һүҙе ике өлөштән тора, уларҙың һәр өлөшө нимә аңлатҡанын, был осраҡта ни өсөн бергә ҡулланылғанын асыҡлап ҡарағыҙ. Ошондай юл менән яһалған тағы ниндәй һүҙҙәр беләһегеҙ?
3. *Күҙҙең яуын алып тора* тигәндә нисек аңлайһығыҙ? Уны икенсе һүҙҙәр менән әйтеп ҡарағыҙ.
4. Шиғырҙа дүрт миҙгелдең бер-береһен алмаштырып килеүе нисек тасуирлана? Һеҙҙең был үҙгәрештә күҙәткәнегеҙ бармы? Тәьҫораттарығыҙ менән уртаҡлашығыҙ.
5. Һеҙҙең иң яратҡан миҙгелегеҙ ниндәй? Уның һүрәтен төшөрөгөҙ.

**12-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтегеҙ, әйтелештәрен аңлатығыҙ. Шул һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Ҡауын, быуын, ыуыҙ, ҡыуаҡ, сеүәтә, ҡеүәт.

*Рәми Ғарипов*

## ТОРНАЛАР

Йәй ҙә үтеп китте, ахыры,
Һауалай бит торналар.
Болоттарҙы аша сығып
Торройҡлай был торналар.

Йомарт ерҙең емен тибеп
Тояҡланғас торналар,
Алыҫ юлға сығыр өсөн,
Күктә кәңәш ҡоралар.

Ер үлсәгән таяҡ булып
Теҙелешкән торналар,
Бригадирҙың шул таяғын
Алып китмәк булалар...

Лапаҫ-келәт баштарына
Менде салғы-тырмалар.
Торройҡ-торройҡ, тиһәләр ҙә,
Тормаҫ инде торналар.

Алып китһә, килтерерҙәр
Тағы таяҡ-тырмалар.
Афәт кенә килтермәгеҙ,
Һау булығыҙ, торналар!..

1. Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, һүҙлек ярҙамында мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, уларҙы файҙаланып телдән һөйләмдәр төҙөгөҙ.
2. *Һауалай бит торналар; Торройҡлай был торналар* һөйләмдәрен һеҙ нисек аңлайһығыҙ?
3. *Лапаҫ-келәт баштарына менде салғы-тырмалар* һөйләменең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. Ни өсөн шағир торналарҙы бригадирҙың ер үлсәгән таяғына оҡшата?
5. Икенсе строфаны иғтибар менән өс-дүрт тапҡыр уҡып сығығыҙ, ундағы һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең һәм тотош һөйләмдең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Өҙөктө яттан яҙығыҙ.
6. Торна тураһында тағы ниндәй әҫәр уҡығанығыҙ бар?
7. Шиғырҙа *Афәт кенә килтермәгеҙ* тигән юлдар бар. Шағир ниңә шулай тине икән?

**13-сө күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе һәм һүҙҙәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Гроздья рябины, угол дома, высокое крыльцо, цветы черёмухи, подоконник, блюдце, медвежонок, гусенок.

**14-се күнегеү.** Шиғырҙағы **у** һәм **ү** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе (1-се бағанаға тартынҡы өндәрҙе, 2-се бағанаға һуҙынҡы өндәрҙе белдергән) яҙып алығыҙ.

*Барый Ноғоманов*

## ЙӘЙБИКӘ МЕНӘН КӨҘБИКӘ

*(«Йыл бабайҙың дүрт ҡыҙы» әкиәтенән өҙөк)*

Яҙһылыу ерҙе йәмләгәс,
Хуш еҫ сәскәләр һибеп,
Ҡолас йәйеп, нур бөркөтөп,
Йәйбикә килде көлөп.
Йүгереп йөрөп урман, ҡырҙы
Тағы ла ул биҙәне.
Кешеләрҙе йылға, күлгә
Көн һайын ул әйҙәне,
Рәхәтләнеп һыу ҡойондо
Балалар, сыр-сыу килеп.
Лагерҙа борғо уйнаны,
Күңелдәргә дәрт биреп.
Игенсе сыҡты баҫыуға,
Мул уңыш алыр өсөн,
Тәжрибә баҡсаларында
Тир түкте, бирҙе көсөн.
Тир түгелде, көс бирелде,
Ҡояш та гел балҡыны.
Баҫыу, баҡса емештәре
Ҡыуандырып ҡалҡынды.
Йәйбикәнең ҡөҙрәтелер —
Ялтланы йәшен уйнап.
Ямғыр ҡоя —
Был бик кәрәк,
Ер сарсамаһын һыуһап.
Емеш-еләк быйыл уңған:
Ҡайынлыҡта — бөрлөгән;
Әйтерһең дә, сөм ҡара күҙ —
Ҡарағат та өлгөргән.
Ә еләге ниндәй татлы,
Ауыҙҙа иреп тора!
Күрсе терпене!

Һыртына
Бәшмәктәр йөрөй ҡаҙап.
Сейәлетау итәктәре
Тағы ҡып-ҡыҙыл төҫтә,
Муйыл сөм ҡара суҡтарын
Күтәреп тора көскә.
Помидорҙар һабағында
Һутланып бешкән тоташ.
Алмалар нәҡ Йәйбикәнең
Бит алмаһына оҡшаш.
Түтәлдәргә килеп ҡара,
Тупырлап ята ҡыяр.
Йәйбикәнең табынында
Йәнең теләгән һый бар.
Йәйбикәнең эше ҡыҙыу,
Көн артынан көн уҙа.
Ҡайҙандыр сығып, шаярып,
Һалҡын ел иҫеп ҡуя.
Ниңә әле болот аҡһыл?
Ниңә ялтламай йәшен?
Төндә ысыҡ төшһә, иртән
Йәйбикә һөртә йәшен.
Белә ул: тиҙҙән алмашҡа
Көҙбикә килә ергә.
Тыуған ерҙән Йәйбикәнең
Киткеһе килмәй бер ҙә.
Бына бер мәл мәктәптәрҙә
Шаулатып еҙ ҡыңғырау,
Көҙбикә лә килеп етте,
Булды, ти, юлым урау.
Һүҙ ҡуша:
— Һуңланыммы,
Апаҡайым Йәйбикә?
Хеҙмәттәреңде күрәмен,
Уңғанһың икән бик тә.
Баҫыуҙарҙа иген үҫкән,
Уңыштары мул булыр.

Алтын бөртөк — ашлыҡ менән
Килəттəр быйыл тулыр.
Йыл бабай йыйған табында
Осрашырбыҙ тағы ла…
Көҙбикə шулай, ашҡынып,
Баҫты хеҙмəт һағына.
Ул ашыҡтырҙы:
— Игенсе,
Йый ашлыҡты тиҙерəк.
Килəһе йыл өсөн тағы
Ергə лə бит ял кəрəк.
Кешелəр алсаҡ йылмая,
Муллыҡтан бик ҡыуанып.
Игене лə уңған икəн —
Үтəлгəн ил планы.
Бары етерлек. Ҡəҙерлəп
Тултырылған бураға…
Көҙбикə йөрөй малдарҙы
Ҡыуып йылы ҡураға.
Көш-көш, ҡошҡайҙар, осоғоҙ,
Йылы яҡ һеҙҙе көтə.
Йəйбикə лə шул ҡоштарҙың
Ҡанаттарында китə.
Көҙбикəбеҙ, ел уйнатып,
Япраҡтар өҙөп йөрөй.
Урын бирегеҙ, ҡалҡыр, ти,
Яҙ еткəс, яңы бөрө…

Йыл бабай килеп, дүрт ҡыҙын
Оло табынға йыйҙы.
Емеш, йəшелсə, сəскəлəр
Тулып тора табында.

Бөтə байлыҡ — ер бүлəге,
Хеҙмəт емеше бында.
Ҡуйған ҙур карауай икмəк
Уртаһына табындың.

Ул икмәктә Ҡарһылыуҙың
Аҡ сафлығы сағылды.
Яҙһылыу һипкән хуш еҫтәр
Таралды тирә-яҡҡа.

Йәйбикә уға йәй буйы
Алтын төҫтәрен яҡҡан.
Бар унда илгә көс биргән
Көҙбикәнең ҡөҙрәте.

Шул икмәктә Йыл бабайҙың
Дүрт ҡыҙының хеҙмәте.

1. Тексты уҡыу барышында үҙегеҙ аңламаған бөтә һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, күмәкләп уларҙың мәғәнәләренә төшөнөгөҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.
2. *Сыр-сыу килеү* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһен аңлатығыҙ. *Шар-шор, сар-сор, сәр-сөр, шатыр-шотор, дөбөр-шатыр, дөп-дап, таҡ-тоҡ* кеүек һүҙҙәрҙең ниндәй тауышты белдереүен асыҡлағыҙ.
3. Йәйбикә менән Көҙбикә башҡарған эштәрҙе һанап сығығыҙ. Һеҙҙеңсә, уларҙың ҡайһыһы мөһимерәк эш башҡара? Ни өсөн?
4. Һеҙ Йәйбикә менән Көҙбикәне күрҙегеҙме? Уларҙың һүрәттәрен төшөрөгөҙ.

**15-се күнегеү.** Ғәмәлдәрҙе башҡортса әйтегеҙ.

*Өлгө:* Ике икең — дүрт.

| | | |
|---|---|---|
| $2 \times 2 = 4$ | $9 \times 7 = 63$ | $40 - 30 = 10$ |
| $3 + 5 = 8$ | $36 : 6 = 6$ | $3 \times 3 = 9$ |
| $12 - 2 = 10$ | $14 + 13 = 27$ | $72 : 9 = 8$ |
| $40 : 4 = 10$ | $18 - 6 = 12$ | $20 + 13 = 33$ |

**16-сы күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе телдән руссаға тәржемә итегеҙ, уларҙы ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Йый, йәй, ойой, юй, яй, ейән, йүгән.

## Башҡорт телендә [й] өнө менән һуҙынҡылар ҡушылмаһы

Башҡорт һүҙҙәрендә [й] өнөнән һуң һуҙынҡы килә ала. **[Й]** өнө, **[у]** һәм **[а]** һуҙынҡы өндәре менән килгәндә, һәр саҡ **[ю]** һәм **[я]** хәрефтәре менән яҙыла: *юрған, ямғыр, ҡояш, тая, Аҡъял.* **[Э]** өнө менән килгәндә, һүҙ башында **[е]** хәрефе менән, ә һүҙ уртаһында һәм аҙағында **йе** хәреф ҡушылмалары менән бирелә: *еләк, ер, бейек, йәйе.*

**17-се күнегеү.** Еләк, емеш, йәшелсә атамаларын башҡорт һәм татар телдәрендә сағыштырығыҙ.

| *башҡорт телендә* | *татар телендә* |
|---|---|
| бөрлөгән | бөрлегән |
| ҡарағат | карлыган |
| муйыл | шомырт |
| бәшмәк | гөмбә |
| ҡыяр | кыяр |
| сейә | чия |
| еләк | җиләк |
| мышар, миләш | миләш |

*Фәрит Иҫәнғолов*

## ХӘМИТ КҮПЕРЕ

### I

Олатайымдың бер әкиәте иҫемдә ҡалған. Шуны һеҙгә лә һөйләйем әле.

Борон йәшәгән, ти, бер бабай. Уның ике улы булған. Олоһо Вәлит исемле, кесеһе Хәмит исемле булған, ти.

Ҡарт ғүмере буйы бер байҙа батрак булып торған. Ни тиклем тырышып эшләһә лә, үҙенең дә, балаларының да өҫтәре бөтөн, тамаҡтары туҡ булмаған.

Бер мәл бабай бик нығ ҡартайған, эшкә ярамай башлаған, ти. Ғүмеренең ахыры етеүен тойоп, ул улдары Вәлит менән Хәмитте саҡырып алған да былай тигән:

— Уландарым, миңә был донъянан китер ваҡыт етте. Минең һеҙгә мираҫ итеп ҡалдырырға бер генә затлы әйберем дә юҡ. Беренсе васыятым шул: үҙегеҙ үлгәс тә, донъяла исемегеҙ ҡалырлыҡ итеп йәшәгеҙ. Икенсеһе: кеше араһында кәм-хур булмағыҙ.

Балалары аталарының был васыятын ишетеп өлгөргәндәр, ләкин уның һүҙҙәренең асылына йүнләп төшөнә алмай ҡалғандар. Улар, аңлатып биреүҙе һорап, икеһе бер юлы:

— Ә нисек? — тип ауыҙ асҡанда, аталары йән биреп тә өлгөргән.

Аталарын хәл ҡәҙәренсә тәрбиәләп ерләгәс, Вәлит менән Хәмит баш ватырға керешкәндәр. Нисек үҙең үлгәс тә, исемеңде донъяла ҡалдырырлыҡ итеп йәшәргә? Кеше араһында кәм-хур булмаҫҡа?

Олоһо Вәлит электән дә унан-бынан йәһәт кенә уйлап, ашыҡ-бошоҡ ҡына эшләргә яратҡан икән. Был юлы ла ул, уйлап бөтөр-бөтмәҫтән:

— Таптым! — тигән дә, һикереп тороп, эшкә лә тотонған.

Беренсе эш итеп донъяла исемен ҡалдырыуға керешкән ул. Янып торған ҡыҙыл буяу табып, ҙур таҡтаға аршындай хәрефтәр менән: «Бында Вәлит үҙе йәшәй», — тип яҙған. Һәм ул таҡтаны өй ҡыйығына мендереп, урам яҡҡа ҡаратып ҡаҙаҡлап ҡуйған, ти.

Шунан ул һәр бер ергә исемен яҙып йөрөргә ғәҙәтләнеп киткән. Ҡыш көнө боҙ өҫтөнә йәки һырынтыға: «Был урында Вәлит булды», — тип яҙып китә. Берәй ергә ултырып торһа, ул тороп киткәндә инде: «Фәлән йылдың фәлән айының фәлән көнөндә был урында Вәлит ултырҙы», — тигән сатай-ботай яҙыу ҡала икән.

Ә Хәмит һәр ваҡыт эшләп йөрөгән. Йорт-ҡаралты тирәһен нығытҡан, иген игкән, балта эше эшләгән.

Вәлит инде һаман: «Исемде ҡалдырырға тағы ниндәй әмәл бар икән?» — тип, көнө-төнө баш ватыуында булған.

Бер ваҡыт Хәмит Вәлиткә әйтә:

— Ағай, юҡ менән булышҡансы, бушыраҡ арала әйҙә анау Айбатҡан кисеүенә күпер һалайыҡ. Шунда, йылғаны аша сыҡҡанда, халыҡ бик интегә. Исмаһам, бер файҙалы эш эшләйек.

— Харап инде! Ул күперҙең беҙгә ни хәжәте бар? Ә кешеләрҙә минең эшем юҡ. Бушты һөйләп тораһың, — тип ҡустыһына екеренгән, ти, Вәлит.

Хәмит бер ни ҙә өндәшмәгән, балтаһын, бысҡыһын, йышҡыһын алған да Айбатҡан кисеүенә күпер һалырға киткән.

Ул китеп бер аҙ торғас, Вәлиттең башына бер аҡыл килеп төшкән.

— Әһә... Тағы бер әмәл таптым! — тигән дә, ашығыуынан сабатаһының бауын да бәйләп тормаҫтан, Хәмит артынан сапҡан.

Ул килеп еткәндә, Хәмит, урмандан ағас ташып, бүрәнәләр юнырға тотонған булған инде.

Вәлит йән-фарман килеп еткән дә:

— Ҡана, ҡустым, икәүләп йәһәт кенә һалып ташлайыҡ әле шул нәмәне! — тип эшкә тотонған. Иң беренсе эш итеп, тимер сөйҙө ап-аҡ булғансы утта ҡыҙҙырған да Хәмиттең күпер өрлөгөнә тип юнып ҡуйған бүрәнәһенә тәрән итеп көйҙөрөп: «Был күперҙе атаҡлы оҫта Вәлит һалды», — тип яҙып ҡуйған.

Шунан һуң, ялҡау ғына тотоноп, арлы-бирле һуҡҡылаштырған да:

— Ҡустым, юҡты бар итәм, тип ҡыланған һин ҡылан инде! Эш сығарырмын, тиһеңме? Кеше араһында хурлыҡҡа ҡалыр хәлем юҡ. Мин атайымдың васыятынан сыға алмайым! — тигән дә килгәндәге кеүек елдереп ҡайтып та киткән.

Шул көндән ул «Исемем донъяла ҡалырлыҡ булды инде, хәҙер атайым мәрхүмдең икенсе васыятын үтәргә кәрәк» тигән уйға килгән. Һәм, бер-бер хәл булып, кеше араһында кәм-хур булыуҙан ҡурҡып, өйөнән дә сыҡмай башлаған.

Ҙур күперҙе бер үҙе һалыу бик ауыр булырҙай тойолһа ла, Хәмиттең күңеле ҡайтмаған, ул дәртләнеп эшләгән дә эшләгән. Уның эшен ауыл халҡы бик хуп күргән. Шунан уға күмәкләшеп ярҙамға килгәндәр. Эш бик тиҙ бөткән. Бөтә ауыл халҡы эшләһә лә, башлап йөрөүсе Хәмит булғас, күпер төҙөүселәр тураһында һүҙ сыҡҡанда, иң тәүҙә уның исемен әйтә башлағандар. Бара торғас, күпергә «Хәмит күпере» тигән исем бөтөнләйгә тағылған.

Күп йылдар үткән. Вәлит тә, Хәмит тә үлгәндәр. Вәлиттең эскәмйәләргә һыҙып киткән яҙыуҙары инде ағасы-ние менән бергә сереп бөткән. Өйө ҡыйығына ҡаҙаҡланған яҙыуы танымаҫлыҡ булып уңған. Үҙенән ҡалған бурыстары өсөн өйөн ҡутарып һатҡанда, теге таҡта бөтөнләй юғалған. Күрәһең, берәйһе алып, сыраға ярғандыр.

Үҙе үлгәс тә, уның исеме бер аҙ йәшәгән йәшәүен. Тик уны һүҙ араһында: «Йәшәне инде шунда бер ялҡау! Шыр тиле ине, мәрхүмең. Байғош ҡына булһа ла, маҡтаныуҙан башҡаны белмәй торғайны», — тип кенә һөйләштергеләп алғандар. Уны телгә алыу һирәгәйгәндән-һирәгәйә барып, бөтөнләй тынған. Вәлит мәңгегә онотолған.

Ә Хәмитте һәр ваҡыт хөрмәтләп телгә алғандар:

— Ир-егет ине!

— Йорт-ил эше тиһәң, үлеп бара торғайны. Тупрағы еңел булһын!

— Күпере һуң, күпере ниндәй!

«Хәмит күпере» аша үткәндә, ошондай һүҙҙәрҙе гел генә әйтеп үтә торған булғандар. Аталарынан — улдары, улдарынан ейәндәре ишетеп, шулай йылы һүҙ менән телгә алғандар Хәмитте.

1. Текста осраған *унан-бынан, ашыҡ-бошоҡ, сатай-ботай, йән-фарман, кәм-хур, арлы-бирле* кеүек һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Уларҙы икенсе һүҙҙәр менән алмаштырып, тексттың шул өлөшөн яңынан уҡып ҡарағыҙ. Нимә үҙгәрҙе?
2. *Донъя ҡуйыу, йән биреү, баш ватыу, күңел ҡайтыу, ҡырҡ һүҙгә етеү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
3. *Йорт-ил эше тиһәң, үлеп бара торғайны* һөйләменең мәғәнәһен аңлатығыҙ, уны икенсе һүҙҙәр менән әйтеп ҡарағыҙ.

**18-се күнегеү.** Тулы һорау һөйләмдәр төҙөгөҙ һәм уларға яуап бирегеҙ.

1. Әйтегеҙ әле, ... нисек барырға?
2. ... ҡайҙа була?
3. ... ҡасан килде?
4. ... кем килтергән?
5. ... нисек башлана?
6. ... ҡайһы яҡта?

**19-сы күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

5-се класта уҡый, китап уҡый, йомғаҡҡа еп уралыу, аяҡ аҫтында уралыу, тау башына болот уралыу.

## II

Бер көн шулай был әкиәт хәтеремдә ҡайтанан яңырҙы әле.

Машина менән Байгилде ауылына китеп бара инем. Айырмала бер ағайҙан юл һораштыҡ.

— Бер ер буйы барғас, оло юлдан уңға ҡайырылығыҙ. Туп-тура «Хәмит күпере»нә барып сығырһығыҙ. Байгилде шунан бер километр самаһы ғына, һырт артында.

Ысынлап та, беҙ оҙаҡламай бик үк киң булмаған йылға аша һалынған күпергә барып төртөлдөк. «Төртөлдөк», тим. Эйе. Беҙгә унда ярты сәғәт самаһы туҡтап торорға тура килде. Күперҙе ремонтлайҙар ине.

Уңайын тура килтереп, күперҙе эшләүселәр араһындағы бер бабайҙан:

— Ниңә «Хәмит күпере» тип атайһығыҙ быны? — тип һорап ҡуйҙым.

— Әлләсе тағы... — тине бабай, миңә аптырағандай ҡарап. — Беҙ ни әүәл-әүәлдән өйрәнеп бөткәс, ни өсөн аталғанын уйлап та ҡарағаныбыҙ юҡ. Шулай атайбыҙ ҙа йөрөтәбеҙ...

— Хәмит тигән берәй оҫта һалғанмы әллә?

— Әллә тағы. Мин белгәне бирле генә лә был урынға дүрт-биш тапҡыр яңы күпер һалдыҡ, ун-ун биш ҡат төҙәттек. Хәмит тигән оҫта булмағайны беҙҙең арала. Элегерәк кенә булмаһа... Әйткәндәй, ауылдың арғы осондағы анау шишмәне лә «Хәмит шишмәһе» тип йөрөтәбеҙ. Берәй ғилләһе барҙыр уның.

Шунда икенсе бер ағай беҙҙең һүҙгә ҡушылды.

— Ғилләһе бар... Хәмит тигән оҫта булған. Һөйләй башлаһаң, бик оҙон һүҙ инде. Ҡыҙыҡһынһағыҙ, шәмгә ут алғас, миңә кереп ултырығыҙ. Уның хаҡында бик күп нәмә һөйләрмен мин һеҙгә, — тине лә өйөнөң ҡайҙа булыуын әйтте. Шунан ул баяғы бабайға шелтәле ҡараш ташланы: — Уны бит тирә-яҡта олоһонан кесеһенә тиклем beләләр.

Ремонтсыларҙың эше бөттө. Беҙ «Хәмит күпере» аша сығып киттек.

1. Хикәйә ни өсөн «Хәмит күпере» тип аталған? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.
2. Кеше араһында кәм-хур булмайынса, үҙең үлгәс тә, исемең ҡалырлыҡ итеп йәшәүҙе һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Бының өсөн, Вәлит кеүек, осраған бер ерҙә исемеңде соҡоп (мәҫәлән, партаға) йәки буяу менән (таштарға, стеналарға) яҙып йөрөү кәрәкме? Фекер алышығыҙ.
3. Әкиәт нисәнсе зат исеменән һөйләнелә башлай? Уны ҡайһы һүҙҙәр аша билдәләй алабыҙ? Ул һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

**20-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

Ватан, вазифа, Вәхит, ватыу, ваҡ, Вәли, вәғәҙә, валсыҡ, вайымһыҙ.

Башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башындағы **в** хәрефе **-уы/-үе** өндәре булып әйтелә: *ваҡыт — уаҡыт, ваҡиға — уаҡиға, Вәсилә — Үәсилә.*

## САҒЫШТЫРЫУ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Берәй әйберҙе, күренеште, хәл-ваҡиғаны икенсеһенә оҡшатып әйтеү **сағыштырыу** тип атала. Сағыштырыу әйберҙе, күренеште, хәл-ваҡиғаны тулыраҡ, йәнлерәк итеп күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә.

Сағыштырыу күбеһенсә **һымаҡ, кеүек, шикелле, төҫлө** һүҙҙәре ярҙамында башҡарыла.

Миҫалдар:

1. Турыҡай уларҙың яҡын килерҙәрен көтмәне. Баҫып торған ерендә **йәшен тиҙлеге менән** боролдо ла бүреләргә табан **уҡ төҫлө** атылды.

*(С. Агиш. «Турыҡай»)*

2. Улыбыҙға, ысынлап та, шул исемде ҡушайыҡ. **Ҡамыр кеүек** һығылмалы, бөгөлмәле булһын, һуғышҡанда, көрәшкәндә, бер ере лә һынмаһын.

*(«Ҡамыр батыр»)*

3. Йәшәйһе бар, һаҡла үҙеңде, тиһең,
Теләктәрең, эйе, хаҡ һымаҡ.
Ләкин мин бит бөтә ғүмерем буйы
Бәйгеләрҙә сапҡан **ат һымаҡ.**

*(М. Кәрим)*

4. Урмандар, **әкиәт шикелле,**
Гөр килеп, шаулап тора.

*(Р. Нигмәти)*

Сағыштырыу һүҙҙәргә *-дай/-дәй, -тай/-тәй, -лай/-ләй, -ҙай/-ҙәй* ялғауҙары ҡушылып та яһала. Ундай сағыштырыуҙар ҡобайырҙарҙа, йырҙарҙа бигерәк тә йыш осрай. Мәҫәлән:

Ҡайнар-ҡайнар ҡабарып
Ҡалҡып килгән болоттай,

Күҙ күремдән күренеп
Ҙур япраҡлы ағастай
Күгәреп ятҡан Уралтау.
Ботағы алтын алҡалай,
Япрағы көмөш тәңкәләй,
Һыны һылыу егеттәй,
Тамыры ташҡа ереккән
Ҡарағай, имән, ҡайыны —
Бары ла һөйгән Уралтау.

**21-се күнегеү**. Шиғыр юлдарын сәсмә формала яҙығыҙ.

1. Һин әйләнеп ҡара Уралдағы
Артта ҡалған яҙғы көндәргә.

*(М. Кәрим)*

2. Һин етәкләп менден мине
Тауҙарҙың бейегенә.

*(М. Кәрим)*

3. Еҙ ҡыңғырау, еҙ ҡыңғырау,
Дуҫымдай күрәм һине...

*(А. Игебаев)*

*Мостай Кәрим*

## СЫЙЫРСЫҠ БАЛАҺЫ

Беҙҙең өй эргәһендә һырғауыл башында сыйырсыҡ ояһы бар. Шул ояла быйыл да сыйырсыҡ бала сығарҙы. Бишәүҙәр. Инәләре ем алып ҡайтҡанда, һары ситле ауыҙҙарын гел асып торалар. Дүртәүһе тыйнаҡлы: ем алырға үҙ сираттары еткәнен сабыр ғына көтөп торалар. Ә бишенсеһе һәләк сыҙамһыҙ, һармаҡ бер нәмә. Инәһе күренгәс тә, тишектән ярты кәүҙәһен сығарып, сырылдарға тотона.

Нисә ҡарама, сыйырсыҡ ояһына дүрт күҙ төбәлгән була. Күтәрмәлә сәсенә ҡыҙыл таҫма таҡҡан ҡыҙ ултыра, уның исеме — Әлфиә. Ике күҙ — ана шул ҡыҙҙыҡы. Ә теге икеһе — кәртә башында ара-тирә йоҡлағанға һалышып ултырған ала бесәй күҙҙәре. Әлфиә уйлағанын ҡысҡырып әйтә: «Их, анау ҡош ҡолап төшһөн ине! Мин уны өйгә алып инер ҙә ярма сөҡытыр инем...» Ә бесәй өндәшмәй. Шуға күрә уның ни уйлауын белеүе ҡыйын. Бәлки, ул былай ғына, ҡыҙыҡ итеп кенә ҡарай торғандыр.

Әлеге һармаҡ ҡошсоҡ торған һайын ҡомһоҙлана бара. Инәләре оҙағыраҡ ҡайтмай торһа, ауыҙын асып, хәҙер оянан килеп сыға. Муйынын һуҙып-һуҙып, инәһен саҡыра. Ул саҡырыу менән генә ҡайтамы ни инде, эше бөтмәгәс?!

Теге сыҙамһыҙ нәмә бер саҡ оя алдындағы кескәй баҫҡысҡа уҡ килеп сыҡты. Әллә ҡағынырға, әллә талпынырға итте. Әммә ул тигәнсә барып сыҡманы. Аяғы тайып киттеме, яҙа баҫтымы — ҡош балаһы үләнгә йығылып төштө. Шуны ғына аңдып торған бесәй кәртәнән һикерҙе. Ләкин Әлфиә бесәйҙән йылдамыраҡ булып сыҡты. Сыйырсыҡ балаһын ул эләктереп алды. Бесәй бары күҙҙәрен генә йылтыратып ҡалды. Шул арала инә сыйырсыҡ та ҡайтып етте. Сыр-сыр килеп, ул Әлфиәнең баш осонда әйләнергә кереште. Ҡанаттары менән уның иңбашына, сәстәренә ҡағылып үтте. Шуҡ булһа ла, бала бит, сит кешегә биргеһе килмәй, күрәһең. Әй инәлде сыйырсыҡ, әй иланы. Тик Әлфиә уның телен аңламаны. Ҡошсоҡто услап, өйгә йүгерҙе. Ә сыйырсыҡ байтаҡ ваҡыт ишек тирәһендә ары-бире һуғылып осоп йөрөнө лә, өмөтөн өҙөп, яңынан үҙ эшенә тотондо.

— Бына, әсәй, сыйырсыҡ балаһы тоттом, оянан ҡолап төштө, — тине Әлфиә. — Ярма бирсе тиҙерәк.

— Бар, хәҙер үк кәртә башына сығарып ҡуй үҙен, — тине әсәһе, — инәһе табып алыр.

— Кәртә башында бесәй ултыра, — тип ҡарышты Әлфиә.

— Ә һин бесәйҙе ҡыуып ебәр…

Әсәһе күпме әйтмәһен, Әлфиә ҡошсоҡто ҡулдан ысҡындырырға теләмәне.

— Был ҡошсоҡ һәләк кире ул, әсәһен һис тә тыңламай, ҡарыша. Моғайын, әсәһе уны яратмайҙыр әле, — тип ҡараны Әлфиә.

— Һин дә кире лә, үҙеңде яратабыҙ бит…

Муйынын бер яҡҡа ҡыйыш һалған ҡош балаһы ярма ла суҡыманы, һыу ҙа эсмәне. Әллә ауырыймы икән тип, Әлфиә уға дарыу ҙа ҡаптырып ҡараны, ҡошсоҡ уны ла ҡапманы. Бәләкәстәр дарыу эсергә яратмайҙар шул.

— Тиҙ үк сығарып ҡуй! — тине лә әсәһе, күнәктәр алып, шишмәгә һыуға китте.

Әлфиә һаман ашыҡманы. Ул ҡошсоҡто өйҙә генә осорға өйрәтергә булды. Әле ишектән тәҙрә яғына, әле тәҙрәнән ишек яғына сөйөргә тотондо. Ә ҡош балаһы бер-ике ҡабат ҡанат елпене лә лып итеп иҙәнгә ултырҙы. Үҙ эше менән мауыҡҡан Әлфиә, асыҡ тәҙрәнән инеп, мөйөшкә боҫҡан ала бесәйҙе күрмәне лә. Бесәй бөтәһен дә күреп, самалап ултырҙы. Әлфиәнең ҡошсоҡто тәҙрә яғына сөйөүе булды, теге бахырың бесәй ауыҙына килеп тә эләкте. Ала бесәй тәҙрәнән һикереп сығып та ҡасты. Бар, тот һин уны…

Өйҙә ҡошсоҡ күренмәгәс, әсәһе уны-быны һорашып та торманы. «Ҡош балаһы инәһен тапҡандыр», — тип уйланы, күрәһең. Әлфиә лә һис нәмә өндәшмәне. Кискә тиклем күңелһеҙ йөрөнө, сыйырсыҡ ояһына ҡарағанда, ниңәлер күҙҙәренән йәш тәгәрәп төштө…

Төндә кескәй ҡыҙ шундай төш күрҙе. Ҡурҡыныс ҡара урманда ул аҙашып йөрөй, имеш. Тирә-яғында бүреләр олой, айыуҙар үкерә, әллә ниндәй йәмһеҙ ҡоштар ҡысҡыра, быҙау ҙурлығы ала бесәй, күҙҙәрен йылтыратып, уға ташланырға самалай. Әлфиә өшөп-туңып бөткән, өҙлөкһөҙ ҡалтырай. Ни эшләргә белмәй торғанда, ағас ботағына оя ҡорған дәү ҡош ҡыҙҙы үҙ янына саҡырҙы.

— Мин уҫал ҡош түгел, мин — сыйырсыҡ, кил минең ояма, бында тыныс, йылы, — ти.

Әлфиә үрмәләп ҡош янына менә, ә ҡош уға тағы өндәшә:

— Минең биш балам бар ине, бөгөн шуларҙың береһен бер уҫал ҡыҙ урлап китте. Ә һин ҡурҡма. Мин бур түгел. Иртәгә, ҡояш сыҡҡас та, үҙеңде әсәйеңә илтеп бирермен. — Шулай ти ҙә ҡош уны үҙ ҡанаты аҫтына ала. Ҡанат аҫтында, баштарын ҡырын һалып, дүрт ҡошсоҡ йоҡлап ята. Ҡыҙ шунда уҡ йылынып йоҡлап китә.

...Төндә уянған әсәһе был ваҡыт ҡыҙының өҫтөнән төшкән юрғанды һәйбәтләп яңынан япҡайны.

1. *Аяғы тайып киттеме, яҙа баҫтымы — ҡош балаһы үләнгә йығылып төштө; Бесәй бары күҙҙәрен генә йылтыратып ҡалды; Бүреләр олой, айыуҙар үкерә, әллә ниндәй йәмһеҙ ҡоштар ҡысҡыра* һөйләмдәрен руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Әлфиә насар ҡыҙмы? Ул ни өсөн сыйырсыҡ балаһының осоп төшөүен теләй?
3. Һеҙ Әлфиәнең ҡылығын хуплайһығыҙмы? Уның урынында һеҙ ни эшләр инегеҙ?
4. Ала бесәй менән Әлфиәнең ҡылығын сағыштырығыҙ. Айырма бармы?
5. Сыйырсыҡ балаларына характеристика бирегеҙ.
6. Ниндәй ҡош ул сыйырсыҡ? Уға ниндәй оя яһайҙар? Был ҡоштоң һүрәтен төшөрөп, уның тураһында белешмә төҙөп яҙығыҙ.

**22-се күнегеү.** Рус һәм башҡорт телдәрендә **ы** өнөнөң әйтелешен сағыштырығыҙ.

| *башҡорт телендә* | *рус телендә* |
|---|---|
| алтын | алты́н |
| ҡамыш | камы́ш |
| «Тулҡын» магазины | мага́зин «Тулкы́н» |
| батыр | баты́р |
| был | бы́л |

Башҡорт телендә **ы** өнө киң итеп әйтелмәй.

**23-сө күнегеү.** Бирелгән темалар буйынса әңгәмә үткәрегеҙ.

1. Һеҙҙең эш көнөгөҙ нисек башлана?
2. Аэропортҡа (вокзалға, автовокзалға) нисек барырға?

**24-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Ваҡыт күпме?
2. Хәҙер нисәнсе дәрес бара?
3. Бөгөн ниндәй көн?
4. Бөгөн нисәһе?
5. Кино сәғәт нисәлә башлана?
6. Билет күпме тора?
7. Кино нисә сәғәт дауам итә?

**25-се күнегеү.** Рус халыҡ әкиәте «Шалҡан»да нимә тураһында һүҙ барғанын дүрт һөйләм менән генә әйтеп бирегеҙ.

*Айһылыу Йәғәфәрова*

## ЯҠШЫЛЫҠ

*(Әкиәт)*

Фәрит менән Фәһим, кистән һөйләшеп ҡуйғанса, ҡайынлыҡ аръяғындағы тауға еләккә китеп баралар. Улар килеп еткәнсе, ҡояш та юғары күтәрелде, ҡыҙҙыра башланы. Фәриттән ҡалышмаҫҡа тырышып, йүгерә-атлап килгән Фәһим тирләп бөттө һәм ҡояшҡа ҡарап асыуланды.

— Ҡыҙҙырмай тор әле, миңә эҫе булғанды күрмәйһеңме ни?..

Ҡояш үпкәләне.

— Әгәр мин ер йөҙөнә йылы нурҙарымды һипмәһәм, һин йыйырға барған еләк ҡыҙарып бешер инеме ни? — тине.

— Ярай, мин шаярттым ғына бит...

Малайҙар ҡайынлыҡ араһынан аҡҡан шишмә эргәһенә килеп туҡтаны. Шишмә, уларҙы күргәс, инәлеп:

— Малайҙар, тыңлағыҙсы, ҙур үтенесем бар һеҙгә... Бәләнән ҡотҡарығыҙсы мине... — тине.

— Шишмәкәй, ниндәй бәләгә ҡалдың? — тип һораны һәр саҡ ярҙамсыл Фәрит.

— Эй, шуны тыңлап торма инде, тиҙерәк һауыттарҙы тултырырға ла ҡайтырға, — тип ашыҡтырҙы Фәһим, ҡаштарын йыйырып.

— Бәләгә ҡалғандарға ярҙам итергә тейешбеҙ, тип һин һәр ваҡыт ҡысҡыраһың бит. Ниңә шишмә үтенесен тыңларға теләмәйһең?

— Һе, бында һине кем күрә? Барыбер бер кем дә маҡтап һөйләмәйәсәк…

— Их һин…

— Һин теләһәң ни эшлә, мин киттем! Ваҡыт әрәм итеп йөрөргә бында… Еләк йыям.

Фәһим шишмәне һикереп сыҡты ла эре генә атлап китеп барҙы.

— Һин дә китеп барма, ярҙам ит инде, — тип үтенде шишмә. — Ана, тегендә, мин ер аҫтынан сыҡҡан ергә, бер ҙур таш тәгәрәп төштө лә юлымды ҡапланы. Инде нисә көн үтте, шул ташты урынынан ҡуҙғата алмайым. Һыуым да кәмей башланы.

Фәрит шишмә сыҡҡан ергә атланы. Шишмә яңғыҙ үҫкән ялбыр ҡайын эргәһенән сығып ята икән. Яҡын-тирәләге сәскәләр һыуһап баштарын түбән эйгән. Ә таш, шишмә юлын быуып, тып-тыныс ята бирә. Фәрит, еңдәрен төрөп, эшкә тотондо.

— Бер, ике, өс!..

Таш урынынан ҡуҙғалғандай булды, ләкин бирешмәне. Фәрит тә ныҡыш булып сыҡты. Ташты әле бер яҡтан, әле икенсе яҡтан этте, тирләп бөттө.

— Иптәшең менән икәү булһағыҙ, көсөгөҙ етер ине, — тине шишмә, уфтанып.

Фәрит тау итәгенә ҡараны, унда Фәһимдең башы бер күренеп, бер юғалып ҡала.

— Эй, Фәһим, кил әле! — тип ҡысҡырҙы Фәрит. Тик Фәһим әйләнеп тә ҡараманы, яуап та бирмәне.

— Ҡуҙғата алмаһаң, бер аҡыл өйрәтәм, — тине ялбыр ҡайын хәстәрле тауыш менән. — Һин эргәңдә ятҡан йыуан таяҡты ал да таш аҫтына тыҡ. Шунан күтәреп ҡара, бәлки, ҡуҙғата алырһың.

Фәрит ялбыр ҡайын өйрәткәнсә эшләне. Таш ҡуҙғалды, гөрһөлдәп ҡайын эргәһенән түбәнгә төшөп китте, ә шишмә өҫкә урғылды.

— Рәхмәт һиңә, Фәрит, мең рәхмәт, — тип ҡыуанып йырланы шишмә. Фәрит йылмайҙы, күңелләнеп Фәһим эргәһенә атланы.

— Күрәһеңме, мин күпме еләк йыйҙым! Ә һин юҡ-бар менән маташаһың, — тип ҡаршыланы уны иптәше.

Фәрит Фәһимдең һауытына ҡараны.

— Оһо, яртыһы тулып килә. Тик ваҡтарын да йыйғанһың, япраҡтарын да өҙөп һалғанһың.

Фәһим көлдө:

— Ваҡтарын да ҡушһаң, һауыт тиҙ тула ул.

Ысынлап та, шулай икән: Фәрит ҡып-ҡыҙыл, эре еләктәрҙе ашыҡмай ғына, яйлап йыйғансы, Фәһим һауытын тултырҙы ла өйҙән алып килгән икмәген ашарға ултырҙы.

— Фәрит, ҡасан тула шул төбө тишелгән һауытың?..

— Хәҙер, бер-ике ус һалам да...

— Тиҙ бул, мин һыуһай башланым.

Тиҙҙән Фәрит тә һауытын тултырҙы, ҡайтырға сыҡтылар. Шишмә эргәһенә килеп еткәс, Фәһим һыу эсергә эйелде. Был ни хәл: шишмә һыуы әллә ҡайҙа юғалды ла ҡуйҙы. Фәһим ирендәрен турһайтты.

— Мин дә һыуһаным, — тине Фәрит тә һәм аптырап ергә тубыҡланып ултырҙы. Бына ғәжәп: ҡапыл уның ҡулдарына, биттәренә саф һалҡын һыу сәсрәй башланы.

— Эс әйҙә, эс, ҡотҡарыусым. Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирергә кәрәк, — тип сылтыраны шишмә.

Күктәге ҡояш та:

— Бәләгә ҡалғандарға ярҙам итеүҙән баш тартма, — тип өндәште әкрен генә.

Фәрит йылмайҙы. Һыуһаған, тирләп бөткән Фәһим генә ҡыҙарып башын аҫҡа эйҙе.

1. Фәриттең һәйбәт сифаттарын һанап сығығыҙ. Унан ниндәй өлгө алып була?

2. Фәһимдең ҡылығына баһа бирегеҙ. Уның урынында һеҙ ни эшләр инегеҙ?
3. Фәһимдең «Ваҡтарын да ҡушһаң, һауыт тиҙ тула ул» тигән һүҙҙәрендә уның ниндәй сифаты күренә? Әкиәттә Фәһимдең ошо уҡ сифатын күрһәтеүсе тағы ниндәй эпизод бар?
4. Фәһим Фәриткә: «Фәрит, ҡасан тула шул төбө тишелгән һауытың?» — ти. Һауыттың төбө ысынлап та тишек булғанмы? Фәһим ни өсөн шулай тине икән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?
5. Фәриттең шишмә, ҡайын менән һөйләшеүенә иғтибар итегеҙ, әкиәттәге шул урындарҙы ҡабат уҡып сығығыҙ. Йәнһеҙ нәмәләрҙең кешесә һөйләшеүен нисек атайҙар? Был алым ниндәй әҫәрҙәргә хас?
6. Әкиәтте сәхнәләштереп ҡарағыҙ йәки, ролдәргә бүлеп, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
7. Әкиәттең ни өсөн «Яҡшылыҡ» тип аталыуын аңлатып ҡарағыҙ.

**26-сы күнегеү.** Һүҙҙәрҙең башҡорт һәм татар телендәге варианттарын сағыштырығыҙ.

| *башҡорт телендә* | *татар телендә* |
|---|---|
| һыуһаным, сарсаным | кибектем |
| йомортҡа | йомырка |
| ҡарағай | нарат |
| терпе | керпе |
| әлморон, гөлйемеш | гөлҗимеш |

**27-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙе бер һүҙ менән әйтегеҙ.

Шишмәнең ер аҫтынан сыҡҡан урыны, йыуан таяҡ, йылғаның шарлап аҡҡан урыны, йылғаның тәрән урыны.

Яуаптар: шаршы, күҫәк, ятыу, инеш.

**28-се күнегеү.** Түбәндәге өндәрҙең парҙарын табығыҙ.

б — ..., ҡ — ..., а — ..., ҙ — ..., ы — ...

**29-сы күнегеү.** Парлап бирелгән һүҙҙәрҙә бер-береһенән айырған өндәрҙе билдәләгеҙ.

Заман — саман, дары — тары, Әй — ай,
ура — үрә, бата — ята.

**30-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

1. Кеше булған кешенең кеше менән эше бар.
   Кеше булмаған кешенең кешелә ни эше бар?

2. Яҡшы бала яман атаның ишектәге
   башын түргә һалыр,
   Яман бала яҡшы атаның түрҙәге
   башын гүргә һалыр.

## СИНОНИМ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Һөйләшкәндә, яҙғанда кешеләр бер үк төшөнсәне биреү өсөн төрлө һүҙҙәр ҡулланалар. Мәҫәлән, кешенең эшкә һәйбәт мөнәсәбәтен аңлатыр өсөн, **егәрле, уңған, эшсән, эшлекле, булдыҡлы** һ. б. һүҙҙәр ҡулланыла. Бындай һүҙҙәрҙе **синонимдар** тип йөрөтәләр. Синонимдар бигерәк тә әҙәби әҫәрҙәрҙә йыш ҡулланыла — улар телмәрҙе байыта, кешеләрҙең, әйберҙәрҙең, төрлө күренештәрҙең мәғәнә нескәлектәрен тулыраҡ күҙ алдына килтерергә ярҙам итә.

1. М. Кәримдең «Сыйырсыҡ балаһы», А. Йәғәфәрованың «Яҡшылыҡ» әҫәрҙәренән синонимдарҙы яҙып алығыҙ (айырым һүҙҙәргә үҙегеҙ синонимдар уйлап яҙығыҙ).
2. Синонимдарҙы файҙаланып, кескәй генә бәйләнешле текст төҙөп яҙығыҙ.

*Нәжибә Әминева*

## ТЫУҒАН ЕР

Тыуған ер ул —
Баш осоңа халҡың
Һинең өсөн сатыр ҡорған ер,
Бәп-бәләкәй тыуған йорт йылыһы
Гел һиҙелеп, тойолоп торған ер...

Һулышың, йәнең
Сикһеҙ бер киңлекте,
Иркенлекте тоя торған ер...
Күпме ҙур булмаһын, йомарланып,
Йөрәгеңә һыя торған ер.

1. *Тыуған йорт йылыһы, йөрәгеңә һыя торған ер* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?
2. Һәр строфаның һуңғы икешәр юлын диктант итеп яҙығыҙ, бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ, китаптағы текст менән сағыштырып ҡарағыҙ.
3. «Тыуған ерем — Тыуған илем» темаһына проект төҙөгөҙ, әңгәмә үткәрегеҙ.
4. Шиғырҙы ятлағыҙ.

## БАШҠОРТОСТАН ТАУҘАРЫ

Башҡортостанды тауҙар иле тип әйтергә мөмкин. Көньяҡ Уралдың армыттары республика территорияһының яртыһынан күберәк өлөшөн алып тора. Улар төньяҡтан көньяҡҡа табан 400 километрға тиклем һуҙыла. Был һырттарҙың иң ҙурҙары Баштау, Ҡырҡтытау, Ирәндек, Елмәрҙәк, Ҡалыу, Алатау, Ҡаратау. Улар араһында иң бейеге — Ямантау. Ул диңгеҙ кимәленән 1640 метрға күтәрелеп тора.

Яңғыҙ ғына ҡалҡып торған тауҙар ҙа бик үҙенсәлекле. Стәрлетамаҡ ҡалаһы эргәһендәге Торатау, Ҡуштау, Йөрәктау, Шахтау (Шәкетау) — шундайҙар. Уларҙы шихандар тип йөрөтәләр.

Быларҙан тыш, Башҡортостанда бәләкәйерәк һырттар, айырым тауҙар, түбәләр бик күп. Уларҙың һәр береһенең исеме, легендаһы бар.

1. Белешмәнең йөкмәткеһен үҙләштерегеҙ, унда телгә алынған тауҙарҙың, һырттарҙың исемдәрен иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ, уларға үҙегеҙ белгән тау исемдәрен өҫтәп яҙығыҙ.
2. Шәкетауҙың бөгөнгө хәле тураһында нимә беләһегеҙ?

## ТЫУҒАН ЕР

*(Ҡобайыр)*

Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер,
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған тыуған ер.
Туғайҙары түшәктәй,
Талы, муйылы ҡурсаҡтай;
Балтырғаны беләктәй,
Һарынаһы ҡурай еләктәй;
Сәскәләре мең төҫлө,
Йәйрәп ятҡан еребеҙ!
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп еребеҙ;
Алырын аңдып йөрөгән
Бүреһе күп еребеҙ;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп еребеҙ;
Ыҫпай баҫып йөрөгән
Төлкөһө күп еребеҙ;
Балығы аттай тулаған,
Һыуы ярына һыймаған
Йылғаһы күп еребеҙ!
Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер;
Йылҡылары сыңырап,
Һыйырҙары мөңөрәп,
Ҡуй-һарығы ҡуңырып,
Көтөү-көтөү йөрөгән ер;
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йөҙ ҡуй булып үрсер ер,
Тороп ҡалған яңғыҙ тай
Өйөр булып йөрөр ер;
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер!

1. Текстан хайуан, кейек исемдәрен яҙып алығыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
2. Әҫәр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
3. Ҡобайырҙың тәүге 2 һәм һуңғы 4 юлын ҡушып ятлағыҙ.
4. Уҡытыусы ярҙамында *«Нимә ул ҡобайыр?»* тигән һорауға яуап бирегеҙ.
5. Үҙегеҙ белгән берәй тауҙың легендаһын һорашып яҙығыҙ.
6. Ҡобайыр тексынан сағыштырыуҙарҙы күрһәтегеҙ, уларҙың ниндәй юл менән яһалышын билдәләгеҙ.

Башҡорттар элек-электән эйәләштергән, аҫраған хайуан, ҡоштарҙың балаларын айырым һүҙ (исем) менән атағандар. Яңыраҡ аҫрай башлаған ҡош, хайуандарҙың, шулай уҡ йәнлек, ҡырағай ҡоштарҙың балалары өсөн **бала, бәпкә** һүҙҙәре генә ҡулланылған һәм ҡулланыла. Сағыштырығыҙ: *быҙау, ҡолон*

*(ҡолонсаҡ, ҡолоҡай), көсөк, себеш, бәрәс, бәпкә;* ләкин: *бесәй балаһы, сусҡа балаһы, айыу балаһы, болан балаһы, күркә бәпкәһе (себеше).* Ирҙәр затынан булған йорт хайуандары һәм ҡоштарының да байтағының үҙ атамалары бар: *айғыр, әтәс.*

**31-се күнегеү.** Өлгөгә ҡарап, түбәндәге хайуан һәм ҡоштарҙың балалары һәм ир затынан булғандарының атамаларын яҙығыҙ.

Һарыҡ, бейә, тауыҡ, эт.

*Өлгө*: һыйыр — быҙау — үгеҙ.

**32-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

1. На рассвете проснулся от тишины. 2. Впервые увидел из морской дали весь Крым. 3. Впервые понял, как прекрасна эта земля. *(К. Паустовский буйынса)*

*Тамара Ғәниева*

## УРАЛИӘ ТИГӘН ИЛ

*(Әкиәт)*

Борон-борон заманда һәр төрлө халыҡтар, ил-ил булып донъя көтөүҙе һанламай, бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөүҙе хуп күргән бер ваҡытта, улар араһында йыш ҡына ыҙғыш-тартыштар ҡубып торған, ти. Тора-бара, ҡояш сығышынан ҡояш байышына, йә көньяҡтан төньяҡҡа табан сәйәхәт иткәндә, береһенән-береһе матурыраҡ урындарға юлығып хайран ҡалған сәйәхәтселәр йәндәренә яҡын ерҙәргә хужа булырға ынтыла башлаған. «Был ерҙәрҙе иң тәүҙә беҙ күрҙек, — тип һөрән һалған бер сәйәхәтселәр башлығы, — тимәк, ул беҙҙеке!» «Юҡ, — тип ҡаршы килгән уларға икенселәре, — был гүзәл ергә беҙ, тәүләп аяҡ баҫып, тамғабыҙҙы һуғып киттек. Был ерҙәр беҙҙеке!» Икенселәргә өсөнсөләр ҡаршы килгән, өсөнсөләрҙе дүртенселәр ҡыуалаған...

Киткән талаш-тартыш. Уҡтар юнылған, һөңгөләр осланған, һуғыш барышында ҡандар ҡойолған. Үҙенә оҡшаған төйәкте берәү ҙә икенсеһенә бирергә теләмәгән. Быуындарҙы быуындар алыштырған, ерҙән ҡот-йәм китә башлаған, ирҙәр башы ҡырылған.

Шунан ирҙәренән, балаларынан яҙған, ҡайғынан йөҙө һарғайған ҡатын-ҡыҙҙар Тәңре алдына килеп теҙләнгән:

— Эй, Аллаларҙың Аллаһы, илаһи Тәңребеҙ! — тип ялбарған улар. — Һинең рәхимең менән яратылған Ер талаш-тартыштан интегә, балаларыбыҙҙың, ирҙәребеҙҙең ҡаны ҡойола, һөйәктәренән уба-уба тауҙар күтәрелә. Ҡөҙрәтең киң, бәхәсебеҙҙе хәл ит, Ерҙе бөтәбеҙгә лә ғәҙел итеп бүлеп бир.

Бығаса, минең эш бөттө, Ер тигән һәр яҡтан да уңайлы планетаны булдырҙым, унда көн итергә кешеләр төшөрҙөм, шарттар тыуҙырҙым, тип күктә тыныс ҡына йәшәп ятҡан Тәңре уйға ҡалған. Бер көн уйлаған ул, ике көн, өс көн… Тик шунан һуң ғына халыҡтарға, ҡоралдарын ҡуйып тороп, уның әмерен тыңларға бойорған.

— Бөгөндән, — тип һүҙ башлаған Тәңре, — Ерҙе бөтәгеҙгә лә тәғәйенләп бүлеп сығам. Тик үпкәләштән булмаһын. Ғәҙел булһын өсөн, һәр ырыу башлығы йәрәбә тартһын. Һәр кем үҙ бәхетенә төшкән ер менән риза булырға тейеш. Йәнә шуны ла киҫәтәйем: үҙ төйәгегеҙ өсөн бынан кире үҙегеҙ яуаплы булаһығыҙ. Ырыуығыҙға уны күҙ ҡараһы кеүек һаҡлау бурысы йөкмәтәм. Ризаһығыҙмы?

— Ризабыҙ, ризабыҙ! Ант итәбеҙ! — тиешкән яуҙарҙан йонсоған кешеләр.

Тәңре һәр ырыуҙың тамға таяғын алған да бейектән, үҙе йәшәгән күк тәхетенән, уларҙы берәм-берәм ергә ырғытҡан. Тамға таяҡ осоп бара-бара ла ергә ҡаҙала, ти. Ана шул рәүешле, берәүҙәргә — диңгеҙ буйы, икенселәргә — йәй булмай торған һалҡынлыҡ иле, өсөнсөләргә — гел ҡояш йылмайған сүлдәр, дүртенселәргә — тау-таш аралары һәм башҡа, һәм башҡа ерҙәр эләккән.

— Ә һеҙгә, — тигән Тәңре баштарына төлкө бүрек кейгән бөркөт ҡарашлы бер төркөм һыбайлы кешеләргә, — һеҙгә яҙғаны — Уралиә тигән ил. Урал тауҙары тирәһе бынан кире һеҙҙең йәшәү-тороу урынығыҙ булыр!

Башына төлкө бүрек кейгән бөркөт ҡарашлы кешеләр Тәңре күрһәткән ергә боролоп ҡараған да таң ҡалған. Матурлыҡтың да бындайы була икән! Йөҙәрләгән төр ағастарҙан хасил булған ҡуйы-ҡуйы урмандар, ундағы йөҙәрләгән төр хайуан-йәнлектәр, ялан-болондар өҫтөндә аңҡыған бал еҫе, күп төрлө сәскәләр, күк ҡылғанлы далалар, гүзәл күлдәр һәм һанап бөткөһөҙ бүтән гүзәллектәре булған был ил быларҙы ғашиҡ иткән. Тик шуныһы ғына кәйефен ҡырған уларҙың: Уралиә илендә йылғалар ғына күренмәй, ти.

— Уралиә, Уралиә, Уралиә... — тип йыр һуҙған йырсылар.

— Уралиә, Уралиә, Уралиә... — тип шиғыр сығарған шағирҙар.

— Уралиә, Уралиә, Уралиә... — тип һайраған ҡоштар.

Уралиә иленә һоҡланмаған халыҡ булмаған. Уны үҙенеке итергә теләүселәр бөркөт ҡарашлы һыбайлы кешеләргә көнләшеп ҡараған, һәм күптәре күңеленә хаслыҡ төйнәгән.

Шул саҡ һөйәктәрҙән өйөлгән тау теҙмәләренең көньяғынан бер шишмә атылып сыҡҡан. Башта ул ҡалҡыулыҡтар буйлап юлланған. Тауҙарҙы үткәс, төньяҡкараҡ ыңғайлап, шул көйө аға биргән дә көньяҡ-көнсығышҡа, һуңынан төньяҡ-көнбайышта табан тәгәрәгән. Уның һылыулығы тураһында хәбәрҙе ҡоштар бөтә тирә-яҡҡа таратҡан, һәм ҡайһы бер дыуамал егеттәр, уны күрәм тип, һыбай елдергән.

— Ап-аҡ, күрегеҙ әле, ҡалай ап-аҡ йылға! — тип һөрәнләгән егеттәрҙең береһе.

— Аҡйылға, ҡалай гүзәлһең һин! — тип һоҡланған икенсеһе.

Аҡйылғаны күрергә тип килгән егеттәр Нөгөш, Еҙем, Сөн, Бөрө, Танып, Ашҡаҙар, Инйәр, Өфө, Стәрле, Өршәк, Дим, Ҡармасан, Сәрмәсән, Базы, Әй, Йүрүҙән

исемле булған. Аҡйылға ярына баҫып, арттарына әйләнеп ҡараһалар, егеттәрҙең килгән юлдары эреле-ваҡлы йылғалар булып ағып ята, ти.

— Былай булғас, төйәгебеҙгә бәрәкәт ҡуныр, — тип юраған аҡһаҡалдар. Ошо көндән бында йәшәүселәр балыҡ тотоу, йәнлек аулау, мал үрсетеү эшенә тотонған. Урман солоҡтарынан бал йыйған. Ҡурай тигән үләнде ҡырҡып, көй көйләгән.

Бәхетле ил икән Уралиә, тиһегеҙме? Бәхет ул һәр саҡ бәхетһеҙлек менән бергә йөрөй. Үҙҙәренә эләкмәгән был төйәккә дәғүә итеүселәр бер ваҡытта ла кәмемәгән. Ә инде Уралиәнең Тәңрегә ант иткән халҡы, шул антына тоғролоҡ һаҡлап, ил-төйәкте яҡлап яуға сыҡҡан. Бындай яуҙарға ғәскәр башына иң батыр уландар ҡуйылған. Уларҙың күбеһенең исеме хәҙер онотолған. Ҡайһы берҙәренең даны йырға күскән. Ә ҡайһы берҙәренең исемен кешеләр ҡолаҡтан ҡолаҡҡа, быуындан быуынға аманат итеп тапшыра килгән.

Ул ил әле картала бармы, тип эҙләһәгеҙ, ҡайһы бер һыҙаттарынан уны танып та ҡуйырһығыҙ. Тик ул әле сиргә һабышҡан. Уны яҡлар батыр уландар тыумай тормаҫ, әлбиттә. Уралиәне сихырлаған яуыз көстөң төйәген улар табыр. Тәңре ундай ҡөҙрәтте халҡына һәм еренә мөхәббәт һаҡлағандарға ғына бирә, ти.

1. Текстан үҙегеҙгә таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, улар менән дөрөҫ әйтеү күнекмәләре үткәрегеҙ, мәғәнәләрен асыҡлап, һөйләмдәр төҙөгөҙ.
2. Ниндәй ил ул Уралиә? Унда йәшәгән төлкө бүрекле, бөркөт ҡарашлы кешеләр кемдәр? Был турала кескәй бәлешмә төҙөп яҙығыҙ.
3. Ниндәй йылға ул Аҡйылға? Уны Башҡортостан картаһынан табып, ҡайҙан һәм ҡайҙа нисек ағышына иғтибар итегеҙ. Аҡйылғаны күрергә килгән егеттәрҙең исемдәре һеҙгә нимә тураһында һөйләй? Был исемдәрҙе лә, Башҡортостан картаһынан табып, русса һәм башҡортса дөрөҫ итеп яҙып ҡуйығыҙ.

4. Текстың иң аҙаҡҡы абзацын иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Унда Уралиәнең ниндәй сиргә һабышыуы, уны ниндәй яуыз көстөң сихырлауы тураһында һүҙ бара? Уны был сирҙән, һеҙҙеңсә, нисек ҡотҡарып була? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.

**33-сө күнегеү.** Һүҙҙәрҙе кәрәкле тәртиптә ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.

Йәшәйем, мин, ҡалаһында, Өфө. Тау, башында, Ағиҙел, Ҡариҙел (Өфө), һәм, Дим, йылғалары, урынлашҡан, урында, ҡушылған, беҙҙең, ҡала. Ҙур, ҡала, Өфө. Күп, Өфөлә, заводтар, фабрикалар. Бар, унда, алты, театр, һәм, юғары, уҡыу, йорттары. Үтә, тимер, юлдар, һәм, автомобиль, юлдары, төрлө, яҡҡа, Өфө, аша.

**34-се күнегеү.** Йылғаның төрлө урындарын белдергән һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ошо һүҙҙәрҙе индереп, хикәйә төҙөгөҙ.

Йылға башы, йылға тамағы, шаршы, ятыу, шарлауыҡ, бөгөл, өйрөлмә, кисеү, аръяҡ, бирьяҡ, сөмгөл, ҡолаҡ, ҡултыҡ, үҙән.

*Рәшит Нигмәти*

## ЙӘМЛЕ АҒИҘЕЛ БУЙҘАРЫ

*(Поэманан өҙөк)*

Ай, Ағиҙел, Ағиҙел,
Күпте күргән Ағиҙел,
Ҡартлас Урал ни күрһә,
Шуны күргән Ағиҙел.
Ел-дауылға ҡушылып,
Йыр йырлаған иҙел ул,
Оҙон ғүмере буйына
Йыр йырлаған иҙел ул.
Ай-ҡылыстай бөгөлөп,
Ярҙарынан түгелеп,
Арғымаҡтай йүгереп,
Ашығып аҡҡан иҙел ул.
Ай, Ағиҙел, Ағиҙел,
Ай, Ағиҙел, Ағиҙел!
Ҡая ташын ҡаушырып,
Кереш тартҡан йылға ул,
Мәргән уғын дошманға
Кирелеп атҡан йылға ул.
Ҡайынына ҡан биргән,
Имәненә йән биргән,
Яланына йәм биргән
Һылыу ҙа һылыу йылға ул.

Һандуғасын һайратып,
Туғайҙарын яңғыратып,
Ташына ҡылыс ҡайратып,
Талпынып аҡкан йылға ул.
Ай, Ағиҙел, Ағиҙел,
Ай, Ағиҙел, Ағиҙел!
Һыуһап килгән юлсыға
Һыуын биргән был иҙел.
Байҙан ҡасҡан ялсыға
Ҡуйынын биргән был иҙел.
Дуҫтар яуға сапҡанда,
Айырылған ул икегә.
Дошман яуға сапҡанда,
Урғып, ярҙан һикергән.

Дуҫтар аттан ҡолаһа,
Батырмаған дуҫтарын,
Дошман аттан ҡолаһа,
Һә тигәнсе йотҡан ул.
Ай, Ағиҙел, Ағиҙел,
Ай, Ағиҙел, Ағиҙел!
Ағиҙелкәй!
Һинең буйҙарыңда
Нисә быуын ғүмер
кисергән.
Үҙең кеүек тәрән,
үҙеңдән киң
Күпме йыр бар һинең
исемгә!..

1. Өҙөктө тасуири итеп уҡығыҙ. Унда Ағиҙел нисек һүрәтләнгән?
2. Һеҙҙең Ағиҙел тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ, йырҙар тыңлағанығыҙ бар?
3. Ни өсөн *иҙел* һүҙе бәләкәй хәрефтән яҙылған икән?
4. Өҙөктөң тәүге дүрт юлын яттан яҙығыҙ.

Элегерәк ҙур йылғаларҙы иҙел тип йөрөткәндәр. Шишмә — йылға — иҙел. Шуға ла халыҡ телендә ҡайһы бер ҙур йылғаларҙың исеменә **иҙел** һүҙе өҫтәлгән: Ағиҙел, Өфө йылғаһы — Ҡариҙел, Дим йылғаһы — Күгиҙел.

**35-се күнегеү.** Русса белмәгән (йәки насар белгән) кешеләр түбәндәге һүҙҙәрҙе нисек әйтәләр? Шуны күҙәтеп, яҙып килегеҙ.

Радио, трактор, лампа, печенье, парта, председатель, рама, рус, станция, стакан, клапан, квитанция.

Ни өсөн шулай әйткәндәрен аңлатығыҙ.

Башҡорт һүҙҙәренең башында ике тартынҡы, шулай уҡ **р, л, п** өндәре булмай. Шуға күрә элегерәк килеп ингән рус һүҙҙәре башҡортсалаштырылып әйтелә (*торба, арыш, мейес* һ. б.).

**36-сы күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәр башҡорт теленә (әҙәби телгә һәм һөйләү теленә) рус теле аша ингән. Әйтелештәге үҙгәрештәрҙең сәбәбен аңлатығыҙ.

а) арыш — рожь, ырам — рама, эләүкә — лавка, ыраҙия — радио.

б) мейес — печь, борос — перец, билмән — пельмени, бакуй — покос, бәлтә — пальто.

в) бүрәнә — бревно, торба — труба, тырактыр — трактор, өҫтәл — стол, керәҫтейән — крестьянин.

**37-се күнегеү.** Түбәндәге һорауҙарға ыңғай йә кире яуап бирегеҙ. Яуаптарығыҙға **ниңә?** икәнен өҫтәгеҙ.

1. Һин башҡортса йәнһүрәттәр ҡарарға яратаһыңмы?
2. Үткән йәйҙә ауылда булырға тура килдеме?
3. Дәрес әҙерләүҙән башҡа өйҙә тағы ла ниндәй эштәр эшләйһең?
4. Диктант яҙғанда, иптәшең бер һүҙҙе яҙа алмай ултыра. Уға ярҙам итер инеңме?

**38-се күнегеү.** Шиғыр юлдарын сәсмә стилдә яҙығыҙ.

1. Шатлыҡтан да, ҡайғынан да
   Илайҙар ул кешеләр.

*(Р. Шәғәлиев)*

2. Һағыныу хисе, миңә ҡанат ҡуйып,
   Алыҫ ерҙе яҡын иттерҙе.

*(М. Кәрим)*

3. Тома һуҡыр булыр ине миңә ғаләм,
   Балҡымаһа ал ҡояштан бар әйләнәм.

*(Ә. Әхмәт-Хужа)*

Әйләнә — всё, что находится вокруг

*Фәүзиә Рәхимғолова*

## МИН — БАШҠОРТОСТАНДАН!

Һораһалар ситтә, һин ҡайҙан, тип,
Ғорур ғына ҡарап торам да,
Ирәйеп тә, берсә кинәнеп тә,
Башҡортостандан, тим, Уралдан!
Күккә ашҡан уның күк тауҙары,
Былбыл ҡунған муйыл, талына.
Алтын, көмөшкә бай, бай нефткә,
Еләк-емеш, ҡымыҙ, балына...
Тауҙар ҡуйынынан ярһып сапҡан
Ағиҙеле һылыу шул ҡәҙәр!
Аҡ елкәндәр һалып иңдәренә,
Ҙур Рәсәйгә ташый аҡ хәбәр.

1. *Ирәйеү, кинәнеү* тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Үҙ-ара фекер алышыу ярҙамында уларҙың мәғәнәләрен асыҡларға тырышығыҙ. Иҫегеҙгә төшөрөп ҡарағыҙ: һеҙҙең шундай тойғо кисергәнегеҙ бармы?
2. Һуңғы ике юлдың мәғәнәһенә төшөнөгөҙ: шағир ниндәй аҡ елкәндәр тураһында һүҙ алып бара? Ә ниндәй хәбәр ул *аҡ хәбәр*? Хәбәрҙең *ҡараһы* ла, *ҡыҙылы* ла, *йәшеле* лә һ. б. буламы? Фекер алышығыҙ.
3. Һуңғы строфаның тәүге ике юлына иғтибар итегеҙ. Ағиҙел ярһып *саба*, ти шағирә. Йылға сабамы ни? Автор бында ниңә нәҡ шул һүҙҙе ҡулланды икән? Фекер алышығыҙ.
4. Автор тыуған иле Башҡортостан менән ғорурлана. Был тойғоно ул нисек белдерә? Миҫалдар килтерегеҙ.
5. Тыуған ил, тыуған ер менән ғорурланыу тойғоһо һеҙҙә бармы? Уны белешмә, кескәй хикәйә, шиғыр йәки инша рәүешендә белдереп ҡарағыҙ.
6. 11 октябрь — Башҡортостанда байрам көнө. Был байрам тураһында әңгәмә ойошторoғоҙ.
7. Шиғырҙы ятлағыҙ.

## Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәре

Башҡорт телендә 9 һуҙынҡы өн бар: **а, о, ы, у** — ҡалын һуҙынҡылар, **ә, ө, э, ү, и** — нәҙек һуҙынҡылар. Башҡорт һүҙҙәрендә йә тик ҡалын һуҙынҡылар, йә тик нәҙек һуҙынҡылар ғына була: *балаларҙыҡы, өйҙәгеләрҙең* һ. б.

**39-сы күнегеү.** Нөктәләр урынына ниндәй хәреф йәки һүҙ яҙырһығыҙ?

| | | |
|---|---|---|
| а — ә | бала — бәлә | ҡама — ... |
| о — ... | ойошма — ... | орлоҡ — ... |
| ы — ... | ысын — ... | ҡыйыҡ — ... |
| у — ... | урам — ... | утын — ... |

**40-сы күнегеү.** Башҡорт телендә иҫ киткес матур яңғыраған ҡатын-ҡыҙ исемдәрен, әйтелештәге матурлыҡты һаҡлап, рус телендә нисек яҙырһың?

*Өлгө:* Зөлхизә — Зюльхизя.

Сөмбөл, Ләйсән, Гәүһәр, Зөләйха.

**41-се күнегеү.** Ике тартынҡы араһына тейешле һуҙынҡыларҙы ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ.

1. Ҡ...ш көнө урманда ҡ...ш осратырмын тимә.
2. Һәр кемдә лә ҡ...ш ҡ...ш була.

**42-се күнегеү.** Шиғыр юлдарын рус теленә тәржемә итегеҙ.

1. Әкиәт батыры яуыз дошманынан
   Тигеҙ ялан буйлап ҡыуылһа,
   Тараҡ — урман, күҙгә диңгеҙ булған
   Уның дошманының юлында.

2. Үҙ ҡулдары менән ултыртты ул
   Дошман юлын быуыр урманды...
   Үҙ аяғы менән атлап үтте
   Һыуҙарҙы һәм янар уттарҙы.

*(Р. Ниғмәти)*

*Әнүр Вахитов*

# АҠҺАҠАЛ АМАНАТЫ

## I

Мин Әхмәзулла бабайҙың үҙ ауылынан башлап бөтә ғаләм ваҡиғаларына тиклем ғәжәп күп хәбәрҙәр белеүенә аптырап ултырҙым.

— Ауылыбыҙҙың мин белгән тарихы бына ошо шәжәрәнән башлана, — тип һөйләп китте ул. — Был ҡомартҡыны миңә олатайым васыят итте. Уға шулай уҡ олатаһы ҡалдырған. Әүлиә күңелле Хәсән аҡһаҡалдың ҡаны тейгән, тире һеңгән был шәжәрә олатайымдың олатаһына нисек килеп эләккәнен асыҡ ҡына әйтә алмайым. Ә бына Хәсән аҡһаҡал был шәжәрәне дошман ҡулынан нисек һаҡлап ҡалғанын беләм. Тыңла, кәрәге булыр. Шәжәрә тарихында беҙҙең ауыл хәле генә түгел, бөтә еребеҙҙең яҙмышы сағыла...

* * *

...Бынан әллә нисә тиҫтә быуын элек Ағиҙелдең урта ағымында бер ауыл булған. Ауылда батыр, ҡуш йөрәкле кешеләр йәшәгән. Мал ҡыуыр көтөүлектәре, бесән сабыр болондары Ағиҙелде ике яҡлап йәйрәп ятҡан. Ярлыябаға, бер төптән тороп, байҙарға ул хәтле шашынырға бирмәгән икән был ауылда. Әммә заманалар үтә тора, тормош та үҙгәрә барған. Бына бер ваҡыт Ағиҙел үренәрәк әллә ни арала килеп утар һалған бик бай берәү — Әлимбай тигән кеше — быларҙың болондарына, көтөүлектәренә күҙен төшөргән.

— Нимәгә был ҡатҡан сәкмәндәргә ул хәтле ер? Батша хәҙрәттәре алдында хеҙмәтте улар күрһәткәнме, минме? — тип күкрәк һуға икән был. Күп тә тормай, ауылдың ерен дәғүәләп, оло түрәләргә яҙыу биргән. Яҙыуына өҫтәп, тегеләргә күп кенә тире-яры, аҡса, бал-май ҙа йомдорған был. Түрәләргә ни, шул ғына кәрәк тә. Улар ауыл кешеләренең ерен, йәнәһе, артыҡ тип, законды

боҙаһығыҙ тип, был ерҙәрҙең күп өлөшө бөтөнләй һеҙҙеке түгел тип, яуап-яҙыу төшөргәндәр.

Бер ваҡыт шул Әлимбай тигәндәре ауылдың йыйынын йыйҙырта. Ҡыш көнө була. Байҙың малы күп. Аттарҙы тибенгә сығарырға кәрәк, ә ауыл халҡы үҙенең еренә сығартмай. Ерҙе бирмәй. Теге Әлимбай ҡарағош һүрәтле мисәт баҫылған ҡағыҙын юғары күтәрә лә йыйындағыларға:

— Бына бында, аҡ батшаның пак күңеле кеүек аҡ ҡағыҙҙа: «Һеҙ был ерҙәрҙе законһыҙ биләп ятаһығыҙ», — тип ҡара менән яҙылған. Ауыҙығыҙҙы ла асмағыҙ, ер — минеке. Миңә уны батша хәҙрәттәренә бәйҙәге эт һымаҡ тоғро хеҙмәт иткәнем өсөн бирҙеләр.

Халыҡ шаулап, әлеге ҡарттар һүҙен әйтеп ҡарай ҙа бит, ни эшләһен, күрә: закон — бай яғында. Староста ла уның һүҙен йөпләп тора. Шунда халыҡ янына шәпләп йөрөүҙән ахылдап төшкән Хәсән аҡһаҡал килеп туҡтай. Ҡулын күтәрә лә:

— Йәмәғәт, ни эшләп тынып ҡалдығыҙ, ошо ауыл кешеләреме һеҙ? — тип һорай.

Ауылдаштары, ҡарттың мәрәкә генә әйтеп ҡуйған һүҙҙәренең төбөндә кинәйә тойоп, яуаплайҙар:

— Ошо ауыл кешеләре.

— Ата-бабаларығыҙ әүәлдән ошонда торғанмы?

— Ошонда булмай тағы?!

— Һуң, шулай булғас, ни эшләп шаҡ ҡатып ҡалдығыҙ? Шаҡ ҡатҡанға юл ҡайҙа, типме?

— Юл ҡайҙа һуң?

— Ошо ауылда йәшәгән кешеләрҙә, һеҙҙең үҙегеҙҙә, ауылдаштар.

— Нисек үҙебеҙҙә?

— Эйе, үҙегеҙҙә. Быны тарих та йөпләй. Бына ул.

Шунда Хәсән аҡһаҡал сал һаҡалы аҫтындағы иҙеүе эсенән төргәк ҡағыҙ тартып сығара ла юғарыға һона.

— Бына ул тарих. Был — шәжәрә. Ауылыбыҙҙың, еребеҙҙең йәнле тарихы. Уға дүрт йөҙ йыл!..

Шунда байҙар шыбыр-шыбыр кәңәшләшеп алалар ҙа, староста:

— Йәмәғәт! — тип көсәнеп аҡырып ебәрә. — Һеҙ күрәләтә алданаһығыҙ. Шәжәрә документ түгел. Ул законды алмаштыра алмай. Уның мисәте юҡ, ҡарағошло ҡағыҙ түгел. Ул Хәсән кеүек яртаҡылдарҙың ҡағыҙ ярпыһы…

— Мисәте булмаһа, булдырырбыҙ, — тип яуаплай Хәсән аҡһаҡал, — ә ер — беҙҙеке. Һәр быуын шул турала бына бында үҙ танытмаһын һала барған. Ә Әлимбай бай ҡайҙан килгән, шунда китһен, аҡ батшаның пак күңеле кеүек аҡ ҡағыҙын кемдән алған, шуларҙан ер ҙә таптырһын!..

1. *Ҡуш йөрәкле кешеләр* тип кемгә әйтәләр? Һеҙҙең ундай кешеләрҙе күргәнегеҙ бармы?
2. *Бәйҙәге эт һымаҡ* тигән сағыштырыуҙы кемгә ҡарата ҡулланалар? Һеҙгә шулай тип әйтеүҙәрен теләр инегеҙме?
3. Әлимбай кем ул? Уға характеристика бирегеҙ. Ни өсөн ул ауыл халҡын *ҡатҡан сәкмәндәр* тип атай?

**43-сө күнегеү.** Башҡорт һәм рус һүҙҙәрендә һуҙынҡыларҙың әйтелешен сағыштырығыҙ.

тормошо — молоко́
балалар — карава́й
беренсе — теремо́к
сыйырсыҡ — бы́стрый

**Башҡорт һуҙынҡыларының үҙенсәлектәре**

Башҡорт телендә һуҙынҡылар һүҙҙең бөтә ижектәрендә лә бер төрлө әйтеләләр.

II

Хәсән аҡһаҡал халыҡтың фатихаһын ала ла шул көндә үк оҙон юлға — шәжәрәгә мисәт баҫтырып алып ҡайтыр өсөн сәфәргә сыға. Уны ауылдың ике егете оҙата баралар. Хәсән аҡһаҡал үҙе генә белә торған һуҡмаҡҡа төшә. Әлимбайҙың ҡыуа төшөүенән шикләнә ул. Һаҡланған —

һаҡлы була, тип уйлай ул. Алтмыштан уҙған ил атаһы ҡорона инһә лә, ул нык быуынлы була, ә тегеләре, яңы утыҙға еткән ир булһалар ҙа, әлһерәп төшәләр. Ә һуҡмаҡ, әле тауға үрмәләп, әле түбән йүгереп, бара ла бара. Хәсән аҡһаҡалдың юлдаштарының береһе:

— Юҡҡа бынан киттек. Ат йәлме ни беҙгә, — тип мыжый башлай. Икенсеһе өндәшмәй, түҙә. Бер нисә көндән ҡалаға етеп, мең бәлә менән әлеге шәжәрәгә ҡарағошло мисәт һуҡтырып, ҡайтырға сыға былар. Бер көн китеүҙәре була, Әлимбай кешеләренең ҡыуа сығыуын һиҙәләр. Хәсән аҡһаҡал юлдаштарын ашыҡтырырға тотона:

— Боланторомтауға етеп ҡалайыҡ, уға етәрәк бүтән һуҡмаҡҡа төшөрбөҙ, — ти ул.

Шулай килә торғас, былар, әлеге тауға яҡынайғанда ғына, арттан ҡыуыусыларҙың тауышын ишетәләр. Хәсән аҡһаҡал аҙымдарын ҡыҙыулата.

Тик тағы бер бәлә килеп сыға: ҡараңғы төшөп, күҙ бәйләнә башлағанда ғына, алдан барған Хәсән аҡһаҡалдың һыңар ҡалтағайы һына. «Ни эшләргә?!» Һыңар ҡалтағайында һылтыҡлай-һылтыҡлай килгән Хәсән аҡһаҡал үҙ-үҙенә шул һорауҙы бирә. Егеттәрҙең үҙҙәрен генә ебәрһәң, юлды белмәйҙәр. Ә былай барылһа, арттан ҡыуып етәсәктәр. Ул саҡта шәжәрә Әлимбайға эләгә... Уның ошо уйҙарын һиҙгән кеүек, юлдаштарының береһе:

— Хәсән аҡһаҡал, һин үҙең кит әйҙә. Ә беҙ... беҙ бер юлын табырбыҙ әле, — ти.

— Беҙ һуң, беҙ аҙашып үлербеҙме? — тип мыжый икенсеһе. — Юҡ инде. Кем бутҡа бешергән, шул тәүҙә ашаһын...

Шунан ул үҙенең артығыраҡ ысҡындырғанын тойоп ҡала ла өҫтәп ҡуя:

— Нимәгә шул ҡағыҙ ярпыһы өсөн баш менән шаярырға?..

Һылтыҡлап бара-бара арыған, йонсоған Хәсән аҡһаҡал ҡапыл уға әйләнә лә, ни эшләргә белмәгән кеүек, тынып ҡала. Уның йөҙөндә борсолоу ҙа, ғәжәпләнеү ҙә,

нимәгәләр үпкәләү ҙә була. Ҡарашы ҡаты, ҡырыҫ булып китә. Тегеһе ниҙер әйтергә тип асҡан ауыҙын да япмай ҡатып тора.

— Их, улым, улым, — тип баш сайҡай шунан Хәсән аҡһаҡал, — ҡағыҙ ярпыһы, тиһең. Ә бит шул ҡағыҙ ярпыһында бөтә ауыл тормошо, бөтә ауыл яҙмышы, бәхете, киләсәге. Ергә булған танытмаһы.

— Әй, ер күп тә ул беҙҙә...

— Күп, тиһең инде, ә? Ниңә асыға һуң халыҡ? Былтыр ниңә ҡырылды?

— Былтыр үләт булды бит...

— Үләт ниңә булды һуң?

— Уныһы инде минең эш түгел...

Был һүҙҙәр Хәсән аҡһаҡалға башына һуҡҡан кеүек тәьҫир итә.

— Нисек? Һинең эш түгелме? Һин кем, башыңа бүрек кейгән ир йораты, һин кем? Ҡайҙа үҫтең һин? Һинең эш ул, минең эш, беҙҙең эш. Ирҙәр эше! Ил эше, тыуған ер эше. Бөгөнгө тормош эше, киләсәк эше! — Шунан ул бер аҙ тынысланып дауам итә. — Халыҡ эшен минең эш түгел тигән кеше, ай-яй...

Бер аҙ тын торалар. Шунан аҡһаҡал уйсан ғына дауам итә:

— Ер етерлек булһа, үләт тә булмаҫ, аслыҡты төштә лә күрмәҫ инек... Тыуған еребеҙҙе кемдәрҙер киҫеп ала икән, үҙҙәренең ере була тороп, байығыр өсөн кеше өлөшөнә ҡул һуҙа икән, нисек тыныс ҡалмаҡ кәрәк, улым? Уйлап ҡара. Тыуған-үҫкән ер бит, ата-бабаңды, һине, һинең балаларыңды туйындырған ер... Еребеҙҙе биреп, үҙебеҙ кеше тупһаһына барып баш һалырбыҙмы инде, һинеңсә?!

Мыжыҡ егет өндәшмәй.

Ҡараңғы төшкәс, юлсылар бер тау өңөнә йәшенеп, шунда ут яғып, шыршы ылыҫына ятып йоҡлайҙар. Иртән тороуҙарына әлеге мыжыҡ егеттең, иң һәйбәт ҡалтағайҙарҙы һайлап алып, иптәштәрен ташлап ҡасҡанлығы

асыҡлана. Хәсән аҡһаҡал, имен ҡалған ҡалтағайҙарҙы биреп, иптәшен алдан ҡайтарып ебәрә:

— Улым, мин шәп шыуа алмам. Аяҡты ҡаймыҡтырҙым мин... Тиҙерәк бул! Юл, Боланто|| ромдо уратып, аҫҡа төшә лә йылға буйлап түбән китә. Бер ун саҡрымдан ауыл күренер. Ашыҡ. Тегеләр әле үҙәнде сыҡҡан ерҙә юл яҙлығыуҙары ла мөмкин. Ашыҡ.

Егет шыуып китә. Хәсән аҡһаҡал, бер түмһәгә ултырып, аяғын йүнәтеп кейә. Бер аҙҙан хәл алып, был ҡаймыҡҡан аяҡ, һыныҡ ҡалтағайҙар менән йонсой-йонсой юлын дауам итә. Байтаҡ ваҡыт үтә. Аҡһаҡал инде биш-алты саҡрым юл да уҙа. Алда һерәйеп торған Болантором күренә. Уны урап үтергә кәрәк.

1. *Мең бәлә менән* тигән һүҙбәйләнеште нисек аңлайһығыҙ?
2. *Кем бутҡа бешергән, шул ашаһын* әйтелешенең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

* * *

Үҙе ун саҡрымлыҡ юл. Ә хәл бөтә бара. Әллә тауға менергәме? Ниңә, менеп булыуын булһа, теге һөҙәк яҡлап шыуып төшәһең дә китәһең... Дөрөҫ, унда йылға яры яҡын. Етмәһә, йылыу урындар... Ҡалтағайыңа хужа була алмаһаң, барып төшөүең дә мөмкин. Боланторомдан уңда, яҡында ғына ауыл ята. Тик тауҙың ул яғы, ҡая уҡ булмаһа ла, ғәжәп текә шул. Шыуып төшөп булмай...

Аҡһаҡал, үҙе лә һиҙмәҫтән, тауға үрмәләй башланы. Күпме ваҡыт үткәндер, бына бер саҡ яҡында ғына: «Ана, ана бара, ҡарт тәре!» — тип ҡысҡырған тауыш Хәсән аҡһаҡалды түбәнгә ҡарарға мәжбүр итә. Унда, түбәндә, күп булһа йөҙ-йөҙ илле аҙымдар алыҫлыҡта, Әлимбай кешеләре үрмәләй ине. Аҡһаҡал үҙенең был юлы ҡотола алмаясағын аңланы, шулай ҙа, тиҙ генә бирешергә теләмәй, үрмәләүен шәбәйтте. Бара-бара ул тоғон һалып ырғытты, шунан хәле бөтә барыуын аңлап, ҡыҫҡа тун тышынан кейгән сәкмәнен ташланы. Тунын ысҡын-

дырып ебәрҙе. Шунда уның ҡулы һаҡал аҫтындағы кеҫәгә, ундағы шәжәрәнең ҡаты ҡағыҙына тейҙе. Хәсән аҡһаҡалдың йөрәге бик ҡаты тулап ҡуйҙы: «Шәжәрәне теге егеткә биреп ебәрергә онотҡанмын. Ул күптән ауылдалыр инде... Их!» Ул, йән асыуына түҙмәй, үҙен әрләп алды. Шулай ҙа аҡһаҡалға көс инеп киткәндәй булды, ул болан етеҙлеге менән үрмәләй башланы. Арттағылар яҡынлай ине инде. Бына етмеш тирәһе, шунан илле аҙымдар ҡалды. Ана, береһе кирелеп йәйәһен тартты. Уҡ Хәсән аҡһаҡалдың эргәһенән генә һыҙғырып үтте. Тағы, тағы... Үрмәләү ауырлашты. Сөнки уҡтан һаҡланырға теләп борғоланыу етеҙлекте бермә-бер кәметә ине. Бына тау түбәһе! Арттағылар һаман яҡыная. Етмәһә, тау түбәһендә ағас юҡ. Уҡтан ялтаныу ҡыйынлашты. Аҡһаҡал тауҙың текә бите буйлап йүгерә-йүгерә (уға һыныҡ ҡалтағайҙар менән шыуырға түгел, йүгерергә тура килә ине) аҫҡа ҡараны. Аҫта бәләкәй генә күренгән кешеләр: атлылар, ҡалтағайлылар ашығыша. «Миңә ҡаршы сыҡҡандар», — тип шатланып ҡуйҙы аҡһаҡал, шунан артына ҡараны. Тегеләрҙән берәү ун биш аҙым ғына ҡалып шыуа ине. Бына ун аҙымдар ҡалды, бына... Хәҙер тотасаҡ. Кейемен сисеп ташлаған, уҡ-йәйәһе юҡ, билендә һунар хәнйәре генә һалынып килә. Биш аҙым, өс... Ҡапыл аҡһаҡал һулға боролдо ла текә ярҙан түбән шыуҙы. Юҡ, шыуманы, ә осто... Үҙем ҡотолмаһам, шәжәрә ҡотолһон...

Бер аҙҙан ауылдаштары уның иҙелеп бөткән тип әйтерлек кәүҙәһен, ҡәҙерләп төрөп, санаға һалдылар. Ул кискә ҡарай иҫенә килде. Үҙе менән ҡалаға барған егеттәрҙе саҡыртты. Мыжыҡ егет килмәне. Килә лә алмаҫ ине ул. Әлимбайҙар туҡмап имгәткәйне. Ә тегеһе килде. Ул Хәсән аҡһаҡалдың хәлһеҙ ирендәре саҡ ҡыймырлап сығарған һүҙҙәрҙе тыңланы. Уның битенән йәш тәгәрәй ине. Аҡһаҡал уға шәжәрәне күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға васыят итте. Ә үҙе бәхетле йылмайған килеш һушын юғалтты. Иртәгәһенә ул үлгәйне инде.

* * *

— Хәсән аҡһаҡалдың ҡаһарманлығы арҡаһында беҙгә килеп еткән был шәжәрә — хәҙер бер бәләкәй генә ҡомартҡы, — тип һүҙен йомғаҡланы Әхмәҙулла бабай. — Тик уның мәғәнәһе беҙ уйлағандан ҙурыраҡ, улым. Еребеҙ тарихы, халҡыбыҙҙың бәхет өсөн, үҙ өлөшө өсөн көрәше сағыла унда. Ана шуның өсөн был яҙыуҙың ҡәҙере ҙур беҙгә. Боронғоларҙың килер быуынға аманаты — көрәш булған. Шуның йәнле шаһиты был яҙыу-шәжәрә. Мин Октябрь көндәрендә, һуңыраҡ колхоз төҙөгәндә, яңы тормош ҡорғанда, фашистарға ҡаршы һуғыш йылдарында ул көрәштең тере ҡатнашсыһы, шаһиты булдым... Шуға һаҡлайбыҙ беҙ был шәжәрәне.

Мин, бер илһамланып киткән ҡартҡа, бер алдымда ятҡан шәжәрәгә ҡарап, шаңҡып ултыра бирҙем. Әхмәҙулла бабай шәжәрәне, яңынан сафьянға төрөп, ҡумтаға һалды ла Бибисара инәйгә бирҙе.

— Һалып ҡуй, Бибисара. Кәрәге булыр әле уның. Аманат һаҡланырға тейеш!

**1.** Әҫәрҙә ваҡиғалар ҡайһы осорҙа бара? Башҡорт халҡының шул замандағы тормошо тураһында һеҙ нимәләр беләһегеҙ? Хикәйә тексынан, үҙегеҙ уҡыған башҡа сығанаҡтарҙан миҫалдар килтерегеҙ.

**2.** Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: хикәйәлә ауыл халҡы менән Әлимбай араһындағы көрәш тик шәжәрә өсөн генә барамы? Башҡортостан тарихында ер мәсьәләһе ни өсөн шулай киҫкен торған? Хәҙерге заманда ундай проблема бармы? Ошо йүнәлештә «Ерем яҙмышы» темаһына әңгәмә үткәрегеҙ.

**3.** Хәсән аҡһаҡалға характеристика бирегеҙ. Ул ниндәй аманат ҡалдыра?

**4.** Хәсән аҡһаҡалдың ҡаһарманлығын сағылдырған һүрәт төшөрөгөҙ.

**5.** Хәсән аҡһаҡалды оҙатып барған егеттәргә характеристика бирегеҙ, уларҙың яҙмыштарын күҙәтегеҙ.

**6.** Хәсән аҡһаҡал ауыл шәжәрәһен өндәшмәҫ, сыҙамлы егеткә бирә. Ни өсөн? Автор быға ниндәй мәғәнә һалған? «Ил яҙмышы — ирҙәр иңендә» тигән темаға әңгәмә үткәрегеҙ.

**7.** Әхмәҙулла бабайҙы нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ? Һеҙҙең ауылда (ҡасабала, ҡалала) ундай ҡарттар бармы?

**44-се күнегеү.** Бирелгән шиғыр юлдарын ирекле рәүештә рус теленә тәржемә итеп ҡарағыҙ.

### Башҡорт теле

Туған тел ул һинән элек тыуған, —
Тел тейҙерә күрмә телеңә!
Туған тел бит Ағиҙелгә тиңдәш, —
Сүп ташлама Ағиҙелеңә!

Бысраҡ атма Урал тауҡайыңа, —
Туған тел ул Урал тиңдәше!
Урал батыр башҡорт тыуын сөйгән,
Ошо телдә генә һөйләшеп.

Туған телгә аслан ҡул күтәрмә, —
Туған тел ул атаң теле лә!
Атаһына ҡулын күтәргәнде
Ғәфү итмәй ере, иле лә!

*(Ә. Әхмәт-Хужа)*

## БАШҠОРТ ШӘЖӘРӘЛӘРЕ

Башҡорт халҡында борондан шундай ғәҙәт йәшәгән: һәр кем үҙенең ете быуынға тиклем нәҫеленең тарихын белергә тейеш булған. Был туғанлыҡтың яҡынлығын белеү өсөн кәрәк булған. Һәр быуындың үҙ исеме бар:

1-се быуын — атай-әсәй;
2-се быуын — ул-ҡыҙ;
3-сө быуын — ейән-ейәнсәр;
4-се быуын — бүлә-бүләсәр;
5-се быуын — тыуа-тыуасар;
6-сы быуын — тыуаят;
7-се быуын — ете ят.

7-се быуында туғанлыҡ бөтә. Был быуын кешеләре бер-береһенә **ете ят**, йәғни **бөтөнләй сит** кешегә әйләнәләр.

Рустарҙа ул ябайыраҡ:
1-се быуын — отец-мать;
2-се быуын — сын-дочь;
3-сө быуын — внук-внучка.
Артабан һәр быуынға **пра-** приставкаһы өҫтәлә бара:
4-се быуын — правнук-правнучка;
5-се быуын — праправнук-праправнучка;
6-сы быуын — прапраправнук-прапраправнучка һ. б.

Татарҙар уларҙың бөтәһен дә бер генә һүҙ менән **оноҡ** (русса **внук** һүҙенән) тип атай.

Ошо ете быуындың ғүмере кешенең тарихи хәтерен тәшкил итә. Һәр 25 — 30 йыл һайын быуындар алмашына. Тимәк, кешенең **тарихи хәтере** (историческая память) сама менән **ике быуатҡа** (200 йылға) һуҙыла.

Шәжәрәләр яҙма формала ла төҙөлгәндәр. Уларҙа нәҫел, ырыу тарихы тулыраҡ сағыла. **«Шәжәрә»** — ғәрәп һүҙе, **ағас** тигәнде аңлата. Был осраҡта ул нәҫел ағасы мәғәнәһендә ҡулланыла. Шуға ла тәүге яҙма шәжәрәләр ағас формаһында төҙөлгәндәр. Һуңғараҡ шәжәрәләр ябайыраҡ формала — **силсилә** (ғәрәп һүҙе, **сылбыр** тигәнде аңлата) рәүешендә төҙөлә башлай. Әҙәбиәт, тарих өсөн шәжәрәләрҙең **йылъяҙма** (летопись) рәүешендә төҙөлгәндәре әһәмиәтле. Уларҙа исемдәр теҙмәһе менән бергә ырыу тарихында булып үткән ваҡиғалар ҙа киң сағыла. Шундай шәжәрәләрҙең береһе — «Әйле ырыуы шәжәрәһе». Уны XVIII — XIX быуаттарҙа йәшәгән Тажетдин-Ялсығол әл-Башҡорди тигән әҙип төҙөгән. Ул 85 быуындың тарихын, йәғни 2200 — 2500 йыл ваҡытты үҙ эсенә ала.

**1.** Тексттың йөкмәткеһенән сығып, үҙегеҙ белгән башҡа мәғлүмәттәрҙе өҫтәп, ата-әсәләрегеҙҙән һорап, уҡытыусы ярҙамында шәжәрә тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ. Түбәндәге һорауҙарға яуап бирегеҙ:
1. Ни өсөн шәжәрәләрҙе нәҡ ағас формаһында төҙөгәндәр?
2. Ни өсөн шәжәрәләрҙе һуңғараҡ сылбыр рәүешендә төҙөй башлағандар?

3. Шәжәрәләрҙе йылъяҙма рәүешендә төҙөү нимәгә кәрәк булған?
4. Ни өсөн кешенән үҙенең ете быуынын белеү талап ителгән?
5. Һин үҙеңдең ете быуыныңды беләһеңме?
6. Үҙенең нәҫел тарихын (шәжәрәһен) белмәгән кешене төрки халыҡтар нисек атай? Рустар уны кем ти?

**2.** Шәжәрәләрҙең әһәмиәте, хәҙерге яҙмышы, шәжәрә байрамдары тураһында һөйләшегеҙ.

**3.** Класығыҙҙа үҙегеҙ төҙөгән шәжәрәләрҙең күргәҙмәһен ойоштороғоҙ.

**4.** Текста быуындарҙы белдереүсе һүҙҙәр менән танышҡайнығыҙ. Башҡорт халҡының туғанлыҡты белдереүсе атамалары бик күп. Шуларҙы ҡарағыҙ.




Быларҙан тыш, *еҙнә, еңгә, балдыҙ, ҡәйнеш, ҡоҙа, ҡоҙағый, ҡоҙаса, ҡайны, ҡәйнә, ҡәйенбикә, апһын, килен, кейәү* һ. б. бик күп атамалар бар.

Шуларҙың бер нисәһенең һүрәтен һыҙып ҡарағыҙ. Мәҫәлән, *апай, еҙнә, ҡоҙа, ҡоҙағый, ҡоҙаса.*

**45-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

1. Ползают по былинкам жучки-коровки (ҡамҡалар), бегают муравьи, порхают над цветами бабочки. 2. Звонко стучит по сухому дереву дятел, свистят на берёзах иволги (һарығоштар). *(И.Соколов-Микитов)*

## АНТОНИМ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Телмәрҙә ҡапма-ҡаршы мәғәнәне белдергән һүҙҙәр ҙә йыш осрай. Мәҫәлән: **оҙон — ҡыҫҡа, ауыр — еңел, ҡыш — йәй, яҡшы — яман, егәрле — ялҡау, батырлыҡ — ҡурҡаҡлыҡ, килеү — китеү** һ. б.

Бындай һүҙҙәрҙе **антонимдар** тип йөрөтәләр.

1. «Аҡһаҡал аманаты» әҫәрендәге егеттәрҙең образына характеристика бирегеҙ. Уларҙың кешелек булмышын күрһәтеүсе антонимдар ҡулланығыҙ.
2. Түбәндәге һүҙҙәрҙең антонимдарын табығыҙ: *аҡ, бейек, сөсө, уңған, зирәк, ҡаты, ауырлыҡ, ҡайғы, йомарт, белемле, тырыш, йәш, матур.*

*Айһылыу Йәғәфәрова*

## ДУҪЛЫҠ МЕНӘН ШАЯРМАЙҘАР

*(Әкиәт)*

Ҡыҫҡағойроҡ исемле ҡуян балаһы йәшәгән. Әсәһе һәр ваҡыт уға: «Әгәр берәйһе менән дуҫлашһаң, дуҫыңдың ҡәҙерен бел», — ти икән. Ҡыҫҡағойроҡ шарҡылдап көлгән. «Ә ниңә мин, әйҙә, ул да минең ҡәҙеремде белһен», — ти икән.

Бер ваҡыт урман һуҡмағында уға терпе осраған. Ҡыҫҡағойроҡ уға:

— Терпе, әйҙә дуҫ булайыҡ! — тигән.

— Әйҙә, — тип ризалашҡан терпе.

Улар бергә уйнарға, бергә эш эшләргә, ҡурҡыныс ваҡытта бер-береһен яҡларға һүҙ ҡуйышып, дуҫлашып киткәндәр, ти. Терпе бик күңелсәк, эшсән булған, ти.

Бына ҡуян балаһы уны һынап ҡарарға булған. Терпе өсөн тәрән, ләкин үҙе һикереп сығырлыҡ соҡор эсенә төшкән дә ҡысҡырып ебәргән:

— Терпе дуҫ, соҡорға ҡоланым, ҡотҡар!

— Хәҙер, хәҙер, — тип ашығып килеп еткән терпе. Ул, оҙон таяҡ табып, бер осон дуҫына һуҙған. — Нығыраҡ тотон, тартам!..

Ҡуян балаһы, уның тырышыуын күреп, юрамал йә таяғын ҡулынан ысҡындырып ебәрә, ти, йә аяғын соҡорға терәп, менә алмаған булып ҡылана, ти. Терпе, быны күрһә лә, өндәшмәгән, көс-хәл менән ҡуянды тартып сығарған.

Ҡуян балаһы бер нисә тапҡыр баш түбән тәкмәсләгән дә баяғы соҡор аша һикерергә тотонған.

— Мин һине һынап ҡараным. Ҡәҙеремде беләһең икән. Бына был ысын дуҫ!

Маҡтау һүҙен ишетһә лә, терпе ҡыуанмаған, ҡуяндың үҙенә ышанмауына күңелһеҙләнгән.

Ә Ҡыҫҡаҡойроҡҡа был хәл ҡыҙыҡ тойолған. Бер көндө аҡланда бәшмәк йыйып йөрөгән терпе янына йүгереп килгән дә:

— Терпе дуҫ, ҡотҡар, төлкө баҫтыра! — тип ҡысҡырып ебәргән.

Терпе ышанған, энәләрен тырпайтып, һөжүмгә әҙерләнгән. Тик көткән төлкө күренмәгән. Ҡуян рәхәтләнеп көлгән дә көлгән. Дуҫын тағын маҡтаған.

— Минең өсөн үлергә лә әҙерһең икән. Бик яҡшы, — тигән тағы ла.

Терпе шатланмаған. Ҡуяндың быңдай ҡыланышы оҡшамаған уға.

Бер ваҡыт Ҡыҫҡаҡойроҡ тағы шаяртырға булған дуҫын. Терпенең һыуҙан ҡурҡҡанын белеп алған. Һынырға яткан ағасты йылға аша баҫма итеп һалған да үҙе алдан йүгергән, баҫма һынып, шатыр-шотор һыуға ҡолап та төшкән.

— Баттым!.. Үләм!..

Терпе бата-сума, һыуға сәсәй-сәсәй, уны саҡ һөйрәп сығарған. Ташҡа һыҙырылып, Ҡыҫҡағойроҡтоң табаны ҡанап киткән. Быны күреп, ҡуян балаһы:

— Был яра һинең арҡала булды. Һине һынайым тип, шул хәлгә ҡалдым! — тип илап ебәргән.

Терпе өндәшмәй генә уны өйөнә оҙатып ҡуйған да башҡаса ҡуян эргәһенә килмәгән. Ҡыҫҡағойроҡ уны бик оҙаҡ көткән, ләкин терпе күренмәгән. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар шул...

1. Текстан таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөп, уларҙы руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Һеҙҙеңсә, кем ысын дуҫ — Ҡыҫҡағойроҡмо әллә терпеме? Ҡуян балаһының ҡыланышына баһа бирегеҙ.
3. Автор үҙенең был әҫәрен ни өсөн *әкиәт* тип атаған? Һеҙ унда әкиәткә хас ниндәй үҙенсәлектәр күрҙегеҙ? Миҫалдар килтереп, фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.
4. Тексты өлөштәргә бүлеп, уларға исем бирегеҙ.
5. Текстың йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән русса әкиәт итеп һөйләгеҙ.
6. Әкиәтте сәхнәләштерегеҙ.
7. Һуңғы абзацты хәтерҙән яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен уҡып, баһа бирегеҙ. Әкиәткә иллюстрация төшөрөгөҙ.

**46-сы күнегеү.** 40-сы күнегеүҙәге ҡатын-ҡыҙ исемдәрен русса яҙыу варианттары.

Сөмбөл — Сюмбюль, Сюмбель; Ләйсән — Ляйсян, Лэйсян; Гәүһәр — Гаухар, Гаухяр; Зөләйха — Зюлейха, Зюляйха.

**47-се күнегеү.** [*Э*], [*а*], [*о*], [*ы*] өндәренә баҫым төшкән русса һигеҙ һүҙ һәм [*э*], [*а*], [*о*], [*ы*] өндәренән башланған башҡортса һигеҙ һүҙ яҙығыҙ. Әйтелешендәге айырмаға иғтибар итегеҙ.

Өлгө: *Тема, ...*
*Эшсе, ...*

**48-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап биреү рәүешендә бер-берегеҙ менән һөйләшегеҙ.

1. Һин кисә ҡайҙа барҙың?
2. Һин кисә кемдәр менән осраштың?
3. Йәкшәмбе көнө һеҙ ҡайҙа бараһығыҙ?
4. Көҙгө каникулда һин ҡайҙа барасаҡһың?
5. Апайың иртәгә ҡайҙа бара?

Башҡорт телендә [ў] өнөнөң айырым ғына хәрефе юҡ. Был тартынҡы өн һүҙ башында **в** хәрефе менән бирелә: *ваҡиға, вәғәҙә*. Һүҙ уртаһында һәм аҙағында ҡалын һүҙҙәрҙә **у** хәрефе, ә нәҙек һүҙҙәрҙә **ү** хәрефе менән бирелә: *ауыу, әүрәү*.

*Файыҡ Мөхәмәтйәнов*

## ҠЫҘЫҠ ҺҮҘ

Ямғыр яуа башлағас,
Әсәй әйтте ҡыҙыҡ һүҙ.
Уның һүҙен ишеткәс,
Шарҙай булды минең күҙ.

«Тышта, — ти, — ямғыр түгел,
Һибелә, улым, ҡалас!»
Ҡалас һибелә тиме,
Шыбырлап ямғыр яуғас?!

**1.** Әсәнең әйткән һүҙҙәрен һеҙ нисек аңлайһығыҙ?
**2.** *Шарҙай булды минең күҙ* тигән һөйләмде русаға тәржемә итегеҙ. Башҡортса һәм русса уны икенсе һүҙҙәр менән нисек әйтергә була? Шуны дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ.
**3.** Ямғыр *шыбырлап яуа*, ти шағир. Ямғырҙың тағы нисек яуыуы мөмкин, һанап сығығыҙ.
**4.** «Ҡалас ҡайҙа үҫә?» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.

**49-сы күнегеү.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

Дауыл, ҡыуыу, Ватан, януар, ауыу, ваҡыт, һауыу, Вафа, мауығыу, рәүеш, ҡауын, ватыҡ, күгәүен, валсыҡ, һауа, дауа, Әнүәр, һауыт, ваҡ, дарыу.

*Фәрит Иҫәнғолов*

# ЙЫЛМАЙЫУ

*(Әкиәт)*

## I

Ҡасандыр булған, ти, бик ҙур зиһенле бер йәш егет. Күп уҡыған, ти, ул. Ахырҙа, бар булған ғилемдәрҙең сигенә сыҡтым, донъяның бөтә серҙәрен белдем инде, тигән уйға килгән дә, күңеле хушланып, түшәккә менгән дә ятҡан, ти, был. Уның бар эше, күҙен йомоп, берәйһен онотманыммы икән, тип, алған белемен барлап, салҡан төшөп ятыу икән. Тороп йөрөһәм, үҙем белгән донъя серҙәренең берәйһе иҫемдән сығып китер, тип шикләнгән. Белемен ул кешеләрҙән йәшерер булған. Йәнәһе, берәйһенә һөйләһә, ҙур көс түгеп алған ғилеме кәмеп ҡуйыуы бар.

Ята, ти, был Аҡыл эйәһе һәм, донъяның мин белмәгән тағы ниндәй сере ҡалды икән, тип уйлана, ти. Айҙар, йылдар буйы уйлана торғас, ул үҙенең бер сергә төшөнә алмағанын аңлаған. Ул да булһа, уның үҙендә булған бер кәмселектең сере икән. Ләкин, йәнә нисәмә айҙар, нисәмә йылдар уйланһа ла, бының серенә төшөнә алмай күҙе тонған, ти.

Күпме ятҡандыр шулай Аҡыл эйәһе. Бер заман уның эргәһенән йөҙйәшәр Ил ҡарты үтеп бара икән.

— Иҫән генә йәшәйһеңме, оло Аҡыл эйәһе! — тип сәләм биргән ул.

— Юлыңда бул! Ҡамасаулама! — тип икенсе яғына әйләнеп ятҡан Аҡыл эйәһе.

— Ҡиәфәтең бик хәсрәтле күренә. Бәлки, һиңә берәй ярҙам кәрәктер? — тип һүҙ ҡушҡан уға Ил ҡарты.

— Хәсрәтем ҙур, тик уға һин түгел, Аҡыл эйәһе башым менән үҙем дә төшөнә алмайым әле.

— Бер аҡыл — һәйбәт, ике аҡыл унан да һәйбәтерәк, тигән боронғолар. Әйт, бәлки, берәй файҙам тейер.

Аҡыл эйәһе, маһайыуын еңеп, уға үҙе төшөнә алмаған серҙең асылын һөйләп бирергә мәжбүр булған.

— Эй, ололарҙың-олоһо, хөрмәтлеләрҙең-хөрмәтлеһе, ил олатаһы! Мин бар булған ғилемдәргә эйәмен, донъяның бөтә серҙәрен беләм. Хатта ҡош-ҡорттарҙың, хайуандарҙың да телен аңлайым. Тик, күпме генә аҡыл көсө түкһәм дә, бер сергә төшөнә алмай ыҙа сигәм. Бөтә кеше уйнай, көлә, йылмая, тормоштан, донъянан йәм таба, тәм таба. Ә мин, ни тиклем генә көсәнһәм дә, йылмая ла, көлә лә алмайым. Бала сағымда шат күңелле инем. Белемдәрҙең сигенә сығыуым булды — йылмайыуымды юғалттым. Бөтә донъя күңелһеҙ күренә миңә, — тип, һап-һау булһа ла, сирле кеше һымаҡ хәсрәтле итеп сырайын һытҡан Аҡыл эйәһе. — Исмаһам, бер минут ҡына күңелем күтәренке булһасы! Тәбиғәт миңә бөтә нәмәне биргән — аҡылды, зиһенде йәлләмәгән, тик йылмайыу бәхетен генә ҡыҙғанған — кире тартып алған. Ах, ни ҡылайым, ил олатаһы?! — тип өҫтәгән ул, күҙҙәренән йылға-йылға йәштәр ағыҙып.

— Һиңә йылмайыуыңды кире ҡайтарырға мөмкин, — тигән йөҙйәшәр Ил ҡарты, бер аҙ уйланып торғас. — Тик һин мин ҡушҡандың барыһын да еренә еткереп үтәргә һүҙ бир.

Аҡыл эйәһе, бик үк ышанып етмәһә лә, теләр-теләмәҫ кенә һүҙ биргән.

— Тор урыныңдан, эйҙә минең арттан. Йылмайыуыңдың юғалған еренә алып барам. Һин уны шунда табырһың, — тигән, ти.

Аҡыл эйәһе, йөҙөн һытып, ыңғыраша-ыңғыраша урынынан торған, тәнтерәкләй-тәнтерәкләй ҡарт артынан эйәргән.

Аҡыл эйәһен ҡарт текә ярлы кескәй генә йылға буйына алып килгән дә:

— Бына һиңә балта, бына һиңә көрәк. Ошо йылғаны бер тәүлек эсендә яҡшы итеп быу, — тигән, ти.

Ни тиклем генә иренһә лә, ҡулы бер ҙә генә бармаһа ла, был йылғаны быуыуҙан йылмайыу ҡеүәһен кире ҡайтарыуына һис кенә өмөтө булмаһа ла, һыҙлана-һыҙлана эшкә тотонорға мәжбүр булған, ти, Аҡыл эйәһе.

1. Текстан таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Улар менән һөйләмдәр төҙөп, руссаға тәржемә итегеҙ.
2. *Йылға-йылға, ыңғыраша-ыңғыраша, тәнтерәкләй-тәнтерәкләй, һыҙлана-һыҙлана* һүҙҙәре булған һөйләмдәрҙе табып уҡығыҙ, был һүҙҙәрҙең ни өсөн икешәр тапҡыр ҡабатланып ҡулланылыуын төшөнөгөҙ.
3. Аҡыл эйәһе ни өсөн белемен кешеләрҙән йәшергән? Аҡыл, белем бүлешкән һайын арта, ти бит халыҡ. Һеҙҙеңсә, тағы нимәләр бүлешкәндән арта? Ә нимәләр кәмей? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ. Атай-әсәйҙәрегеҙҙән, ололарҙан һорашып, уларҙың да фекерҙәрен файҙаланығыҙ.

## II

Йылғаны быуыу бик ауыр булған уға. Уның ҡара тирҙәре аҡҡан, күҙҙәре тонған, хәле бөткән. Ләкин Ил ҡарты уға эштән туҡтарға ирек бирмәгән.

Көн үткән, төн үткән, таң ата башлағанда ғына, Аҡыл эйәһенең аҡтыҡҡы көсө сыҡты тигәндә генә, быуа әҙер булған. Уға һыу йыйыла башлаған.

Тамам хәлдән тайған Аҡыл эйәһе. Өйөнә лә ҡайтып етә алмаған, хәлһеҙләнеп, яр башына ауған һәм:

— Йә инде, был быуанан ни хикмәт сығыр икән? — тип уйлай-уйлай тәрән йоҡоға талған, ти.

Ул, ниндәйҙер бер тауышҡа тертләп уянып, урынынан һикереп торған. Баҡһаң, йылғаға табан бер көтөү мал баҡырышып төшөп килә икән. Һәр төрлө хайуандарҙың телен белгәс ни, Аҡыл эйәһе шунда уҡ уларҙың мөңрәшеүенә ҡолаҡ һалған.

— Һыу! Һыу! Һыуһаныҡ!

— Һыу бар ҙа, яры текә! — тип зарланышып киләләр икән малдар.

Ҡапыл улар быуаны күрәләр. Һыу ярҙың ситенә үк күтәрелгән. Улар, шатланышып, рәхәтләнеп һыу эсә башлайҙар.

Аҡыл эйәһе, ҡанаттар һыҙғырыуын ишетеп, күккә ҡарай. Тип-тигеҙ өскөл булып теҙелеп, ҡыр ҡаҙҙары көньяҡҡа осоп бара.

— Һыу! Һыу! Һыу кәрәк!

— Ял итеп китергә иркен, тәрән һыу кәрәк! — тип үтенәләр арттанырак килгән бала ҡаҙҙар.

— Һыу бар ҙа, бик тар!

— Яр аҫтында бик һай! — тип зарланалар алданыраҡ килгән олораҡ ҡаҙҙар.

— Һыу! Һыу! Ғәжәп хәл! Аҙ ине — күбәйгән! Тар ине — киңәйгән! — тип һөйөнөслө хәбәр бирә иң алдан килгән ҡаҙ.

Ҡаҙҙар быуаға килеп төшә. Улар талған ҡанаттарын яҙырға, уйнарға, сумырға, ҡойоноrға тотона.

— Рәхмәт инде был быуаны быуыусыға! — тип ҡаңғылдаша улар.

Малдар, туйғансы һыу эсеп:

— Рәхмәт инде был быуаны быуыусыға! — тип мөңрәшеп, туғайға таралышалар.

Балалар, иртүк һыу инергә килеп, бер-береһенә һыу һибешә-һибешә:

— Рәхмәт инде был быуаны быуыусыға! — тиҙәр. Быларҙың барыһын да ишетеп тороусы Аҡыл эйәһенең күңеленә сикһеҙ рәхәт булып китә. Донъя матурланып, яҡтырып киткәндәй була. Һәм, үҙе лә һиҙмәҫтән, йылмайып ебәрә. Бөтә арығандары онотола. Ысын көсөн түгеп быуғас, шат тауыштарҙы ишеткән һайын кинәнеп йылмая. Өҙлөкһөҙ йылмая! Ниндәй рәхәт икән ул йылмайыу!

Аҡыл эйәһе йөҙйәшәр Ил ҡартынан:

— Йә, хөрмәтле ил олатаһы, хәҙер мин һәр ваҡыт ошолай йылмайып ҡына йәшәрменме икән? — тип һорай.

— Эйе, — тигән, ти, Ил ҡарты, — әгәр бөгөнгө эшең шикелле гел файҙалы эш эшләһәң, белгән ғилемдәреңде халыҡҡа таратһаң, йылмайып ҡына йәшәрһең.

1. Һеҙҙең шулай, Аҡыл эйәһе кеүек, рәхәтләнеп йылмайырлыҡ эш эшләгәнегеҙ бармы? Иҫегеҙгә төшөрөп, шул турала һөйләгеҙ.
2. Нимә ул — *донъянан йәм, тәм табыу*? Хикәйәнең йөкмәткеһенән сығып, ошо турала әңгәмә ойоштороғоҙ.

**3.** Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.
**4.** Аҡыл эйәһе йылмайыуын ҡайҙа юғалтҡан?
**5.** Аҡыл эйәһенең образына характеристика бирегеҙ. Үҙегеҙ күҙаллағанса, уның һүрәтен төшөрөгөҙ.
**6.** «Йылмайып йәшәүҙең сере нимәлә?» тигән темаға проект эше төҙөгөҙ.

**50-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе башҡортсаға тәржемә итегеҙ.

1. Липа, дуб, лиственница, клён, ольха.
2. Крапива, лопух, репей, полынь, душица.
3. Волк, рысь, лиса, норка, выдра.

**51-се күнегеү.** Хаталарҙы төҙәтегеҙ һәм аңлатығыҙ.

Ҡуйан, ҡойаш, беек, йөҙөроҡ, көняк, йегерме, Наиль, Ильдар, Ильһам, Раиль, киля, барып киль, йуғары, югерә.

*Рәми Ғарипов*

## АЛМА

Ҡояш нуры, ерҙең һуты,
Кеше тире — был алма.
Шуға нурлы, шуға һутлы,
Шуға эре был алма.

Ҡояш һымаҡ, тынғы
белмәй,
Ерем, тиеп, янмаһаң,
Ерем, тиеп, янып-көйөп,
Ҡара тирең таммаһа —

Кеше эшенең емешен
Ҡулдарыңа һин алма,
Йәмен бирмәҫ, тәмен
бирмәҫ,
Харам булыр был алма.

1. Ни өсөн шағир алманы *ҡояш нуры, ерҙең һуты, кеше тире* тип атай?
2. *Ҡара тир* тигән һүҙбәйләнештә *ҡара* һүҙе тирҙең төҫөн белдерәме? Тир аҡ, ҡара, ҡыҙыл йәки башҡа төҫтә буламы?
3. Һуңғы строфаның 2-се һәм 4-се юлдарындағы *алма* һүҙен руссаға тәржемә итегеҙ.
4. Шағир кешеләрҙе нисек йәшәргә саҡыра? Һеҙ уның менән ризамы?
5. Шиғырҙың 2-се һәм 3-сө строфаларын ятлағыҙ.

**52-се күнегеү.** Нәҙек һуҙынҡылар урынына ҡалын һуҙынҡылар ҡуйып, һүҙҙәрҙе үҙгәртегеҙ.

Әкрен, мәктәп, төрөп, генә, әсе, күнәк, көймә.

1. Тартынҡылар үҙгәрҙеме?
2. Ниндәй тартынҡылар үҙгәрҙе?
3. Бөтә осраҡта ла яңы һүҙ яһалдымы?

**53-сө күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| йондоҙ | яуыз | яҙыу | риза |
| ауыҙ | совхоз | биҙрә | кәзә |
| осһоҙ | образ | күҙгө | музыка |
| кейеҙ | анализ | таҙа | изге |

*Ғәлим Хисамов*

## АҠЪЯУРЫН САЛ БӨРКӨТ

### I

Ҡояштың тәүге нурҙары тау башына ҡағылыу менән, ҡаяның эскәрәк инеп торған тупһаһынан ике бөркөт бер-бер артлы күккә күтәрелде. Улар яҡын-тирәлә оҙаҡ өйөрөлмәне, бер-ике әйләнделәр ҙә ҡояш байышы яғына китеп юғалдылар.

Шул уҡ ваҡытта ҡаяның ағын һыуҙар тәрән итеп ярып төшкән бер һыҙығында, ниндәйҙер мөғжизә менән үҫкән ҡарағай төбөндә, ике нөктә ҡуҙғалды. Тәүҙә улар,

томан араһында булғанлыҡтан, әкиәттәрҙә һөйләнә торған сихырлы таштарҙың ҡыймылдауын хәтерләтте. Аҙым һайын ҡояш нурҙары нығыраҡ яҡтыртты. Инде хәҙер алыҫтан ҡарағанда ла был ике нөктәнең кешеләр икәнлегенә шикләнмәҫкә мөмкин ине.

— Тарғын, тим, Тарғын, — арттан килгәне алдағыһына өндәште, — бөркөттәр бигерәк ҙур бит.

Тарғындың күҙендә асыу осҡондары ялтыраны. Ләкин ул юлдашын әрләп ташлауҙан тыйылды. Киреһенсә, тауышын йомшартып:

— Ҡайҙан ҙур булһын, ти. Йәш бит әле улар. Быйыл тәүгә оя ҡорҙолар, тим бит.

— Ай-һай, алып булырмы икән?.. — Арттағыһы һаман шикләнде. Тарғын туҡтаны. Икеләнгән кеше менән бөркөт һунарына барып булмай.

— Аҡколай! Батыр кеше бит һин. Әллә бала йөнө лә ҡойолмаған ҡоштан ҡурҡтыңмы? — Тарғын юлдашын сәмләндерҙе. — Ә быларҙы алһаҡ, — ул ҡая яғына ымланы, — яҡшы табыш буласаҡ бит. Үҙебеҙгә атаһы менән инәһен ҡалдырһаҡ, балаларын кәмендә берәр атҡа алмаштырасаҡбыҙ.

«Ат» һүҙен ишеткәс, Аҡколай дәртләнеп китте. Ул инде үҙенә ат булдырыу тураһында күптән хыяллана, тик әлегә бер йолҡош тайы ла юҡ.

— Әйҙә! — Ул тәүәккәл ҡуҙғалды. — Ҡояш күтәрелә бит.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп, Тарғын ҡәнәғәт йылмайҙы. Улар бая ғына бөркөттәр осоп киткән ҡаяға табан йүнәлделәр.

Тарғын менән Аҡколай ҡаялағы кескәй тупһаға саҡ-саҡ күтәрелде. Бөркөттәр үҙҙәренең ояһын януарҙар яҡын килә алмаҫтай урынға ҡорғайны. Аҫта — упҡын, өҫтә — текә ҡая, ике яҡтан — шыма таштар. Ҡая тупһаһында, сыбыҡ-сабыҡтан яһалған ояла, бөркөт балалары ята. Өс килбәтһеҙ ҡош бер-береһенә һыйынып йоҡлай. Улар ҙур ғына инде, тик ҡанаттары ҡаҙ себешенеке кеүек ҡыҫҡа ғына әлегә.

Тарғын тупһаға менде. Бөркөт балалары уянды. Аталары ҡайтҡан, тип белделәр шикелле, сипелдәшеп, ауыҙҙарын ҙур асып, ашарға эҙләнеләр. Тарғын тиҙ генә биленән бау сисеп алды ла себештәрҙең береһен, оянан йолҡоп алып, аяҡтарынан бәйләне.

Бөркөт балаһы ҡыҫҡа ғына ҡанаттарын ҡаҡҡан булды, туҡтауһыҙ сипелдәне. Ләкин Тарғын быға артыҡ иғтибар итмәне, себеште бау менән ҡая буйлатып аҫҡа төшөрә башланы.

— Аҡҡолай, тот. Тиҙерәк тоҡҡа һал да бауҙы ебәр.

Аҡҡолай ул әйткәнсә эшләне. Тарғын икенсе, өсөнсө ҡош балаһын да шулай аҫҡа төшөрҙө. Уның күҙҙәре яна, үҙе ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй ине.

— Булды бит, — тине ул шатланып.

Ҡош балалары менән эште бөтөргәс, Тарғын тағы ҡабаландыра башланы:

— Тиҙерәк булайыҡ, тиҙерәк. Хәҙер ололары ҡайтып етер. Өлгөрмәһәк, бөттө баш.

Йәһәтләп силек әлделәр. Эре-эре итеп ныҡ ептән үрелгән селтәр ине ул. Силектең ике мөйөшөн ағас сөй менән ергә ҡаҡтылар. Ҡойроғон һөйрәтеп һалып, уның осон да сөй менән ҡая ярығына беркеттеләр. Аҡҡолай һүҙһеҙ генә Тарғын әйткәндәрҙе эшләй бирҙе. Тегенеһе иһә үҙ алдына һөйләнде лә һөйләнде. Тәүҙә силекте маҡтаны. Ҡыш буйына үҙе ултырып үргән икән. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, силек бик һәйбәт булырға тейеш ине.

Силек ҡоролоп бөттө. Оҙон бауҙы кәкре ҡарағайҙың ботағы аша тарттылар. Тарғын ағас төбөнә боҫто. Аҡҡолай тоҡтан бер бөркөт балаһын алып, силектең ҡойроғо янына баҫты. Бөтәһе лә әҙер. Оло бөркөттәрҙең ҡайтҡанын көтөргә генә ҡалды.

Оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Күп тә үтмәй, тарлауыҡ өҫтөндә бөркөт күренде. Аҡҡолайҙың йөрәге жыу итеп ҡалды. Тырнаҡтары менән ниҙер эләктергәйне ҡош батшаһы.

— Килә! — тип ҡысҡырҙы Аҡҡолай.

— Себештең һыңар аяғынан тотоп күтәр! — тип яуапланы Тарғын. Бөркөттө, аҫта торһа ла, ул да шәйләргә өлгөргәйне.

Аҡҡолайҙың ҡулында һыңар аяғынан аҫылынып торған бөркөт балаһы, ҡыҫҡа ғына ҡанаттарын туҡтауһыҙ елпеп, йән көсөнә ҡысҡырырға тотондо. Кешеләрҙең береһе лә уға әйләнеп тә ҡараманы — уларҙың бөтә иғтибары һауалағы ҡошта ине.

Бөркөт яманлыҡты шунда уҡ тойҙо. Үткер күҙе бәләгә эләккән балаһын күрҙе. Ҡош батшаһы тырнаҡтарына эләктергән табышын төшөрөп ебәрҙе лә себешен язалаусыға һөжүмгә әҙерләнде. Бөркөт, түңәрәк яһап, юғарыраҡ күтәрелде һәм, ҡанаттарын йыйып, түбәнгә шыҡыйҙы.

Һауанан күҙен алмаған Аҡҡолайҙың йөрәген ҡурҡыу алды. Таш кеүек атылған бөркөт килеп бәрелһә, ҡаянан осорасағы көн кеүек асыҡ ине. Тарғын да яҡшы белә быны. Шуға ла, силектең бауын тартырға һинең оҫталығың етмәҫ, тигән булып, үҙе аҫта, ағас төбөндә, тороп ҡалды бит инде ул. Әле ул күҙен дә йоммай бөркөттө күҙәтә, ҡулдары менән силек бауына сытырлатып йәбешкән.

Шыҡыйған бөркөт күҙ алдында үҫте, Аҡҡолайға яҡыная барған һайын, бөркөт тә ҙурая, ҡурҡынысыраҡ була барҙы. Аҡҡолай күҙен йомдо — ни булһа ла булыр...

Ләкин ул күҙен асҡанда, әле генә ҡаршыһына атылып осоп килгән ҡош юҡ ине инде. Бөркөт Аҡҡолайға бәреләм генә тигәндә, Тарғын силек бауын тартты, һәм кеше менән бөркөт араһында селтәр күтәрелде. Быны көтмәгән бөркөт силеккә бәрелде, ҡанаттарын ҡағып тулаған һайын, селтәргә нығыраҡ урала барҙы. Тарғын шунда уҡ силеккә ташланды. «Эләкте!» — тип шатланып ҡысҡырып ебәрҙе ул.

Тарғын ҡабаланды. Был бөркөттө йыйыштырып, икенсеһен ҡаршыларға әҙерләнергә кәрәк бит. Оҙаҡлабыраҡ та киттеләр шикелле. Силекте яңынан ҡороп өлгөрмәнеләр, тарлауыҡ өҫтөнә икенсе бөркөт килеп сыҡты. Ерҙәгеләр уны ваҡытында шәйләмәйерәк ҡалды. Ә бөркөт уларҙы шунда уҡ күрҙе. Аҡҡолайҙың ҡулында һаман сипелдәгән, инде ҡанаттарын һирәгерәк

елпегән себештең үҙенеке икәнен дә тиҙ таныны бөркөт һәм һөжүмгә әҙерләнде. Беренсеһе кеүек, ул да, түңәрәк яһап, өҫкә күтәрелде лә аҫҡа шыҡыйҙы.

Аҡколай, нимәлер һиҙенеп, күккә ҡарағанда, һуң ине инде. Уҡ кеүек атылған бөркөт кешенең өҫтөндә ине. Аҡколай ялтанырға ла өлгөрмәй ҡалды. Ул: «Бөркөт!» — тип ҡысҡырып, ситкә һикерәйем генә тигәндә, күкрәгенә ҡош батшаһы килеп бәрелде.

Тарғын әйләнеп ҡарағанда, Аҡколай урынында юҡ, ә кешегә бәрелгән ыңғайҙа ситкәрәк ҡаҡлығып барып төшкән ҡош, ҙур ҡанаттарын шапылдатып, яңынан һауаға күтәрелеп бара ине.

Икенсе һөжүм Тарғынға буласаҡ. Ҡош, һауаға күтәрелеп, уға ташланырға әҙерләнгәнсе, Тарғын эргәләге кәкре ағас башына менергә өлгөрҙө. Күпме генә эҙләһә лә, бөркөт уны күрә алманы һәм, ерҙә бәләкәй генә ҡанаттарын ҡаҡҡылап, сипелдәп ятҡан балаһын һаҡ ҡына эләктереп, ояһына осто. Ояһында күп ултырманы ата бөркөт, тағы күккә күтәрелде. Йәнә ике себеш юҡ бит әле. Ҡош батшаһы ҡая өҫтөндә оҙаҡ өйөрөлдө, ерҙә ҡыбырлаған һәр нәмәгә иғтибар итте, әммә балаларын күрә алманы. Саңҡылдап, күпме генә тауыш бирмәһен, иптәше инә бөркөт тә, себештәр ҙә яуапламаны. Ләкин ҡош өмөтөн өҙмәне, эҙләне лә эҙләне...

## II

Тарғын ағас башынан ҡараңғыланғас ҡына төштө. Көндөҙ бөркөттән ҡурҡты. Ерҙә туҙышып ятҡан нәмәләрен унан-бынан йыйып алды ла ҡайтыу яғына ыңғайланы. Инә бөркөт тә, балалары ла имен ине. Тарғындың эсенә йылы йүгерҙе. «Көнө буйы ағас башында ултырһам ултырҙым, әммә табышһыҙ булманым», — тип уйланы. Алан-йолан ҡаранып, ҡараңғыла Аҡколайҙы эҙләгән булды. Быны ул юлдашын табыу өсөн түгел, кешеләр алдында, таба алманым, тип әйтер өсөн генә эшләне. Өйөнә ул арып-талып, асығып, хәлдән тайып ҡайтып йығылды.

Аҡколай ҡаянан ныҡ ҡолағайны. Бөркөттөң ҡапыл һөжүмен көтмәгәнгә, бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ күрһәтә алманы. Ярай әле ҡаянан осҡан саҡта салғыйы, ташҡамы-нимәгә эләгеп, таш кеүек атылып төшөп китеүҙән һаҡлап алып ҡалды. Салғый йыртылып китте, әммә Аҡколай башы менән ташҡа бәрелмәй ҡалды. Бик оҙаҡ ятҡандан һуң ғына, ул шыуышып түбәнгә — шишмә буйына төшә алды. Уның бер аяғы ныҡ йәрәхәтләнгәйне. Яраһын һыуҙа йыуып, күлдәген йыртып бәйләгәс, таяҡҡа таянып, аҡрын ғына ҡайтыу яғына ыңғайланы...

Ҡаянан осҡан Аҡколайҙың ниндәйҙер мөғжизә менән иҫән ҡалыуын ишеткән Тарғын ах та ух итеп килеп етте.

— Имен икәнһең. Мин бик ҡурҡҡайным. Аяғың йүнәлер. Ямауы янында, — тип һөйләнде ул. — Ә мин, көнө буйы табышты һаҡлап, бөркөттөң киткәнен көтөп ултырҙым. Юҡ, китмәй, өйөрөлөп тик йөрөй... Ә һине мин бик оҙаҡ эҙләнем. Тик ҡараңғы төштө... Хәлем дә бөткәйне... — тип оҙаҡ һөйләнде Тарғын. Үҙе эстән генә Аҡколайҙың иҫән ҡалыуына бошондо. Хәҙер табышты бүлешергә тура килә бит инде. Аҡколай үлгән булһа, өс бөркөт тә уға ҡалыр ине. Ниндәй бөркөт бит әле — аҡъяурын сал бөркөт! Ҡош батшалары араһында иң дан алған тоҡом...

— Мин һиңә бер себеште бирәм. Шулай тейеш, — тине Тарғын. Аҡколай бер ни ҙә өндәшмәне. Донъя малы бүлешеү ҡайғыһы юҡ ине унда.

Ләкин шул себеш Аҡколайҙа йәшәү сәмен уятты, тиҙерәк һауығырға ярҙамлашты. Бөркөт балаһын үҙ янына һалып ятты кеше. Береһе оса алмай, икенсеһе атлай алмай. Көндәр буйы үҙ-ара ҡарашып ятты улар.

Аҡколай менән бөркөт балаһы ошолай көн артынан көн үткәрҙе. Ҡош балаһы кешегә эйәләште.

Аҡъяурын сал бөркөттөң саңҡылдай-саңҡылдай ауыл өҫтөнә килеп сығыуына һәм, шул тирәлә бик оҙаҡ осоп йөрөгәндән һуң, алыҫтағы тау яғына китеп юғалыуына тәүҙәрәк иғтибар итеүсе булманы. Тик шул уҡ

күренеш көн дә ҡабатлана башлағас, Тарғын да, Аҡколай ҙа, ауылдың башҡа кешеләре лә быны серенә төшөндөләр. Ата бөркөт ғәйеп булған иптәше менән балаларын эҙләй ине. Үтә ҡайғылы, бик тә ҡыҙғаныс ине ҡош батшаһының саңҡылдауы.

Тарғын инә бөркөттө лапаҫта ситлек эсендә тота ине. Уға көнөнә бер тапҡыр сей ит киҫәге сығарып бирә лә — шуның менән бөттө. Күккә, бейеклеккә өйрәнгән ғорур ҡош ҡараңғы һарай, ҡанлы ит киҫәге менән мөрхәтһенә буламы ни?! Асығыуы еткәнгә генә, итте бер-ике суҡый ҙа ҡояш нурҙары төшкән еккә ҡарай. Шул ектең аръяғында ғына ла бит азатлыҡ, сығып булмай шул. Исемең ҡош батшаһы булһа ла, бында һин көсһөҙ.

Быны күреп, инә бөркөттө Аҡколай бик йәлләне.

— Тарғын, ебәр инә бөркөттө. Үҙемдең себеште бирәм һиңә, ебәр, — тип инәлде ул.

Ләкин Тарғынды күндереү мөмкин түгел ине.

— Себеште, тиһеңме?.. Юҡ инде, тирә-яҡҡа хәбәр иткәнмен. Бөгөн-иртәгә алмашыусылар киләсәк. Инә бөркөттө айғырға алмаштырам мин, белдеңме? Бармы айғырың, әйҙә, килтер. Унан бөркөттө күккә осорорһоң! — тип кенә ебәрҙе ул.

Тик Тарғын менән алыш-биреш итергә теләүселәр күренмәне. Кемдер берәү әйтеп кенә ебәргән: «Бала сығарған бөркөттө һунарға өйрәтеп булмай, кем алһын? Бына тырнаҡтары булһа, ярар ине дарыуға», — тигән.

Бөркөт тырнағынан дарыу яһап булғанлығын бөтәһе лә белә ине. Аҡъяурын сал бөркөттөң бында ла ныҡ баһаланғанлығы билдәле. Шуға ла Аҡколайҙың күңеленә шик төштө. Тарғын бөркөттө һәләк итеп ҡуймаһын! «Тәүәккәлләйем, — тип уйланы ул. — Бөгөн төндә Тарғындың лапаҫына инеп, ситлекте асам да бөркөттө сығарып ебәрәм...»

Ләкин һуңланы Аҡколай. Кис, ҡараңғы төшкәс, Аҡколай Тарғындың лапаҫын асып ингәндә, унда бөркөттөң ҡанаттары ғына эленеп тора ине инде...

1. Ни өсөн автор бөркөттө ҡош батшаһы тип атай? Бөркөт тураһында ҡыҫҡаса белешмә төҙөп яҙығыҙ.
2. Әҫәрҙә ваҡиғалар ҡайһы осорҙа бара? Һеҙ быны нимәгә ҡарап белдегеҙ? Миҫалдар килтерегеҙ.

## III

...Ауылда ике кеше ҡулында бер ояла тыуған ике бөркөт үҫте. Аҡколайҙың ҡошо уға шул тиклем күнекте, хатта унан бер тотам ҡалмаҫ булып китте, Аҡколай ҡайҙа ғына бармаһын, осоп, һикереп, артынан эйәрә лә йөрөй. Кешеләр уны «ҡанатлы көсөк» тип тә атап бөттөләр. Атаһы менән әсәһен алмаштырғанға, шул тиклем яҡын иткәндер инде ҡош кешене. Башҡалар бөркөттө ҡанатлы көсөк тиһә лә, Аҡколай уны, ҙурлап, яратып, Яубөркөт тип исем ҡушты.

Тарғын үҙенең бөркөтөнә Еҙтырнаҡ тип исем бирҙе. Уның уйынса, бөркөттөң тырнаҡтары үткер, ҡаты булырға, бер генә табышын да ысҡындырмаҫҡа тейеш. Тарғын ҡошон бәләкәйҙән ҡомһоҙ, аяу белмәҫ йыртҡыс итергә тырышты. Бөркөтөн, быға саҡлы берәү ҙә өйрәтмәгәнсә, күнектерергә булды ул. Көнөнә бер генә ашатты. Унда ла сей ит бирерҙән алда алдына ҡан түкте. Йәш ҡан еҫенән бөркөт балаһы тәүҙә ытырғанды, ҡанлы һауытҡа ташланған иткә лә теймәне. Ләкин аслыҡ үҙенекен итте. Ҡош ҡанлы итте ашаны. Һуңға табан, алдына ҡан ҡуйыу менән, бөркөт ярһырға, ҡанлы һауытты өҙгөләп ташламаҡсы булып суҡырға тотондо, ә итте тартҡылап-йыртҡылап, һоғаланып йотто. Ситтән ҡараһаң, уны ҡош батшаһы, ҡорбанын ашыҡмай ғына ашай торған бөркөт түгел, көтөүгә ташланып, тиҙерәк күберәк малды тамаҡларға тырышҡан бүре менән тиңләргә мөмкин ине.

Быға саҡлы бөркөт тотоп ҡарамаған Аҡколай, Яубөркөтөн өйрәткәндә, оҫта бөркөтсөләрҙең һүҙенән сыҡманы. Ҡошто һунарға күнектереүе уға башҡаларға ҡарағанда хатта еңелерәк тә булды. Бөркөттө себеш сағынан иркәләп үҫтереү уны ҡулға ҡундырыу мәшәҡәтенән, буйһондороуҙан бушатты. Ҡош кешене хәрәкәтенән дә аңлай, һүҙҙәрен дә тыңлай һымаҡ ине.

Бөркөт менән һунар итеү, ғәҙәттә, тәүге ҡар төшкәс башлана. Аҡ ҡар менән ҡапланған тауҙа һәм болонда ағаслыҡтан ҡыуып сығарылған төлкө йә бүре бик яҡшы күренә, уға һауалағы ҡоштан йәшеренер урын юҡ. Шул саҡта бөркөт уны тибә лә инде.

Ҡырпаҡ ҡар ергә ятҡас, бей ойоштороған бөркөт һунарында Аҡҡолай ҙа ҡатнашырға булды. Ошондай һунар йыл да үткәрелә ине был яҡта. Хәлле кешеләрҙең береһе һунарсыларҙы һыйлау, ҡунаҡ итеү мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөнә ала, иң оҫта һунарсыларға бүләктәр әҙерләй. Быйыл шул сығымдарҙы бей үҙ өҫтөнә алып, иң күп кейек аулаған бөркөт менән уның хужаһына бүләккә ат ҡуйғайны.

Һунарға бик күп кеше йыйылды. Бей һунарсылар тубы итеп Аҡҡолай менән Тарғындың ауылын һайлағайны. Аусыларҙан тыш та бик күп кеше килде бында. Һунарҙа табыш алыуҙан бигерәк, күҙгә байрамдарҙың береһе тип белә бит халыҡ бөркөт һунарын. Һөнәрселәр һөнәрен күрһәтәсәк, кемдер данға, кемдер яманға сығасаҡ, кешеләр күңел асып, егеттәр ҡыҙ күҙләп ҡайтасаҡ был йыйындан.

Аҡҡолайҙың ау биләмәһе Уҡйетмәҫ ҡаяһы тирәһендә ине. Ҡаҙанға оҡшабыраҡ торған ер. Битләүҙәре урман менән ҡапланған түңәрәк тау, уртала батмус һымаҡ асыҡ ялан. Өркөтөүселәргә кейекте шунда ҡыҫырыҡлап сығарырға кәрәк. Анһат түгел был. Тау түңәрәк, гел урман. Төлкө, бүре тауҙы өйрөлтөп ҡасып тик йөрөүе мөмкин.

Таң атҡанда, атҡа атланған, тире бейәләй кейгән, ҡулына бөркөтөн ҡундырған Аҡҡолай яланғас тау башында ине. Өркөтөүселәр, икегә бүленешеп, урманға инде. Күҙ күрерлек яҡтырғас, улар һай-һайлап ҡыуа ла башланылар. Ҡар йоҡа, тау түбәһенә еңел барыла. Урман кеше тауышы, ағас шаҡылдаҡтарҙың шатырлауы менән тулды.

Яубөркөт, муйынын һоноп, күҙҙәрен уйнатып, башынан ҡалпаҡты алғанды һәм «Һеү!» тип дәртләндереп сөйгәнде генә көтә. Уның көнө, уның һыналыу көнө

еткәнде тоямы, һунарсы дәрте уйнап киттеме — бөркөт уҡ булып атлығырға тора.

Сыҡты! Аҡколай ялан ситендә кейектең аҡ ҡарҙа юрғалауын күреп ҡалды. Ҡаршы урманға ынтыла. Януарҙы бөркөт тә шәйләне шикелле, талпынып ҡуйҙы. Аҡколай йәһәт кенә ҡоштоң башына ҡапланған ҡалпаҡты һыҙырып алды ла ҡулын өҫкә һелтәп ебәрҙе:

— Яубөркөтөм, һеү!

Бөркөткә дәртләндереү ҙә кәрәк түгел ине. Ул талпынып юғары күтәрелде һәм кейектең тап өҫтөнә барып сыҡты. Яубөркөт саҡ ҡына ситкәрәк тайпылып торҙо ла таш булып ергә ынтылды. Икенсе ҡарағанда аҡъяурын ҡар өҫтөнән сапҡан төлкөнө күкрәге менән бәреп йыҡты һәм, кейек яңынан аяғына баҫҡансы, уның янбашына ҡунып, тап морон өҫтөнән суҡып та алды.

— Яубөркөтөм минең, бөркөттәрҙең-бөркөтө! — тип шатланып ҡысҡырҙы Аҡколай. Кейек өркөтөүселәр килгәнсе, аҡъяурын, төлкөгә ҡыбырларға ла ирек бирмәйенсә, уны ергә ҡыҫып алғайны.

Аҡколайҙың шатлығының сиге булманы. Тәүге уңыштан дәртләнгән ҡыуыусылар, күңелләнеп, йәнә урманға инде. Ҡояш төшкөлөккә күтәрелгәнсе, Яубөркөт йәнә ике төлкө типте.

Тарғын һайлаған уйһыулыҡта ла һунар бик уңышлы башланғайны. Кистән ҡанға буталған ит ашағандан һуң ризыҡ ҡапмаған Еҙтырнаҡ, ныҡ ярһып, шул тиклем ҡаты ташланды төлкөгә, күктән һөжүм көтмәгән януар әллә нисә мәртәбә мәтәлләп барып төштө. Ҡыйғыр ҡош януарға тырнаҡтарын батырҙы ла бер суҡыуҙа төлкөнөң башын ҡутарып ташланы. Инде кинәнеп ашайым ғына тигәндә, хужаһы килеп етеп, табышын тартып алды. Аяҡтарын яңынан бәйләп тә ҡуйғас, бөркөттөң күҙҙәрен бөтөнләй ҡан баҫты. Тарғын иһә быға һөйөндө генә. «Ҡош ныҡ ярһыны, хәҙер кейектең берәһе артынан икенсеһен тибәсәк», — тип уйланы.

Тарғындың уйы хаҡ ине. Асыҡҡан бөркөт табышты яҡшыраҡ эҙләй, уға айбарланып ташлана. Тик көтөлмәгән хәл булды. Еҙтырнаҡты икенсегә һауаға сөйөрҙән элек Тарғын йылға буйындағы туғайлыҡта ниндәйҙер шәүләләр барлығын шәйләне. Ләкин уға иғтибар биреп торманы. Уның ҡарауы, күккә күтәрелгәс тә, Еҙтырнаҡтың күҙе уларға төштө. Аҡ ҡар менән ҡапланған яланда кейек эҙләп осҡан бөркөт туғай өҫтөнә килеп сыҡты һәм ерҙә нимәлер эшләгән кешеләрҙе күрҙе.

Төшкөлөккә ауылға ҡайтып тормаҫ өсөн, бей табынды һунар майҙанында ҡорорға ҡушҡайны. Уның хеҙмәтселәре, әмәлгә ҡалғандай, аш әҙерләү урыны итеп Тарғын биләмәһен һайлаған икән. Кешеләр тирмә ҡора, аш кәрәк-яраҡтарын бушата, урын хәстәрләй. Ә берәү, ситкәрәк китеп, һарыҡ һуйырға булған. Еҙтырнаҡ улар өҫтөндә ҡанат йәйгән мәлдә генә һуғымсы һарыҡты салып ебәрҙе һәм, аҡ ҡар өҫтөн ҡыҙылға буяп, ҡан атылды. Асыҡҡан, ярһыуынан күҙенә ҡан һауған бөркөткә шуны күреү етте. Ул кейек аулауын да онотто һәм, түңәрәк яһап бейегерәк күтәрелде лә, аяҡтары бәйләнгән, муйынынан ҡан һарҡыған һарыҡ өҫтөнә шыҡыйҙы. Мал салыу менән мәшәҡәтләнгән кешене тибергә ниәтендә лә юҡ ине Еҙтырнаҡтың. Ләкин күктән атылып төшкән ыңғайҙа ул ҡаты күкрәге менән кешегә бәрелде һәм, йәһәт кенә күтәрелә һалып, әле йән бирергә лә өлгөрмәгән һарыҡтың ҡанлы итен һоғаланып ашарға тотондо.

1. Әҫәрҙең йөкмәткеһенән сығып, бөркөт менән һунар итеүҙе тасуирлағыҙ. Уның нигеҙендә аҙаҡ изложение яҙып, руссаға тәржемә итеп һөйләгеҙ.
2. Аҡколай образына характеристика бирегеҙ. Уның ниндәй сифаттары оҡшаны? Ни өсөн?

## IV

Бөркөттөң һуғымсыны типкәнен күреп ҡалған кешеләрҙең береһе, йүгереп килеп, ҡулындағы ҡамсыһы менән ҡошҡа һыҙырҙы. Ләкин Тарғындың туҡмауына

күнеккән Еҙтырнаҡ, ҡанаттарын ҡаҡҡылап, кешегә боролоп ҡына ҡараны ла, ҡанлы табышынан айырылманы. Ҡамсылы иптәшенең һөрәнләүенә килеп еткән икенсе хеҙмәтсе бөркөткә күҫәк менән тондорҙо. Ҡош әйләнеп барып төштө. Ләкин йәшәү сәме көслө ине әле Еҙтырнаҡта. Ул аяғына баҫмаҡсы, осмаҡсы итте. Бей хеҙмәтселәре уның һайын шашып ҡошҡа ташланды. Күҫәк, ҡамсы бер-бер артлы уның кәүҙәһенә, башына эләкте. Оҙаҡламай суҡышында, башында һарыҡ ҡаны ҡатып та өлгөрмәгән бөркөт, ҡанаттарын килбәтһеҙ йәйеп, ҡар өҫтөндә хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Еҙтырнаҡтың фажиғәле үлемен ишетеп, Аҡҡолай тетрәне. Уның Тарғынға асыуы килде. Ауылда осрашҡас, түҙмәйенсә:

— Һин, ҡанһыҙ бәндә, бөркөт һынлы ҡошто ҡанға батырып үлтерҙең. Ҡомһоҙлоғоң ғына етте уның башына, — тине.

— Һинең генә ҡыҫылаһың ҡалғайны! — тип ыҫылданы Тарғын. — Мин булмаһам, бөркөт күрер инеңме, байғош? Аҡыл өйрәтеп маташаһың!..

Тарғындың былай ҙа хурлыҡтан шартлай яҙып йөрөгән сағы ине. Бөркөтсө тип танылған көйөңә һинең ҡошоң, кешене тибеп, үлгән һарыҡҡа ташланһын әле! Булдыра алһа, ғәрлегенән ер тишегенә инеп юғалыр ине Тарғын. Етмәһә, бынау Аҡҡолайы аҡыл һатып маташа. «Күрһәтермен әле мин һиңә!» — тип, Тарғын йоҙроҡ төйнәп ҡуйҙы.

Ә Аҡҡолай менән Яубөркөттөң һунары берәү ҙә көтмәгәнсә уңышлы барҙы. Дүрт көн эсендә Яубөркөт алған тиклем төлкөнө бер ҡош та типмәгәйне. Дөрөҫ, Аҡҡолай биләмәһенә бүре сыҡҡаны юҡ. Яубөркөт бүре алманы әле. Шулай ҙа уның отҡорлоғона, хужаһын тыңлауына кешеләр хайран ҡала. Ҡалған ике көн дә шулай барһа, бүләк аты Аҡҡолайға тейер ҙә әле.

Аҡҡолай менән Яубөркөт ауға бөгөн дә иртә сыҡты. Ялан ерҙә кейек күренмәһә лә, Аҡҡолай ҡошон күккә сөйҙө. «Тәне яҙылһын, януар килеп сыҡһа, әҙер торһон», — тип уйланы ул. Үҙе, ҡая башына баҫып, әле

һауалағы бөркөттө, әле ҡар менән ҡапланған яланды күҙәтте. Тик ул артына боролоп ҡарарға ғына уйламаны.

Артына күҙ һалһа, әле ағасҡа, әле ташҡа ышыҡлана-ышыҡлана үҙенә етеп килгән һыбайлы кешене күрер ине. Тарғын уның боролоп ҡарамаҫына иҫәп тотҡайны ла инде. Бөркөт сөйгән һунарсыла артыңда нимә барлығын ҡарау ҡайғыһы юҡ икәнлеген яҡшы белә бит Тарғын. Бөгөн Аҡколайҙың анау көндө әйткән һүҙе өсөн үс алыу уның ниәте. «Еҙтырнаҡтың инәһен үлтереп, тырнағын һатты. Ҡош ҡарғышы төшөр әле», — тип һөйләп йөрөгән бит Аҡколай. Хәҙер бөркөтсөләр Тарғынды һанға ла һуҡмай. «Бөркөт үлтергән бәндә тере кешенең күҙен соҡоған ҡоҙғон менән бер», — тип кенә ҡуялар.

Тарғын бөгөн ана шуларҙың һәммәһе өсөн үс аласаҡ. Һиҙҙермәй генә арттан барып, Аҡколайҙың муйынына боғалаҡ ырғытасаҡ һәм ҡаянан ташлаясаҡ. Эт тә күрмәйәсәк уның был эшен. Ҡаянан үҙе осоп үлгән генә, тиерҙәр. Бер ыңғай Яубөркөтөн ҡулға төшөрөп, һатып ебәрәсәк Тарғын. Алыусыһын да табып ҡуйған инде. Аҡъяурын сал бөркөттө алыусы булмай, тиме ни?

Һыбайлы Тарғын бер ни белмәй ҡая ситендә баҫып торған Аҡколайға яҡынлашты. Хәҙер атты ҡапыл саптырырға ла, атылып барышлай, боғалаҡ ырғытырға ғына ҡала. Тарғын ҡылдан ишелгән арҡанын әҙерләне.

Күктәге Яубөркөт баянан бирле кейек күҙләй. Ләкин тәүге ҡояш нурҙарында көмөштәй ялтырап ятҡан ҡар өҫтөндә йән эйәһе күренмәй. Бөркөт ялан тирәләй әллә нисә тапҡыр әйләнде инде. Ул хужаһына ҡарап-ҡарап ала. Ләкин Аҡколай өндәшмәй. Яубөркөт ҡая яғына кәйелеп осто. Шул саҡ ул ҡая башында торған хужаһы янына ниндәйҙер һыбайлының йән-фарман сабып килеүен күреп ҡалды. Был ни хәл? Уның хужаһы эргәһенә ниңә шул тиклем ашығалар? Күҙ асып йомғансы әлеге һыбайлы Аҡколай менән тиңләште, шул уҡ мәлдә Яубөркөттөң хужаһы аттан ялп итеп ҡолап төштө лә һыбайлы артынан ҡар борҡотоп һөйрәлеп китте. Бөркөт яман эште тиҙ төшөндө. Хужаны ҡотҡарырға кәрәк!

Яубөркөт ҡанаттарын йыйҙы ла аҫҡа ҡарап шыҡыйҙы. Сабып барған атҡа ҡаршы яҡтан килеп, һыбайлының башына түше менән бәрелде. Бәрелеү шул тиклем ҡаты булды, хатта бөркөт үҙе, шаңҡып, оса алмай ергә йығылды. Тарғын атынан балта менән һуғып осоролған түмәр кеүек тәгәрәп ҡалды ла ҡабат тора алманы — ул шунда уҡ үлгәйне…

Аҡҡолай байтаҡтан һуң ғына һушына килде. Уның кейемдәре йыртылған, бите, ҡулдары һыҙырылған, ҡанға батҡан ине. Күҙен асыу менән, уның беренсе күргәне Яубөркөт булды. Ҡош хужаһының янында тирәяҡты байҡап ултыра ине. Аҡҡолай ҡулын һаҡ ҡына Яубөркөттөң өҫтөнә һалды:

— Аҡъяурын сал бөркөтөм минең!..

1. Тарғын образына характеристика бирегеҙ, һеҙ уға оҡшарға тырышыр инегеҙме? Ни өсөн?
2. Кеше һунар итеү өсөн тағы ниндәй ҡоштарҙы, хайуандарҙы ҡулға эйәләштергән?
3. Хикәйәнең йөкмәткеһен тасуири итеп һөйләргә өйрәнегеҙ.
4. «Бөркөт менән һунар» исемле һүрәт төшөрөгөҙ.
5. Хикәйәнең иң һуңғы абзацын диктант итеп яҙығыҙ. Эшегеҙҙе үҙ аллы тикшереп, баһалағыҙ.
6. Һеҙ белгән кешеләр араһында һунарсылар бармы? Әгәр булһа, уларҙан һунарҙа булған берәй ваҡиға тураһында һорашып, яҙып алығыҙ.
7. Ғәлим Хисамовтың тағы ниндәй әҫәрҙәре бар? Уларҙың исемлеген төҙөгөҙ.

**54-се күнегеү.** Сағыштырығыҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| ябай | яй | йәл | ояу |
| яза | йәй | яйын | ҡуян |
| ялан | ян | йәйен | ҡая |
| ярма | йән | яһат | туя |
| яуап | ял | йәһәт | һыя |
| ял — йәл | юн — йүн | йыл — ел | йоҡ — йөк |
| йыҡ — ек | йыр — ер | яп — йәп | |

## ОМОНИМ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Ҡайһы бер һүҙҙәр, әйтелеше менән дә, яҙылышы менән дә бер төрлө булһа ла, төрлө мәғәнә аңлаталар. Мәҫәлән, **алма** һүҙе **алма (**емеш; яблоко) һәм **а́лма** (теймә; не бери, не трогай) мәғәнәләрен бирә. **Ҡара** һүҙе аңлатҡан төшөнсәләр тағы ла күберәк: **ҡара́** (ҡара төҫ; чёрный), **ҡа́ра** (бында ҡара; смотри сюда), **ҡара́** (чернила) һ. б. Бындай һүҙҙәрҙе **омонимдар** тип йөрөтәләр.

1. Килтерелгән текстарҙан омонимдарҙы табығыҙ (йәки айырым һүҙҙәргә үҙегеҙ омонимдар эҙләгеҙ).
2. Үҙегеҙҙең көндәлек телмәрегеҙҙә омонимдар ҡулланып ҡарағыҙ.
3. Рәшит Назаровтың «Йәшен» шиғырын табып уҡығыҙ, ундағы омонимдарҙың ҡулланылышына иғтибар итегеҙ.

### Һүҙ күрке – мәҡәл

Бала бар ерҙә батша юҡ.

Халыҡ бар ерҙә хаҡлыҡ бар.

Ташлама иленде: ҡан баҫыр юлыңды.

Ваҡ эште лә эре итеп башҡар.

«Уҡыным» тимә, «белдем» тиң.

Бәхетте юлдан эҙләмә, белемдән эҙлә.

Самалы ашаған һау булыр.

# ҠЫШ

*Сафуан Әлибаев*

## ҠЫШ

Ағастарҙың кейемдәрен
Көҙ алып ҡалды сисеп,
Улар һалҡын көндәрҙә һуң
Түҙерҙәр икән нисек?

Ҡыш килгәс тә, хайран ҡалды,
Урманға баҡты йәлләп,
Ағастарға яба һалды,
Аҡ мамыҡтан шәл бәйләп.

Бер көндө урман буйына
Һалып ҡуйҙы һырынты, —
Бына шулай ағастарҙың
Аяҡтары йылынды.

1. Көҙ ағастарҙың ниндәй кейемен сисеп алып ҡала?
2. Нимә ул — ҡыш бәйләгән шәл?
3. Һуңғы строфаны иғтибар менән уҡып сығығыҙ ҙа *Ҡар йылытамы? Әгәр йылытһа, ҡасан йылыта*? тигән һорауҙарға яуап бирегеҙ. Миҫалдар килтерегеҙ.
4. Ҡыш йылдың ниндәй миҙгеле? Ниндәй айҙарҙы ҡыш айҙары тип йөрөтәләр?

**55-се күнегеү.** Һәр төркөмдән бер артыҡ һүҙҙе табығыҙ. Ни өсөн икәнен аңлатығыҙ.

1. Көмөш, бүре, суртан, күлдәк, һыҙ.
2. Имән, йәшел, ботаҡ, ултырғыс.
3. Күсер, бешер, яҙ, алһыу, ҡара, алтын.
4. Ҡыҫҡа, һары, күк, зифа, күкһел.
5. Күл, тау, шишмә, урамда, ҡая.

Өлгө: *Унға, аҫта, кисә, артта, өҫтә, һулға. Кисә* һүҙе артыҡ, сөнки башҡа һүҙҙәр бөтәһе лә *ҡайҙа*? һорауына яуап була, ә *кисә* һүҙенең һорауы *ҡасан*?

**56-сы күнегеү.** Йылҡы малының төҫтәрен белдергән һүҙҙәрҙе уҡығыҙ һәм иҫтә ҡалдырығыҙ.

аҡбуҙ — күкһел
бүртә — аҡ менән туры (ҡараһыу ҡыҙыл) ҡатнашҡан
буҙ — көлһыу күгелйем
бурлат — ҡара ҡыҙыл
бурыл — буҙ менән ҡара ҡатнаш
ерән — ҡыҙғылт һары (ҡыҙыл менән һары ҡатнаш)
кир — һарғылт туры
күк — аҡ
көрәнсәй — ҡыҙғылт ҡара
ҡоба — салт асыҡ булмаған, аҡһылланып, көлһыуланып торған аҡһыл һары, аҡһыл ҡыҙыл, аҡһыл ҡара
ҡола — үҙе һары, ҡойроғо, ялы ҡара
саптар — үҙе ерән, ҡойроғо, ялы сал
туры — үҙе ҡараһыу ҡыҙыл, ҡойроғо, ялы ҡара

**57-се күнегеү.** Түбәндәге юлдар башҡорт халыҡ йырҙарынан алынған. Билдәләнгән һүҙҙәр нимә аңлата?

1. Салауат менгән, ай, *кир* аттың...
2. Бәләкәй генә *бүртә* лә әкрен юрта...
3. Һайт,*ҡара* юрғам...
4. Ектерһенә, Фатимам, *туры* атҡа...
5. Күк ат ҡына ектем, ай, тәртәгә...
6. Ҡаһым түрә менгән *һор* юрғаның, вай кем...
7. *Турысай* ҙа атым, ай, ашамай...
8. Аҡһаҡ та *ҡолам* янда юҡ...
9. *Саптар* атыңдың ҡашҡаһы...
10. *Ерәнсәй* ҙә атым, һай, дүнәнем...

Ошо юлдарҙың ниндәй йырҙарҙан икәнен әйтә алаһығыҙмы?

Башҡорттар элек-электән ат тотҡандар. Ат малын башҡорттар ике төргә бүлгәндәр: **ат** – был мал егергә һәм менергә өйрәтелгән, ул ярҙамсы, күпселек осраҡта кеше уны үҙе янында тота, йәйен – йәйләү тирәһендә, тышаулап ебәрә йә оҙон арҡан менән бәйләп ҡуя, ә ҡышын аҙбарҙа (һарайҙа) тота; **йылҡы** – был өйрәтелмәгән өйөр, уларҙы өйөр айғыры йөрөтә. Улар һәр ваҡыт ҡырҙа булалар: йәйен көтөүлектәрҙә, ҡышын – тибендә, йәғни осло, ҡаты тояҡтары менән ҡарҙы ҡаҙып, көҙҙән тороп ҡалған үләнде ашап туйыналар.

Башҡорттарҙа атҡа исем ҡушылмаған. Малдың төҫөнә, йәшенә, енесенә ҡарап ҡына атамалағандар. Күнегеүҙәге һүҙҙәр, шулай итеп, ат төҫөн белдерәләр. Ҡасандыр йылҡы малының төҫөн белдереүсе йөҙҙән артыҡ һүҙ булған, хәҙер уларҙың күбеһе юғалған, онотолған, бер нисәһе генә шулай йырҙарҙа һаҡланып ҡалған.

*Ноғман Мусин*

## ҠОРАЛАЙҘАР

— Ниндәй кейек донъяла иң матуры, тиһеңме, улым? — Әбделнәғим бабай һаҡалын семеткеләп алды. — Матур кейектәр күп ул беҙҙең урмандарҙа. Беләһеңме, улым, хатта йырткыстарҙың да бик матурҙары бар. Тик беҙ, улар йыртҡыс булған өсөн генә, артыҡ иғтибар итмәйбеҙ.

— Бабай, матур нәмәләрҙең дә иң матуры була бит, — тип һаман ныҡышам мин. — Кейектәрҙең иң матуры ҡайһыһы һуң?

— Һы! Ныҡыштың бит, атайың малайы! Берәүгә — болан, икенсегә — һуйыр, өсөнсөһөнә төлкө оҡшай. Әүәлерәк беҙҙең тирәлә Борхан тигән атаҡлы һунарсы була торғайны. Шул, айыуҙан да матур, аҡыллы януар юҡ, тиер ине. Үҙенең әжәле әлеге айыуҙан булды, бахырыҡдың. Миңә ҡалһа, улым, был донъяла иң матур кейек — ҡоралай. Һинең күргәнең дә юҡтыр әле уны?

Минең ҡоралайҙы һүрәттә генә күргәнем бар. Әбделнәғим бабайға эйәреп, урманға йыш ҡына сыҡһам да, ҡоралайҙы осратҡаныбыҙ булманы.

— Беҙҙең яҡта һирәгерәк була шул ҡоралай, — тип, минең уйымды белгән шикелле, дауам итә бабайым. — Иҙел буйына ҡышлауға үткән саҡтарында ғына килеп сығалар. Анау бер йылды, шундай үткенсе ҡоралайҙар буранда бикләнеп ҡалғас, ҡыш буйы ҡарауыллап аҫрарға тура килде...

— Декабрь урталарында һуҫар һунарсылап сыҡҡайным. Яңы ҡарҙан аҙаҡ һунарҙың ғәжәп шәп мәле ине. Өс һуҫар алып, кискә табан ҡайтыу яғына ыңғайланым. Йәнебәк һыртындағы аҡланға килеп сыҡһам, шуның уртаһындағы кәбән төбөндәге нәмәләргә күҙем төштө. Яҡынраҡ килеп, абайлап ҡараһам — ҡоралайҙар. Бишәү-алтаулап бар. Ғәжәп иттем, хайран ҡалдым. Сөнки был тирәлә ҡоралайҙың ҡышларға ҡалыуын күреү түгел, ишеткән дә юҡ ине. Тағы ла яҡыныраҡ барғайным, тегеләр, мине һиҙеп ҡалып, бер урынға йыйылды. Ҡар бик тәрәнәйгәйне инде, ҡоралайҙарҙың бер ҡайҙа ла китә алмаҫын беләм. Кәбәндең эргәһенә үк килгәс, теге бахырҙар ситкә ырғып ҡарағайны ла, ҡайҙа инде ул, ҡарға сумды ла ҡуйҙылар. Ҡаршыларына барып, кәбән төбөнә кире ҡыуалап төшөрҙөм. Берәүһе бик ныҡ сумған, күрәһең, ҡарҙан сыға алмай ятҡас, эргәһенә үк барҙым. Ана шул саҡта текләп тигәндәй ҡараным мин ҡоралай күҙҙәренә. Мәрхәмәт көтөп, дерелдәп, күҙҙәрен мөлдөрәтеп тик ята меҫкен. Ҡарҙан күтәреп сығарып, кәбән төбөнә кире төшөрҙөм дә ҡайтып киттем. Үҙемде ниндәйҙер изге бәндәләрҙе ярҙамсыһыҙ ташлап ҡалдырған кешеләй тойоп, төн буйы йоҡлай алманым. Ҡаты буранда юлдары бүленеп, шулай ҡар кәртәлә бикләнеп ҡалған ҡоралайҙар яҙ сыға алырмы? Ул кәбәндәге бесән бөтһә, астан ҡырылыуҙары бар бит. Ә бүре йә һеләүһен килеп сыҡһа? Үҙҙәрен бесәй сысҡанды ҡырған кеүек ҡырып һаласаҡ. Юҡ, мин әйтәм, бәләгә тарыған мәхлүктәргә ярҙам итергә кәрәк.

Иртәгәһенә иртүк торҙом да бер киҫәк ҡаҡ тоҙ, бер тоҡсай он кәбәге артмаҡланым, инәйеңдән бер киҫәк ҡыҙыл сепрәк тә алдым. Буран сығыбыраҡ торһа ла, киттем әлеге ҡоралайҙар эргәһенә. Барһам, тағы ҡурҡалар бит. Шулай ҙа, файҙаһыҙлығын белгәс, көрткә ырғымайҙар, ситкәрәк китеп, ҡарап тик торалар. Кәбәкте кәбән төбөнә һиптем, киҫәкле тоҙомдо ла шунда ырғыттым. Шунан ситкәрәк китеп ҡарап торам. Ҡоралайҙар әкренләп тынысланды, ашана башланылар, шунан ябырылып тоҙ яларға керештеләр.

Унлап ҡаҙыҡ ҡырҡып алып, уларҙы кәбән тирәләй ултырттым да шуларға ҡыҙыл сепрәк тағылған дилбегәне һуҙып бәйләнем. Әлеге шул бүре, һеләүһен-фәләнде ҡурҡытыр өсөн инде. Ҡоралайҙар янында гелән ҡарауылда тороп буламы ни?

Ошонан аҙаҡ, һунарға бараммы, ҡайтып киләмме, шулар эргәһенә туҡталмайынса үтмәҫ булдым. Меҫкен хайуандар ҙа өйрәнеп китте үҙемә. Яҡынлай башланыммы, ҡурҡыу түгел, нәҙек муйындарын һоноп, ниҙер өмөт итеп торорҙар ине. Яҙға табан, кәбәндәге бесән бөткәс, йыла ҡырҡып ашаттым үҙҙәренә. Яҙғы ташҡын ваҡытында барып йөрөп булманы инде унда. Ер һурығыу менән, хәҙер ҡоралайҙарҙы унда осратырға өмөт булмаһа ла, киттем бит. Барһам, ғәжәп-хайран ҡалдым. Ҡоралайҙарым аҡлан уртаһында ашанып йөрөй, етмәһә, берәүһенең эргәһендә бәрәсе һикергеләй. Ете баш булып киткәндәр. Мине күргәс, тәүҙә ҡурҡышып ҡарап тора былар, тауыш иткәйнем, таныны, шайтандар. Эргәләренә барып еткәс, бер илгәҙәгерәге, муйынын һоноп, ниҙер һорай, етмәһә. Икмәк ҡаптырғайным, ҡәнәғәт булып кире китте.

Үҙемдең шул хәтлем матур хайуандарҙы ҡышлатып сығарыуыма ҡыуанып бөтә алмай торҙом мин ул саҡта...

Әбделнәғим бабай, ҡатып киткән билен ыуалайыуалай, урынынан торҙо, ләкин, ғәҙәтенсә, һөйләгәндәрен йомғаҡлап, һығымта сығарып ҡуйырға онотманы:

— Бына шулай, улым, кешенең дә, кейектең дә — һәр нәмәнең матуры була. Тик матурлыҡ һоҡланыу, ҡыҙығыу өсөн генә түгел, уның ҡәҙерен белергә кәрәк.

1. Текстан үҙегеҙгә таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, күмәкләп мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, уларҙы ҡулланып, үҙ-ара әңгәмә ойошторoғоҙ.
2. Үҙегеҙ күҙ алдына килтергәнсә, ҡоралайҙың һүрәтен төшөрөгөҙ.
3. «Матурлыҡтың ҡәҙерен белергә кәрәк», — ти Әбделнәғим бабай. Быны һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Шул турала әңгәмә ойошторoғоҙ.
4. Кешенең матурлығы нимәлә? Кемде беҙ матур кеше тибеҙ?
5. Әбделнәғим бабайға характеристика бирегеҙ. Һеҙгә уның ниндәй сифаты оҡшаны?

*Вафа Әхмәҙиев*

## ҠЫШҠЫ УРМАНДА

Ала ҡарға аҡ тирәктә
Ултыра бик бойоғоп,
Елдәр иҫһә, бәҫтәр оса,
Ботаҡтарҙан ҡойолоп.

Ҡарт ҡараманы шаңҡыта
Таңдан сыбар тумыртҡа,
Шул тиклем үс булыр икән
Ағас йырыусы ҡортҡа!

Ана, һуҫар һикереп менде
Ҡарт йүкә ҡыуышына,
Кейек ҡорт балына туйғас,
Иҫе китмәй ҡышына!

Ҡыу еректең ботағына
Ҡунып алған һайыҫҡан,
Кем килгәнен, кем киткәнен
Күҙәтә ул алыҫтан.

1. 2-се һәм 3-сө строфаларҙағы *ҡорт* һүҙен аныҡлаусылары менән бергә күсереп алып, һәр береһенә аңлатма яҙығыҙ. Һүҙ ниндәй ҡорттар тураһында бара? Уларҙың ҡайһыһын һаҡларға кәрәк? Ни өсөн?

2. 3-сө строфалағы *иҫе китмәй* һүҙбәйләнешенең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Уны икенсе һүҙ менән алмаштырығыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.
3. Шиғырҙың һуңғы строфаһын иғтибар менән ике-өс тапҡыр уҡып сығып, яттан яҙығыҙ, аҙаҡ эшегеҙҙе китапҡа ҡарап тикшерегеҙ.

**58-се күнегеү.** Ағастарҙың атамаларын уҡығыҙ. Ҡайһыларының русса атамаһын беләһегеҙ? Ниндәй ағастарҙы танийһығыҙ?

Ҡайын, ҡарағай, шыршы, ҡыҙыл шыршы, саған, йүкә, ҡарағас, имән, ерек, йыла, ҡарама, муйыл, мышар, тирәк, уҫаҡ, тал.

**Ҡарағай, ҡайын, имән** ағастарының йәшенә ҡараған атамалары ла бар. Ҡайын – сауҡа (йәш ағас), сауыл (ҡарт ҡайын); имән – туйра (йәш имән); ҡарағай – мешә, бешә (йәш ҡарағай).

*Мостай Кәрим*

## ҠЫШ БАБАЙ БӘЛӘКӘЙ САҠТА

Ул ҡышты Әлфиә ятып ауырый ине. Талпынып-талпынып күбәләк ҡар яуғанды ла, өйөрөлөп-өйөрөлөп буран уйнағанды ла бары тәҙрә аша ғына күрҙе. Ҙур малайҙар өй артында ҡарҙан тау өйҙөләр. Балалар баҡсаһынан ҡайтҡас, бәләкәстәр, сыр-сыу килеп, шунда сана шыуҙы. Әлфиә быны, береһен дә күрмәне: уларҙың өй тәҙрәләре урам яғына ҡарай ине…

Шулай ҙа Ҡыш бабай Әлфиәне лә онотманы. Яңы йыл етер алдынан уның тәҙрә быялаһына үлән ҡыяҡтары, сәскә япраҡтары, бойҙай башаҡтары, тағы әллә ниндәй биҙәктәр төшөп торҙо, һәр иртә һайын ул биҙәктәр гел үҙгәрә барҙы.

— Бынау һүрәттәрҙе кем төшөрҙө, әсәй? — тип һораны Әлфиә.

— Һиңә бүләк итеп, Ҡыш бабай төшөрә, ҡыҙым, — тине әсәһе.

— Ә ниңә ул гел япраҡтар менән сәскәләр генә төшөрә?

— Кешеләр йәйҙе һағынғанды белеп, шулай итә ул.

* * *

Иртәгә Яңы йыл тигән көндә Әлфиә ятҡан бүлмәгә тәпәш буйлы йөнтәҫ кенә бер ёлка инеп баҫты. Унның ботаҡтарына әсәһе йылтырауыҡ уйынсыҡтар элде, төбөнә аҡ мамыҡ түшәне. Мамыҡ өҫтөнә ап-аҡ тунлы бәләкәс кенә Ҡыш бабайҙы баҫтырып ҡуйҙы. Ёлка, әлбиттә, ҡала майҙанындағы теге ёлка һымаҡ уҡ ҡупшы килеп сыҡманы. Шулай ҙа өйгә яңы йыл еҫе аңҡыны, йәм инде.

Әсәһе тыштан ингәс, Әлфиә һорашырға тотонды:

— Ҡыш бабайҙың бәләкәй сағы булдымы икән, әсәй?

— Булғандыр инде…

— Бәләкәй саҡта ҡайҙа булған һуң ул?

— Әллә инде…

— Ниңә беҙгә гел Ҡыш бабайҙар ғына килә, Ҡыш малайҙар бер ҙә килмәй?

— Ҡыш малайҙар булмайҙыр ул…

— Була! Була! — Әлфиә тороп уҡ ултырҙы. — Кеше бер юлы ғына бабайға әйләнмәй ҙә…

Ысынлап та, Ҡыш бабайҙың бәләкәй сағы булғанмы икән? Был нәмә әсәнең уйына ла ингәне юҡ ине. Шуға күрә ул ҡыҙына асыҡ яуап бирә алманы...

Ҡыш бабай ҙа һөйләй белмәй шул. Әгәр ул телгә килһә, был әңгәмәне мин түгел, ул һөйләп бирер ине. Бына нәмәләр һөйләр ине ул.

* * *

...Борон-борон заманда беҙ бик күмәк шаян ҡар бөртөктәре инек. Юғарыла, күктә, әйләнеп-әйләнеп уйнап йөрөнөк тә бер төндә ергә яуа башланыҡ. Оҙаҡ яуҙыҡ, бөтә ер йөҙөн ҡаплап алдыҡ. Ел сығып, беҙҙән тауҙар өйҙө, һырынтылар яһаны. Беҙҙең өҫтә балалар шаулашып тау шыуҙы. Далалағы ағуналар, аҡ ҡуяндар, беҙҙе соҡоп, үҙҙәренә ояя яһаны. Беҙ үҙебеҙ һалҡын булһаҡ та, өшөгәндәрҙе йылыта беләбеҙ.

Эйе, элек беҙ ергә төшкән иҫәпһеҙ-хисапһыҙ ҡар бөртөктәре инек. Бер көндө шулай урамда — бында, ҡалала түгел, алыҫ ауыл урамында — дүрт бала ҡар бәрешеп уйнай ине. Шуны ла әйтәйем, кешеләр беҙҙең менән бәрешһә, беҙгә үтә ҡыйын була торғайны. Әлеге дүрт баланы мин һаман да хәтерләйем. Үҙемдән сығарып, һәр береһенә исем дә ҡуштым. Береһе — Яҡшы малай, береһе — Яман малай, береһе — Уңған ҡыҙ, береһе — Илаҡ ҡыҙ.

Яҡшы малай уйындан ҡапыл туҡтаны ла иптәштәренә былай тине:

— Әйҙәгеҙ, малайҙар, ҡарҙан кеше яһайбыҙ! — Ул ҡыҙҙарға ла «малайҙар» тип өндәшә торғайны.

Уңған ҡыҙ шунда уҡ ырғый-ырғый сәпәкәй итергә тотондо:

— Яһайбыҙ! Яһайбыҙ! — тине.

Илаҡ ҡыҙ ҙа уға ҡушылды. Ике ҡулын кеҫәһенә тығып, Яман малай бер үҙе ситтә нимәләр тибеп йөрөнө лә тиҙ үк китеп барҙы. Ҡалған өсөһө, беҙҙең күмәгебеҙҙе әүәләп, мине яһарға кереште. Тәүҙә кәүҙәмде йомарланылар. Бер аҙ маташҡас, Илаҡ ҡыҙ:

— Ҡулым өшөнө-ө-ө, — тип ҡайтып китте.

Яҡшы малай менән Уңған ҡыҙ минең кәүҙәмә бик аҡыллы бер баш ултыртты, үткер күҙҙәр ҡуйҙы, һиҙгер ҡолаҡтар тиште, ҙур ғына танау йәбештерҙе, ике эшлекле ҡул яһаны. Ҡыҫҡараҡ булһа ла, аяҡтарым да бар ине. Торғаны менән кеше булдым.

Яҡшы малай менән Уңған ҡыҙ эштәре эш булыуға һөйөндө, мин әҙәм рәтенә инеүемә шатландым. Ул ҡышты бик күңелле уҙғарҙыҡ. Көндәр буйы бишәү бергә уйнаныҡ. Уйнаныҡ, тип ни инде, улар уйнаны, мин ҡарап торҙом. Шулай ҙа күңелле ине.

Тик Яман малай ғына миңә тынғы бирмәне. Кеше күрмәгәндә, йә ҡулымды һындырып ташлай, йә ҡолағымды ҡуптарып ала, йә танауымды китеп төшөрә, йә кәүҙәмә таяҡ тығып китә. Ҡыҙғаныу ҙа, оят та юҡ үҙендә. Ҡарҙан яһалған булһам да, мин кеше бит әле. Кешене шулай ыҙалатырға яраймы ни?

Уңған ҡыҙ менән Яҡшы малай мине һәр саҡ бәләнән ҡотҡара торҙо, һынған ҡул урынына яңыны яһанылар, китек танау урынына тағы ла яҡшыраҡ танау ҡуйҙылар. Бөтөнләй ҡолаҡһыҙ ҙа тороп ҡалманым. Тик ике ҡолаҡ япрағым гел генә ике төрлө килеп сыҡты. Йә береһе оҙон, береһе ҡыҫҡа, йә береһе арҡыры, береһе буй булды. Һис кенә лә иш килмәнеләр. Уныһына мин артыҡ иғтибар ҙа итмәҫ инем. Тик баяғы Яман малай ғына, шул ҡолаҡтарымдан көлөп, эсемде бошора торған булды.

Нисек кенә булмаһын, рәхәт йәшәнем мин ул ҡышты. Теге Илаҡ ҡыҙҙың ерле юҡҡа сарбайлап илауына ла күнектем. Яман малайҙың аҫтыртын яуызлыҡтарын да сыҙамлыҡ менән кисерҙем. Ул яфалар мине сыныҡтырҙы хатта. Дуҫтар бар саҡта, дошман да ҡурҡыныс түгел икән.

Һәр шатлыҡтың бер аҙағы була. Өй түбәһенән беренсе тамсының тамыуы булды — йөрәгем жыу итеп китте. Был яҙ хәбәре ине. Ҡояш юғарыраҡ күтәрелгән һайын, күңелем төшә барҙы. Йәшерен генә илаштырғылап та алдым. Бәлки, ҡояшҡа тура ҡарауҙан күҙем сағылып, йәштәрем шулай бәреп сыҡҡандыр. Нимә генә тимә, өҙлөкһөҙ эсем бошто, һурылып, тартылып киттем.

Көньяҡтан йылы елдәр иҫте. Ҡара ҡарғалар үҙ ояларына ҡайтты. Торған һайын минең тыным ҡыҫыла төштө. Көндәрем һанаулы ҡалғанын тоя башланым. Бәхеткә ҡаршы, бер таңда ҡаты ҡырау төштө. Миңә хәл инеп китте. Тәнгә көс ингәс, башыма ла бик һәйбәт бер уй килде: «Китергә кәрәк, китергә...» — тинем. Ә ҡайҙа китергә икәнде миңә ел әйтте: «Мин ҡайһы яҡҡа иҫһәм, һин шул яҡҡа бар», — тине. Мин шунда уҡ юлға сыҡтым. Тәүге мәлдә атлауы ҡыйын булды. Ҡыш буйы тик тороп, быуындарым ҡатып киткән икән. Тиҙ үк яҙылдылар улар. Бара торғас, йылы елдәр артта уҡ тороп ҡалды. Мин боҙ тауҙары күгәреп ятҡан Ҡыш иленә килеп сыҡтым.

Уңған ҡыҙ менән Яҡшы малай мин киткәнде белмәй ҡалды. Улар менән хушлашмауыма бик үкендем. Үҙҙәрен бик һағындым. Икенсе ҡышты, уларҙы юллап,

тағы был яҡтарға килеп сыҡтым, ләкин дуҫтарымды таба алманым. Теге ваҡыт, мин киткән таңдың иртәгәһендә, мине эҙләп, улар алыҫ яҡтарға юлға сыҡҡан икән. Тик йылы ел артынан түгел, ә уға ҡаршы, бөтөнләй кире яҡҡа киткәндәр. Әле булһа мине эҙләп йөрөйҙәр, ти. Был турала миңә Ҡара ҡарға әйтте.

Шунан бирле, дуҫтарымды эҙләп, мин йыл да бында киләм. Бына хәҙер ҡартайып та бөттөм. Уңған ҡыҙ менән Яҡшы малайҙы әле булһа таба алғаным юҡ. Әммә уларға ныҡ оҡшаған балаларҙы бик-бик күп осраттым. Улар менән таныштым, дуҫлаштым.

Яман малай менән Илаҡ ҡыҙҙы ла килгән һайын күрәм. Улар бер ҡайҙа ла китмәгән. Үҙҙәре һаман шул көйө тора: үҫмәгәндәр ҙә, үҙгәрмәгәндәр ҙә…

* * *

Был ваҡытта Әлфиә йоҡлай ине. Әкиәт тыңлағанда шулай йоҡлайҙар инде ул.

1. Беренсе бүлектең тәүге абзацын диктант итеп яҙығыҙ. Эшегеҙҙе китаптағы текстҡа ҡарап тикшерегеҙ. *Талпынып, өйөрөлөп* һүҙҙәренең ни өсөн икешәр тапҡыр ҡабатлап ҡулланылыуын аңлатығыҙ.
2. Әлфиәнең тәҙрә быялаһына Ҡыш бабай ниндәй биҙәктәр төшөрә? Биҙәктәрҙең исемдәрен текстан табығыҙ. Ҡыш бабай ул биҙәктәрҙе нимә менән төшөрә икән, нисек уйлайһығыҙ?
3. Кемдәр улар — Яҡшы малай менән Уңған ҡыҙ һәм Яман малай менән Илаҡ ҡыҙ? Ни өсөн Ҡыш бабай уларға ошондай исем ҡушҡан? Уларҙың ҡайһылары һеҙгә оҡшай? Ни өсөн?
4. Яҙ еткәс, Ҡыш бабай йыл да Ҡар иленә китә. Ҡайҙа икән ул Ҡар иле? Нисек уйлайһығыҙ?
5. Өсөнсө бүлектәге «Яҡшы малай менән Уңған ҡыҙ минең кәүҙәмә бик аҡыллы бер баш ултыртты…» тип башланған абзацты диктант итеп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшереп, хаталарын төҙәтегеҙ, һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын аңлатығыҙ.

**59-сы күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙең аҙағына тейешле хәрефтәрҙе ҡуйып, яҙығыҙ.

Ҡала... (ғ, ҡ), бала... (һ, ç), ҡымы... (ҙ, һ), гона... (х, һ), ҡарма... (ғ, ҡ), йондо... (ҙ, ç), намы... (ç, һ), ниге... (ҙ, һ), мөгө... (ҙ, һ), мира... (ç, һ), ҡағы... (ҙ, һ), кеүә... (ç, һ), йомға... (ҡ, ғ).

### Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре

Башҡорт телендә **ғ** һәм **һ** тартынҡылары һүҙ аҙағында булмай. Улар икенсе телдәрҙән килеп ингән бер нисә һүҙҙә генә осрай (*бәлиғ* — совершеннолетний; *шаһ* — шах; *гонаһ* — грех).

Башҡорт телендә **ң** һәм **ç** өн-хәрефтәре һүҙ башында килә алмай.

**60-сы күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, һорауға яуап бирегеҙ.

### Минең дуҫым

Минең дуҫым бар. Ул ҙур түгел. Дуҫым бик ихлас уйнай, туҡтауһыҙ һикерә ала. Ул һәр ваҡыт шат. Ул ишек алдында йәшәй. Уның өйө бик бәләкәй. Өйөнөң тәҙрәһе юҡ, ишеге генә бар. Дуҫым йыш ҡына өйгә лә инә. Тик әсәйем уға: «Бар, бар, ишек алдында йөрө!» — ти. Кем ул минең дуҫым?

Һеҙҙең шундай дуҫығыҙ бармы? «Минең дуҫым» тигән темаға телдән хикәйә төҙөгөҙ.

## ҠАМЫР БАТЫР

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

I

Борон-борон заманда, ҡарға команда, һайыҫҡан һалдат сағында, турғай түрә булғанда, йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Уларҙың көнкүрештәре бик ауыр булған.

Бабай иртәнән кискәсә бай алдында бил бөккән, һалабаш сереткән, йүкә ишкән, септә һуҡкан, балыҡҡа йөрөгән; әбей еп иләгән, йөн теткән, бай ҡыҙҙарына биҙәкләп кейеҙ итек теккән, ә эшләп тапҡан икмәктәре аҙнаның өс көнөндә ашарға ғына еткән. Ас та булмағандар, туҡ та булмағандар, өйрәнгәс, бошоноп та ҡалмағандар, башҡалар кеүек йәшәп өйрәнгәндәр. Тик әбей генә ҡайһы саҡта әсенеп, зарланып ала торған булған.

— Атаһы, исмаһам, улдарыбыҙ ҙа юҡ бит. Уландар булып, ҡул аҫтына инеп эшләй башлаһалар, әллә был тиклем ауыр ҙа тормаҫ инек, — тип зарланған әбей.

— Ҡайғырма, әсәһе, күреп тор, бына тигән улыбыҙ булыр әле, — тип йыуатҡан бабай.

Шунан ул балыҡҡа барып ҡайтҡан. Өйгә инһә, бала тәрбиәләп йөрөгән әбейен күргән, ти.

Ҡарсығы, бабай балыҡҡа киткәс, ни булғанын һөйләп биргән:

— Һин балыҡҡа сығып китеүең менән, ҡамыр баҫтым да, малай яһап, һандыҡҡа һалдым, — тигән әбей. — Шул арала үҙем ишек алдына сығып әйләндем. Килеп инһәм, ҡолағыма бала илаған тауыш салынғандай булды. Ипләберәк тыңлаһам, тауыш һандыҡ эсенән килә. Һандыҡты асып ебәргәйнем, шаҡ ҡаттым: минең бая һалып ҡуйған малайыма йән ингән!

Бабай сәңгелдәктә тәпәйҙәре менән уйнап, көлөп ятҡан бәпес янына барған да, уның сөсө ҡамыр кеүек тығыҙ беләктәренән тотоп һөйөп:

— Эй, ҡамыр батыр, ни хәл? Үҫәһеңме? — тигән.

Бабайҙың шаярып әйткән был һүҙе әбейгә оҡшап ҡалған.

— Ҡара әле, атаһы, ҡайһылай матур итеп әйттең дә ҡуйҙың да баһа. Йә, улыбыҙға, ысынлап та, шул исемде ҡушайыҡ. Ҡамыр кеүек һығылмалы, бөгөлмәле булһын, һуғышҡанда, көрәшкәндә бер ере лә һынмаһын, — тигән.

— Әйҙә, шулай булһын, — тигән бабай.

Әбей менән бабайҙың яңғыҙ улдары Ҡамыр батыр, бөтә тирә-яҡты таңға ҡалдырып, ай үҫәһен көн үҫкән,

йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып етешкән. Уны берәү ҙә, хатта айыу ҙа, бүре лә еңә алмаған.

Тап ошо ваҡытта ил өҫтөнә оло бәлә килгән. Дейеү батша илдең бөтә байлығын һурып йота башлаған. Ил бөтөнләй емерек хәлгә килгән. Кешеләр ҡайғынан, аслыҡтан ҡырыла башлағандар. Ләкин күҙгә күренмәҫ хәйләкәр дейеүҙе эҙләп табырға, уға ҡаршы һуғыш асырға бер кемдең дә батырлығы етмәгән. Шул саҡта Ҡамыр батыр бер үҙе дошманға ҡаршы яуға сығырға булған һәм был турала ата-әсәһенә:

— Мин дошманды эҙләп табырмын, илде бәхетле итермен, — тигән.

Атаһы менән әсәһе илашҡандар, яңғыҙ улдарын яуға ебәреү ауыр булған. Шулай ҙа:

— Бар, улым, дошманды тап та илдең бәхетен ҡайтар, үҙең генә һәләк була күрмә, — тигәндәр.

— Ярай, мин сығып китәйем, донъяла ниҙәр барын, ниҙәр юғын беләйем, дошманға ҡаршы бергәләп һуғышҡа сығырлыҡ ирҙәрҙе эҙләп табайым. Ил бөтмәһә, батыр бөтмәҫ, иптәштәр табылыр, — тигән Ҡамыр батыр.

Быны ишеткән атаһы:

— Афарин, балам, афарин! Ир ҡанаты — ат булыр, тигәндәр. Фәлән тауҙы үткәс, бер ҙур күл булыр. Шунда ҡолонсаҡтарын сыңғыратып, ҡыңғырауҙарын ҡыңғыратып, йылҡы көтөүе йөрөр. Шул йылҡы араһына ин дә ҡойошҡаныңды ҡылтырат, йүгәнеңде шылтырат, шунда һиңә ҡайһы ат боролоп ҡараһа, шуны эйәрлә, — тигән.

Ҡамыр батыр йылҡы өйөрөн тапҡан да ҡойошҡанын ҡылтыратҡан, йүгәнен шылтыратҡан. Уға баҡтаһын ҡоймаған алама тай әйләнеп ҡараған. Ҡамыр батыр ҡамсы менән уның һырт буйына бик ҡаты итеп бер һелтәгән дә йүгәнен ҡайтанан шылтыратҡан. Уның шундағы ҡола бейәне эйәрләгеһе килгән. Тик уға тағы шул алама тай боролоп ҡараған. Ҡамыр батыр бик ныҡ асыуланған һәм алама тайға тағы бер-ике тапҡыр һуғып ебәргән.

Унан йүгәнен ҡайтанан шылтыратҡан. Ләкин был юлы ла шул тай боролоп ҡараған.

— Миңә яҙғаны, күрәһең, ошолор инде, — тип уйлаған Ҡамыр батыр һәм теләмәй генә тайға йүгәнен кейҙергән. Йүгәнде кейеү менән, тай бер һелкенгән дә бөтә баҫтаһын ҡойған. Арҡаһына эйәр һалғас, тай бик матур толпарға әйләнгән. Ә инде эйәр өҫтөнә эйәһе менеп ултырғас, улар икеһе бергә ҡапыл үҫеп, нығынып киткәндәр. Тай толпарға, егет еңелмәҫ батырға әйләнгән. Бынан һуң Ҡамыр батыр ата-әсәһе менән хушлашҡан да дейеүҙе эҙләп сығып киткән.

— Һау булығыҙ, һөйөклө атайым, әсәйем, — тигән ул.

— Хуш, балаҡай, бәхетле бул, — тигән ата-әсәһе.

Шул китеүҙән Ҡамыр батыр ай киткән, йыл киткән, бара торғас, бер ҡара урманға барып еткән. Унда, ботаҡтары ҡояшты ҡаплап торған ҡарт имән төбөндә, бер егет баҫып торғанын күргән. Егеттең ҡулында уҡ-һаҙаҡ, үҙе күктән күҙен алмай, ә янындағы күк арғымағы имән ҡайырыһын кимереп бөтөп, тояҡ аҫтын саңға әйләндергән.

— Һаумы, егет! Ни эшләп тораһың бында? — тип һораған Ҡамыр батыр.

— Бынан өс көн элек күккә уҡ атҡайным. Шуның кире килеп төшкәнен көтөп торам, — тигән егет.

— Исемең нисек?

— Минең исемем Уғатар батыр була. Мин өс көнлөк юл алыҫлығындағы ҡарсығаға уҡ атып тейҙерә алам. Тик бына ни өсөндөр дейеү батшаға тейҙерә алмай ҡалдым. Ул бөтә ырыуҙы ҡырып китте. Ә һин үҙең кем булаһың? Ҡайҙа былай китеп бараһың?

— Мин Ҡамыр батыр булам. Мин дә шул дейеүҙе эҙләп китеп барам. Үҙе күренмәй, ә донъяны ҡорота бит, яуыз, — тип яуап биргән Ҡамыр батыр.

— Мине лә үҙең менән ал, минең дә ҡанмаҫ үсем бар унда. Күрәһеңме, бына бөтә ырыуҙан бер үҙем ҡалдым, — тигән егет.

— Әйҙә, берәүҙән икәү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр, шатланып.

Улар икәүләп китеп барғандар. Ай киткәндәр, йыл киткәндәр, бара торғас, киң бер далаға барып сыҡҡандар. Унда бер аяғын күтәреп бәйләп, һыңар аяғы менән генә һикереп йөрөгән бер кешене күргәндәр һәм, янына барып, сәләм биргәндәр:

— Сәләм, егет кеше! Һин кем булаһың, ниңә былай йөрөйһөң?

— Мин Йүгерек батыр булам. Ҡуян тоторға китеп барам, ике аяҡ менән йүгерһәм, мин уларҙы тапап уҙып китәм. Шуға күрә бер аяғымды бәйләп ҡуйҙым.

— Ҡуян тотоп ҡына батыр булыу шәп нәмә түгел, — тигән Ҡамыр батыр.

— Дөрөҫ! — тигән Йүгерек батыр. — Ләкин мин был исемде дейеүгә ҡаршы алышта алдым. Тик һуңғы алышта бер үҙем тере ҡалдым.

— Улай булғас, урынһыҙ һүҙем өсөн ғәфү ит, егет, — тигән Ҡамыр батыр, — әйткән һүҙемде кире алам.

— Ә һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ һуң? — тип һораған Йүгерек батыр.

— Мин Ҡамыр батыр, ә был егет — минең юлдашым. Уғатар батыр була, — тигән Ҡамыр батыр.

— Ҡайһы ерҙәргә табан юл тотаһығыҙ?

— Дейеү батшаға ҡаршы һуғышҡа китеп барабыҙ.

— Мине лә алығыҙ, улай булғас, — тигән Йүгерек батыр, — минең дә унан үс алаһым бар.

— Әйҙә, икәүҙән өсәү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр.

## II

Егеттәр өсәүләп китеп барғандар. Бара торғас, бер туғайға барып сыҡҡандар. Унда бик күп күлдәр ялтырап ята, ә шул күлдәр араһында бер егет йөрөй икән. Ул бер нисә күлде бергә уртлап ала ла икенсе бер урынға илтеп ҡоя икән. Батырҙар был ғәжәп егеткә, хөрмәт менән баш эйеп, сәләм биргәндәр.

— Һаумы, батыр ир!

— Бик шәп кенә, егеттәр!

— Һин ниндәй кеше?

— Мин Күлуртлар батыр булам. Урынһыҙ ятҡан ваҡ күлдәрҙе бергә ҡушып, уртлап алам да, кәрәкле урынға алып барып ҡойоп, ҙур бер күл яһайым. Һөнәрем — шул. Әгәр дейеү батша килеп, ауылға ут төртһә, мин ошо ҙур күлде бер юлы уртлап алам да утҡа һибәм. Ауылды ҡотҡарам. Дейеү асыулана, ҡоторона, ләкин минең ырыуға бер ни ҙә эшләй алмай. Үҙегеҙ кемдәр? — тигән ул.

— Беҙ Ҡамыр батыр, Уғатар батыр, Йүгерек батырҙар булабыҙ.

— Ҡайҙа китеп бараһығыҙ?

— Дошманды асыуландырып ҡына ебәреү етмәй, уны юҡ итергә, халыҡҡа тыныслыҡты, бәхетте яулап алып бирергә кәрәк, — тигән Ҡамыр батыр.

— Беҙ шуның өсөн китеп барабыҙ, — тигәндәр егеттәр.

— Мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ, — тигән Күлуртлар батыр. — Алышта минең дә кәрәгем булыр.

— Әйҙә! Өсәүҙән дүртәү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр.

Арғымаҡтарға атланған дүрт батыр йырлай-йырлай артабан китеп барғандар. Күп ҡырҙар, тауҙар, һыуҙар, урмандар үткәндәр. Ахырҙа бер бейек тау итәгенә барып еткәндәр. Ә унда ниндәйҙер бер егет йүгереп йөрөй, тау итәгенең төрлө еренә ятып ниҙер тыңлай икән. Егеттәр сәләм биргәндәр һәм һораша башлағандар:

— Һин кем булаһың, егет? Ерҙән ни ишетәһең?

— Мин Ертыңлар батыр булам. Ергә ятып, ете диңгеҙ артындағы дейеүҙең һөйләшкәнен ишетәм. Дейеү ил таларға сығыу менән, халыҡҡа хәбәр итәм. Ул килгәнсе, халыҡ малын да йәшерә, үҙе лә йәшеренә. Дейеү бер ни таба алмай, әрләшә-әрләшә лә китә. Шулай итеп, минең ырыу һис тә дейеүгә бирешмәй йәшәп килә, — тигән егет.

— Дейеүҙән ҡасып ҡалғансы, уны юҡ итеү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр.

— Дөрөҫ! — тигән Ертыңлар батыр. — Тик һеҙ кемдәр булаһығыҙ?

— Беҙ Ҡамыр батыр, Уғатар батыр, Йүгерек батыр, Күлуртлар батыр тигән егеттәр булабыҙ. Дейеүгә ҡаршы һуғыш асырға китеп барабыҙ, — тигәндәр егеттәр.

— Мине лә эйәртегеҙ, — тигән Ертыңлар батыр.

— Әйҙә, дүртәүҙән бишәү яҡшы, — тигән Ҡамыр батыр.

Батырҙар бишәүләп китеп барғандар. Арғымаҡтарға атланған был биш батыр, дейеүҙе эҙләп, ер йөҙөнөң бөтә мөйөштәрендә булғандар. Бөтә ерҙә уның ҡанлы ҡулының эҙен күргәндәр, халыҡтың аһ-зарын ишеткәндәр, ләкин дейеүҙең эҙенә төшә алмағандар. Ахырҙа бик ҙур бер ҡалаға барып ингәндәр. Ҡала ситендәге бәләкәй генә өйгә ҡунырға төшкәндәр. Өй хужаһы, әбей юлсы егеттәрҙе хөрмәтләп ҡаршы алған. Шунда уҡ еҙ самауырын ҡайнатып, урындыҡҡа килтереп ултыртҡан. Егеттәр көлөшә-көлөшә сәй эсергә керешкәндәр. Әбейҙән ҡала хәлдәрен һорашҡандар.

— Йә, инәй, һөйләп ебәр әле, ҡалағыҙҙа ниндәй ҡыҙыҡлы хәлдәр бар? — тигәндәр улар.

— Һорашмағыҙ ҙа инде, балаҡайҙарым. Ҡалала бер ҡыҙыҡ та юҡ. Тик үлем дә үлем, — тигән әбей, зарланып.

— Бер ҙә тыуым юҡмы ни, инәй? — тип шаяртҡандар егеттәр.

— Тыуым бар ҙа бит, үлем күберәк шул. Бына өс йыл инде ҡала яны һеҙҙең кеүек һылыу-һылыу йәп-йәш егеттәрҙең мәйеттәре менән тулы. Дейеү батша һылыу ҡыҙға әйләнде лә бөтә егеттәрҙең башын әйләндерә башланы. Ҡуй инде, балалар, һөйләмәйек, бәлә булды был…

— Йә, инәй, асығыраҡ һөйләп аңлатсы. Нисек инде ул үлем? — тигән Ҡамыр батыр, түҙемһеҙләнеп.

— Ҡыҙ батша кейәү һайлай. Өс йыл үтте. Ундай шартты үтәрлек батыр табылғаны юҡ әле. Килгән береһе үлеп кенә тора. Кешеләрҙе ҡыралар ғына… Һылыу ҡыҙ булып күренеп, егеттәрҙе үҙенә ғашиҡ итә. Меңкендәр уның шартына күнә лә — үлә лә…

— Шарттары ниндәй икән һуң уның? — тип ҡыҙыҡһынғандар егеттәр.

— Нисек булһын инде, балаҡайҙар, үтәй алмаҫлыҡ, тип әйттем бит инде.

— Шулай ҙа, инәй, шарттарын әйт әле. Ҡыҙыҡ бит…

— Ниməһе ҡыҙыҡ булһын уның? Беренсе шарты — ҡыҙ батшаның йүгерек əбейе менəн өс көнлөк юлда ярышыу.

— Мөмкин, — тигəн Йүгерек батыр.

— Икенсе шарты — мөлдөрəмə тулы бер балғалаҡ балды өс көнлөк юл оҙонлоғондағы бағана буйлап сайпылтмай алып менеү.

— Була, — тигəн Ҡамыр батыр.

— Өсөнсө шарты — ҡыҙҙырылған суйын өйҙə ҡуныу.

— Мөмкин эш, — тигəн Күлуртлар егет.

— Дүртенсе шарты — һылыулыҡта, көслөлөктə тиңе булмаған ҡыҙ батшаның үҙен көрəштə еңеү.

— Быныһын да булдырып була, — тигəн Ҡамыр батыр. Əбей асыуланып, ярһып киткəн.

— Нимə була? Береһе лə булмай. Үлем генə була. Шулай, булдырам тип, аҙмы егеттəр баштарын һалдылар. Юҡ уйҙы башығыҙға ла килтермəгеҙ, балалар!

— Ҡурҡма, инəй, беҙ күмəк, — тигəн Ҡамыр батыр.

— Эйе, күмəклəп булдырабыҙ уны!

— Бына күрерһең, инəй, ул ҡанескес һылыу батшағыҙҙың көлө күккə осор!

— Дөрөҫ!

— Ай, юҡты ғына һөйлəйһегеҙ бит, балалар! — тип көйөнгəн əбей.

Егеттəр үҙҙəре эҙлəп йөрөгəн дейеү батшаның ошо юха ҡыҙ икəнлегенə төшөнəлəр ҙə уны бергəлəп юҡ итергə ҡарар итəлəр. Шул уй менəн, иртүк тороп, батша һарайына киткəндəр. Барып еткəс, батшаға:

— Бына беҙҙең Ҡамыр батыр тигəн иптəшебеҙ һеҙҙең шарттарығыҙҙы үтəп ҡарарға уйлай, — тип белдергəндəр. Ҡанға һыуһап торған дейеү батша кинəнеп риза булған.

Был егеттəр, бишеһе лə буйға бер тигеҙ, ҙур, мыҡты кəүҙəле, һылыу йөҙлө йəш бəһлеүəндəр булғанлыҡтан, алмашлап бер кейемде кейһəлəр, уларҙы бер кем дə бер-береһенəн айыра алмаған. Улар бер-береһенə ике тамсы һыу кеүек бик оҡшаған булғандар. Күп тə үтмəй,

Йүгерек батыр, батша күрмәгәндә генә Ҡамыр батырҙың кейемдәрен кейгән дә, беренсе шарт буйынса, батшаның йүгерек әбейе менән ярышыу өсөн, өс көнлөк юлға сығып киткән. Иптәштәре майҙанда тороп ҡалған. Ертыңлар батыр, ергә ятып тыңлап, ярыштың барышын хәбәр итеп торған.

— Йә, нисек унда эштәр?

— Йүгерек батыр һаман һыңар аяғында ғына йүгереп килә. Әбей инде хәлдән тайған. «Ял итеп, йоҡлап алайыҡ, — тип ялына. — Бер көнлөк юлды үттек бит инде, ял кәрәк», — ти.

— Беҙҙең батыр ни ти һуң?

— «Мин арыуҙы уйлағаным да юҡ. Әйҙә инде, һин арығас, ял итәйек, булмаһа», — ти.

— Тыңла, тыңла, тағы ни һөйләшерҙәр?

— Туҡтанылар... Ашайҙар... Йоҡларға яттылар...

— Улар йоҡлағанда, беҙ ҙә ял итеп алайыҡ, егеттәр, төн бит инде, — ти Ҡамыр батыр.

— Әйҙәгеҙ, — тиҙәр егеттәр.

Батырҙар ҡайтып китәләр. Ә батшаның йүгерек әбейе, Йүгерек батыр йоҡлап киткәс тә, уның башына оҙаҡ йоҡлата торған сүлмәк ҡаплай ҙа үҙе йүгереп ҡайтып китә. Йүгерек батырҙың иптәштәре, йоҡо туйҙырып, иртә менән майҙанға килгән саҡта, әбей инде тағы бер көнлөк юлды үтеп өлгөргән була.

— Эш шәптән түгел, егеттәр, — тип хәбәр иткән Ертыңлар батыр, — беҙҙең батыр һаман кисәге урында йоҡлап ята, ә әбей инде йүгереп етеп килә.

Егеттәр аптырашып ҡалғандар:

— Нисек һуң ул шулай ҡаты йоҡлай?

— Башына берәй нәмә ҡапланған, моғайын. Тын алышы саҡ-саҡ ишетелә.

— Тыныс булығыҙ, егеттәр, хәҙер уятабыҙ уны, — тигән Уғатар батыр һәм, һаҙағынан йәһәт кенә уҡ ала һалып, төҙәп атып ебәргән. Уҡ Йүгерек батырҙың башына ҡапланған сүлмәккә барып тейеп, уны селпәрәмә килтергән.

— Әһә, — тип ҡысҡырып ебәргән Ертыңлар батыр, — беҙҙең батыр уянды. Ике аяғы менән йүгерә башланы.

— Шулаймы? Рәхмәт, мәргән уҡсы! — тигән Ҡамыр батыр, еңел һулап.

— Әбей ни эшләй?

— Уның бер аяғы алға баҫһа, икенсеһе артҡа баҫа...

— Хәйлә менән уҙып өйрәнгән икән, яуыз...

— Бына Йүгерек батыр ҡыуып та етте. Яуыз әбейҙе тәкмәстерә һуҡты ла уҙып китте.

Күп тә үтмәй, Йүгерек батыр майҙанға килеп тә еткән.

Дуҫтары уны күтәреп алып, күккә сөйгәндәр. Ҡыҙ батшаның һөмһөрө ҡойолған. Аҡһап-туҡһап бер тәүлектән һуң килеп еткән йүгерек әбейенең шунда уҡ башын сабып өҙҙөргән.

**61-се күнегеү**. Бирелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәрен аңлатығыҙ. Улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Өс, өҫ, өҙ, ҡаса, ҡаза, күс, күҙ.

III

Ҡамыр батыр менән Йүгерек батыр ул арала өҫтәрен алмаштырып кейенеп өлгөргәндәр. Икенсе шартты үтәр өсөн, мөлдөрәмә тулы итеп бал һалынған балғалаҡты тешләп, Ҡамыр батыр бағана буйлап менеп киткән. Был балды, һис бер сайпылтмай, өс көнлөк юл оҙонлоғондағы бағананың иң осона алып менгән. Болоттарға олғашҡан бағана башынан ул тирә-яҡты ҡарай башлаған һәм алыҫта, томандар араһында, үҙ ауылының етемһерәп ятҡанын күргән. Ул шунда, ауылын, ата-әсәһен йәлләп, илап ебәргән. Күҙ йәше бағана аҫтына түшәлгән аҡ кейеҙгә тамған. Батшаның вәзире ҡыуанысынан ҡотороноп ҡысҡырына башлаған:

— Балды тамыҙҙың! Тиҙерәк төш! Башыңды киҫәм!

— Бал түгел, күҙ йәше. Ышанмаһағыҙ, ялап ҡарағыҙ, — тигән Ҡамыр батыр.

Уртәкә күҙ йәше тамған урынға тел осон тейҙереп ҡараған да:

— Күҙ йәше был, вәзир йәнәптәре! Бал булһа, татлы булыр ине, ә был әсе, — тигән.

Вәзир, ышанмай, үҙе ялап ҡараған һәм ысынлап та күҙ йәше икәнлегенә ышанырға мәжбүр булған. Бынан һуң Ҡамыр батыр, балды мөлдөрәмә тулы көйө алып төшөп, уртәкәгә тапшырған. Иптәштәре уны күтәреп алғандар.

— Йәшә, батыр, һынатманың!

— Ҡыуанырға ашыҡмағыҙ, — тип иҫкәрткән вәзир, зәһәрләнеп, — алдығыҙҙа ҡыҙған суйын өй тора!

Уртәкә лә көлөп:

— Эйе, төшкө аштан һуң рәхим ит, егет, суйын өйгә, унда бик-бик йылы булыр, һөйәктәреңә тиклем янып, көл булырһың, — тигән.

— Уныһын күрербеҙ, — тигән Ҡамыр батыр.

Батырҙар бөтәһе лә бик ҙур кәүҙәле, бөтәһе лә йәш һәм бер-береһенә оҡшаған булғанлыҡтан, вәзир ҙә, уртәкә лә уларҙы кейемдәренә ҡарап ҡына айырғандар. Күлуртлар батыр суйын өйгә бер нисә ҙур күлде уртлап алып ингән. Батырҙы суйын өйгә бикләгәс, батшаның башкиҫәрҙәре өйҙө ҡырҡ сажин әрҙәнә утын менән күмеп, ут төрткәндәр. Суйын өй, ут тауына әйләнеп, дәһшәтле ялҡындарын күктәргә һуҙып, дөрләп яна башлаған. Ә Күлуртлар батыр бирешмәгән. Ул ут кеүек ҡыҙған өйгә һыу бөркөп торған. Һыу менән бергә балыҡтар ҙа бөркөлгәндәр һәм ҡурылып бешкәндәр. Бына бер ваҡыт утын янып бөткән. Төн үткән. Иртә менән батша вәзирен ебәргән.

— Бар, көлөн күккә осороп ҡайт, — тигән ул. Вәзир ҙә, бының шулай булыуына һис тә шикләнмәй, суйын өйҙөң ишек йоҙағын асып, эскә ингән. Ләкин ни күҙе менән күрһен... егет көлә-көлә ҡурылған балыҡ ашап ултыра икән.

— Әйҙүк, вәзир, балыҡ ашарға рәхим итегеҙ! Ҡайһы балыҡты теләйһегеҙ: табан балыҡтымы, суртан балыҡтымы?

Вәзир аптырауҙан бер ни ҙә әйтә алмай, һарайға йүгергән. Ул күргәндәрен батшаға һөйләп биргән.

— Алдайһың, ялғансы!.. — тип ҡысҡырған батша, асыуына сыҙай алмай, һәм вәзирҙең башын сабып өҙгән. Унан һуң икенсе вәзирен ебәргән. Уныһы ла шул уҡ хәбәрҙе ҡайтып әйткәс, уның да башын сабып өҙгән дә суйын өйҙө ҡарарға үҙе киткән һәм егеттең терелегән үҙ күҙе менән күргән.

Бынан һуң дүртенсе шартты үтәү өсөн, Ҡамыр батыр ҡыҙ батшаның көрәш урынына киткән. Иптәштәре уны оҙатып барғандар. Ҡыҙ батша ҡала ситендәге бер ҡая тау башында сатыр ҡороп ята икән. Ҡамыр батыр иптәштәре менән арғымағын тау итәгендә ҡалдырған.

— Өс көндән әйләнеп ҡайтмаһам, эҙләп, тауға менерһегеҙ, — тигән дә үҙе тауға йәйәүләп менеп киткән.

Тау итәге мәйеттәр менән ҡапланған. Улар өҫтөндә туп-туп ҡоҙғондар осоп йөрөй. Ҡамыр батыр, ҡоҙғондарҙы өркөтөп, мәйеттәр аша баҫа-баҫа, һаман алға, тау түбәһенә табан атлаған. Кис яҡынлашыуға, ҡая түбәһенә менеп еткән. Унда, ҡыҙарып бешкән алмалары ергә эйелеп ултырған ҡарт алмағастар араһына ҡоролған ебәк сатыр эсендә, үҙенең йөҙләгән хеҙмәтсе ҡыҙҙары менән, ҡыҙ батша күңел асып ултыра икән. Ул, Ҡамыр батырҙы күреү менән урынынан һикереп торған да, үҙенең һылыулығы менән уны арбап, хәлдән тайҙырыу өсөн, көлөп, ҡыланып, алдына килеп баҫҡан. Ә Ҡамыр батыр уның һылыулығы тураһында түгел, уның арҡаһында һәләк булған йөҙәрләгән йәш егеттәр тураһында, уның илгә эшләгән яуызлыҡтары тураһында уйлаған һәм ҡыҙға һис тә иҫе китмәгән.

— Һаумы, батыр егет! Килдеңме? Мин һине күптән зарығып көтә инем, — тигән ҡыҙ, наҙланып.

— Һау ғынамы, һылыу ҡыҙ? Мин дә, күптән бирле һине эҙләп йөрөп, көскә килеп таптым, — тигән Ҡамыр батыр.

— Йә, улайһа, көс һынашып ҡарайыҡ, көрәштә еңһәң, мин һинеке булырмын...

— Мин көрәшкә әҙер!

— Юҡ, ашыҡма, егет! Элек һин бынау ташты күтәреп ҡара. Шуға көсөң етһә генә, мин һинең менән көрәшәсәкмен. Әгәр көсөң етмәһә, үлемең минән булыр. Йә, күтәреп ҡара әле...

— Тәүҙә үҙең күтәреп ҡара, һылыу ҡыҙ!

— Минме? Рәхим ит!..

Ҡыҙ батша өй ҙурлығы бер ташты ике ҡуллап баш осона саҡ-саҡ күтәргән дә кире урынына ҡуйған. Ә Ҡамыр батыр ул ташты, етеҙ генә күтәреп алып, тау аҫтына уҡ ырғытып ебәргән. Таш тәгәрәп төшкән, тау дер һелкенеп торған.

— Бына яҡшы, — тигән ҡыҙ, ҡыуанған булып, — һинең менән көрәшергә лә ярай, исмаһам. Ул ташты ҡуҙғата алырлыҡ батыр килгәне юҡ ине әле...

— Йә, көрәште башлайыҡ, — тигән Ҡамыр батыр, сабырһыҙланып.

— Ашыҡма, егет. Үлергә өлгөрөрһөң әле, — тигән ҡыҙ, зәһәр көлөп.

— Мин йәшәргә өлгөрөргә ашығам, — тигән егет, ҡаты итеп.

— Һин йәшәү тураһында уйларға батырсылыҡ итәһеңме? Ха-ха-ха!..

— Эйе, йәшәү тураһында уйларға батырсылыҡ итәм.

— Ярай, ҡарап ҡарайыҡ.

Шунан улар көрәшә башлағандар. Көрәш өс көн, өс төн барған. Дүртенсе көндө Ҡамыр батыр ҡыҙҙы биленән ҡыҫып алып, баш осона күтәргән. Ошо ваҡытта батырҙың аяғы тубығына тиклем ергә батҡан. Бынан һуң ул ҡыҙҙы ергә атып бәргән. Ҡыҙ барып төшкән ер уйылып ҡалған, һәм ҡыҙҙың йәнселгән үлек кәүҙәһе ятҡан урында тоҙло, ағыулы һыулы тәрән күл барлыҡҡа килгән. Ә егеттең ике аяғы батҡан урындан ике йылға атылып сыҡҡан да, шаулап-гөрләп, тау аҫтына табан ағып киткән. Был йылғалар, ағып барышлай, тау биттәрен йыуып,

мәйеттәрҙән таҙартҡандар һәм түбәнгә төшкән һайын ағымдары көсәйә, ташҡынлана барып, туп-тура батша һарайына барып төшкәндәр. Улар йыуып үткән бар ер хәтфәләй йәшел үләндәр, сәскәләр менән ҡаплана барған. Бына бер ваҡыт йылғалар батша һарайын бөтә вәзирҙәре һәм башкиҫәрҙәре менән бергә, ер йөҙөнән йыуып, ағыҙып алып киткәндәр. Ҡамыр батырҙың иптәштәре йылғалар буйлап тау түбәһенә табан йүгергәндәр һәм батырҙы йылға яры ситендә йоҡлап ятҡан хәлдә тапҡандар. Ҡамыр батыр йылға ярында күпереп үҫкән үләндәр өҫтөндә йоҡлап ятҡан, сәскәләр уның ауыҙына татлы һуттарын тамыҙғандар, зәңгәр күбәләктәр, ҡанаттарын елпеп, еләҫ яһап, уның өҫтөндә осҡандар. Оҙаҡ, ауыр көрәштән ҡаты арыған Ҡамыр батыр шул ятыуҙан өс көн, өс төн уянмай йоҡлаған. Иптәштәре, уның уянғанын көтөп, керпек ҡаҡмай, янында һаҡлап ултырғандар. Бына өс көн, өс төн уҙып киткән, һәм Ҡамыр батыр, элеккенән дә шатыраҡ, көслөрәк, матурыраҡ булып, йоҡонан уянған. Бынан һуң дуҫтар арғымаҡтарына атланғандар ҙа, күңелле йырҙар йырлай-йырлай, тағы алға, дейеүҙән ҡотолған бәхетле донъяны күреп йөрөргә китеп барғандар. Бөтә урында халыҡ, үҙҙәрен был ҡанескес батшанан ҡотҡарған батырҙарҙы хөрмәтләп, оҙатып ҡалған.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ, уларҙы һүҙлек дәфтәрегеҙгә яҙып алығыҙ. Был һүҙҙәр менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
2. *Бил бөгөү, башын әйләндереү, ҡул аҫтына инеү* һүҙбәйләнештәренең нимә аңлатҡанын асыҡлағыҙ, уларҙың мәғәнәһен икенсе һүҙҙәр менән аңлатығыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.
3. Ҡамыр, Уғатар, Күлуртлар, Йүгерек батырҙарға характеристика бирегеҙ. Уларҙың әкиәт батырҙары икәнлеге нимәлә күренә?
4. Текст өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
5. Әкиәттең йөкмәткеһен әкиәт стилендә үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп өйрәнегеҙ.

**62-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ.

Әкиәттә баҡтаһы ҡойолмаған тайҙың, башына йүгән кейҙереү менән, толпарға әүерелеүе күрһәтелә. **Толпар** һүҙе бөгөн шиғырҙарҙа, экиәттәрҙә ҡанатлы ат тигәнде аңлата. Ә уның аңлатмаһы былай. Элегерәк йәй аҙаҡтарында, көҙ башында тыуып (билдәле булыуынса, башҡорт аттары яҙ аҙағы, йәй башында ҡолонлай), һалҡындарға бирешмәйенсә, иҫән ҡышлаған аттарҙы толпар тип атар булғандар, һуңлап тыуған ҡолондарҙың күбеһе ҡышҡы һалҡынлыҡты, аҙыҡ наҡыҫлығын күтәрә алмай, һәләк була. Инде иҫән ҡалғандары ифрат сыҙам, көслө булып үҫә. Ғәҙәттә, батырҙар шундай аттарҙы ғына менеп йөрөр өсөн һайлар булғандар. Шуға ла батыр менгән аттың толпар булыуы һуңынан был һүҙҙең мәғәнәһен киңәйтеп ебәргән, һәм беҙ бөгөн был һүҙ менән экиәттәрҙәге *ҡанатлы аттарҙы* атай башлағанбыҙ.

*(**Толпар** һүҙенең аңлатмаһын уҡытыусы*
*Әҙеһәм Хәмзин бирҙе.)*

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ МӘҠӘЛДӘРЕ

### Һүҙ хаҡында мәҡәлдәр

Әйткән һүҙ — атҡан уҡ.
Абайламай һөйләгән — ауырымай үлгән.
Йылы һүҙ — йән аҙығы,
Яман һүҙ — баш ҡаҙығы.
Ике уйла, бер һөйлә.
Яҡшы һүҙ балдан татлы.
Тел ҡылыстан үткер.
Яҡшы һүҙ йәнгә рәхәт,
Яман һүҙ йәнгә йәрәхәт.
Яҡшыла яман юҡ, мәҡәлдә ялған юҡ.

## Хеҙмәт тураһында мәҡәлдәр

Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен.

Көсһөҙ көрәк һындырыр, һәләтһеҙ һәнәк һындырыр.

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.

Матурлыҡ туйҙа кәрәк, уңғанлыҡ көн дә кәрәк.

Ялҡауға эш ҡушһаң, ул һиңә аҡыл өйрәтер.

Ҡалған эшкә ҡар яуа.

Эш бөткәс, уйнарға ярай.

Кем эшләмәй, шул ашамай.

## Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр

Ир аҡылы — бер алтын, ил аҡылы — мең алтын.

Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул.

Ат — туйған ерендә, ир — Тыуған илендә.

Үҙ илең — алтын бишек.

Ил ҡәҙерен белгәндең башы ҡәҙерле булыр.

Яҡшы ир — ил терәге.

Атаңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул.

Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ер яҡшы.

«Халҡым» тигән ир — алтын.

## Көнкүреш тураһында мәҡәлдәр

Берлектә — тереклек.

Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә.

Атың барҙа ер таны, ата барҙа ир таны.

Юрғаныңа ҡарап, аяғыңды һуҙ.

Ағас күрке — япраҡ, әҙәм күрке — сепрәк.

Ашаған белмәҫ, тураған белер.

Яҡшы менән юлдаш булһаң — эшең бөтөр, яман менән юлдаш булһаң — башың бөтөр.

Себеште көҙ һанайҙар.

Алтының менән маҡтанма, аҡылың менән маҡтан.

1. Ата-әсәләрегеҙҙең, ололарҙың һөйләшеүенә иғтибар итегеҙ. Кем күберәк мәҡәл ҡулланып һөйләй? Был нимә тураһында һөйләй икән? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.
2. Түбәндәге ситуацияларға ҡарата әйтелгән мәҡәлдәрҙе табығыҙ.

1. Беҙҙең телевизор боҙолғайны. Ғәлим ағай килеп төҙәтеп китте. Ул сәғәтте лә, радионы ла, кер йыуыу машинаһын да тиҙ генә йүнәтә лә ҡуя. Мин уны бик оҫта кеше тим, ә атайым икенсе төрләрәк маҡтай. Ул нисек әйтә икән?
2. Йүгереү буйынса ярыш бара ине. Ғәзизйән команданы көтмәй, йүгерҙе лә китте. Алдан килһә лә, уны еңеүсе итмәнеләр. Етмәһә, уның класының мәрәйе кәмене. Ғәзизйәнгә ҡарата ниндәй мәҡәл әйтер инегеҙ?
3. Эңер төшкәс, Сәлимә өләсәләренә барырға сыҡты. Яр башынан үткәндә, яр аҫтынан ниндәйҙер ҡурҡыныс нәмә сығып килгәндәй тойолдо. Сәлимә аяғы ергә теймәй йүгерергә тотондо. Иртәнсәк шул урынды барып ҡараһа, ул бер ағастың тамыры аҡтарылып ятыуын күрҙе. Шунда уның иҫенә бер мәҡәл килеп төштө. Ниндәй мәҡәл икән?

## МӘҠӘЛ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Мәҡәл — ауыҙ-тел ижадының бер төрө. Унда халыҡтың көнкүреше, борондан килгән тормош тәжрибәһе тупланған. Мәҡәл үҙ аллы әҫәр булараҡ йәшәмәй, ә һөйләгәндә әйтелгән фекерҙе дәлилләү өсөн ҡулланыла. Сағыштырыуға, метафораға ҡоролғанға, мәҡәлдәр ҡыҫҡа һәм тәрән мәғәнәле була. Шуға уларҙы афористик ижад төрө тип йөрөтәләр.

Мәҡәл телмәрҙе байыта, күркәмләй, үтемле, тәьҫирле итә. «Йөҙ күрке — һаҡал, һүҙ күрке — мәҡәл», тиҙәр. Мәҡәлдәрҙә халыҡтың күҙәтеүсәнлеге, тормошҡа, тирә-яҡ мөхиткә, йәшәүгә, эшкә, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләренә ҡарата мөнәсәбәте сағыла, тормош тәжрибәһе дөйөмләштерелә. Улар кешене йәшәргә, үҙендә кешелек сифаттары тәрбиәләргә ярҙам итә. Шуға ла күп кенә мәҡәлдәрҙә өйрәтеү, кәңәш биреү, өгөтләү ҙур урын ала. «Ҡурҡаҡ менән юлдаш булма, көйһөҙ менән моңдаш булма», «Баҫһаң — баҡыр өҙөрлөк, типһәң — тимер өҙөрлөк бул», – шундай мәҡәлдәр.

*Зәйнәб Биишева*

## ЙӘШӘҮ — ХЕҘМӘТ

Әсеһен дә күрҙем, сөсөһөн дә,
Үкенесем ерҙә ҡалманы.
Тик шулай ҙа, донъя, гүзәл донъя,
Һине һөйөп танһыҡ ҡанманы...
Ҡырыҫ булды минең барыр юлдар,
Наҙлы сөсөлөктәр тойманым,
Шуға, ахыры, донъя, һине күреп,
Һине һөйөп һис тә туйманым...
Йәшәү — хеҙмәт, көрәш, үҫеш бит ул,
Унан башҡа тормош юҡ миңә
Ҡул ҡаушырып түрҙә ултырырға
Килмәнем бит, донъя, мин һиңә.

1. *Танһыҡ ҡанманы, үкенесем ҡалманы* һөйләмдәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ. Уларҙы ҡулланып, үҙегеҙ һөйләм төҙөп ҡарағыҙ.
2. Шиғырҙың тәүге ике юлын иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Автор унда нимә әйтергә теләгән? Былай тип әйтергә кемдең хаҡы бар? Һеҙ, мәҫәлән, шулай тип әйтә алаһығыҙмы? Ни өсөн? Был юлдарҙы русаға тәржемә итеп ҡарағыҙ.
3. *Йәшәү — хеҙмәт, көрәш, үҫеш бит ул* тигәндә нисек аңлайһығыҙ?
4. Шиғырҙың төп фекерен (мәғәнәһен) аңлатып ҡарағыҙ. Шағирә унда нимә әйтергә теләгән?

**63-сө күнегеү.** Бирелгән исемдәрҙе русса яҙығыҙ.

Айҙар, Ғабдулла, Нәғимә, Мөхәмәт, Сәми, Ғәли, Вәли, Әнүәр, Мәжит, Салауат.

Исемдәрҙең башҡортса һәм русса яҙылыштарында ниндәй айырма бар? Аңлатығыҙ.

**64-се күнегеү.** Бирелгән һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Беҙҙең республика нисек атала?

2. Республиканың баш ҡалаһын әйтегеҙ.

3. Башҡортостандағы ниндәй йылғаларҙы, тауҙарҙы, күлдәрҙе беләһегеҙ?

4. Һеҙҙең районда, ҡаланан, ауылдан сыҡҡан ниндәй данлыҡлы кешеләрҙе беләһегеҙ?

Яуаптарығыҙҙа осраған ер-һыу атамаларын, кеше исемдәрен һәм фамилияларын русса ла яҙығыҙ.

*Факиһа Туғыҙбаева*

## ЯҢЫ КҮЛДӘК

Гөлниса әсәһе менән «Балалар донъяһы» магазинына барҙы. «Күлдәктәр» бүлегенә ингәс, һатыусы апай Гөлнисаға күлдәк һайлашты. Ул, бер нисәһен ҡарағас:

— Бына матур күлдәк, — тип, ҡыҙыҡайға аҡ сәскәләр төшөрөлгән ҡыҙыл күлдәкте күрһәтте. Гөлниса уны кейеп ҡараны. Тап-таман. Килешә. Етмәһә, уның бантигы ла ошо күлдәк төҫлө ҡып-ҡыҙыл бит әле.

— Әсәй, ошоно алайыҡ, — тине Гөлниса, ҡыуанып.

— Оҡшағас, алайыҡ һуң, ҡыҙым.

Ҡыҙҙың матурлыҡты таныуы һатыусы апайға ла оҡшаны.

— Исемең нисек? — тип һораны ул.

— Гөлниса.

— Исемең дә матур. Күлдәгең дә килешә. Һаҡлап ҡына, бысратмай ғына кей инде.

Гөлниса менән әсәһе һатыусы апайға рәхмәт әйтте.

— Тағы ла килегеҙ. Һәйбәт күлдәктәр күп була беҙҙә, — тип оҙатып ҡалды уларҙы яғымлы апай.

Гөлниса, яңы күлдәген кейеп, урамға уйнарға сыҡты. Әхирәттәре уға һоҡланып ҡаранылар.

— Ҡотло булһын күлдәгең. Ҡайһы магазиндан алдығыҙ?

— «Балалар донъяһы»нан. Унда шундай һәйбәт апай эшләй. Ул бөтә ҡыҙҙарға ла ма-а-атур күлдәк һата. Үҫкәс, мин дә һатыусы булам. Ошондай күлдәктәр, яулыҡтар, туфлиҙар, кәнфиттәр һатырмын, йәме.

...Кисен Гөлнисаның теше һыҙлап китте. Иртән уны әсәһе поликлиникаға алып барҙы. Аҡ халат, аҡ ҡалпаҡ кейгән врач апай Гөлнисаны йыуатты:

— Илама, һылыу, илама. Бер сәғәт тә үтмәҫ, тешеңдең һыҙлауы баҫылыр.

Врач апай Гөлнисаны, креслоға ултыртып, тешен ҡараны ла, яғымлы итеп:

— Саҡ ҡына түҙ инде, аҡыллым, — тине.

Поликлиниканан ҡыҙ йылмайып сыҡты. Врач апай дауалағас, теше һыҙламай ине инде.

Өйҙәренә ҡайтып етеү менән, Гөлниса әхирәттәре янына йүгерҙе. Ҡыҙҙарға ауыҙын ҙур асып:

— Ҡарағыҙ әле, ҡара, тешемде күрәһегеҙме? Врач апай дауалағас, һыҙлауы баҫылды ла ҡуйҙы, — тине. — Үҫкәс мин дә теш врачы булам. Тешегеҙ һыҙлаһа, миңә генә килерһегеҙ, йәме?

Әхирәттәренең Рәмзиә исемлеһе ҡысҡырып көлдө:

— Кисә генә һатыусы булам, тигәйнең. Бөгөн инде врач булғың килә.

Гөлниса аптырап ҡалманы:

— Ә мин тәүҙә һатыусы, унан врач булам, — тине.

— Булдың ти, булмай ҙа ни. Ана, минең әсәйем — аш бешереүсе, һинең әсәйең — тәрбиәсе. Һөнәрҙе көн һайын алмаштырмайҙар. Белдеңме?

Гөлниса бер аҙға аптырап ҡалды. Аяҡ осона ҡарап, уйланып торҙо ла:

— Ярай, үҫкәс кем булырымды мин һеҙгә иртәгә дөпдөрөҫөн генә әйтермен, — тине.

1. *Көлдәгең дә килешә* тигән һөйләмде руссаға тәржемә итеп ҡарағыҙ. Килешә һүҙенең тағы ниндәй мәғәнәләре бар?
2. Гөлнисаның һөнәр һайлауына һеҙ нисек ҡарайһығыҙ? Үҫкәс ул кем булыр икән, нисек уйлайһығыҙ? Ә үҙегеҙ,

үҫкәс, кем булырға йыйынаһығыҙ? Кешенең һөнәре ниндәй булырға тейеш?

3. Үҙегеҙгә оҡшаған бүлек буйынса изложение яҙығыҙ.
4. Хикәйәне сәхнәләштерегеҙ.

**65-се күнегеү.** «Тылсымлы» һүҙҙәрҙе уҡығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Һаумыһығыҙ!
Хәйерле иртә (кис, көн, юл)!
Йоҡоғоҙ тәмле булһын!
Ашығыҙ тәмле булһын!
Юлығыҙ (эшегеҙ ) уң булһын!
Ялығыҙ күңелле үтһен!
Һау булығыҙ!
Хушығыҙ!
Иҫән йөрөгөҙ!
Рәхмәт!
Ғәфү итегеҙ!
Зинһар!
Еңел быу менән!

**66-сы күнегеү.** Рус телендәге һөйләмде уҡығыҙ. Ҡунаҡҡа нисә кеше саҡырылған? Нисек белә алабыҙ?

Марат: «Мы приглашаем в гости тебя сестру отца мать жену сына твоего брата».

Башҡорт телендә лә шундай буталсыҡ һөйләм төҙөп ҡарағыҙ.

## ҠӘМӘН МЕНӘН СӘМӘН, КАРТУФ СӘСКӘН СӘЛМӘН

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

### I

Борон-борон заманда, һайыҫҡандар ала саҡта, олатайҙар бала саҡта, булған, ти, Аҡбулат тигән бер бабай менән Һылыубикә тигән бер әбей. Уларҙың булған, ти, өс улы.

Быларҙың өлкән ике улы, Ҡәмән менән Сәмән, һүҙгә һүрән, эшкә һүлпән, йомош ҡушһаң, елкәләрен тырнаусан, ашарға тигәндә, йүгереп килеүсән, етәкләшеп бергә йөрөүсән, береһе эшләгәндә, икенсеһе ҡул ҡаушырып, ауыҙ асып ҡарап тороусан булғандар, ти. Кинйә улдары Сәлмән эшкә сапсан, йомошҡа егәрле, һүҙгә үткер, уйға зирәк булған. Тотонған бер эшен ҡарап туйғыһыҙ итеп эшләр булған. Бесән сабырға тотондомо, һә тигәнсе, бер күбә бесәнең сабып та ҡуйылған, утын ҡырҡырға тотондомо, алды-артыңа ҡарағансы, бер йөк утын өйөп тә ҡуйылған. Бабай менән әбей кинйә улдарына кинәнеп бөтә алмағандар. Сәлмәндең былай булыуы Ҡәмән менән Сәмәнгә бер ҙә оҡшамаған. Уларҙың көнсөллөгө килгән.

Сәлмәндең башында ике бармаҡ баҫымындай ялтыр урын булған. Көнсөл ағалары өсөн был етә ҡалған. Улар ҡустыларын гел генә:

— Сәлмән таҙ, ялтыр баш! — тип үсекләр булғандар. Ә Сәлмән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Таҙ кеше тапҡыр була, маңлай өҫтө таҡыр була, башы ялтыр була, ә аҡылы алтын була, — тип йылмайып ҡына ҡуя торған булған.

Берҙән-бер көндө быларҙың аталары үлеп киткән. Үлер алдынан ул үҙенең балтаһын оло улы Ҡәмәнгә, бысҡыһын уртансы улы Сәмәнгә мираҫ итеп ҡалдырған. Кинйә улы Сәлмәнгә кәйлә тейгән.

Бер ваҡыт быларҙың утындары бөтөп киткән, ти. Әсәләре:

— Утынға барып ҡайтыр инегеҙ, — тигән.

Сәлмән, тиҙ генә йыйынып, урманға киткән. Ағалары:

— Һин балта менән бысҡыны ал да атлай тор, беҙ һине ҡыуып етербеҙ, — тип тороп ҡалғандар, ти.

Сәлмән ағаларын көтөп тормаған, урманға килеп, ағастарҙың иң төҙөн генә һайлап, берәм-берәм йығып, шунда уҡ ботап, бысып, өйөп тә ҡуйҙы, ти. Төштән һуң ғына килеп еткән Ҡәмән менән Сәмәндең, быны күреп, эсе бошоп китте, ти.

— Эй, ялтыр баш, ялтыр баш! Беҙҙең балта менән бысҡыға хужа булып та алғанһың икән! Эштән сығарып, үтмәҫләп бөтөргәнһең! Таш киҫтеңме әллә? – тип балта менән бысҡыны Сәлмәнгә ҡалдырып ҡайтып киткәндәр. Сәлмән, бер үҙе ҡалып, тағы бик күп утын ҡырҡып өйгән дә кискә генә ҡайтып киткән, ти.

Эштән арып ҡайтҡан Сәлмән йоҡларға ятҡас та, Ҡәмән менән Сәмән, үгеҙ егеп, урманға киттеләр, ти. Килеп етһәләр, аптырап ҡалдылар, ти, былар. Сәлмән эшләгән ерҙә ун-ун биш йөккә лә һыймаҫлыҡ утын өйөлөп ята икән. Ҡәмән менән Сәмән әҙер утынды, тауҙай итеп, арбаны шығырлатҡансы тейәп алдылар, ә өйөүле утын кәмемәне лә, ти. Быны күреп, был ике эшлекһеҙҙең асыуы ҡабара башланы, ти.

— Сәлмән үҙе килһә, утынды икәүебеҙҙән дә күберәк алып ҡайтыр. Әсәйебеҙ беҙҙе түгел, уны маҡтар. Берәй аҡыл уйлап табырға кәрәк, — тиҙәр былар. Шунан: — Туҡта, ҡылайыҡ әле ҡылыҡты! — тип, кәңәш беркетәләр ҙә ҡустыларының утынын үртәп китергә булалар. Ут төртөп яндырып бөтөрәләр ҙә ҡайтып китәләр. Ә ҡайтҡас:

— Әсәй, бына беҙ күпме утын ҡырҡҡанбыҙ! Утындың бына ниндәйен алып ҡайтырға кәрәк ул! — тип маҡтаналар.

Иртәгәһен таң менән Сәлмән дә, үгеҙ егеп, урманға бара. Ҡараһа, өйөп киткән утын урынында күгәреп ятҡан көл өйөмөнән башҡа бер нәмә лә юҡ, ти. Ни хәл итмәк кәрәк? Әрәм булған утын өсөн бошоноуын бошонған, ти, Сәлмән. Ләкин яңынан утын ҡырҡып тормаған. Көлдөң үҙен йыйып алып, арбаһына өйөп тейәгән дә ҡайтҡан да киткән, ти.

Үгеҙ, ҡәһәрең, ашығыуҙың ни икәнен дә белмәй — атлайыммы, атламайыммы тигәндәй итеп кенә баҫа, ти, аяҡтарын. Сәлмән, көл өҫтөнә түшәлгән сәкмәненә салҡан ятып, оҙон көйҙәр көйләп барғанда, бер заман үгеҙ шып туҡтаны ла ҡуйҙы, ти. Сәлмән башын ҡалҡытып ҡараһа, үгеҙҙең бер ҡапҡа алдында торғанын күрҙе, ти.

Абайлабыраҡ ҡараһа, был ҡапҡа күрше урыҫ ауылындағы белешенеке булып сыҡты, ти.

**67-се күнегеү.** Текст юлдарына ҡарап, башҡорт халыҡ йырҙарының исемдәрен билдәләгеҙ.

1. Күршеләргә ҡунаҡ килгән
   Инде ни хәл итәйем?!
2. Ялан да ғына ерҙән болан килә…
3. Һандуғастар һайрар, ай, ер түгел,
   Кәкүк тә генә саҡырыр ер түгел…
4. Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй
   Ир-егеткәй менән ат башы…
5. Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
   Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын…

*(«Зөлхизә», «Азамат», «Урал», «Гөлнәзирә», «Сибай»)*

II

Сәлмән ни эшләргә лә белмәй торғанда, йорт хужаһы, йүгереп сығып ҡапҡаһын асты ла, башын эйеп, Сәлмәнде хөрмәтләп ҡаршы алды, ти.

Инеп, сәй эсеп, картуф ашап һөйләшеп ултырғанда, Сәлмәндең белеше:

— Көлдө ҡайҙа алып бараһың? — тип һораны, ти.

Сәлмән эштең ҡалай булғанын энәнән-ептән һөйләп бирҙе, ти. Белеше, уны йәлләп:

— Көлдө анау кәртә артына түк тә арбаңа картуф тейә, — тип әйтте, ти. — Әсәйеңә ашатырһың, оҡшаһа, ултыртып та ҡарарһың. Бәхетең булһа, үҫеп тә китер.

Сәлмән көлдө белешенең кәртә янына алып барып ауҙарҙы ла картуф тейәп алды, ти. Шунан ул, белешенә күп рәхмәт әйтеп, оҙон ғүмер теләп, ҡайтып та китте, ти.

Сәлмән, белешенән күрмәксе, һәйбәтләп картуф сәсеп ебәреү тураһында юл буйына уйлап ҡайтты, ти.

Ярай, Сәлмән Ҡыҙыл һыуындай оҙон-оҙон уйҙар уйлап, үгеҙен ыҡтырып ҡайта торһон, ә беҙ уның белешенә әйләнеп киләйек.

Сәлмәндең урыҫ белеше иртәгәһенә иртә менән Сәлмән ауҙарып киткән көлдө баҡсаһына таратып сыҡҡан. Шунан ерҙе һөрөп, бик һәйбәтләп йомшартып, картуф ултыртҡан. Көҙгә инде уның картуфы йәнә емерелеп уңған, ти. Хатта ҡуйыр урын да тапмай аптырап бөткән, ти. Шул арҡала тирә-яҡта уның даны киткән, ти. Барыһы ла киләләр, һорашалар, белешәләр, ти, ә ул эштең хикмәте ниҙә булыуын һөйләп, аңлатып бирә икән, ти…

Ярай, ул һөйләй, аңлата торһон, күрше-күләне тыңлай торһон, ә беҙ йәнә Сәлмәнгә киләйек.

Сәлмән ҡайтып еткәс, әсәһе ҡаҙан тултырып картуф бешереп ебәргән, ти. Уны, дүртәүләп ултырып, бик яратып ашанылар, ти. Шунан Сәлмән баҡсаны ҡаҙырға сығып китте, ти. Сәлмән эшләй, тирләп-бешеп ҡаҙына, ә Ҡәмән менән Сәмән ҡояшта ҡыҙына, ти. Шулай ҡыҙынып яттылар-яттылар ҙа, ти, был икәү, Сәлмән янына килеп, һорашмаҡ булдылар, ти.

— Әйт әле, Сәлмән ҡусты, һин ни эшләп утын алырға барып, картуф тейәп ҡайттың әле? — тинеләр, ти, улар.

— Үҙем дә аптырайым, — тигән булды, ти, Сәлмән, хәйләкәр йылмайып. – Әҙерләгән утынымды әллә ҡайһы һармағы үртәп киткән. Утын урынында көл генә өйөлөп ятып ҡалған. Бөтөнләй ҡайғыға ҡалдым. Түҙә алманым, үҙ-үҙемде белмәй, көлгә ятып аунай башланым. Үҙем аунайым, үҙем үкереп илайым. Шунан, көлдө арбаға тейәп, күрше ауылға киттем. Барып еттем дә: «Кем көлгә картуф алмаштыра?! Көлдөң иң яҡшыһы бар!» — тип өс тапҡыр ҡысҡырғайным, биҙрә-биҙрә картуф күтәргән бисә-сәсәләр арбамды һырып та алдылар. Кеше аунаған көл бында ҡыйбат йөрөй икән: уның бер биҙрәһенә ике биҙрә картуф бирәләр, ә кеше аунамағанына — бер генә биҙрә. Шулай итеп, мин туғыҙ биҙрә көлгә ун һигеҙ биҙрә картуф алып ҡайттым…

Шулай тине лә Сәлмән тағы эшкә кереште, ти. Ә Ҡәмән менән Сәмән, берәүгә лә һиҙҙермәйенсә, Сәлмәнгә лә әйтмәйенсә урманға китеп барҙылар, ти. Улар өс көн буйына утын ҡырҡтылар ҙа өйөп үртәнеләр, ҡырҡтылар

ҙа өйөп үртәнеләр, ти. Шунан, дүртенсе көнгә сыҡҡас, былар көл өйөмө янында уйға ҡалдылар, ти.

— Көлгә ятып аунауын аунап булыр инде уның, ә бына илауын нисек иларбыҙ? Бер ҙә илағы килмәй бит әле? — ти икән Ҡәмән.

— Иламаһаҡ та ярайҙыр. Беҙҙең өсөн Сәлмән илаған бит инде. Көл өҫтөндә илай-илай аунап ятырға беҙҙең ни ҡайғыбыҙ бар? — ти икән Сәмән.

Шунан улар көлдө борҡолдоғо сығарып ятып аунанылар ҙа, уны тейәп, күрше ауылға киттеләр, ти. Ауылға барып инеү менән:

— Кем көлгә картуф алмаштыра? Көлдөң иң яҡшыһы, икәүләп ятып аунағаны бар! — тип өс тапҡыр ҡысҡырҙылар, ти.

Башта был ауыл кешеләре уларға, шаяртып ҡысҡыраларҙыр, тип көлөп ҡарағандар. Ләкин тегеләрҙең бер туҡтамай урам буйлап ҡолаҡты ярырҙай итеп һөрәнләп барыуҙарын күргәс, асыуҙары килеп, урамға йүгереп сыҡҡандар:

— Был ниндәй алйот бәндәләр? Башында аҙыраҡ аҡылы булған кеше көлгә картуф алмаштыралыр шул!

— Ауылыбыҙҙа картуф ултыртыусы аҙ булғанлыҡтан көлөп, беҙҙе мыҫҡыл итеп йөрөйҙәр улар! — тип, Ҡәмән менән Сәмәнде тотоп алалар ҙа, уңлы-һуллы бәргеләп, көл тейәгән арбаларына һуҙып һалып, ҡайтарып ебәрәләр.

Кеше күҙенә күренергә оялып, Ҡәмән менән Сәмән күҙ бәйләнгәс кенә, үҙ ауылдарына ҡайтып инделәр, ти. Ҡайтһалар, Сәлмән баҡсаһындағы бөтә ерен ҡаҙып бөтөргән, хатта ҡул тырмаһы менән тырматып, иртәгә иртүк картуф ултыртырға әҙерләп ҡуйған.

Төндә, ай яҡтыһында, Ҡәмән менән Сәмән: «Был таҙ беҙҙе әҙәм көлкөһөнә ҡалдырып хур итте. Үҙен дә шыма ғына итеп төп башына ултыртайыҡ әле!» — тип кәңәш ҡорҙолар, ти. Шунан улар алып ҡайтҡан көлдәрен баҡсаға таратып тороп түктеләр ҙә, Сәлмән һиҙмәһен тип, көлдө тупраҡҡа аралаштырып, бөтә ҡаҙылған ерҙе, Сәлмәндең үҙе кеүек итеп, ҡул тырмаһы менән тырматып сыҡтылар, ти.

— Һемәйттек тегене! — тип ҡыуанышалар икән былар. — Бына үсһен инде картуфың! Көл иплəп кенә картуфыңдың тамырын ҡырҡһын әле! — тип көлөшәләр, ти, үҙҙәре.

Иртәгәһен Сәлмән таңдан тороп сыға ла баҡса тултырып картуф ултырта. Эште бөтөрөп, өйгә инеп барғанда, бер нәмә белмәй йоҡлап ятҡан ағаларын күреп, шарҡылдап көлөп ебәрә. Көлмәҫлек тә түгел шул — тегеләрҙең тештәре генә йылтырап күренә, үҙҙәре баштан-аяҡ көл-күмер менән бысранып бөткән, ти.

Ағалары уянып китәләр ҙә:

— Ниңә көләһең, таҙ? — тип, һикереп тороп, Сәлмәнде яғалап та алдылар, ти.

— Һинән күрмәксе, көл биреп картуф алырға барып, әҙәм көлкөһөнә ҡалып ҡайттыҡ!..

— Ғәйеп үҙегеҙҙәлер әле. Мин эшләгәнсә эшләмәгәнһегеҙҙер, моғайын, — тигән булды, ти, Сәлмән. — Хәҙер тикшереп ҡарайыҡ. Урманға барҙығыҙмы?

— Барҙыҡ.

— Утын үртәп, көл яһанығыҙмы?

— Яһаныҡ.

— Көлгә ятып аунанығыҙмы?

— Аунаныҡ.

— Аунағанда, күҙ йәшегеҙҙе сығарып иланығыҙмы?

— Юҡ, илап булманы. Уның урынына, көл менән күрше ауылға барғас, иланыҡ, — тиҙәр тегеләр. Ә Сәлмән:

— Унығы иҫәпкә инмәй. Ғәйеп үҙегеҙҙә. Көлдө тейәрҙән элек, өҫтөндә аунап иламағас, үҙегеҙҙе ауылда илатҡандар, — ти.

Ҡәмән менән Сәмән бер-берегенә ҡараштылар:

— Ғәйеп үҙебеҙҙә булған икән шул, — тинеләр, ти.

Көҙ көнө Сәлмән баҡсанан быйма башындай эре-эре картуф йыйып алды, ти. Әсәһе ҡаҙан тултырып картуф бешерҙе, ти. Ә Ҡәмән менән Сәмән картуф ашарға ултырырға ҡыймайыраҡ торалар икән, ти. Шунда Сәлмән:

— Ултырығыҙ, ағайҙар. Был картуфтың былай емерелеп уңыуына һеҙ ҙә тырышлыҡ күрһәттегеҙ бит. Урманда өс көн буйы көс түгеп утын киҫеп, шунан күрше ауылда ҡолаҡ төбөгөҙгә ала-ала, бер йөк көл килтерҙегеҙ. Көлдө, миңә һиҙҙермәҫкә тырышып, төндә баҡсаға һиптегеҙ. Ә картуфты уңдырыр өсөн, көл бик кәрәк ашлама икән ул, — тип һөйләп аңлатып бирҙе, ти.

Шул көндән бирле Ҡәмән менән Сәмән ҡустыларына ылығып, өс туған иң яҡын дуҫ булып, өсөһө лә берҙәй эшлекле, берҙәй уңған булып китте, ти. Шул көндән башлап, Сәлмәндең тирә-яҡта даны таралып, уны картуф сәскән Сәлмән тип йөрөтә башлағандар, ти.

**1.** Таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙләштерегеҙ, улар менән бер нисә һөйләм төҙөп яҙығыҙ.

**2.** *Емерелеп уңыу, ҡолаҡ төбөнә алыу, әҙәм көлкөһөнә ҡалыу, ягалап алыу* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Шул уҡ мәғәнәне икенсе һүҙҙәр менән әйтеп бирегеҙ.

**3.** Сәлмән әкиәттә бер урында *үкереп илай*, икенсе урында *шарҡылдап көлә*. Илауҙың, көлөүҙең тағы ниндәй төрҙәре бар? Уларҙың мәғәнә нескәлектәренә төшөнөгөҙ, дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.

**4.** Әкиәттең йөкмәткеһен һөйләргә өйрәнегеҙ.

**5.** Ағалары Сәлмәнде алйот тип битәрләй, һеҙҙеңсә, кем аҡыллыраҡ? Фекерегеҙҙе раҫлап, текстан миҫалдар килтерегеҙ.

**6.** Әкиәт геройҙарына тулы характеристика бирегеҙ. Үҙегеҙгә нығыраҡ оҡшаған геройға хас сифаттарҙы яҙып ҡуйығыҙ.

**7.** Сәлмәндең картуфты нисек үҫтергәнен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Һеҙҙең картуф үҫтергәнде күргәнегеҙ йәки үҙегеҙ үҫтереүҙә ҡатнашҡанығыҙ бармы? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.

**8.** Сәлмәнгә тиклем уларҙың ауылында картуф сәскән кеше булмаған. Ни эшләп икән? Шуның сәбәбен аңлатығыҙ.

**9.** Әкиәттең иң һуңғы абзацын диктант итеп яҙығыҙ, берберегеҙҙең эштәрен тикшереп, баһа ҡуйығыҙ, ебәрелгән хаталарҙың сәбәбен аңлатып ҡарағыҙ.

**10.** Үҙегеҙгә «Ижад дәфтәре» булдырығыҙ. Ололарҙан һорашып, берәй әкиәт яҙып алығыҙ. Әкиәттәрегеҙҙе «Ижад дәфтәре»нә яҙып ҡуйығыҙ.

**68-се күнегеү.** Түбәндәге һорауҙарға мөмкин тиклем күберәк яуаптар бирегеҙ.

1. Уҡыусы *уҡыймы*?
2. *Уҡыусы* уҡыймы?

Өлгө: *Малай уйнаймы? — Эйе, малай уйнай. Эйе, уйнай. Эйе. Юҡ, малай уйнамай. Юҡ, уйнамай. Юҡ.*

**69-сы күнегеү.** Диалог ҡороғоҙ.

1. Һинең тыуған көнөң ҡасан?
2. Һин тыуған көнөңдө байрам итәһеңме?
3. Үҙеңдең тыуған көнөңә кемдәрҙе саҡырҙың?
4. Дуҫыңдың (ҡустыңдың, һеңлеңдең, апайыңдың, ағайыңдың) тыуған көнө ҡасан?
5. Һин дуҫыңдың тыуған көнөнә бараһыңмы?

*Мостай Кәрим*

## БАШЛЫҠ ҺАЙЛАУ

*(«Өс таған» повесы буйынса)*

### I

...Беҙҙең яҡта кешеләр етди нәмәләр тураһында аяҡ өҫтө баҫып һөйләшмәйҙәр. Аҡылды ултырып йыялар. Малайҙар – Ғабдулла, Айҙар һәм Вәзир – йәшел үлән өҫтөнә аҡыл йыйырға ултырҙылар.

— Кирәмәтте ҡотҡарырғамы, юҡмы? — тигән һорауҙы ҡабатлауҙың кәрәге юҡ ине. Ул, һис шикһеҙ, ҡотҡарылырға тейеш. Ә ҡотҡарыу юлдары тураһында фекер төрлөсәрәк булды. Айҙар колхоздың балыҡсылар бригадаһына барып ярҙам һорарға кәңәш итте. Вәзир уны үсекләргә үк кереште:

— Ярҙам, ярҙам, имеш... Бар, бөтә ауылға сығып ҡысҡыр, ярҙам һора. Бахыр. — Ул теш араһынан серт итеп төкөрөп ҡуйҙы.

— Башта уҡ ант итәйек, малайҙар, — тине Ғабдулла. — Был — сер. Өндә лә, төштә лә, аҫһалар ҙа, киҫһәләр ҙә, серҙе сисмәҫтән булһын. Кем телен тыя алмай, ул һатлыҡ йән тип аталасаҡ. Антмы?

Үҙе ҡуш ҡулын маңлайына ҡуйып ант итте:

— Ант!

Уның артынан Вәзир менән Айҙар ҡабатланы:

— Ант!

— Ант!

— Ыуылдырыҡлыһын һайлап ҡына беҙгә ҙур бер күнәк балыҡ тоторға кәрәк, — тине Ғабдулла.

Вәзир һикереп үк торҙо:

— Ниңә уны тотоп торорға? Мин Ҡылыстағы балыҡсыларҙың балығы ҡайҙа торғанын беләм. Әңер төшкәс, бер түгел, ике күнәк сәлдереп килтерәм мин һеҙгә. Тик һалып торорға мурҙа ғына булһын.

— Батмай. Тура эште кәкре ҡул менән эшләмәйҙәр! — Был һүҙҙәрҙе Ғабдулла әйтте.

Вәзир ҙә тиҙ генә ҡойолоп төшмәне:

— Ҡалайыраҡ эре сирттергән була, — тине ул, һуҙа биреп, — әйтерһең, башлыҡ...

— Малайҙар! — тип ҡысҡырҙы Айҙар. — Беҙгә ысынлап та бер башлыҡ кәрәк. Кем башлыҡ була?

Ҡалған икәү, йәнәһе, төптән уйлаған булып, байтаҡ ҡына өндәшмәй торҙо. Сөнки кәңәш ваҡытында һәр һүҙгә тиҙ үк ҡушылып барыу ир кешегә килешмәй. Шулай ҙа Айҙарҙың тәҡдимен иғтибарға алмау мөмкин түгел ине.

— Башлыкты һайларға кәрәк, — тине һайлау-һайланыуҙарҙың рәтен яҡшы уҡ белгән Ғабдулла.

Шул саҡ Вәзир үҙенең барлы-юҡлы баҫалҡылығын бөтөнләй юғалтып ташланы. Ул, ҡыҫыҡ ҡара күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, ялбарырға тотондо:

— Малайҙар, ә, малайҙар, минең бер генә лә башлыҡ булғаным юҡ... — Хатта уның тауышы ҡалтыранды. —

Айҙар ҡыш буйы класта староста булды. Ғабдулла стена гәзитенә һайланды, район слётына барҙы. Бер мин генә...

Вәзирҙең уң күҙенән бер бөрсөк йәш бына-бына тәгәрәп төшәм тигәндә, Ғабдулланың тау еле кеүек һалҡын тауышы уны тыйып ҡалды:

— Башлыҡты һорап алмайҙар!

Ләкин Вәзир өмөтөнән тиҙ генә баш тартманы. Ул үҙенә шундай хәйләкәр юл уйлап тапты:

— Шыбаға! Кем өҫкә сыға — шул башлыҡ була.

Инде уға Айҙар ҡаршы төштө:

— Шыбағаны уйында ғына тоталар. Тапҡан уйын! Кем уҙарҙан ярышырға ла, уҙған кеше башлыҡ була!

Хәҙер Вәзир арҡа терәберәк һүҙ башланы:

— Харап икән. Йүгеректе башлыҡ итергә, имеш. «Башлыҡ» ул «аяҡ» түгел, «баш» һүҙенән алынған — белмәһәң, бел. Иң йәтеше уның — мәргәнлектә ярышыу. Кем мәргән ата — шул командир. Ана, Ғабдулла әйтһен!

Ғабдулла, әлбиттә, үҙ фекерен әйтеүҙән баш тартманы:

— Иң дөрөҫөн әйтәйемме?

— Әйт!

— Иң дөрөҫө — көрәштә көс һынашыу. Кем алышта еңә — шул башлыҡ.

## II

Ғабдуллаға ҡаршы төшөү урынһыҙ булһа ла, малайҙар оҙаҡ бәхәсләштеләр. «Ҡоро көс күрһәтеп кенә башлыҡ булыу замандары үткән инде», — тигән өсөн Вәзирҙең саҡ-саҡ ҡына яңағына эләкмәне. Шулай ҙа, аҙаҡ килеп, ғәҙеллек еңде. Өсөһөнөң дә һүҙе һүҙ булды.

Башта малайҙар үҙҙәре ултырған ерҙән ауыл ситендәге яңғыҙ ҡарағасҡа тиклем йүгереп уҙышырға булдылар. Өсөһө лә, балаҡтарын төрөп, Айҙар таяҡ менән һыҙып билдәләгән һыҙыҡҡа баҫтылар.

Вәзир команда бирҙе:

— Раз, два, пли!

Йәйәнән ысҡынған уҡ шикелле, Айҙар шунда уҡ атлығып алға сыҡты. Их, йүгерә лә һуң! Табандары ергә лә

теймәй, тик үксәләре генә алмаш-тилмәш ялтырап бара. Байтаҡ ара Ғабдулла ла унан артыҡ ҡалышманы. Вәзир, инәһенә эйәрер-эйәрмәҫ барған ялҡау ҡолон һымаҡ, артта уҡ тороп ҡалды. Унын Айҙарға асыуы килде: «Ерән шайтан! — тине ул эсенән. — Ботон таш менән бәреп һындыраһыңмы ни? Һөрлөгөп тә китмәй бит, исмаһам!» Айҙарҙың һөрлөгөргә самаһы юҡ ине. Ул, Ғабдулланы дилбегә буйы артта ҡалдырып, ҡарағасты килеп ҡосаҡланы. Ғабдулла икенсе урынды алды.

Ярты юлға еткәс, Вәзир лап итеп ергә ултырҙы. Ул, аяғын күтәреп, нимәлер соҡсонорға тотондо. Күрәһең, табанына сүп кергәндер. Бер аҙҙан ул, аҡһай биреп, иптәштәрен ҡыуып етте.

— Ниңә шул тиклем йән-фарман сабаһың, аяҡтарыңды ҡыҙғаныр инең саҡ ҡына, — тип көлдө унан Айҙар.

— Аяғыма сүп керҙе, — тине Вәзир. — Мине ярышта ҡатнашмаған тип иҫәпләгеҙ! – Ул, бәхәскә инмәй генә, үҙенең еңелеү оятын күтәрергә мәжбүр булды.

Эште оҙаҡҡа һуҙмай, ярыштың яңы төрө башланды. Тәүҙә өсөһө лә һәр саҡ янда йөрөй торған ҡоралдарын — рогаткаларын салбар кеҫәләренән һурып сығарҙылар. Бер тауыштан ярыштың шарттары раҫланды. Ҡарағастың түбәндә генә һерәйеп торған ҡоро ботағына Айҙарҙың сигелгән түбәтәйен ҡуйҙылар. Ҡарағастан утыҙ аҙым үлсәп, таяҡ ҡаҙанылар. Ошонан тороп атырға тейештәр. Кеҫәләрҙә һәр саҡ йөрөй торған запастан иң йомро, иң шыма өсәр таш алдылар. Өс атыуҙа түбәтәйгә кем күберәк тейҙерә — тимәк, шул ота. Сиратты алфавит буйынса билдәләнеләр. Беренсе булып Айҙар атты. Тәүге таш выжлап осоп китте, ләкин ҡайҙа барып тейгәнен берәү ҙә күрмәне. Икенсеһе — шап итеп ҡарағастың үҙенә һуғылды. Өсөнсөһөн Айҙар бик оҙаҡ тоҫҡаны. Инде быныһы түбәтәйҙе осороп алып китергә тейеш ине. Ләкин таш үҙ юлына китте, түбәтәй ҡымшанмай тора бирҙе.

Икенсе булып майҙанға Вәзир сыҡты. Башта бик етди ҡиәфәт менән бер талай сәпкә ҡарап торҙо. Ашыҡмай ғына рогаткаһын ҡорҙо. Бына ул тоҫҡай башланы.

Тап шул ваҡытта уның йәлпәк танауына бер серәкәй килеп ҡунды. Ләкин Вәзирҙең уға иҫе китмәне. Быны күреп торған Айҙарҙың эсе бошто. «Ҡурҡаҡ һин, серәкәй, — тип әрләне ул эсенән генә оҙон морондо. — Танауына ҡунғансы, күҙенә килеп инһәң, ни ереҢ кәмер ине, йүнһеҙ... Етмәһә, минең сигелгән түбәтәйгә ата». Айҙар һуҡранып та бөтә алманы, түбәтәй осоп та китте.

— Бер ҡоймаҡты майланыҡ, — тине Вәзир эре генә. Ғабдулла йүгереп барып түбәтәйҙе кире урынына ҡуйҙы. Икенсе атыуҙа түбәтәй, йәмшәйеп, тағы ла килеп төштө. Был юлы Айҙарҙың башы сатнап китте. Таш, әйтерһең, уның түбәтәйенә түгел, маңлайына килеп тейҙе. Вәзир үҙенекен ҡабатлай бирҙе:

— Ике ҡоймаҡты майланыҡ!

Өсөнсө атыу бәхәсле булып сыҡты. Түбәтәй төшөүен төштө, ләкин ул ботаҡ һелкенеүҙән генә төштө. Таш был юлы түбәтәйгә түгел, ботаҡҡа тейгәйне. Вәзир тағы ла тантаналыраҡ итеп йәнә ҡысҡырған булды.

— Өс ҡоймаҡты майланыҡ!

— Майламайыраҡ тор әле... — тине Айҙар, эстән һөйөнөп, — майың етмәҫ!

— Күҙең ҡыҙамы? Эсең әрнейме? — Өсөнсө атыуҙың буш булыуын Вәзир үҙе лә белә ине. Ләкин маҡтансыҡ йүгеректе үсекләгеһе килде. — Бына шулай атырға кәрәк, Айҙар мырҙам. Был һиңә тыр-тыр йүгереү түгел.

— Шул тиклем маҡтаныуҙан нисек телдәре талмай, — тип бошондо Ғабдулла. — Вәзирҙең өсөнсө ташы барыбер иҫәпләнмәй. Харамлашма ла!

## III

Вәзир ҙә артыҡ ныҡышманы. Сөнки ул Ғабдулланың уҙа алмаҫын яҡшы белә ине. Ысынлап та, Ғабдулла, өс атыуҙан бары бер генә тейҙереп, икенсе урынға сыҡты.

Яңғыҙ ҡарағастың күләгәһе Вәзирҙәрҙең картуф баҡсаһына барып еткәндә, көрәш майҙаны асылды. Шыбаға буйынса, тәүҙә Вәзир менән Айҙар, устарына төкөрөп, ҡара-ҡаршы килеп баҫтылар.

— Алыш бармы, еңеш бармы? — тине Айҙар.

— Алыш та бар, еңеш тә бар! — Вәзир тағы ла бер тапҡыр усына төкөрҙө.

Һабантуй майҙанындағы көрәшселәргә оҡшатып, улар яурынға-яурын һуғып алдылар. Шунан һуң ғына, бер-береһенең күлдәген арттан бөрөп тотоп, билдән алыштылар, икеһе лә мышнап төштө. Ләкин берәү ҙә бил бирмәне. Малайҙарҙың көсө бер сама булһа ла, Айҙар киҫкә кеүек ауыр Вәзирҙе күтәреп сөйөргә иҫәп тотмай ине. Ул бер нисә тапҡыр үҙе ҡырын йығылып, Вәзирҙе баш аша осорорға маташып ҡараны, әммә теге гөрҫ итеп уның өҫтөнә ауып торҙо. Хатта бер ваҡыт Айҙарҙың үпкәһе боғаҙына килгәндәй булды.

Алыш тауыш-тынһыҙ дауам итте. Аяҡ салыу кеүек харамлашыуға берәү ҙә барманы. Бер саҡ иҫләмәгәндә генә, Вәзир Айҙарҙы бөрөп алды ла, билен өҙөрҙәй ҡыҫып, күкрәгенә күтәрҙе. Айҙарҙың яҙғы себешкенән яңы ғына ҡотолоп килгән аяҡтары ерҙән өҙөлдө. Улар, таяныс эҙләгән шикелле, тыпырсынырға тотондолар, тик таяныс таба алманылар. Вәзир, ҡырын йығыла биреп, оҙонса буйлы сибек Айҙарҙы баш аша ырғытты. Шул ваҡыт нимәлер пыр-р-р итеп йыртылып китте.

Тәгәрәп ятҡан Айҙарҙың ике усында Вәзир өҫтөндәге зәңгәр күлдәктең ике итәге ине. Хужа өҫтөндә бары ике еңе менән яғаһы ғына эленеп ҡалған. Вәзирҙең ғәҙәттән тыш батыр ҡиәфәтен башта күргән Ғабдулла ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Ҡабырғаһы менән осло ташҡа барып төшкән Айҙар, ауыртыныуын онотоп, Ғабдуллаға ҡушылды:

— Юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир! Ха-ха-ха!

Әлегә бер нәмә лә аңламаған Вәзир, битендәге тирен һөртмәксе булып, күлдәк итәген ҡапшаны. Ләкин ҡулы яланғас ҡорһағына тейҙе. Ул бары шунда ғына Айҙарҙың усындағы сепрәктәрҙең ҡайҙан йолҡоноп алынғанына төшөндө.

«Юлбарыҫ тиреһе ябынған баһадир» иптәштәренә ҡушылып көлмәне. Ниңәлер көлгөһө килмәне. Танауын йыйыра биреп, ғорур ғына әйтеп ҡуйҙы:

— Баш һау булһа, мал табылыр әле. — Был саҡ ул үҙендә дейеүҙе еңерлек көс һиҙҙе. Автомобиль тәгәрмәсенә тын өргән шикелле, кемдер уның беләктәренә көс өрөп тултыра, уның мускулдары ҡабарып тулыша ла таш булып ҡата, имеш.

Көрәш әле бөтмәгәйне. Вәзир Ғабдулла ҡаршыһына килеп баҫты:

— Алыш бармы, һалыш бармы?

— Алыш та бар, һалыш та бар!

Сәмләнеүҙең сигенә еткән Вәзир йән асыуы менән Ғабдулланың салбар ҡайышынан эләктереп алды. Ләкин Ғабдулла көрәште ҡабул итмәне. Сөнки «дошмандың» өҫтөндә күлдәге лә, билендәге ҡайышы ла юҡ ине. Етмәһә, салбары ла өлтөрәп кенә тора. Ҡыҫҡаһы, уның тотонор нәмәһе юҡ ине. Айҙар ҡайышын сисеп Вәзиргә бирҙе. Баштарын сайҡай-сайҡай һөҙөшөргә килгән йәш үгеҙҙәр кеүек ғәйрәтләнеп, малайҙар бер-береһенә ташландылар. Алыш был юлы баяғынан да яманыраҡ барҙы. Көрәшә торғас, улар алышҡан ер, үләне тапалып, тап-таҡыр булып ҡалды...

Вәзир ыңғайына йөрөп, Ғабдулла ялҡыуҙың сигенә сыҡты. Ул, ҡапыл теҙләнеп, Вәзирҙең күкрәк аҫтына инде. Күҙ асып йомғансы тегене яурынына алды ла зырылдап әйләнергә тотондо. Әйләнеп-әйләнеп йөрөнө лә, үҙе йығылып, Вәзирҙе баш аша тәгәрәтеп ебәрҙе. Оҙаҡ барған ҡаты алыш шулай ҡапыл ғына тамам булды.

Нимә тип былай көс һынашыуҙарын малайҙар онотоп та өлгөргәйнеләр инде. Арала иң зирәк иҫәпләнгән Айҙар, беренсе булып, бәхәстең башын хәтергә төшөрҙө.

— Һайлауҙар бөттө, — тине ул. — Башлыҡҡа суҡмарҙы тапшырырға ваҡыттыр инде.

Дүрт күҙ Ғабдуллаға төбәлде. Иң күп отош, әлбиттә, уның яғында ине. Хәтер ҡалыуҙың йәки үс һаҡлауҙың нимә икәнен белмәй торған Вәзир тәү башлап Ғабдулла алдына килеп баҫты:

— Теләһәң утҡа, теләһәң һыуға алып ин! Беҙ һинең тоғро юлдаштарың.

— Малайҙар, — тине Ғабдулла, — әкиәттә лә бит батырҙар өсәү булған: береһе йүгерек, береһе мәргән, береһе көрәшсе. Ҡалай һәйбәт булып сыҡты.

— Юҡ инде, иптәшкәй, баш берәү генә була. Һин — башлыҡ. Һиңә — ура! — Айҙар тауҙарҙы яңғыратып һөрән һалды.

Башлыҡҡа хас етди тауыш менән Ғабдулла үҙенең беренсе фарманын халыҡҡа иғлан итте:

— Кирәмәтте ҡотҡарыу өсөн төҙөлгән отрядҡа «Өс таған» тип исем ҡушырға. Ризамы?

— Риза. Артистар бейей торған шундай бейеү ҙа бар хатта, — тип өҫтәне Вәзир. Айҙар баш ҡына ҡаҡты.

Ошо тарихи фарманды ҡабул иткәндән һуң, малайҙар ҡосаҡлашып ауыл яғына атланылар. «Өс таған» был мәлдә үҙен мәңге ҡаҡшамаҫлыҡ итеп һиҙә ине.

1. *Эйәрер-эйәрмәҫ барыу, йән-фарман сабыу, тыр-тыр йүгереү*. Йәйәү хәрәкәт итеүҙең тағы ниндәй төрҙәре бар? Исемлекте дауам итегеҙ, һәр төргә аңлатма бирегеҙ. Русаға тәржемә итегеҙ.
2. Сәпкә атып тейҙергәнен Вәзир *ҡоймаҡ майлау* тип атай. Аңлатма биреп ҡарағыҙ. Яуап таба алмаһағыҙ, ололарҙан һорашығыҙ.
3. Текста осраған мәҡәлдәрҙе яҙып алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Рус, татар телдәрендә шуға оҡшаш мәҡәлдәр бармы?
4. Вәзир Айҙарҙы ни өсөн үсекләй? Ғөмүмән, нимә ул – үсекләү (үсекләшеү)? Һеҙ үҙ-ара үсекләшкәнегеҙ бармы? Яҡшы ғәҙәтме ул?
5. Һеҙҙә малайҙарҙың тормошо, «Өс таған» отрядының артабанғы яҙмышы тураһында ентеклерәк белеү теләге тыуманымы? Тыуһа, әҫәрҙе өйҙә үҙ аллы уҡып, йөкмәткеһе менән бер-берегеҙҙе таныштырығыҙ, үҙегеҙгә оҡшаған берәй бүлектең йөкмәткеһе буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ.

**70-се күнегеү.** Нөктәләр урынына тейешле ҡылымдарҙы кәрәкле формаға ҡуйып яҙығыҙ.

Азат башҡортса яҡшы ... (һөйләшеү-әйтеү). Ул башҡорт телен беренсе класта уҡ өйрәнә ... (башлатыу-

башлау). Наил әле таҡта янында ... (баҫыу-тороу). Уҡыусылар бөгөн яңы фильм ... (ҡарау-күреү). Айрат әкиәт уҡый, ә ҡустыһы уны ... (тыңлау-ишетеү).

**71-се күнегеү.** Һүҙбәйләнештәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

1. Высокая гора, высокий человек, высокий голос, высокая температура.
2. Низкий дом, низкая цена, низкий поступок, низкий голос.
3. Крепкий мороз, крепкий дом, крепкий чай.
4. Горячая печь, горячий привет, горячий человек.

**72-се күнегеү.** Ҡайһы һүҙ нык асыуланыуҙы белдерә?

1. Ҡәһәр һуҡһын, ҡәһәр генә һуҡһын ине, ҡәһәр һуҡҡыры.
2. Суҡынған, суҡынсыҡ, суҡынып киткер, суҡынғыры.

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙОМАҠТАРЫ

### Тәбиғәт күренештәре, үҫемлектәр, ҡош-ҡорт тураһында йомаҡтар

1. Бер ҡарттың ун ике улы бар,
Шуларҙың өсәүһе һоро көпө кейә,
Өсәүһе йәшел күлдәк кейә,
Өсәүһе һары сәкмән кейә,
Өсәүһе аҡ тун кейә.

2. Дөбөр-дөбөр итер,
Дөбөрләп китер,
Ялт-йолт итер,
Ялтырап китер.

3. Аяғы юҡ — ил гиҙә,
Күҙҙәре юҡ — йәш түгә.

4. Аллы-гөллө көйәнтәмде
Йылға арҡылы ташланым.

5. Өй башында ярты икмәк.

6. Беҙ, беҙ, беҙ инек,
Беҙ ун ике ҡыҙ инек.
Бер таҡтаға йыйылдыҡ,
Таң атҡансы юҡ булдыҡ.

7. Башы — тауҙа,
Аяғы — диңгеҙҙә.

8. Эсе ҡыҙыл, тышы ҡара,
Ышанмаһаң, ашап ҡара.

9. Сәскәһе — ағасында,
Алмаһы — тамырында.

10. Тышы йәшел, эсе ҡыҙыл,
Аҡса биреп алалар.
Уны күргән балалар
Тилмерешеп ҡалалар.

11. Түңәрәк күлдә эт өрә.

12. Башы бар — сәсе юҡ,
Күҙе бар — ҡашы юҡ.
Ҡанаты бар — оса алмай,
Болоттарҙы ҡоса алмай.

13. Быҙлай ҙа быҙлай,
Үпкән ере һыҙлай.

14. Башы — тараҡ,
Ҡойроғо — ураҡ.

15. Ҡуян ҡолаҡлы,
Ат тояҡлы.

Я у а п т а р: *күк күкрәү, йәшен йәшнәү; ҡарбуз; яҙ, йәй, көҙ, ҡыш айҙары; балыҡ; картуф; йылға; ҡарағат; йәйғор; болот; тәлмәрйен; әтәс; серәкәй; ай; ишәк; йондоҙҙар.*

**Кеше һәм унының көнкүреше тураһында йомаҡтар**

1. Иртән — дүрт аяҡ,
   Төш — ике аяҡ,
   Кис — өс аяҡ.

2. Ике малай бергә тора,
   Берен-бере күрә алмай.

3. Арымай-талмай,
   Арттан ҡалмай.

4. Үҙе генә ашалмай,
   Унан башҡа аш бармай.

5. Тәпәш күктән ҡар яуа.

6. Мейес артында бисура
   Билен быуып ултыра.

7. Башы булмаһа ла — эшләпәле,
   Аяғы булһа ла — итекһеҙ.

8. Бәләкәй генә бер көсөк
   Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә.

9. Тешен батыра бара,
   Сәйнәп төкөрә бара.

10. Ура, һуға, елгәрә,
    Үҙе тейәп ебәрә.

11. Ҡат-ҡат ҡатлама,
    Аҡылың булһа ташлама.

12. Ҡалаһы бар — халҡы юҡ,
    Диңгеҙе бар — һыуы юҡ.

Яуаптар: *тоҙ; һепертке; кешенең балалыҡ, йәшлек, ҡартлыҡ сағы; он иләү; бысҡы; китап; күҙҙәр; йоҙаҡ; карта; өҫтәл; күләгә; комбайн.*

**Һорау һәм мәсьәлә йомаҡтар**

1. Нимә ашамайынса йөрөй?

2. Эт ниңә өрә?

3. Һыйыр ниңә ята?

4. Әсәйеңдең һеңлеһенең еҙнәһе кем була?

5. Ике ата, ике улға, бер олатайға өс йомортҡа бешергәндәр. Уларҙың һәр береһе берәр йомортҡа ашаған. Нисек улай?

6. Бер алмағаста алты ботаҡ,
Ботаҡ һайын һигеҙ сәтләүек.
Бөтәһе нисә сәтләүек?

7. Ике һигеҙең — ун алты,
Тағы һигеҙ, тағы алты.

Яуаптар: *баҡыра белмәгәнгә; атайың; утыҙ; ултыра алмағанға; алмағаста сәтләүек үҫмәй; улар өсәү: атаһы, улы, ейәне; сәғәт.*

1. Һүҙлек ярҙамында таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
2. Үҙегеҙ белгән йомаҡтарҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Йомаҡ ҡойошоу буйынса ярыш үткәрегеҙ.
3. Йомаҡ уйлап сығарығыҙ. Уңышлы сыҡҡандарын ижад дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ.
4. Бер нисә йомаҡты русаға тәржемә итегеҙ, улар араһындағы оҡшаш һәм айырмалы яҡтарҙы табығыҙ.
5. Күмәкләп «Йомаҡ ни өсөн кәрәк?» тигән һорауға яуап эҙләгеҙ.

## ЙОМАҠ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Йомаҡ — ауыҙ-тел ижадының бик боронғо һәм үҙенсәлекле төрҙәренең береһе. Йомаҡтарҙа кешенең көндәлек тормошондағы ғәҙәти әйберҙәр тураһында һүҙ бара: әйберҙең төҫө, ҙурлығы, формаһы йәки башҡа берәй

үҙенсәлеге әйтелә, шунан сығып, кеше уның нимә икәнлеген әйтергә тейеш. Йомаҡ атамаһы **йомоу** (йәшереү) һүҙенән алынған. Йәғни йомаҡ — уйҙы йомоп, йәшереп әйткән фекер.

Йомаҡтар кешеләрҙең күҙәтеүсәнлеген, уйлау һәләтен, тапҡырлығын, зирәклеген үҫтереүгә хеҙмәт итә. Уларҙың йыш ҡына һорау йәки башватҡыс рәүешендә булыуы ла шунан. Шуға ла ул бигерәк тә балалар араһында йыш әйтелә.

*Динис Бүләков*

## ЯРАЛЫ КИТАП

### I

Һуғышҡа тиклем Әсләмдәрҙең ауылы бигерәк тә бәләкәй булған. Өлкәндәрҙең һөйләүенә ҡарағанда, ул ни бары утыҙ биш өйҙән генә торған. Ауылдың бәләкәйлеге етмәгән, уға, кәмһетеп, исемен дә тапҡандар бит әле: Йәтимәк. Ауыл бөтөүгә барғандыр, күрәһең, шул йәтимлеккә ишара яһағандар. Яҡын-тирәлә башҡа ауыл да булманы шикелле. Дүрт яҡтан да Йәтимәкте тауҙар уратып алған. Ә улары, үҙ сиратында, үтеп сыҡҡыһыҙ урман менән ҡапланған. Ауыл уйһыулыҡта ятҡанға күрә, бында хатта ҡояш та, иртә байып, һуң сыҡҡан.

Йәтимәк халҡы башлыса һунарсылыҡ менән көн күргән. Ирҙәр бында, ауылдары бәләкәй тип кәмһетһәләр ҙә, бик мәргән һунарсы булып танылғандар. Улар, тиреһен боҙмаҫ өсөн, теләһә ниндәй януарҙың күҙенә тоҫҡап ата белгәндәр. Ҙур ҡала баҙарҙарында кешеләр гел генә һорар булғандар:

— Был ҡиммәтле тирене ҡайҙан килтерҙегеҙ?

— Йәтимәктән…

Ошоно ишетеү менән, уйлап та тормайынса, бигерәк тә тиренең сифатына шикләнмәйенсә, һатып алғандар

тауарҙы. Ә инде һуңғараҡ, хөкүмәткә тапшыра башлағас, улар гел генә юғары сорт баһаһы алған. Бына ниндәй данлы булған бәләкәй генә Йәтимәктең ирҙәре, йәғни һунарсылары.

Һуғыш башланып киткәс, ҡайғы хәбәре Йәтимәккә лә килеп еткән. Мәргән һунарсылыҡта дандары таралған ирҙәрҙе бер ниндәй икеләнеүһеҙ яуға оҙатҡан ауыл. Утыҙ биш өйҙән утыҙ дүрт ир киткән яуға. Тик һуңғы, утыҙ бишенсе, өй генә фашистар менән алышҡа хужаһын ебәрә алмаған. Илғужа ағай бынан бер-ике йыл элек, һунарҙан яраланып ҡайтып, донъя ҡуйған булған. Айыу менән алышҡанда ҡаты йәрәхәтләнгән...

Бына шул утыҙ бишенсе өйҙә ике балаһы, бейеме — ире Илғужа ағайҙың әсәһе — менән уҡытыусы Фәғилә апай йәшәгән.

Йыйылышып бер һөйләшкән ваҡытта Фәғилә апай тора ла ауылдаштарына шундай хәбәр һала:

— Ҡайғырмағыҙ, дошман менән һуғышҡа утыҙ бишенсе өйҙән дә кеше барасаҡ!

Йәтимәк халҡы элек-электән ғәрсел, ғорур булған, ә инде ил алдына ауыр һынау көндәре килеп еткәс, уларҙың был тойғолары көсәйә генә төшкән. Улар хатта район гәзитендә: «Фашист эттәренә ҡаршы нәфрәтебеҙ сикһеҙ! Йәтимәк ауылы ошоға яуап итеп, дошман менән алышҡа утыҙ биш өйөнән утыҙ биш яугирын фронтҡа оҙатасаҡ...» — тип хат та баҫтырып сығарғандар. Әле бына, уйламайыраҡ әйтеп ысҡындырғандарын аңлап, ҡайғырышып ултыралар икән.

— Утыҙ бишенсе өй ҙә дошманға ҡаршы һуғышасаҡ! — тип йәнә ҡабатлаған Фәғилә апай, ауылдаштарының борсоулы күҙҙәренә ҡарап. Шунан тегеләрҙең береһе телгә килгән: — Фәғилә, ун йәшлек улыңды ебәрергә уйламайһыңдыр бит? Ҡыҙың бөтөнләй бәләкәй...

— Мин үҙем китәм!

— Һин? Ҡатын кеше?..

Бөтә халыҡ аптырашып бер-береһенә ҡараған.

— Эйе, мин! — тип ныҡлап ҡабатлаған Фәғилә апай. — Илғужа урынына үҙем барам…

Бәләкәй генә мәктәп эсендә бара икән йыйылыш. Бүлмәлә ҡәбер тынлығы урынлашҡан. Йәтимәктең утыҙ бишенсе өйөн уларҙың һуғышта ҡатнаштырғылары килмәгәнлеге күренеп тора.

— Их, Илғужа юҡ шул…

— Эйе, ир кеше булһа, икеләнеп тормаҫ инек…

Шунан сәбәп табалар:

— Юҡ, Фәғилә, һине ебәрә алмайбыҙ, — тиҙәр. — Кисер… Балаларың бар бит. Бәләкәйҙәр...

Шунда Фәғилә апай артынан теремек ҡарашлы бер әбей башын күтәрә. Бейеме икән, йәғни Илғужа ағайҙың әсәһе:

— Киленемә мин рөхсәт бирҙем! — тигән инәй ҡаты итеп. — Яуыз дошмандан беҙҙең өйҙән дә кемдер үс алырға тейеш. Бөтә ил ҡуҙғалғанда, беҙ нисек түҙеп ятайыҡ? Илғужам рухы шуны ҡуша…

Йәтимәк карттарының йәнә ғорурлығы уяна. Шулай ҙа, исем өсөн генә булһа ла, икеләнеп кенә һуңғы һорауҙы бирәләр:

— Ни бит… Фәғилә килен, балалар уҡытыусыһыҙ ҡала… Ауыл йәшәргә тейеш…

Фәғилә апай өндәшмәй, ҡараштары менән ишек төбөндәрәк торған йәш кенә бер ҡыҙҙы эҙләп таба. Эҙләп таба ла уға ымлай.

— Мин… моғайын, уҡытып тора алырмын балаларҙы… — ти ҡыҙыҡай. — Ете класс бөтөрөп ҡайттым…

Был юлы бөтәһе лә баш сайҡай.

Шулай итеп, берҙән-бер көндө Йәтимәк ауылы үҙенең һүҙендә тора: Бөйөк Ватан һуғышына үҙенең утыҙ бишенсе кешеһен оҙата. Бик ауыр кисерә халыҡ Фәғилә апайҙың китеүен. Кем-кем, ҡатын кеше бит… Балалары бар… Ләкин йәтимәктәр — ғорур. Улар теш ҡыҫып түҙә. Кешеһен яуға оҙатҡанда, күҙҙән йәш сығарыу уларҙа тыйылған була.

**73-сө күнегеү.** Дөрөҫ уҡығыҙ.

| | | |
|---|---|---|
| 1. а-тай | ай | та |
| ә-сәй | әй | тә |
| ы-сыҡ | ыҡ | ты-рыш |
| э-лә | эл | те-йен |
| о-ло | ос | то-лом |
| ө-кө | өр | тө-төн |
| и-ләк | ил | ти-мер |
| у-лар | ул | ту-ған |
| ү-лән | үс | тү-шәм |
| таш | арт | ҡарт |
| тәм | әйт | эш-кәрт |
| тыш | ыңҡ | шылт |
| тел | | терт |
| тоҡ | | ҡорт |
| төн | өрк | һөрт |
| тин | илт | һирп |
| туҡ | урт | сурт |
| түр | үрт | бүлк |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 2. һөңгө | таңға | иңкеш | зәңгәр |
| диңгеҙ | мәңге | аңҡый | еңгә |
| туңған | өҙәңге | тәңкә | аңҡау |
| һуңғы | саңғы | өйәңке | саңҡылдау |

## II

Бына ошо китеүенән һуң, Фәғилә апай тыуған ауылына әйләнеп ҡайтмай...

...Еңеү байрамын ҡаршыларға әҙерләнгән көндәрҙә пионер дружинаһы фронтовиктарға арналған музей булдырырға ҡарар итте. Музейҙы дәртләнеп ойоштороп ебәрҙеләр. Музей бүлмәһендә, Йәтимәк ауылының һәр өйөнән фронтҡа киткән утыҙ биш яугирға арнап, утыҙ биш айырым стенд яһап ҡуйҙылар. Стендтар ҡаршыһында быяла менән ҡаплап эшләнгән тартмалы өҫтәл. Һәр

быяла аҫтында, тартма эсендә, һуғышта ҡатнашыусы фронтовиктың яу юлдарын хәтерләткән шәхси әйберҙәре, орден-миҙалдар, гимнастёркалар, пилоткалар...

Айға яҡын мәктәп музейына уҡыусылар экспонат йыйҙылар. Фронт гәзиттәре, хаттар тупланды. Ҡыҫҡаһы, һәр стенд фронтовиктарҙың ҡаһарманлығы хаҡында һөйләй ине...

Йәтимәктә ауыл советы янында ветерандар комитеты эшләй. Еңеү байрамы алдынан, яуҙа һәләк булған ауылдаштарын эҙләп, төрлө ойошмаларға, хәрби архивтарға, айырым кешеләргә хаттар ебәргәйнеләр. Иртәгә музейҙы асабыҙ, тигән көндө генә бер хат килеп төштө ауылға. Ауыл советы рәйесе шул хатты йыйылған халыҡҡа уҡып ишеттерә:

— Фәғилә менән беҙ бергә хеҙмәт иттек... Ҡыйыу санитарка булды ул. Иң ҡаты яуҙарҙа ла ҡурҡып ҡалмай торғайны. Бик күп совет яугирҙарын һуғыш яланынан алып сыҡты башҡорт ҡыҙы. Улар, яңынан сафҡа баҫып, аҙаҡ әллә күпме ҡаһарманлыҡтар күрһәтте. Шулай булғас, Фәғилә лә — ысын мәғәнәһендә ҡаһарман! Тик бер фашист пуляһы уның ғүмерен өҙҙө... Уның ҡарауы, командирҙы ҡотҡарҙы.

Ҡәҙерле иптәштәр! Батыр һуғышсының туғандары иҫән булһа, минән боевой сәләм тапшырығыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мин яугир әхирәтемдең адресын белә алмай яфаландым. Хатығыҙ өсөн рәхмәт. Бына иҫтәлеккә уның юл тоҡсайында йөрөгән берҙән-бер китапты һалам. Мин уны, Фәғиләнең туғандары табылыр тип, оҙаҡ йылдар һаҡланым. Уның ғүмерен киҫкән фашист пуляһы ошо китапты ла тишеп үткән...

Шулай тип уҡыны ауыл советы председателе йыраҡ Украинанан килгән хатты. Ә китап ҡулдан ҡулға китте. Әсләмдең әсәһе һарғайып, күп нужа күргән китаптың тәүге битен асты ла ҡапыл илап ебәрҙе:

— Әсәкәйем!.. Бында яҙыуы ла бар...

Әсләм артыҡ түҙеп тора алманы, китапҡа үрелде. Уның елкәһе аша иптәше Мәжит тә ынтылып-ынтылып ҡарай ине. «Ҡорос нисек сыныҡты», — тип уҡыны Әсләм

китаптың исемен һәм бармағы менән китаптың ҡап уртаһындағы йәрәхәтте ҡәҙерләп һыйпаны. Гүйә, ул тиҫтә йылдар аша батыр йөрәкле Фәғилә өләсәһенең тауышын ишеткән кеүек булды: «Кешегә ғүмер бер генә бирелә...» Үлемһеҙ китап ижад иткән Николай Островскийҙың һүҙҙәре яңғырай ине Әсләмдең ҡолағы төбөндә.

— Яралы китап... — тип бышылданы ул.

Китап урап ҡайтҡас, һуғыш ветераны Ҡотлобулат бабай, бөтәһенә лә мөрәжәғәт итеп, былай тине:

— Фронт тоҡсайында ошо китапты йөрөткән беҙҙең Фәғиләбеҙ фәҡәт батырҙарса һәләк булған. Беҙ уның менән сикһеҙ ғорурланабыҙ. Ауылыбыҙҙа хәҙер өс йөҙ ҙә илле йорт. Ләкин Йәтимәктең ул саҡтағы һуңғы утыҙ бишенсе өйөнән фронтҡа киткән Фәғилә, ауылыбыҙҙың беренсе батыры булып, мәңге хәтеребеҙҙә ҡалыр... Ә был китап... Яралы китап... Күңелебеҙ яраһы булып, уны беҙгә һәр ваҡыт иҫебеҙгә төшөрөп торор. Уны музейҙың иң түренә ҡуйырға кәрәк.

1. Һүҙлек эше башҡарығыҙ: таныш булмаған һүҙҙәрҙең һүҙлек ярҙамында мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.
2. *Үтеп сыҡҡыһыҙ урман, көн күреү, донъя ҡуйыу, ҡәбер тынлығы, ауыр кисереү, теш ҡыҫып түҙеү* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләренә төшөнөгөҙ. Уларҙың мәғәнәһен икенсе һүҙҙәр менән әйтеп бирегеҙ. Рус телендә ошо уҡ мәғәнәне ниндәй һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр ярҙамында биреп була?
3. Йәтимәк ауылында ниндәй кешеләр йәшәй? Текстан уларҙы характерлаусы һүҙҙәрҙе табығыҙ.
4. Һеҙҙең туғандарығыҙ, таныштарығыҙ араһында һуғышта ҡатнашҡан ҡатын-ҡыҙҙар бармы?
5. Фәғилә апайға характеристика бирегеҙ. Уның ниндәй һыҙаттары һеҙгә бигерәк тә ныҡ оҡшаны?
6. «Һуғыш башланып киткәс...» тип башланған абзацты диктант итеп яҙығыҙ, бер-берегеҙҙең эшен тикшереп, баһалағыҙ.
7. Тыуған ил, халыҡ алдындағы бурыс тураһында әңгәмә үткәрегеҙ.
8. Хикәйәнең ни өсөн «Яралы китап» тип аталыуын аңлатығыҙ.

**74-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең яҙылышында хаталар юҡмы?

Беек гөлемеш
Байегет кейек

**Аңлатма:** *кейек* һүҙе генә дөрөҫ яҙылған. Ҡалғандарының дөрөҫ яҙылышын билдәләп ҡарағыҙ.

(Дөрөҫө: бейек, гөлйемеш, Баййегет.)

**75-се күнегеү.** Күренекле башҡорт йырсыларының исемдәре янына фамилияларын яҙығыҙ.

Рамаҙан ..., Мәғәфүр ..., Фәриҙә ..., Ғәзим ..., Нәзифә ..., Вәхит ..., Абдулла ..., Зәки ..., Сөләймән ...

*Ғилемдар Рамазанов*

## АҒАЙЫМ ХАТЫ

Ағын һыу төҫлө
Ағалар йылдар,
Ил һаҡлай инде
Ағайым Илдар.
Ватан сигенән
Килә хаттары,
Яҙа һағынып
Тыуған яҡтарын.

Ағайым яҙған:
«Һин йоҡлар саҡта,
Булам мин уяу,
Торамын һаҡта.
Бөгөн мин илдең
Алыҫ яғында,
Ил сиге уҙған
Йылға ярында.

Йә ямғыр яуа,
Йә сыға буран,
Ә мин барыбер
Посымда торам.

Бүленмәһен, тим,
Ҡустым йоҡоһо,
Мәктәбендә, тим,
Тыныс уҡыһын».

Ә бер хатында
Һүрәте килде —
Ағайым Илдар
Шундай һөйкөмлө!
Хәрби кейеме
Ниндәй килешкән,
Автомат тотоп,
Йылмайып төшкән.

Башы осонда
Балҡый ал байраҡ.
Ағайым минең —
Иң яҡшы һалдат.
Ватан һаҡсыһы
Ағайым — батыр,
Тиҙҙән хеҙмәтен
Тултырып ҡайтыр.

Илдең сигенә
Хат яҙып һалдым:
«Ағайым, һине
Күргәндәй булдым.
Мин дә сынығып
Үҫермен, ағай,
Илде һаҡларға
Китермен, ағай».

1. Шиғырҙың тәүге ике юлын иғтибар менән уҡып сығығыҙ. *Йылдар ағалар* тип шағир дөрөҫ әйтәме? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?
2. Ағаһының ил сигендә поста тороуы менән ҡустыһының йоҡоһо араһында ниндәй бәйләнеш бар? Аңлатып бирегеҙ.
3. Ололарҙан һорашып, китаптарҙан уҡып, белгәндәрегеҙҙе файҙаланып, ил сиген һаҡлаусы ғәскәрҙәр тураһында әңгәмә, мөмкин булһа, берәй сик һаҡсыһы менән осрашыу үткәрегеҙ.
4. Үҙегеҙгә оҡшаған бер строфаны ятлап, яттан яҙығыҙ, яҙмағыҙҙы тексҡа ҡарап тикшереп, баһалап ҡарағыҙ.
5. Аудиояҙма тыңлап, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

*Әнүр Вахитов*

## ӨС БӨРТӨК БОЙҘАЙ

### I

Ҡаты һуғыштан бик ныҡ яраланып ҡайтып төштөм. Яранан бигерәк, йөрәк һыҙлай, эс боша. Ауылда бер ир йораты юҡ. Ҡайтыу менән, колхоз идараһы миңә, ярҙам итеп, өс бот бойҙай бирҙе. Мин бит әле эштең асылын ул ҡәҙәре асыҡ белмәйем. Барҙым. Ат ҡараусы Мөхәмәтулла бабай үҙе, ярҙамлашып, үлсәшеп, арбаға һалышып йөрөнө. Келәт ишеге төбөндә ике малай тора ине. Кем малайҙары икәнен дә танырлыҡ түгел, ябыҡтар, йонсоғандар. Малайҙар гәрәбәләй күренгән ҡыҙғылт һары бойҙайға әллә нәмәгә ҡараған кеүек ҡарайҙар.

Аңлатып биреүе ҡыйын, шундай илаһи бер ҙурлау бар ине уларҙың күҙендә. Бына Мөхәмәтулла бабай тоҡто күтәрҙе лә арбаға алып китте. Малайҙар ҡапыл уның артынан ташланды. Баҡһаң, тоҡтоң ҡабырғаһында бәләкәй генә тишектән бөртөкләп кенә бойҙай ҡойола. Малайҙар келәт алдындағы тапанды туҙанына түгелгән шул бойҙай бөртөктәренә ташланғандар икән. Минең эстә ниҙер өҙөлгәндәй булды, күҙ алдарым ҡараңғыланды. Мин, аяҡтарым ауыртыуын да онотоп, арбаға ташландым һәм пилоткама тултырып бойҙай һалдым.

— Мә, туғаным, ҡыҙҙырып ашағыҙ...

Бер кем бер нәмә өндәшмәне. Малайҙарҙың өйҙәренә йүгереүен ҡарап торған һәр кемдең күңелендә әллә ниндәй буран, дауыл ҡупҡайны.

Ошо мәл минең күңелемдә мәңге онотолмаҫлыҡ булып уйылып ҡалды. Ошонан һуң мин икмәктең — был бөйөк һәм изге нәмәнең — ҡәҙерен аңлағандай булдым. Икмәк — кешенең аҙығы ғына түгел, ә ғорурлығы, бөйөклөгө, байлығы ул. Икмәк — кешене кеше иткән, уға тәбиғәт алдындағы көсөн, аҡылын байраҡ иткән нәмә ул. Икмәк — тормош ул. Бына мин нәмәгә төшөнгәндәй булдым. Ә беҙ бит уны асыҡҡанда ғына иҫкә төшөрәбеҙ, ҡәҙерләй белмәйбеҙ, иҫ киткес ғәмһеҙлек күрһәтәбеҙ. Әлеге бер пилотка бойҙай ваҡиғаһынан һуң мин, аяҡтар юҫыҡ йөрөргә эшкинмәһә лә, Әфҡәт менән Әхәтте генә түгел (ул малайҙар ошо Әхәт менән Әфҡәт булып сыҡты), бөтә ауылды, бөтә тирә-яҡ кешеләрен, бөтә донъяны туйҙырырҙай булып эшкә егелдем. Ауылдаштарым мине бригадир итеп ҡуйҙылар. Бригадирҙың хәле билдәле бит инде: өй беренсә йөрөйһөң. Кем нисек йәшәй, ҡалай тын ала, кемдә ниндәй шатлыҡ бар ҙа, кем ниндәй ҡайғыға тарыған. Һуғыштың иң ҡыҙыу саҡтары. Ауыр хәбәрҙәр йыш килә. Бындай саҡта, уртыңды сәйнәй-сәйнәй, тол ҡалған ҡатынға йылы һүҙ әйтәһең, етем балаларының башынан һыйпайһың. Шундай көндәрҙең береһендә әлеге Әхәттәргә барып индем. Өйҙәге ауыр тынлыҡ мине шунда уҡ шом эсенә алып инде. Малайҙар түрбашта

ултыра. Алдарында ҡатыҡ. Тик береһе лә ҡатыҡҡа ынтылмай. Ниндәйҙер бер һағайыу менән әсәләренә ҡарап, шаҡ ҡатҡандар. Йөҙҙәрендә әйтеп бөтөргөһөҙ һағыш, һорау, ғазап бар ине. Кескенә ошо ике бала йөҙөнә донъя үҙенең аяуһыҙ ҡаты ҡанаты менән ҡағылған. Мин кергәс, элеккесә шатланыу, ығы-зығы түгел, ҡуҙғалыусы ла булманы. Мин оло яҡта өҫтәл янында баш эйеп ултырған Мөзәйәнә еңгә янына барҙым. Уның ауыр ҙур ҡулдары дәфтәр битендәй генә ҡағыҙ өҫтөндә ята ине.

— Икенсе тапҡыр бит инде, ышанмаҫлыҡ та түгел, — тип ҡуйҙы ниндәйҙер ят тауыш менән Мөзәйәнә еңгә.

— Мөзәйәнә еңгә, — тинем мин, тауышыма яғымлылыҡ, ышаныс бирергә тырышып, — икенселәй килгәс, бигерәк тә ышанырға ярамай.

Мөзәйәнә еңгә минең һүҙҙәрҙе ишетмәне лә, буғай, тағы үҙенекен ҡабатланы.

— Икенсе тапҡыр…

Мин тиҙ генә малайҙарҙы сығарып ебәрҙем. Шуны ғына көткән кеүек, Мөзәйәнә еңгәнең башы өҫтәлгә һалынып төштө, ярһыулы тауыш тағы әлеге һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

— Икенсе тапҡыр…

Уның ҡарайып ҡатҡан бармаҡтары әлеге дәфтәр битендәй генә ҡағыҙҙы тырнап бөгәрләнеләр ҙә ике усҡа йомдолар:

— Икенсе тапҡыр… Ҡайғыһы яңыра торһон, тигәндәй, икенсе тапҡыр…

Мин ни эшләргә белмәй, әле егерме ете йәшендә генә көйө сикәләре салланған ошо ике бала әсәһе — тол ҡатындың сәстәрен һыйпап йыуатырға маташтым. Бер аҙҙан ул тынысланғандай булды. Ҡулын яҙҙы. Теге ҡағыҙҙы һыпырғыланы. Йөҙөнә ғәйепле кешеләрҙә генә була торған зәғиф кенә йылмайыу ятты. Ҡағыҙҙы ипләп бөкләне лә, карауатҡа баҫып, өрләккә ҡыҫтырҙы.

— Малайҙарым белмәһен…

О, ниндәй ғәжәп һин, әсә йөрәге!

Мин урамға сыҡтым.

1. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе һүҙлек дәфтәрегеҙгә яҙып алығыҙ, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, иҫегеҙҙә нығыраҡ ҡалһын өсөн, улар менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөп, телмәрҙә ҡулланып ҡарағыҙ.

2. *Зәғиф йылмайыу* тигәнде аңлатып ҡарағыҙ. Йылмайыуҙың тағы ниндәйҙәре була?

**76-сы күнегеү.** Дөрөҫ уҡығыҙ.

1. Һанашмаҡтарҙы уҡығыҙ һәм үҙегеҙ белгән ике һанашмаҡ яҙығыҙ.

1. Бер бабай юлға сыҡҡан,
Тәгәрмәсе ватылған.
Тәгәрмәсен йүнәтергә
Нисә сөй кәрәк булған?
2. Йәй китте, көҙ килде,
Өйрәк китте, ҡаҙ китте.
Һандуғастар һайраны.
Балалар ҙа йыйналды.
Ҡарға, сыпсыҡ,
Һин тороп тор, ул сыҡ.
3. Аладан-баладан,
Бесәй йөрөй йылғанан
Сәүкә, сыпсыҡ,
Һин ҡал, был сыҡ.
4. Алатыр-былатыр,
Тау яғынан таң атыр,
Һайыҫҡан, сыпсыҡ,
Һин ҡал, был сыҡ.

2. Бирелгән һүҙҙәрҙе сағыштырығыҙ һәм дауам итегеҙ.

труба — торба
кровать — карауат
бревно — бүрәнә
стол — өҫтәл
скирда — эҫкерт
дранка — тыранса

скатерть — эскәтер
крупа — көрпә
скамейка — эскәмйә
смола — ыҫмала
шляпа — эшләпә
князь — кенәз

## II

Әхәт менән Әфҡәт солан баҫҡысының аҫҡы тағтаһына ултырғандар ҙа аҡрын ғына һөйләшәләр. Ишек тауышына улар күтәрелеп ҡаранылар. Йөҙҙәрендә сабый ғына көйө тормоштоң ығы-зығыһын ғына түгел, ҡайғы-һағышын да етерлек күрергә өйрәнгән ҙур ҡара күҙҙәрендә мең төрлө һорау, борсоулы ҡайғыртыу ярылып ята ине. Мин, уларға ҡарап, яҡты йөҙ менән йылмайырға һәм килешергә тырышып күҙ ҡыҫтым. Әфҡәттең ҡалынсараҡ ирене тартылып алды ла йәйелеп китте. Йөҙөнә нур ҡалҡты. Сабый йылмайыуы минең һағыш тулы күңелемә шифа булып инде. Мин, үҙем дә һиҙмәҫтән, ихлас итеп тағы ла йылмайҙым. Был юлы Әхәт тә йәнләнде.

— Зиннур ағай, әйҙә бер нәмәкәй ҡарарға.

Әфҡәт мине етәкләп тә алды. Беҙ баҡсаға индек.

Кишер, сөгөлдөр, һуған түтәлдәре араһынан үтеп, кәртә буйындағы ҙур ғына түтәлгә килдек. Ул ваҡ ҡына сыбыҡ менән йәнә кәртәләп алынған. Күрәм: баҡсала малайҙарҙың иң ҡәҙерләгәне ошо түтәл икән. Ә түтәлдә ҡалаҡ буйындай ҡурпы һымаҡ йәм-йәшел булып ниҙер тулҡынып ултыра. Малайҙарға ҡарайым. Йөҙҙәре көләс, шаттар.

— Беҙҙең бойҙай күп буласаҡ, — ти Әфҡәт.

— Бойҙай?!

— Эйе. Теге бер пилотка бойҙайҙың яртыһын сәстек.

Минең күҙ алдыма тағы ла бер бойҙай тулы тоҡ килә. Тишек ҡабырғаһынан берәмтекләп кенә гәрәбә ҡойола. Ике сабый тупраҡ араһынан сүпләй уларҙы...

Көҙ килде. Колхозда эш күп. Игендең арыу уҡ өлөшө һабаҡта ултыра, картуф ята. Ошондай көндәрҙең береһендә Мөзәйәнә еңгә эшкә сыҡманы. Ҡояш түбәнәйгәйне инде. Мин, был йә иртәгә лә сыҡмай ҡалыр тип, Мөзәйәнә еңгәләргә килдем. Инһәм, Әфҡәт, бәләкәйерәк биҙрәләр менән көйәнтәләп, тызрайып картуф ташый.

— Әсәйең ҡайҙа?

— Баҡсала.

Баҡсаға индем. Мөзәйәнә еңгә картуф ҡаҙый ине. Күңелһеҙ генә иҫәнләште был.

Ҡулынан көрәген алдым да картуфын ҡаҙырға тотондом. Тырышып, баш күтәрмәй ҡаҙам. Мөзәйәнә еңгә йүгерек ҡулдары менән картуфтарҙы бер ергә өйә бара. Күп тә үтмәне, бышлығып, ахылдап төштөм. Минең хәлемде күргән Мөзәйәнә еңгә көрәгемде алды ла:

— Өй беренсә кергән һайын былай эшләшеп йөрөһәң, кәкрәйеп тә ятырһың, — тине. Үҙе көйәнтәләп өйгә картуф алып инеп китте. Мин дә эйәрҙем. Мөзәйәнә еңгә биҙрәләрен бушатты ла түргә уҙҙы.

— Тамағың ҡатманымы? Башың ауыртыуы баҫыла төштөмө инде? — тип йомшаҡ ҡына өндәште ул.

— Кем ул, әллә Әхәт ауырып киттеме?

— Эйе, әллә һары булған инде...

Мин Әхәт янына килдем.

Әхәттең йөҙө янып бара. Күҙҙәре ҙур асылған, ниңәлер рәнйеүле ҡарай.

— Бойҙай беҙҙең үҫмәне бит. Гел башағы буш, — тип һөйләнеп ҡуйҙы Әфҡәт, — Әхәт шуға ауырыны ла китте.

Миңә уңайһыҙ булып китте. Ни эшләргә белмәй, мин баҡсаға сығып керҙем. Ысынлап та, баҫыу бойҙайынан бер айға тиерлек һуңлап сәселгән түтәл бойҙайы буйға үҫеп еткән, әммә оҙон яҫмаҡ башаҡтарында бер генә орлоғо ла юҡ ине. Мин, уның һайын борсолоп, һәр башаҡты тотоп ҡарарға кереш тем.

— Бик көткәйне шул бойҙайын. Баш ҡоҫа башлағас, түбәһе күккә тейеп йөрөгәйне, — тип һөйләнде ҡайһы аралалыр минең арттан килеп еткән Мөзәйәнә еңгә.

Мине бойҙайҙың өлгөрмәүе түгел, ә уны баланың аяҡтан йығылырлыҡ ауыр кисереүе таң ҡалдырҙы.

— Борсолма, Мөзәйәнә еңгә, һауығыр улың. Һауығыр... Кем белә, бәлки, атаҡлы игенсе булып китер әле ул.

1. Бойҙайҙың *баш ҡоҫоуын* нисек аңлайһығыҙ? Яуап таба алмаһағыҙ, ололарҙан һорашығыҙ.
2. Әҫәрҙә ҡайһы осор ваҡиғалары сағыла?
3. Әхәт менән Әфҡәттең әсәләре ниндәй ҡағыҙ алған? Ни өсөн ул уны уландарынан йәшереп ҡуя? Үҙегеҙ белгәнсә, шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. «Әллә һары булған инде...», — ти әсәһе ауырып ятҡан улы Әхәт тураһында. Ниндәй ауырыу ул – һары ауырыуы? Һеҙ тағы ниндәй ауырыуҙарҙы беләһегеҙ? Уларҙы булдырмау, дауалау сараларын асыҡлап ҡарағыҙ. Фекер алышығыҙ.
5. Аудиояҙма тыңлағыҙ, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
6. Хикәйәнең йөкмәткеһен ҡыҫҡаса, үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп ҡарағыҙ.

**Ижек.**

**Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү**

Башҡорт телендә лә һүҙҙәр ижектәргә бүленә. Һүҙҙә нисә һуҙынҡы бар, шунса ижек була. Башҡорт һүҙҙәренең ижектәре ике тартынҡынан башланмай. Ижек аҙағында ла ике тартынҡы бик һирәк осрай. Шуға ла рус теленән ингән һүҙҙәр башҡортсалаштырып әйтелә. Мәҫәлән: трактор — һөйләгәндә: *ты-рак-тыр; ком-байн* — һөйләгәндә: *кам-ба-йын.*

Һүҙҙәр бер юлдан икенсе юлға ижек буйынса күсерелә. Һүҙ икенсе юлға күсерелгәндә, бер генә хәреф тороп ҡалмай һәм бер генә хәреф икенсе юлға күсерелмәй, **ь — ъ** билдәләре, беренсе хәреф булып, икенсе юлға күсерелмәй: *мәсь-әлә, Иль-яс*. Башҡорт һүҙҙәренең ижеге **й** хәрефенә бөтһә, ул хәреф беренсе юлда ҡала, әгәр икенсе ижек **й** хәрефенән башланһа, ул хәреф икенсе юлға күсә. Мәҫәлән, *Тай-маҫ, Бөр-йән, ра-йон.*

Сағыштырығыҙ: рус телендә **й** хәрефе икенсе юлға күсерелмәй. Башҡортса шулай күсерелә: *ра-йон,* русса шулай күсерелә: *рай-он.*

*Мостай Кәрим*

## ДАН — КӘПӘС ТҮГЕЛ

*(«Өс таған» повесы буйынса)*

Айҙар урамда тороп ҡалды. Ғабдулла йүгереп өйгә инеп китте. Бер ҡыйырсыҡ икмәк менән өләсәһенең һалма киҫә торған бысағын әләктереп, күтәрмәгә сыҡҡас ҡына, Нәғимә инәй ҡайтып инде. Ғабдулла бысаҡты тиҙ генә артына йәшерҙе. Өләсәһе һиҙмәй ҙә ҡалды, шикелле. Ләкин ейәненең күкрәгендәге миҙалды шунда уҡ күрҙе. Нәғимә инәйҙең йөҙө үҙгәреп китте. Йөрәге сәнсеп алды, быуындары йомшарҙы. Шулай ҙа ул сәбәләнмәне, ҡысҡырынманы, Ғабдулланың арҡаһынан йомшаҡ ҡына һөйҙө лә өйгә саҡырҙы:

— Әйҙә, улым, өйгә инәйек әле.

— Беҙ, ни, өләсәй, Айҙар менән Ҡылыс башына...

— Хәҙер китерһегеҙ. Айҙар әҙ генә сабыр итер.

Өйгә ингәс, Нәғимә инәй ейәнен эргәһенә ултыртты ла арҡаһынан тағы бер ҡат һөйөп алды.

— Миҙал килешеп тора тағы үҙеңә.

— Ысынлапмы, өләсәй?

— Өләсәйең бушты һөйләмәҫ. Бына һин, биш ҡыш һабаҡ уҡыған кеше, өләсәйеңә төшөндөрөп бирсе: миҙалды ни өсөн бирәләр?

— Батырлыҡ өсөн. Бында шулай тип яҙылған да, өләсәй. Русса.

— Ярай, быныһын аңлаттың, рәхмәт. Ә кемгә бирәләр уны?

— Батырҙарға.

Нәғимә инәй ейәненең күкрәгенә эйәге менән ишара яһаны. (Беҙҙең яҡта изге һаналған нәмәгә бармаҡ менән төртөп түгел, эйәк менән ымлап күрһәтәләр.)

— Ә быны кемгә биргәндәр?

— Беләһең дә инде, өләсәй... Атайыма.

— Шулай булғас, уны кем тағырға тейеш ине?

— Атайым да... Ул ҡайтманы ла баһа. Мин ни уны, өләсәй, атайымдың төҫө итеп кенә таҡҡайным.

Нәғимә инәй байтаҡ өндәшмәй торҙо. Ғәҙәтенсә, тәрән итеп көрһөндө. Бәлки, ул ҡасандыр ошолай ялан аяҡтарын урындыҡтан һәлендереп ултырған Мөхәммәтте иҫенә төшөргәндер. Ғабдулла атаһына оҡшағайны. Уның ҡылыҡтары, һөйләшеүе, тыйнаҡлы йылмайыуы Мөхәммәттең бала сағын хәтерләтә. Нәғимә инәй, ейәненә ҡарап, берсә ҡыуана, берсә, ҡайғылары яңырып, эсе өҙөлөп китә. Ғабдулла ла быны аңлай һәм ундай саҡтарҙа өләсәһенә тағы ла яғымлыраҡ булырға тырыша.

Нәғимә инәй өҙөлгән һүҙҙе ашыҡмай ғына тағы ялғаны:

— Улай булғас, тыңла. Батыр үлһә, улына ҡылысы ҡала, мәргән үлһә, уҡ-һаҙағы ҡала. Кәрәк саҡта, ил ҡушҡанда, ата ҡоралын уландары ҡулға алғандар. Атанан мираҫ булып ҡалған һабан менән улдары ер һөрәләр. Уның сүкеше менән тимер сүкейҙәр, көрәге менән ер ҡаҙалар. Атанан ҡалған көпө-кәпәсте балалары кейә. Ана һинең башыңда ла атайың мәрхүмдең кәпәсе. Әммә атанан ҡалған дан-шөһрәт — кәпәс түгел. Балалары уны алмаш-тилмәш кейеп йөрөй алмай. Мөрйәнән сыҡҡан төтөн донъяны йылытмаған кеүек, ата даны ла баланы биҙәмәй. Бына үҙең, атайыңа лайыҡлы булып, ил һоҡланырлыҡ, кешеләр хайран ҡалырлыҡ эштәр башҡарһаң икән...

— Беҙ башҡарасаҡбыҙ, өләсәй. Күр ҙә тор бына. Үҙең дә шаҡ ҡатырһың хатта.

— Күрергә насип булһын. — Нәғимә инәй йәнә өҫтәп ҡуйҙы: — Үҙеңә оҡшаһа, тағып йөрө, миҙалды әйтәм. Мин ҡаршы түгел.

Ғабдулла өндәшмәне. Күкрәгендәге миҙалды алды ла һүрәт аҫтына кире элеп ҡуйҙы. Шул саҡ урамда әсе итеп Айҙар һыҙғырып ебәрҙе. Хатта уның да сыҙамлығы бөттө, ахырыһы.

— Хәҙер бар инде, — тине Ғабдуллаға өләсәһе. — Бысаҡты юғалта күрмә берүк! — Һалма бысағына башҡа

ваҡыт тотонорға рөхсәт итмәһә лә, был юлы ул ейәненә һүҙ әйтмәне. Бер юлы ике нәмә менән уның күңелен төшөргөһө килмәгәндер инде.

— Ярай, өләсәй, — тине лә Ғабдулла атылып сығып китте.

Ейәне сығып киткәс, Нәғимә инәй, миҙалды усына алып, бер аҙ ҡарап торҙо. Ең осо менән уны һаҡ ҡына һөртөп алды ла кире элеп ҡуйҙы.

1. *Йөҙө үҙгәреп китте, быуындары йомшарҙы, эсе өҙөлөп китә, хайран ҡалырлыҡ, шаҡ ҡатырһың, сыҙамлығы бөттө, күңелен төшөргөһө килмәгәндер* һүҙбәйләнештәренең һәм һөйләмдәренең мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ? Шул уҡ мәғәнәне икенсе һүҙҙәр менән аңлатып, һүҙлек дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ.
2. *Көпө-кәпәс, дан-шөһрәт, алмаш-тилмәш* һүҙҙәренең мәғәнәһен, ҡулланылыу маҡсатын аңлатығыҙ.
3. «Ғабдулла атаһына оҡшағайны» тигән һөйләмдән алып абзацтың аҙағына тиклемге өлөштө диктант итеп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшереп сығығыҙ. Аҙаҡ эштәрегеҙҙе китаптағы текст менән сағыштырып ҡарағыҙ. Киткән хаталарҙы төҙәтеп, мәғәнәһен аңлатығыҙ. Үҙегеҙҙең эшегеҙгә үҙегеҙ баһа бирегеҙ.
4. Яҙған диктанттарығыҙҙы руссаға тәржемә итегеҙ ҙә уҡып ишеттерегеҙ. Кемдеке уңышлыраҡ килеп сыҡҡан? Ни өсөн?
5. Ғабдулла кем ул? Уға ниндәй сифаттар хас? Һеҙҙең үҙегеҙҙә ул сифаттар бармы? Уларҙы башҡортса һәм русса яҙып сығығыҙ.
6. «Миҙалды ни өсөн бирәләр?» тигән темаға кескәй хикәйә төҙөгөҙ.
7. Һуғыш ветераны менән осрашыу үткәрегеҙ, орден-миҙалдарын ни өсөн алғанлығын һөйләтегеҙ.
8. Рәсәй Федерацияһында һуғыш һәм хеҙмәт батырлығы өсөн әле ниндәй ордендар һәм миҙалдар булдырылған? Берәй ордендың йәки миҙалдың һүрәтен төшөрөгөҙ.

**77-се күнегеү.** Юлдан юлға күсереү өсөн һүҙҙәр дөрөҫ бүленгәнме? Хаталарын табығыҙ.

Бо-рон-бо-рон за-ман-да беҙ бик кү-мәк ҡар бөр-төк-тәре и-нек. Ю-ға-ры-ла, күк-тә, әй-лә-неп-әй-лә-неп уй-нап

йө-рө-нөк тә бер төн-дә я-уа баш-ла-ныҡ. О-ҙаҡ яу-ҙыҡ, бө-тә ер йө-ҙөн ҡап-лап ал-дыҡ. Ел сы-ғып, беҙ-ҙән тау-ҙар өй-ҙө, һы-рын-ты-лар я-һа-ны. Беҙ-ҙең өҫ-тә ба-ла-лар шау-ла-шып тау шыу-ҙы. Да-ла-ла-ғы а-ғу-на-лар, аҡ ҡу-ян-дар, беҙ-ҙе со-ҡоп, үҙ-ҙә-ре-нә о-я я-һа-ны. Беҙ ү-ҙе-беҙ һал-ҡын бул-һаҡ та, ө-шө-гән-дәр-ҙе йы-лы-та бе-лә-беҙ. *(М. Кәрим)*

**78-се күнегеү.** Мәғәнәләренә ҡарап, башҡорт һәм рус мәҡәлдәренең парҙарын табығыҙ. Башҡорт мәҡәлдәрен диктант итеп яҙығыҙ, ижектәргә бүлегеҙ.

1. Дружно — не грузно, а врозь — хоть брось. Не разгрызешь ореха, так и не съешь ядра. Ищи товарища лучше себя, а не хуже себя. Забота не съела — скука одолела. Работы бояться — счастья не видать. Мал золотник, да дорог. Не бойся той собаки, что лает, а той, что исподтишка кусает. К собаке подходи сзади, а к лошади — спереди.

2. Эшлекһеҙҙе йоҡо баҫыр. Хеҙмәте юҡтың — хөрмәте юҡ. Алтын ҙур булмай. Аҫтыртын эт өрмәй тешләй. Ҡулың эшләһә, ауыҙың тешләр. Берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт. Ат типмәҫ, тимә, эт тешләмәҫ, тимә. Дуҫың булһа, үҙеңдән артыҡ булһын.

*Томанбай Молдағәлиев*

## АТАЙЫМ

Ул алыштар хәҙер төштә генә –
Йылдар үтте һуғыш бөткәнгә.
Тик атайым һаман тере кеүек,
Тере кеүек миңә – көткәнгә.

Хушлашҡанда йәш түкмәнем.
Инде
Егет инем (тулды биш йәшем).
Иламаным, быуылып илармын тип,
Батырҙарса тыйҙым күҙ йәшем.

Хәтеремә асыҡ һеңеп ҡалды
Атай тоҡсай аҫҡан мәл генә:
Шырау сәстәремдән һыйпаны ла
Атҡа менде.
Китте...
Мәңгегә.

Ә аҙналар, айҙар буйы
Мин, йәш үҫмер, бер һүҙ ятлайым:
Мәңгегә тип киткән ерҙәренән
Бына-бына ҡайтыр атайым...

Бына-бына атам ҡайтып инер –
Шуны һөйләй түҙемһеҙлегем.
Ғүмер баҡый минең көтөүемдә –
Атайымдың үлемһеҙлеге!

*(Ҡаҙаҡсанан Әсхәл Әхмәт-Хужа тәржемәһе)*

1. Лирик геройҙың атаһы ниндәй һуғышҡа китеп юғалған? Атаһының һәләк булғанын белһә лә, улы уны, олоғайып бөтһә лә, һаман көтә. Уның күңел кисерештәрен аңлатып ҡарағыҙ.
2. Биш йәшлек герой үҙен егет тип иҫәпләй. Нимә ул егетлек? Һеҙ үҙегеҙҙе егет тип иҫәпләйһегеҙме? Уның өсөн нимә кәрәк?
3. Герой атаһының үлемһеҙлеген нимәлә күрә? Ғөмүмән, нимә ул үлемһеҙлек? Әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. Беҙҙең илдә йыл һайын «Үлемһеҙ полк» («Бессмертный полк») акцияһы үткәрелә. Шул акцияла ҡатнашыу теләге бармы? Һуғыш ветерандарын ололау өсөн беҙҙә тағы ниндәй саралар үткәрелә? Яҙма рәүештә шул турала белешмә төҙөгөҙ.

**79-сы күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ һәм яуаптарығыҙҙы ижеккә бүлеп яҙығыҙ.

1. Һин башҡорт телен өйрәнәһеңме?
2. «Йәншишмә» гәзитен уҡыйһыңмы?
3. Ниндәй мәҡәләләр иҫеңдә ҡалды, оҡшаны?

4. Һинең иптәшең башҡорт телендә яҙылған китаптар уҡыймы?

5. Һин үҙең ниндәй китаптар уҡының?

6. Башҡорт теленән өйгә эште эшләргә һиңә кем ярҙам итә?

**80-се күнегеү.** Шиғыр юлдарын яттан яҙығыҙ.

1. Ҡолаҡ остарын семетеп,
Ҡыш ажғырып торғанда,
Елдәрҙән дә етеҙ елеп,
Ҡуян ҡыуҙым урманда.

*(А. Игебаев)*

2. Ошо ваҡыт бөтә япраҡтар
Шыбырланы минең ҡолаҡҡа:
Османыҡ бит бына йыраҡҡа,
Түшәлдек тик тыуған тупраҡҡа.

*(К. Кинйәбулатова)*

**81-се күнегеү.** Бармаҡ исемдәрен уҡығыҙ, хәтерҙә ҡалдырығыҙ.

Баш бармаҡ, һуҡ бармаҡ, урта бармаҡ, сығанаҡ бармаҡ, сәтәкәй бармаҡ.

## ХИКӘЙӘ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Герой яҙмышында булып үткән бер йәки бер нисә ваҡиғаны тасуирлауға арналған проза әҫәре хикәйә тип атала. Хикәйәләрҙең күләме лә ҙур булмай, унда ҡатнашҡан персонаждар ҙа аҙ була. Мәҫәлән, Динис Бүләковтың «Яралы китап» тигән хикәйәһендә һүҙ Йәтимәк ауылы кешеләренең Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы тормошо, Фәғиләнең ил азатлығы өсөн һуғышта күрһәткән батырлығы тураһында бара.

*Әмир Әминев*

## ӘСИКМӘК

Сәрби әбей, һалҡын тиргә батып, өшөп уянды. Имеш, ул ҡара урманда улының алыҫта-алыҫта ишетелгән тауышына яңғыҙы ғына ашыға, ә урман һаман ҡараңғылана, ҡуйылана бара. Тирә-яҡтан уға оҙон бармаҡлы йөнтәҫ ҡулдар һуҙыла, баш осонда ғына, ҡот осҡос тауыштар сығарып, дәү-дәү ҡоштар әйләнә, ағас төптәрендә, күҙҙәрҙе арбап, йыландар ыҫылдаша. Сәрби әбей улына ҡысҡыра, әммә үҙенең тауышын үҙе ишетә алмай, тик Тимерйәндең һаман да: «Әсәй! Әсәй!» — тип һөрәнләгәне генә ҡолаҡҡа салынып ҡала. Йүгерә торғас, ҡапыл уға ҡап-ҡара ҙур бер ҡул һуҙыла. Сәрби әбей ситкә тайпылғайны — йығылып барғанын тойҙо. Шул минутта ул ҡысҡырып ебәрҙе һәм... уянып китте. Сәрби әбей тороп ултырҙы, юрғанын һирпеп ташлап, иҙәнгә төштө — ҡурҡыныс төшөнән тиҙерәк арынырға теләп, урамға сыҡты.

Тыуып килгән иртә ғәжәп матур һәм йылы ине. Мағаш тауы башынан әкрен генә таң һыҙыла, ҡоштар сутылдаша. Әйләнә-тирәнең тыныслығын һаҡлап, өй артында олпат ҡайын ҡоласын йәйеп ултыра...

Сәрби әбей төшөн нисек юрарға белмәне. «...Ҡайтып килерме икән әллә Тимерйәнем?..» Төрлөсә уйлап ҡараны әбей, күңелен ҡапыл ғына йыуатырлыҡ бер генә яуап та таба алманы. Башынан Тимерйәне сыҡманы: уның бөтә ғүмере, тормошоноң бәхетле һәм бәхетһеҙ минуттары ошо берҙән-бер улы менән бәйләнгәйне шул...

Бынан утыҙ йылдан ашыу элек һуғышҡа киткән Тимерйәне ошо мәл ҡайтып төшөр кеүек тойолдо, таныш аяҡ тауышы ишетелмәҫме тип, Сәрби әбей ҡапҡа төбөндә бер аҙ баҫып торҙо.

Кисәге кеүек кенә хәтерләй әсә ул көндө. Әйе, бөтәһе лә кисәге кеүек кенә: кислатеп, эңер төшкәс кенә, килтереп биргәйнеләр повестканы. Тимерйән һуң ғына эштән ҡайтты ла иртән китеп тә барҙы. Район үҙәгенә тиклем оҙатҡайны улын.

Сәрби әбей нимәнелер иҫенә төшөрөп, йәһәт кенә өйгә инде. Һандыҡты асты ла улының өр-яңы гәзиткә төрөлгән, һарғайып бөткән хаты менән фотоһын алды. Шул минутта Ғәйшә килендең тәҙрә ҡаршыһынан үтеп барған Әлфиәһен саҡырып:

— Ҡыҙым, Тимерйәндең хатын уҡып ҡына бирсе. Бөгөн ниңәлер төшөмә керҙесе, — тип, хатты уға тоттtorҙo.

Әлфиәнең был хатты күп тапҡырҙар уҡығаны бар. Уның Тимерйән ағайҙан килгән тәүге һәм һуңғы хат икәнлеген дә беләь. Ҡыҙ һәр ваҡыт уны үҙенсә үҙгәртеп, һүҙҙәр өҫтәп, яңыртып уҡый. Сәрби әбей иламай, ваҡыт-ваҡыт «баламды» тип шыбырлап ҡуя ла, уҡып бөткәнсе, башҡа һүҙ өндәшмәйенсә, тыңлап ултыра. Хатты уҡығас, йөҙө асылып, күңеле күтәрелеп китә уның. Ошо ваҡыт Тимерйәне килеп керер ҙә ҡосағына ташланыр, әйтерһең.

Әлфиә мәктәбенә сығып йүгергәс, Сәрби әбей улының пальтоһын ихатала ҡаҡҡылап-һуҡҡылап, кире индереп элде. Унан һуң һандыҡ төбөнән улының өр-яңы ботинкаһын сығарҙы, сепрәк менән һөрткөләп, оҙаҡ ҡына ҡарап ултырҙы. Һандыҡты һаҡ ҡына япты ла тағы уйға ҡалды. «Ҡайғырма, әсәй, Тимергә ни булыр тиһең. Гитлерҙың башына етеп ҡайтырмын, бына күрерһең», — тигән бит әле. Бәй, ул йөҙө ҡараның муйынын бороуға ла хәтһеҙ ваҡыт үтте түгелме һуң? Ни эшләп һаман ситтә йөрөй икән улы? Бына ғәжәп... Эше барҙыр инде, өйҙә лә гел шулай, эш тине лә сапты бит. Бушағас та ҡайтыр, ҡайтыр балам...

«Рәбиғә әбейҙән алып торған икмәкте үҙем ҡайтҡас индерермен», — тигән бит әле. Ул киткәндә, үҙебеҙҙең икмәктең бөткән сағы булдымы икән ни?.. Аптыраҡ. Хәҙер колхоз биреп тора, күпме теләйһең, шул ҡәҙәре яҙҙыр ҙа ал...

Сәрби әбей ҡапыл ғына торҙо ла, йәш килендәр кеүек елкенеп йөрөп, ҡамыр баҫты. Мейес яғып ебәрҙе. Түҙемһеҙләнеп көтә-көтә, икмәген ултыртыр ваҡытты

саҡ еткерҙе. Икмәге, сәй эскеләгәнсе, бешеп тә сыҡты. Әбей, уларҙы һаҡлыҡ менән генә мейестән алып, өҫтәлгә теҙеп һалды, өҫтәренә май яғып сыҡты ла, берәүһен ап-аҡ таҫтамалға урап тотоп, ихатаға сыҡты.

Ҡапҡаға етеүе булды, үрге урамдан төшөп килгән һалдатты шәйләп, ҡатты ла ҡалды.

«Тимерйәнем!.. Төшөм юҡҡа булмаған икән...» Әбейҙең башына килгән иң беренсе уй шул булды. Ул, ҡапыл ғына хәлһеҙләнеп киткән ҡулдары менән әсикмәкте күкрәгенә тағы ла нығыраҡ ҡыҫты ла, түҙемһеҙлек менән һалдаттың килеп етеүен көттө.

— Һаумыһығыҙ, инәй! — Һалдат, ике аҙымды бер итеп, килеп тә етте. Әбейҙең һаман төҫмөрләй алмай йонсоғанын күреп:

— Танымайһыңмы ни? Шатморат бит, Рәбиғә әхирәтеңдең ейәне булам, — тип өҫтәне, күрешергә ҡулын һуҙҙы.

— Ә-ә-ә, шулаймы ни? Тимерйәнем тип торам бит... — Әбей иҫәнләште лә һалдаттың арҡаһынан еңелсә генә һөйөп алды.

— Отпускыға ҡайтып килеүем, инәй.

Сәрби әбей, ситкәрәк ҡарап, саҡ ҡына тынып ҡалды — уның ҡапыл күңеле тулып китте.

— Эй, онотоп торам. Тимерйән киткәндә, Рәбиғә әхирәттән бер әсикмәк алғайныҡ. Ҡайтҡас та индерермен, тиһә лә, бурысты биреп ҡуяйым, әллә ҡасан ҡайта үҙе... Осрап һәйбәт иттең әле. Мә, улым. — Сәрби әбей әсикмәкте Шатморатҡа тотторҙо ла, һалмаҡ ҡына итеп: — Рәхмәт инде әхирәткә, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

Ул һалдатты тағы бер һөйөп алды ла өйөнә инеп китте...

**1.** Текстан таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, уларҙың мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уларҙы синонимдар менән алмаштырып, һөйләмдең мәғәнәһендәге үҙгәрештәргә иғтибар итегеҙ.

2. Кем ул Сәрби әбей? Текстан сығып, уның күңел торошон тасуирлап ҡарағыҙ.
3. Сәрби әбейҙең төшөн һөйләгеҙ, уны юрап ҡарағыҙ. Был төштөң хикәйәгә ни өсөн индерелгәнен билдәләгеҙ.
4. Үҙегеҙ күргән берәй төштө һөйләгеҙ. Уны сығыу-сыҡмауын күҙәтегеҙ. Шул турала хикәйә яҙып ҡарағыҙ.
5. Үрҙәге һүҙҙәрҙе файҙаланып, хикәйәнең йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
6. Сәрби әбейҙең «Эй, онотоп торам...» тип башланған һүҙҙәрен диктант итеп яҙығыҙ (аҙаҡтан икенсе абзац). Тыныш билдәләренең ни өсөн ҡуйылғанлығын аңлатығыҙ.

**81-се күнегеү.** Түбәндәге хайуандарҙың, ҡоштарҙың, бөжәктәрҙең ниндәй тауыш сығарыуын ижеккә бүлеп яҙығыҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| Йылан | ыҫылдай | Себен | ... |
| Бесәй | ... | Сысҡан | ... |
| Һыйыр | ... | Эт | ... |
| Ҡарға | ... | Тауыҡ | ... |
| Һайыҫҡан | ... | Әтәс | ... |
| Сиңерткә | ... | Кәкүк | ... |

Килеп сыҡҡан һүҙбәйләнештәр менән һөйләмдәр төҙөп, рус теленә тәржемә итеп яҙығыҙ.

**83-сө күнегеү.** Ғаиләгеҙҙәге бөтә кешеләрҙең дә фамилияһын, исемен, атаһының исемен русса һәм башҡортса яҙып сығығыҙ.

**84-се күнегеү.** Атайығыҙҙың (әсәйегеҙҙең, ағайығыҙҙың, апайығыҙҙың йәки бүтән берәй туғанығыҙҙың) һөнәре тураһында һөйләгеҙ.

**85-се күнегеү.** Һорауҙарға яуаптар яҙып, ижеккә бүлегеҙ.

1. Башҡортостандың көньяғында ниндәй ҡалалар бар?
2. Учалы ҡалаһынан Өфөгә нисек килергә мөмкин?
3. Өфө — Сибай поезы ниндәй ҡалалар аша үтә?
4. Дим йылғаһы буйында ниндәй ҡала урынлашҡан?
5. Халҡының һаны буйынса Башҡортостандың иң ҙур дүрт ҡалаһын әйт.

6. Башҡортостандың ҡайһы райондарына күренекле кешеләрҙең исемдәре бирелгән?

7. Ҡайһы ҡалаларҙың һәм районларҙың исемдәре бер үк?

8. Башҡортостандың ниндәй тәбиғәт ҡомартҡылары̄н беләһегеҙ?

**86-сы күнегеү.** Ҡайһы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлайһығыҙ?

**Һөйән, һырғауыл, септә, ҡалып (нимә?), ишкәк, туҡмаҡ, таған, аҫҡаҡ, арҡан, һалмауыр, күҫәк, ҡолға (ике мәғәнәһе), сығыр (нимә?), баҫырау, шына.**

*Файыҡ Мөхәмәтйәнов*

## ӘСӘЙЕМДЕҢ ҠУЛЫ

I

Алтын да түгел ҡулы,
Көмөш тә түгел ҡулы,
Ҡарап торһаң, башҡа
ҡулдан
Айырып булмай уны.

«Бишле» алып өйгә
ҡайтһам,
Һыйпап ҡуя сәсемдән.
Ҡулы нисек йомшаҡ, тиеп
Уйлайым мин эсемдән.

II

Бына әсәй ҡамыр баҫа
Аҡ ҡар кеүек аҡ ондан,
Уҡлау алып йәймә йәйә,
Туҡмас ҡырҡа бит унан.
Таҡта өҫтөнә тарата
Ҡылдай нәҙек туҡмасты,
Үкенерһең, шул
туҡмастан
Ауыҙ итмәй сыҡмасы.

III

Әсәй, көмөш энә алып,
Кистәрен сигеү сигә,
Күрегеҙсе, аҡ ситсала
Арғымаҡ ҡалай елә!

Һыбай менеп алған малай
Ҡамсыһын һелтәп бара,
Арғымағы ла ярһыған,
Үткәндер ул күп ара.

Малайҙың төҫ-киәфәте
Оҡшаған минекенә.

Үҙем бит был!
Әсәй ҡулы
Төшөргән сигеп кенә!

IV

Бәләкәй генә баҡсабыҙ,
Гөл-сәскәгә күмелгән.
Уны шулай итер өсөн
Әсәй көсө түгелгән.

Алма ла бар, сейә лә бар
Был баҡсаның түрендә,
Бармаҡ башындай ҡарағат
Бешә ана тегендә.

V

Әсәй өйҙә генә тора,
Тип уйламағыҙ тағы.
Уның әле төҙөлөштә
Йөҙөп эшләгән сағы.

Ҡаланың тап уртаһында
Күтәргес кран тора,
Шул кран менән әсәйем
Бик матур йорттар ҡора.

1. Текстан аш-һыуға, баҡсасылыҡҡа ҡағылышлы һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ, улар менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
2. *Гөл-сәскәгә күмелеүҙе, көс түгелеүҙе, йөҙөп эшләүҙе* һеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Бындай һүҙбәйләнештәрҙе нисек атайҙар? Миҫалдар килтерегеҙ.
3. Әсәнең эшләгән эштәрен һанап сығығыҙ. Һеҙҙең әсәйегеҙ ҙә шул эштәрҙе башҡарамы?
4. «Минең әсәйем» тигән темаға кескәй шиғыр яҙып ҡарағыҙ. Уңышлы сыҡһа, уны әсәләр байрамында файҙаланығыҙ.
5. 1-се строфаны яттан яҙып, дөрөҫлөгөн китаптан ҡарап тикшерегеҙ.

**87-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Родина подобна огромному дереву, на котором не сосчитать листьев. И все, что мы делаем доброго, прибавляет силу ему. Но всякое дерево имеет корни. Без корней его повалил бы даже несильный ветер. Корни питают дерево, связывают его с землёй.

Корни — это то, чем мы жили вчера, год назад, сто, тысяча лет назад. Это наша история.

Давайте же будем помнить об этих корнях.

## ӘСӘ ЙӨРӘГЕ

*(Көнсығыш легендаһы)*

Борон-борон заманда
Булған, ти, бер ҙур
йәйләү.
Яуызлыҡҡа яу асып,
Яҡшылыҡҡа юл асып,
Көн иткән, ти, был
йәйләү,
Көн иткән, ти, был
йәйләү.
Көндәр уҙған, йыл уҙған,
Заман алға ағылған.
Күңелдә шом ҡалдырып,
Илгә хәбәр таралған,
Илгә хәбәр таралған.

Күрше йәйләү матурын
Ошо йәйләү батыры,
Үҙенә тиң йәр итеп,
Һөйгән, ти, бар йөрәктән,
Һөйгән, ти, бар йөрәктән.

Арғымаҡҡа атланып,
Сабый кеүек шатланып,
Батыр киткән йәренә,
Ҡыҙ ырыуы еренә.

Әйткән үҙенең теләген,
Асып биргән йөрәген.
Шунда әйткән ғорур ҡыҙ:
«Егетем, һиңә шартым
бар,
Шартым булғас, антың
бар,
Әсәң күкрәген асырһың,
Йөрәген өҙөп алырһың,
Миңә шулдыр бүләгең.
Тик шул ғына бүләгең!
Шунһыҙ ишем тимәмен,
Шунһыҙ һине һөймәмен!»

Ҡара болот ҡабарған,
Күктә йәшен уйнаған,
Һыуҙар аҡҡан урғылып,
Донъя ҡалған төн булып,
Донъя ҡалған төн булып.

Быуындары биртенгән,
Ил батыры бөгөлгән.
Мөһабәт һыны һығылған,
Башын тотоп ултырған...
Уйлап алғас бер тына,
Күнгән ҡыҙҙың шартына.

Йөрәкте ҡулға алып,
Ҡыҙ тауына юл алып,
Егет уҡтай уҡталған,
Ҙур ҡаяға ынтылған.

Ҡабаланып ярһыуҙан,
Ҙур бер ташҡа абынған,
Текә ерҙә йығылған,
Текә ерҙә йығылған.

Йөрәктән осҡон осҡан,
Йөрәктән ялҡын сыҡҡан,
Шунда йөрәк һүҙ әйткән:

«Йығылып киттең,
йәнем,
Ауыртманымы тәнең?..»

Бынығы бары әкиәт,
Бынығы бары хикәйәт.
Үҙ ғүмерен өҙҙөрөп,
Бала күңелен уйлаған,
Юҡ булдым, тип
ҡуймаған,
Ауыртыуын тоймаған,
Балаһы өсөн һыҙланған
Әсәләргә беҙ бөгөн
Теләйек ҙур һаулыҡты,
Теләйек ҙур бәхетте.
Борон әйткән ололар:
«Ана күңеле балала,
Бала күңеле далала».
Был һүҙ хәҙер иҫкерһен,
Тел осонан кителһен,
Ана күңеле шат булһын,
Яҙмыш булһын еңелдән,
Әсәләрҙең сафлығы
Һис китмәһен күңелдән,
Һис китмәһен күңелдән.

1. Текста һеҙ белмәгән ниндәй һүҙҙәр осраны? Уларҙы яҙып алып, уҡытыусы ярҙамында мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.
2. *Көн итеү* һүҙбәйләнешен икенсе һүҙ менән алмаштырығыҙ. Ошо уҡ мәғәнәне биреүсе тағы ниндәй һүҙҙәр бар? Уларҙың барыһын да ошо уҡ һөйләм составында ҡулланығыҙ. Мәғәнә үҙгәрҙеме?
3. Текстан *асып биргән йөрәген, балаһы өсөн һыҙланған* һүҙбәйләнештәрен табып, шул урындарҙы уҡып сығығыҙ, был һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен асыҡлағыҙ. Улар тура мәғәнәһендә ҡулланылғанмы? Ни өсөн?
4. Беренсе строфаны иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Йәйләүҙә ниндәй кешеләр йәшәгәнлеген асыҡлағыҙ. Был турала ни өсөн туранан-тура ғына әйтелмәй, шуны аңлатығыҙ.
5. Әсәне һеҙ нисек күҙ алдына килтерҙегеҙ? Был образға хас сифаттарҙы һанап сығығыҙ. Әсәнең улына булған мөхәббәте нимәлә күренә?
6. Ҡыҙ образын характерлағыҙ. Ул һеҙгә оҡшанымы?
7. Егет образы һеҙгә оҡшаймы? Уның ҡылығына баһа бирегеҙ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: был егеттән өлгө алып буламы?
8. Әҫәрҙе тасуири итеп уҡығыҙ.

## Башҡорт телендә баҫым

Башҡорт телендә баҫым күп осраҡта һүҙҙең һуңғы ижегенә төшә.

**88-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе русса һәм башҡортса уҡығыҙ. Әйтелештәге айырмаларға иғтибар итегеҙ, ижеккә бүлеп сығығыҙ.

| *башҡорт телендә* | *рус телендә* |
|---|---|
| ҡарағат | барабан |
| Башҡортостан | Башкортостан |
| Ямантау | Ямантау |
| Ҡарағайлы | Карагайлы |
| Таналыҡ | Таналык |
| солоҡ | сорок |
| Ҡариҙел | Караидель |
| Ағиҙел | Агидель |

Башҡорт телендә баҫымлы һәм баҫымһыҙ һуҙынҡылар бер төрлө әйтеләләр.

**89-сы күнегеү.** Текстарҙы ижектәргә бүлеп яҙығыҙ.

1. Бишенсе көн инде буран ҡотора. Ҡар өйөрмәһе шул тиклем көслө, хатта күршеләге йорттар ҙа күренмәй. Һирпмә буран эре ҡар бөртөктәрен тәҙрәләргә килтереп бәрә, соҡор-саҡырҙарҙы тултыра, юлдарҙы күмә.

*(З. Хисмәтуллин)*

2. Бөтә кеше уйнай, көлә, йылмая, тормоштан, донъянан йәм таба, тәм таба. Ә мин, ни тиклем генә көсәнһәм дә, йылмая ла, көлә лә алмайым.

*(Ф. Иҫәнғолов)*

*Ғәзим Аллаяров*

## ТАҪТАМАЛ

Әле түр башында элеүле торған ҡыҙыл осло таҫтамал Сатра йылғаһы буйындағы баҫыуҙа үҫкән киндерҙән һуғылған. Уны әсәйем, үҙ ҡулдары менән йолҡоп, талҡыған, туҡыған. Ул ғына ла түгел, йөрәк йылыһын ҡушып, миңә бағышлап һуҡҡан. Үҙенең уртансы улына изге теләктәр теләп, төн йоҡоларын йоҡламайынса эшләгән уны әсәйем.

Йөрәккә иң яҡын, иң ҡәҙерле ошо бүләкте мин әсәйемдең ҡулынан, һуғыш башланғас, алдым.

— Үҙеңдең юл тоҡсайыңа һал, балаҡайым, кәрәк булыр, минең төҫөм итеп йөрөтөрһөң, — тине ул, күҙ йәштәрен һөртә-һөртә. Уның күп эшләүҙән тамырҙары бүртенгән ҙур ҡулдарына ҡарап алдым мин. Юҡ, ҡаты түгел ине был минең сәстәремдән һыйпаған ҡулдар, киреһенсә, иң йомшаҡ, шул уҡ ваҡытта иң ҡөҙрәтле ҡулдар ине улар. Таҫтамалды тоҡсайыма һалып, иптәштәрем менән фронтҡа киттем...

Баштараҡ старшина: «Ярамай», — тип, таҫтамалды үҙем менән алғанға ҡаршы төшөп ҡарағайны ла, һуңынан ризалашты. Мин әсәйем биргән бүләкте һәр ваҡыт үҙем менән танкыла йөрөттөм. Йыш ҡына алып ҡарап ултыра торғайным, иптәштәрем күрмәгән саҡта, әсәйемде һағынып, күҙ йәштәремде лә һөрткөләнем...

Воронеж янында ҡаты һуғыштар бара ине. Беҙҙең танк бригадаһына, фашистарҙы Подгорное ауылынан бәреп сығарып, артиллерия ғәскәрҙәре килеп еткәнсе, уны ҡулда тоторға бойороҡ бирелде.

Уңда ла, һулда ла снарядтар төшөп ярыла, ҡайҙалыр ярһып-ярһып пулемёт тыҡылдай.

— Өс ҡыҙыл ракета һауаға осоу менән — атакаға! — ти танк экипажы командиры. Үҙе туҡтауһыҙ һауаны күҙәтә.

Ниһайәт, күк көмбәҙенә беҙ көткән ҡыҙыл шарҙар эленде. Атакаға киттек. Дошман бер нисә танкыбыҙҙы яндырҙы. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ алға барыуыбыҙҙы

дауам иттек. Дошманды эҙәрлекләп, башҡа танкыларҙан алғараҡ сығып киткәнбеҙ. Шул саҡ алдыбыҙҙа ҡапыл ҡара ҡойон уйнаны, ер емерелеп, аҫты-өҫкә килгәндәй булды, танк ҡаты һелкенде лә туҡтап ҡалды. Шунда мин һуштан яҙғанмын...

Бер аҙҙан иҫемә килгәс, экипаждың башҡа ағзаларына күҙ төшөрҙөм. Миңә улар барыһы ла, ыңғыраша-ыңғыраша, боеукладка өҫтөндә ята төҫлө тойолдо. Ултырған урынымдан ҡуҙғала биреп, торорға уйлағайным да, булдыра алманым. Һул яҡ ҡабырғаларым, күкрәгем ҡаты һыҙлай ине. Һыйпап ҡарайым — ҡан эркелә. Ни эшләргә? Эргәмдә ятҡан биштәргә үреләм. Индивидуаль бәйләү пакеты ғына ярҙам итә алырмы икән һуң? Шул саҡ ҡулым әсәйем биргән таҫтамалға тап булды. Туҡтауһыҙ ҡан һарҡыған ярамды бинт менән генә бәйләп эш сыҡмаҫ, таҫтамал менән ҡаты итеп ҡыҫып урата башланым. Тағы ла әҙерәк ошолай ҡанһырап ятһаң, теге донъяға китеүеңде көт тә тор...

Белмәйем, йәрәхәтемде урап бөттөммө, юҡмы, тағы ла иҫтән яҙғанмын...

Ҡапыл танк һелкенгәндәй булды. Күҙҙәремде астым. Танк эсендә лә, тышта ла — дөм ҡараңғы. Ә ҡорос машина урынынан күсә кеүек. Һыҙлана-һыҙлана рычагтарҙы ҡулдарыма алдым. Әҙерәк аңыма килә башланым, буғай. Танкыбыҙ алға табан түгел, артҡа шыуыша ине. «Тимәк, фашистар үҙҙәре яғына һөйрәтә беҙҙе», — тигән уй килде минең башҡа.

Был хәүефле уйҙан хәлһеҙ тәнем буйлап әҫе ҡан йүгергәндәй булды. Шул саҡ, тештеремде ҡыҫып, аяғым менән башта тормозға, унан һуң акселераторға баҫтым. Мотор геүелдәп эшләп ебәрҙе. Танк башта бер аҙ туҡталып торҙо ла, буйһоноп, алға табан ҡуҙғалды...

Үҙебеҙҙекеләр янына нисек итеп килеп еткәнемде белмәйем. Тик һөйләшкән һүҙҙәр төштәге һымаҡ ҡолағыма салынып ҡалды:

— Ҡара һин уны, Зөфәрҙе әйтәм, фашистар тягачын тағып алып сыҡҡан бит...

— Молодец, яралы иптәштәрен дә ҡотҡарҙы былай булғас...

* * *

Госпиталдә аңыма килдем. Ҡолаҡ төбөндә тағы ла һөйләшеүҙәр:

— Уны, һис шикһеҙ, бынау оҙон таҫтамал һаҡлаған...

— Таҫтамал менән урап бәйләмәһәләр, күп ҡан юғалтыуҙан үлгән булыр ине...

Операциянан һуң өс көн уҙғас, мин һары сәсле медсестраны ишаралап яныма саҡырҙым.

— Сестра, һылыуҡай! Минең таҫтамалым ҡайҙа икән? — тинем уға.

— Бына, баш осонда ғына, яугир, — тип, ул миңә ҡыҫҡа ғына аҡ таҫтамал күрһәтте.

— Юҡ, һылыуҡай, был түгел, әсәйем биргән таҫтамалды әйтәм.

— Уны һиңә әсәйең биргәйнеме ни? — тип аптырай ҡыҙ.

— Эйе, сестраҡайым. Миңә бағышлап, төн йоҡоларын ҡалдырып һуҡҡан ул таҫтамалды әсәйем.

Сестраның йөҙө ҡапыл үҙгәргәндәй булды.

— Беҙ уны... ташламаныҡмы икән...

Минең электән дә ауыртҡан йөрәгем тағы ла нығыраҡ һыҙлап китте. «Ысынлап та, юғалырмы икән ни?» — тигән уй иҫтән сыҡманы.

Бер көндән һуң сестра бүлмәгә ҡояш кеүек балҡып килеп инде.

— Һылыуым, әллә бөгөн тыуған көнөңмө? — тип һораным мин, аптырай төшөп.

Ул йылмайҙы. Оҙаҡ ҡына тауыш-тынһыҙ миңә ҡарап торҙо ла, алдыма бер төргәк һалып, йүгерә-атлай сығып китте.

Үҙем дә һиҙмәҫтән, тулҡынланып, серле төргәкте тағаттым. Асып ебәрһәм — таҫтамал! Әсәйемдең ҡулдары менән һуғылған киндер таҫтамал! Ул таҙа итеп йыуылғайны, үтекләнгәйне...

— Рәхмәт һиңә... һылыуҡайым... — тип шыбырланы ирендәрем, һәм мин, яраларым онотолғандай булып, хыялдарға бирелеп, күҙҙәремде йомдом. Әсәйемдең ҡәҙерле һыны торған кеүек ине күҙ алдымда...

1. Түбәндәге һөйләмдәрҙең һәм һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ: *минең төҫөм итеп йөрөтөрһөң; күк көмбәҙенә ҡыҙыл шарҙар эленде; серле төргәкте тағаттым; иҫемә килгәс; ут нөктәләре; ҡан һарҡыған яра.*
2. Танкистың батырлығын күрһәткән эпизодты һөйләгеҙ.
3. Таҫтамал хикәйәсе өсөн ниңә бик ҡәҙерле?
4. Беренсе абзацты диктант итеп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшереп, баһалағыҙ.

**90-сы күнегеү.** Рус һүҙҙәренә ялғау ҡушылғанда, баҫымдың күсеү һәм күсмәүенә иғтибар итегеҙ.

а) па́рта — па́рталар
а́вгуст — а́вгуста
маши́на — маши́наһына
посы́лка — посы́лкаһын

б) магази́н — магазинға́
колхо́з — колхозда́н
портре́т — портретта́р
апре́ль — апрелдә́

Рус теленән ингән һүҙҙәрҙең үҙ баҫымы һуңғы ижектә булмаһа, ялғау ҡушҡанда ла, баҫым шул урында ҡала. Әгәр үҙләштерелгән һүҙҙең баҫымы һуңғы ижектә булһа, ялғау ҡушылыу менән, баҫым да һуңғы ижеккә күсә бара.

**91-се күнегеү.** Текстан алынған һүҙҙәргә баҫым ҡуйығыҙ.

1. Урап бөттөммө, юҡмы, тыуған көнөңмө, юғалырмы икән?
2. Белмәйем, бәйләмәһәләр, йоҡламайынса.
3. Сыҡмаҫ, ҡарамаҫтан, һиҙмәҫтән.

*-ма/-мә* юҡлыҡ ялғауҙары, *-мы/-ме* һорау киҫәксәләренә баҫым төшмәй, баҫым улар аша артабанғы ижектәргә күсмәй. Ә *-маҫ/-мәҫ* юҡлыҡ ялғауҙары баҫымлы була, ялғауҙар өҫтәлһә, баҫым да артҡа күсә.

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ

Йыр — халыҡ ижадының бик үҙенсәлекле төрө. Ул шиғри әҫәрҙең көйгә һалыныуынан, йәғни һүҙ сәнғәте менән музыка сәнғәтенең ҡушылыуынан барлыҡҡа килә.

Йырҙарҙа халыҡ тарихында булып үткән тарихи ваҡиғалар, халыҡтың тормош-көнкүреше, йолалары, матурлыҡ, батырлыҡ тураһында ҡараштары, уй-хыялдары сағыла. Йырҙарҙа халыҡ Тыуған илен, батырҙарын данлай, ҡыуанысын һәм шатлығын белдерә, ҡайғы-хәсрәтен уртаҡлаша, мөхәббәтен аңлата.

Башҡарылыу рәүешенә ҡарап, йырҙарҙы оҙон һәм ҡыҫҡа көйлө йырҙарға бүлеп йөрөтәләр.

Ҡыҫҡа көйлө йырҙарға таҡмаҡтар бик яҡын тора. Тик йырҙарҙың һәр береһенең үҙенең генә тәғәйен көйө бар, ә таҡмаҡтар, ғәҙәттә, бер төрлө көйгә һалып башҡарыла. Шуға ла йырҙы йырлайҙар, ә таҡмаҡты әйтәләр. Өҫтәүенә, таҡмаҡтар һәр ваҡыт берәй кешенән, күренештән шаяртып көлөүгә ҡорола, төртмә телле була. Улар күбеһенсә бейегәндә әйтелә.

Йырҙарҙы шағирҙар менән композиторҙар ҙа ижад итә: шағирҙар яҙған шиғырҙарға композиторҙар көй һала, шунан йыр тыуа. Мостай Кәрим, Ҡадир Даян, Назар Нәжми, Яҡуп Ҡолмой, Сафуан Әлибаев, Гөлфиә Юнысова һ. б. шиғырҙарына бик күп йырҙар яҙылған.

## Оҙон йырҙар

## УРАЛ

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы —
Атай-олатайҙарҙың төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап, ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

Ай, Уралым, һинән ҡырҡып алһам
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.

Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ,
Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.
Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған
Ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ.

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алып
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

**92-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе юлдан юлға нисек күсереп була? Һыҙыҡса менән билдәләп яҙығыҙ.

Донъя, Әминә, район, ҡойроҡ, аръяҡ, иләк, Шәмсиә, ауыл, ҡуян, элекке, Учалы, Өфө.

## ҺАНДУҒАС

Йырла, егет, киреп киң күкрәгең,
Яңғыратып Уралдың буйҙарын.
Ҡайҙа ла ғына һайрай һандуғас?
Һыу буйҡайҙарында таң тыуғас.

Йәш йөрәккәйеңдән сыҡҡан йырҙар
Дәртләндерһен Уралдың улдарын.
Ҡайҙа ла ғына һайрай һандуғас?
Һыу буйҡайҙарында таң тыуғас.

Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, ижектәргә бүлеп, баҫым ҡуйығыҙ.

## ЯРАЙ ӘЛЕ

Бүтән ҡайҙа быңдай ҡаялар бар
Болоттарға тиклем етеүсе!
Ярай әле һеҙ бар, олатайҙар,
Сал Уралды төйәк итеүсе!

Аҡһаҡалдар кеүек олпатһығыҙ,
Ә үҙегеҙ ниндәй ябайҙар.
Ябайлыҡҡа өйрәтергә беҙҙе
Ярай әле һеҙ бар, атайҙар!

Ғорурланып йәшәй алаһығыҙ,
Олатайҙар, атай, ағайҙар.
Беҙҙең эште дауам иттереүсе
Инде беҙ бар, беҙ бар — малайҙар!

*(Р. Хәйри )*

**93-сө күнегеү.** Тексты башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Зима. Снег лежит на каждой тропинке и каждой аллее. На зелёной ёлке и пихте хвоя покрылась инеем. Спит в берлоге в постели своей косолапый медведь. Белка скачет с ветки на ветку. Заяц у белоствольной берёзки попрыгивает. Бродит на просёлочной дороге возле деревни голодный волк.

Башҡорт халыҡ йырҙарында осраған, һаҡланып ҡалған ҡайһы бер һүҙҙәр бөгөн аңлашылмай. Шуға ла уларҙы яңғырашы яғынан оҡшаған икенсе һүҙҙәргә алмаштыра ла ҡуялар. Был осраҡта мәғәнә бөтөнләй үҙгәрә, йә, ғөмүмән, мәғәнәһеҙлек килеп сыға. Бына боронғо йырыбыҙ «Сибай»ҙы нисек башҡаралар:

Йәшел генә сана, зәңгәр дуға
Ектерһәнә, Фатимам, туры атҡа.

Уйлап ҡараһаң, бик ҡыҙыҡ күренеш күҙ алдына баҫа: санаһы йәшел, дуғаһы зәңгәр, тәртәһе, моғайын, ҡаралыр әле. Дөрөҫө, әлбиттә, улай түгел. Беренсенән, зауыҡһыҙлыҡ (безвкусица). Икенсенән, йыр сыҡҡан ваҡытта (XIX быуат) бындай буяуҙар булмаған да әле. Дөрөҫө былай: *йәшәнкә сана* – арт яғы күтәрмәле, ултырып йөрөү өсөн уңайлы сана,

бөгөн уны кошовка сана, тиҙәр; *зеңгер дуга* – зеңгер – колокольчик, йәғни дуғаға эленгән бәләкәй ҡыңғырау. Ҙур түрәләргә дуғаға зеңгер элергә рөхсәт булған. Ә йыр авторы – кантон башлығы, ҙур түрә. Шулай итеп, «Сибай» йырының дөрөҫ һүҙҙәре түбәндәгесә:

Йәшәнкә лә сана, зеңгер дуға
Ектерһәнә, Фатимам, туры атҡа.

**Ҡыҫҡа йырҙар**

## ҠАРА ТАУЫҠ

Дуҫым саҡырҙы ҡунаҡҡа,
Тауыҡ бирҙе бүләккә.
Һайлап алдым оҡшағанын
Үҙем менеп төнәккә.

Ҡара тауыҡ — бүләк, тиеп,
Кешеләргә маҡтандым.
Әтәс булып ҡысҡырғайны,
Керер урын тапманым.

## ШӘЛ БӘЙЛӘНЕМ

Шәл бәйләнем, шәл бәйләнем,
Шәлем түңәрәк түгел.
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем дә
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем.
Осоп барып һөйләшергә
Йәнем күбәләк түгел.
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем дә
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем.
Ҡара бәрәс тиреһе лә
Ҡама булыр, тиһеңме.
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем дә
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем.

Һикереп төшөп бейегәндән
Яҙыҡ булыр, тиһеңме.
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем дә
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем.
Һыуҙар аға арыҡтан да,
Ҡыҙҙар ҡарай ярыҡтан.
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем дә
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем.
Һикереп төшөп бейер инем,
Ояламын халыҡтан.
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем дә
    Әннә-гиҙер, әннә-гиҙер, геннәйем.

## ТАҠМАҠТАР

Бейе әле, бейе әле,
Бейеүҙәрең күңелле.
Һин күңелле бейегәнгә,
Таҡмаҡ әйтәм түгелме?

* * *

Ҡулдар сабып алҡышларға,
Дуҫтар, булығыҙ әҙер.
Бына тигән бейеүсебеҙ
Бейергә төшә хәҙер.

* * *

Һип, һип, һуғанға,
Теймә беҙҙең туғанға.
Беҙҙең туған матур булған,
Ҡашы ҡара булғанға.

* * *

Бейеүсенең итәгенә
Дегәнәктәр йәбешкән.
Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ —
Яңы бейергә төшкән.

* * *

Бейе, бейе, Хәйбулла,
Бейегән кеше бай була.
Бейегән кеше бай булһа ла,
Кеҫәләре һай була.

1. Йыр, таҡмаҡтарҙан таныш булмаған һүҙҙәрҙе табығыҙ. Улар менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөп, руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Килтерелгән йырҙарҙы фонояҙманан тыңлағыҙ. Оҙон көйлө һәм ҡыҫҡа көйлө йырҙарҙың башҡарылышына иғтибар итегеҙ.
3. Мөмкинлеккә ҡарап, халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы йырсы менән осрашыу үткәрегеҙ.

**94-се күнегеү.** Икенсе ижектәге **р** өнө янында ҡыҫҡа һуҙынҡы әйтелеүенә иғтибар итегеҙ:

| | | |
|---|---|---|
| бөҙрә | кәкре | тәҙрә |
| йомран | яңрау | аҡрын |
| осрай | утрау | умрау |
| күкрәк | иңрәй | кикрек |

**95-се күнегеү.** Ер-һыу атамаларын төркөмләп яҙығыҙ, уларҙы картанан табығыҙ. Русса һәм башҡортса яҙылыштарына иғтибар итегеҙ.

Ҡариҙел, Янғантау, Белорет, Дим, Бөрө, Инйәр, Ямантау, Мәләүез, Ашҡаҙар, Ирәндек, Әй, Ҡыраҡа, Дәүләкән, Йүрүҙән, Сибай, Ҡыҙыл, Өфө (Ҡариҙел)

Йылғалар — ...
Тауҙар — ...
Ҡалалар — ...

## Алфавит

Алфави́т – теге йәки был телдә ҡулланылған хәрефтәрҙең *билдәле бер тәртиптәге* исемлеге (теҙмәһе). Башҡорт алфавитында 42 хәреф бар.

**96-сы күнегеү.** Алфавитты уҡып сығығыҙ.

Аа [а]
Бб [бы]
Вв [вы]
Гг [гы]
Ғғ [ғы]
Дд [ды]
Ҙҙ [ҙы]
Ее [йэ]
Ёё [й’о]
Жж [жы]
Зз [зы]
Ии [и]
Йй [йы]
Кк [кы]
Ҡҡ [ҡы]
Лл [лы]
Мм [мы]
Нн [ны]
ң [ңы]
Оо [о]
Өө [ө]
Пп [пы]

Рр [ры]
Сс [сы]
ç [çы]
Тт [ты]
Уу [у]
Үү [ү]
Фф [фы]
Хх [хы]
Һһ [һы]
Цц [цэ]
Чч [ч’э]
Шш [шы]
Щщ [щ’а]
ъ – ҡалын айырыу билдәһе
Ыы [ы]
ь – нәҙек айырыу билдәһе, нәҙеклек билдәһе
Ээ [э]
Әә [ә]
Юю [йу]
Яя [йа]

**97-се күнегеү.** Алфавитҡа бәйле ниндәй һорауҙар бирер инегеҙ?

**98-се күнегеү.** Алфавитты А хәрефенән алып И хәрефенә тиклем тултырып яҙығыҙ:

А, ..., И.

# ЯҘ

*Рәшит Назаров*

## ЯҘ КИЛӘ

Ас бүреләй
Олой ине
Тышта буран.
Көрткә сумып
Йоҡлай ине
Беҙҙең урам.
Бөгөн, күрсе,
Шундай йылы,
Шундай йылы.
Солғап алған
Тәбиғәтте
Майҙың тыны.
Ерҙе күмеп
Гөлдәргә
Яҙ килә, яҙ!
Дәртле, йәш
Күңелдәргә
Наҙ килә, наҙ!
Күк йөҙөндә
Көлә ҡояш,
Беҙгә бағып.

Ҡоштар ҡайта
Тыуған яҡҡа,
Йөрәк ҡағып.
Күгәрсендәр,
Күгәрсендәр
Йырлай нисек!
Сәскә атты
Кеүек күк тә,
Ал нур сәсеп.
Тып-тып итеп,
Түбәләрҙән
Тамсы тама,
Һәр тамсының
Үҙендә бер
Ҡояш яна.
Ерҙе күмеп
Гөлдәргә,
Яҙ килә, яҙ!
Беҙҙең шат
Күңелдәргә
Наҙ килә, наҙ!

**1.** Шағир буран тауышын *ас бүре олоуы* менән сағыштыра. Ә һеҙ уны нимәгә оҡшатаһығыҙ? Үҙегеҙҙең күҙәтеүҙәрегеҙгә таянып, «Буран» исемле кескәй шиғыр яҙығыҙ.

2. Урамдың *йоҡлағанын,* ҡоштарҙың *йөрәк ҡаҡҡанын* һеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Был һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләрен асыҡлап, уларҙы икенсе һүҙҙәр менән алмаштырығыҙ, авторҙың ни өсөн нәҡ ошо һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланыуын аңлатығыҙ.
3. Яҙ тураһында уҡыған әҫәрҙәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, уларҙа яҙҙың нисек тасуирланыуына иғтибар итегеҙ.
4. Яҙ миҙгеле шағирҙа төрлө хис-тойғолар уята, һеҙҙең күңелегеҙҙә май айы ниндәй кисерештәр, тойғолар барлыҡҡа килтерә? Тәбиғәттә һәм кешеләрҙә яҙ ваҡытында күҙәтелгән үҙгәрештәр тураһында һөйләп үтегеҙ.
5. Шиғырҙы ятлағыҙ.

**99-сы күнегеү.** Рус һәм башҡорт алфавитын сағыштырығыҙ. Улар araһындағы оҡшаш һәм айырмалы яҡтарҙы табығыҙ.

**100-сө күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Башҡорт алфавитының ҡайһы хәрефтәренән **һүҙ** башланмай?
2. Башҡорт алфавитындағы ҡайһы хәрефтәрҙән **башҡорт** һүҙҙәре башланмай?

1. Башҡорт алфавитының **ң, ҫ, ь, ъ** хәрефтәренән һүҙ башланмай. Шулай ҙа ҡайһы бер һөйләштәрҙә генә **ҫ** өнө (шулай булғас, хәрефе лә) һүҙ башында була ала: ҫыу, ҫалҡын.
2. Саф башҡорт һүҙҙәре алфавиттағы **ё, ң, п, р, ҫ, ф, х, ц, ч, щ, ь, ъ** хәрефтәренән башланмай.

**101-се күнегеү.** Бирелгән исемдәрҙе алфавит тәртибендә бағаналап яҙығыҙ.

Ноғман, Ғәлим, Сәлих, Сабир, Наилә, Самат, Илдар, Наил, Ғәлимә, Зиннур, Йәлил, Ғаяз, Рөстәм, Рәшит, Рәшиҙә.

Ошо уҡ исемдәрҙе икенсе бағанаға алфавит тәртибендә русса яҙығыҙ. Исемдәрҙең килеү тәртибендә үҙгәрештәр булдымы?

*Зөлфәр Хисмәтуллин*

## СЫЙЫРСЫҠ

Мин өй алдындағы тирәккә ояланған сыйырсыҡтарға ҡарап ултырам. Ҡыҙыҡ та инде уларҙың тормошо. Күҙгә күренеп үҫәләр. Әле яңы ғына йомортҡанан ярылып сыҡҡайнылар. Хәҙер инде ояның ауыҙы эргәһенә үк килеп, осорға теләгән һымаҡ, ҡанаттарын ҡаға башланылар. Улар ҡанаттарын шулай сыныҡтыралар.

Аҙна самаһы ваҡыт үтеүгә, улар тышҡа уҡ сығып ботаҡтар буйлап йөрөргә, тәүҙә оя тирәһендә, аҙағыраҡ йыраҡҡа уҡ китеп, осорға өйрәнде. Тик берәүһе, ниңәлер, тышҡа сыҡманы. Ул оя ауыҙы эргәһенә килә лә ҡысҡырып тик тора…

Көндәр үтә торҙо. Хәҙер инде сыйырсыҡтар көндөҙ көнө буйы ҡырҙа осоп йөрөйҙәр, ояларына кисен генә ҡайталар. Ә теге сыйырсыҡ балаһы һаман оянан сыҡмай, көн буйына илаған кеүек тауыш сығарып сипылдап тик ултыра. Инә сыйырсыҡ ҡына тиҫкәре ҡошсоғон онотманы – ашарға килтерҙе, үҙе менән осорға өгөтләне. Сыйырсыҡ балаһы, ғәфү үтенгән һымаҡ, суҡышын инәһенең суҡышына терәне, ҡанаттарын ҡағып ҡараны, ләкин осорға ашыҡманы, сөнки уның, ни сәбәптәндер, бер ҡанаты һынғайны.

Был көн сыйырсыҡтар зәңгәр күктә бик оҙаҡ әйләнгеләп йөрөнөләр. Ояла ҡалған сыйырсыҡ, һәр ваҡыттағыса, үҙенең туғандарының осҡанын ҡарап ултырҙы. Сикһеҙ күп сыйырсыҡтар әйләнә-әйләнә ауылдан алыҫлаша башланы. Был уларҙың йылы яҡҡа китеүе ине. Шунан һуң ауыл, нисектер, тып-тын, күңелһеҙ булып ҡалды.

Сыйырсыҡтар китеүгә ике көн үтеп китте. Үҙ һүҙле сыйырсыҡ балаһы һаман ояла ултыра бирҙе. Хәҙер ул ҡыбырламай ҙа инде. «Астан үлә бит был», — тип уйланым мин.

Әгәр сыйырсыҡты ояла ҡалдырһаң, бер нисә көндән уның үләсәге асыҡ ине. Шуға күрә беҙ уны яҙға тиклем өйҙә ситлектә тоторға булдыҡ.

Яңы шарттарға сыйырсыҡ бик ҡыйынлыҡ менән өйрәнде. Бигерәк тә яңғыҙлыҡты ауыр кисерҙе. Тауыш бирә лә, башын ҡыйыш һалып, тыңлап ала. Йәнәһе, яуап биреүсе юҡмы. Тәүге көндәрҙә гел шуның менән мауыҡты. Хатта мин биргән аҙыҡты ла ашаманы. Әкренләп ул өйҙә йәшәргә өйрәнде, үҙен тынысыраҡ тота башланы. Ләкин ситлектә торорға бер нисек тә теләмәне. Төнгөлөккә мин уны бикләп ҡуйҙым. Таң беленә башлау менән, ул, ситлектең ишеге эргәһенә килеп, ялбарыулы тауыш менән, һайрай. Мин уны сығарып ебәрәм. Ул, өйҙәге әйберҙәрҙе барлаған һымаҡ, ашыҡмайынса йөрөргә тотона. Ә яҡтырыу менән, тәҙрә төбөнә ултыртыуҙы һорап, сипылдарға тотона. Унда ул тышҡа ҡарап сәғәттәр буйы ултырырға риза. Ләкин уның иң яратҡаны көҙгө алдында тороу ине. Ул көҙгөлә үҙенең шәүләһен генә күреүен бер нисек тә аңлай алманы. Үҙен күреү менән, күңелле ҡысҡырынырға, бейегән һымаҡ, бер туҡтауһыҙ тыпырсынырға тотона.

Яҙ яҡынлашыу менән, сыйырсыҡтың холҡо ла үҙгәрә башланы. Суҡышы менән ҡауырһындарын матурланы, яңы, быға тиклем беҙ ишетмәгән, йырҙар йырланы. Еп, сепрәк, мамыҡ кеүек әйберҙәрҙе бер мөйөшкә йыйҙы. Хәҙер уның инә сыйырсыҡ икәнен һәм үҙ ояһын булдырыу тураһында хыялланыуын аңлауы ҡыйын түгел ине. Бер көн ул тәҙрә төбөнә ултырған килеш һыңар ҡанатын ҡағырға тотондо. Был уның сығырға һорауы ине. Мин шунда уҡ уны ояһына сығарҙым һәм бер ыңғайҙа ҡыштан уҡ әҙерләп ҡуйған аҙыҡ күтәргесте ҡуйҙым. Уның ярҙамында мин сыйырсыҡ ояһына аҙыҡты еп менән генә күтәрҙем. Уны ашатҡан һайын, ағас башына менеп тороуҙың кәрәге юҡ.

Сыйырсыҡ, ояға инеү менән, унда көҙҙән үк оялап алған турғайҙарҙы ҡыуып сығарҙы һәм ояларын туҙҙырып ташланы. Нәҡ ошо ваҡытта беҙҙең ояға бер нисә сыйырсыҡ килеп ултырҙы. Мин тулҡынланып уларҙы күҙәтә башланым.

Минең сыйырсыҡ үҙенә иптәш таба алырмы икән? Үткән йылғы сыйырсыҡтар килерме икән? Беҙҙең ояға барып ултырған сыйырсыҡ, бәлки, уның инәһелер? Бына ул иҫәнләшкән һымаҡ беҙҙең сыйырсыҡ алдында ултырып һайраны ла ояға инеп китте. Уның артынан икенсеһе, өсөнсөһө...

«Минең сыйырсыҡты ҡыуып сығармаҫтармы икән?» Шул уйымды раҫлаған кеүек, оя эсендә талаш башланды. Тик оҙаҡҡа барманы ул. Килгән сыйырсыҡтарҙың икеһе бер-бер артлы оянан сыҡтылар һәм, ағас ботағына ултырып, нимәлер кәңәшләшә башланылар. Минең сыйырсыҡ өсөнсө сыйырсыҡ менән ояла ҡалды. Әйтерһең дә, был ваҡытта улар бергә йәшәргә һүҙ ҡуйышалар ине. Бер аҙҙан һуң улар ҙа сыҡты. Ата сыйырсыҡ шунда уҡ ояға һалырға йөн, мамыҡ кеүек әйберҙәр ташый башланы, ә минең сыйырсыҡ, уның эшен хуплаған шикелле, футбол матчы булыр алдынан уйнала торған маршҡа оҡшатып һайрап ебәрҙе. Мин футбол яратам һәм, радио аша трансляцияланғанда, һәр ваҡыт уны тыңлай торғайным. Сыйырсыҡ шуны отоп ҡалған һәм үҙенең иптәшенә беренсе йыр итеп йырлай. Ул башҡа бик күп йырҙарҙың да моңдарын отоп алған булып сыҡты. Иптәше алдында күп белеүе менән маҡтанған шикелле, тора-бара уларын да йырлап күрһәтте.

Беҙҙең сыйырсыҡтар бик татыу йәшәй башланылар. Ата сыйырсыҡ оя яһау өсөн ваҡ-төйәк ташыны, ә инә сыйырсыҡ оя яһаны. Тәүге көндәрҙә улар тик шуның менән генә мәшғүл булдылар. Бер нисә көндән минең сыйырсыҡ бөтөнләй күренмәй башланы. Был ваҡытта ул бала сығарырға ултырғайны инде. Ә ике аҙна самаһы ваҡыт үтеүгә, балаларының сырылдашҡан тауышы ишетелде.

Йәй килде. Сыйырсыҡ ояһының түңәрәк тишегенән әле бер, әле икенсе сыйырсыҡ балаһының башы күренә башланы. Ата сыйырсыҡ уларға нимәлер һөйләне, тышҡа саҡырҙы, ышандырырға тырышты. Унан бер ҡошсоҡ ҡурҡыуынан сипылдай-сипылдай оянан сығып

ботаҡҡа баҫты. Уның артынан икенсеһе сыҡты. Ата сыйырсыҡ бер ботаҡтан икенсеһенә күсте. Уның артынан балалары эйәрҙе.

Сыйырсыҡ балалары хәҙер баштағыға ҡарағанда ла көслөрәк сырылдаштылар. Инә сыйырсыҡ балаларының һәр хәрәкәтен күҙәтеп ултырҙы. Үҙенсә нимәлер һөйләп, уларҙы дәртләндерҙе. Башта, нисектер, бер сыйырсыҡ балаһы ояла тороп ҡалғайны. Инә сыйырсыҡ уны шунда уҡ оянан суҡышы менән төртөп төшөрҙө. Йығылып төшөү менән, уныһы ҡанаттарын ҡағып торҙо ла ҡыйыуһыҙ ғына осоп китте. Мин үткән йылғы ваҡиғаны хәтерләнем. Уны ла инәһе оянан төртөп төшөргәйне бит...

Сыйырсыҡ балалары өсөн тағы тынғыһыҙ көндәр башланды. Бер ҡараңғынан икенсеһенә тиклем осорға, үҙҙәренә аҙыҡ табырға өйрәнделәр, туптарға ҡушылдылар. Ә минең сыйырсыҡ, шундай матур ҡошсоҡтар үҫтереүенә ғорурланған һымаҡ, уларға ҡарап ултырҙы.

Ағас баштарынан һарғылт япраҡтар ҡойола башланы. Күк йөҙөн ауыр ҡарағусҡыл болоттар ҡаплап алды. Сыйырсыҡтар әйләнеп-әйләнеп йөрөнөләр ҙә ауылдан алыҫлаша башланылар.

Мин уларға ҡул болғаным. Беҙҙә ҡышлаған сыйырсыҡ та талпынып ҡуйҙы.

«Иҫән-һау йөрөп ҡайтығыҙ, инәгеҙҙе, тыуған ояғыҙҙы онотмағыҙ», — тип, ирекһеҙҙән минең күҙҙәрҙән йәш атылып сыҡты. Кем белә, бәлки, был ваҡытта алыҫ юлға сыҡҡан балаларына, уларҙың хәстәрлекле атаһына ул да уңышлы юл теләгәндер, уларҙың китеүенә йөрәге әрнеп, ул да күңеленән илағандыр.

1. Сыйырсыҡтар үҙ балаларын нисек ҡарайҙар?
2. Имгәнгән сыйырсыҡ балаһы ҡышты нисек үткәрҙе?
3. Сыйырсыҡтың көйҙәрҙе ота һәм уларҙы ҡабатлай алыуы тураһында ишеткәнегеҙ йә бүтән урында уҡығанығыҙ бармы?
4. Имгәнгән сыйырсыҡтың киләсәге, һеҙҙеңсә, нисек булыр?
5. «Беҙҙең сыйырсыҡтар бик татыу йәшәй башланылар» тип башланған абзацты изложение итеп яҙығыҙ.

**102-се күнегеү.** Башҡорт яҙыусыларының фамилияларын, исемдәрен өҫтәп, алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

Б. Бикбай, Р. Ғарипов, Һ. Дәүләтшина, М. Ғафури, З. Биишева, А. Карнай, Ш. Бабич, Р. Ниғмәти, Д. Юлтый.

Өлгө: *Шәйехзада Бабич, ...*

**103-сө күнегеү.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ. Ялғауҙарҙа ниндәй һуҙынҡыларҙың килеүенә иғтибар итегеҙ. Шул һүҙҙәрҙе руссаға тәржемә итеп ҡарағыҙ.

Тормошоноҡо, ҡойроғоноң, йондоҙлоһон, сөгөлдөрсөнөң, төҙөлөшөн.

**104-се күнегеү.** О хәрефе белдергән өндәрҙе сағыштырығыҙ, ижектәргә бүлеп, баҫым ҡуйығыҙ. Алфавит тәртибендә яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| оло | совхоз |
| борон | колобок |
| томбойоҡ | корова |
| толоп | молоко |
| он | он |

Беренсе бағаналағы һүҙҙәрҙе рус һүҙҙәрен уҡыған кеүек, ә икенсе бағаналағыларын башҡорт һүҙҙәрен уҡыған кеүек уҡып ҡарағыҙ.

*Сафуан Әлибаев*

## ЯҘҘЫ КЕМ КИЛТЕРГӘН?

Еребеҙ яҡты
Нурға күмелде;
Күпме йәм булып,
Тағы яҙ килде.
Ҡайҙа ҡарама —
Өр-яңы биҙәк.
Йыр-моң ағыла,
Донъяны биҙәп.
Гөрөлдәп ята,
Тынмай гөрләүек,
Ул да үҙенсә
Һүҙ һөйләй кеүек:

— Ҡарҙарын ярҙым
Мин һалҡын ҡыштың,
Яҙҙы яһарға
Мин, — ти, —
тырыштым.
— Юҡ, — тине тамсы,
Тормай һүҙ һорап, —
Көмөш уҡ булып
Тамдым йылтырап.
Ҡарҙарҙы тиштем
Мин бит тып та тып;
Яҙҙы башланым,

Ҡышты туҡтатып.
Уларҙы тыңлап,
Әйтте бер ҡошсоҡ:
— Нишләр инегеҙ,
Килмәһәм осоп?
Мин яҙ яһаным,
Белегеҙ шуны:
Йылы яҡтарҙан
Килтерҙем уны.
Шыбырлай шул саҡ
Кескәй бер япраҡ:
— Мине күрмәйҙәр,
Торам аптырап.

Минең төҫөм ул —
Яҙҙың бер йәме,
Мин тыумаһам һуң,
Яҙҙар киләме?!
Шулай көллөһө
Әңгәмә ҡора.
...Тик ситтән ҡояш
Йылмайып тора.
Өндәшмәй генә
Ул күктә гиҙә,
Көләс нурҙарын
Һибә лә һибә.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, улар менән һөйләмдәр төҙөп, руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Шиғырҙы ролдәргә бүлеп, тасуири уҡығыҙ.
3. Бәхәсләшеүселәрҙең һүҙҙәренә иғтибар итегеҙ:
   Г ө р л ә ү е к: «Яҙҙы яһарға мин тырыштым».
   Ҡ о ш с о ҡ: «Мин яҙ яһаным».
   Я п р а ҡ: «Минең төҫөм ул».
   Улар ниндәй һүҙгә баҫым яһап әйтә? Ни өсөн?
4. Бәхәсләшеүселәрҙең ҡайһыһы хаҡ? Ысынлап та, яҙҙы кем килтергән һуң? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Шиғырҙан миҫалдар килтереп, фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.

**105-се күнегеү.** Ағас өлөштәренең атамаларын уҡығыҙ, алфавит тәртибендә яҙығыҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ.

Ҡабыҡ, туҙ, олон, ботаҡ, үҙәк, сайыр, тубырсыҡ, энә, ылыҫ, япраҡ, сәтләүек, ҡайры, бөрө, ҡыуыш, сөрөк, тәлгәш, тарбаҡ, түңгәк.

**106-сы күнегеү.** Йәйә эсендәге һүҙҙәрҙең кәрәклеһен һайлап алығыҙ. Аңлатығыҙ.

1. Мин 2005 йылда (тыуҙым, тыуғанмын). 2. Мин бая йылға буйынан ҡайтҡанда, апайым һыу (алған булған, алды, ала ине, ала торғайны). 3. Беҙ ҡайтып ингәндә, телевизорҙа кино (башланғайны, башланған булған).

Һеҙ һайлап алмаған һүҙҙәрҙе ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

**107-се күнегеү.** «Яҙҙы кем килтергән?» шиғырынан телмәрҙе белдереүсе ҡылымдарҙы табығыҙ.

*Мостай Кәрим*

## ҺЕҢЛЕМДЕҢ ТӨШӨ

*(«Беҙҙең өйҙөң йәме» повесынан)*

Мин яҙ булғанды бик яратам. Оксана ла ярата, һеҙ ҙә шулайҙыр әле. Бәрәстәр ни эшләй һуң, бәрәстәр! Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ! Ҡалай рәхәтләнеп йүгерешәләр, һикерешәләр. Ағы нигеҙ буйында ниҙер еҫкәнеп йөрөгән була. Уның бәләкәс кенә ҡойроғо бер туҡтауһыҙ һелкенеп тора. Ә ҡараһы күтәрмәгә менә лә һикереп төшә. Уның уйыны шул. Бер аҙҙан һуң инде икеһе өйҙөң ике мөйөшөнә табан йүгереп китәләр ҙә, шунан килеп, маңлайҙары менән төкөшәләр. Ыҙғышып түгел, былай шаярып ҡына шулай итәләр улар. «Мөгөҙҙәре ҡысыта сабыйҙарҙың», — ти Мансур бабай. Бәрәс сабый була, тиме ни! Мансур бабай бәләкәс балаларҙы ғына түгел, ҡолондарҙы, бәрәстәрҙе, эттәрҙе — бөтә хайуандарҙы ла бик ярата шул. Шуның өсөн бәрәстәрҙе «сабыйҙар» тип әйтә лә ул. Яман кешеләр менән фашистарҙы ғына яратмай беҙҙең Мансур бабай. Үҙе шулай ти.

Әсәйем алыҫ ҡалаға киткәс тыуған быҙау ҙа хәҙер бик ҙур үҫте инде. Ул бер үҙе баҡса буйында уйнап тик йөрөй. Ата ҡаҙ менән инә ҡаҙ үҙҙәренең һары йомғаҡтар төҫлө бәп-бәләкәс кенә балаларына, ниҙер һөйләй-һөйләй, өй алдын күрһәтеп йөрөй. Ул бәпкәләр әле бөгөн генә ҡураға сыҡтылар. Әсәйем өйҙә саҡта, беҙ уларҙы тотоп-тотоп ҡарағаныбыҙ бар. Оксана әле береһенә һыу ҙа эсерҙе.

Быныһын үҙегеҙгә генә әйтәм: ҡаҙ бәпкәләренең бер иң матурына мин «Оксана» тип исем ҡуштым. Эсемдән генә. Ул бәпкәне мин алыҫтан уҡ танийым.

Ана әле ул бәләкәс кенә таш өҫтөнә менеп баҫҡан да, муйынын әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа бороп, йылынып тора.

Ә тауыҡтар һуң, тауыҡтар! Улар, бөтә тирә-яҡты бер итеп, йырлап йөрөйҙәр. Ҡалай күңелле, ерҙә яҙ булғас! Бөтәһе лә шат, бөтәһе лә уйнай, бөтәһе лә йырлай.

Оксана менән беҙ икәүләп баҡса буйындағы бүрәнәләр өҫтөнә менеп ултырғанбыҙ. Был бүрәнәләрҙән яҡындағы баҫыу күренеп тора. Баҫыуҙа беҙҙең әсәй машина менән бойҙай сәсеп йөрөй.

— А-а-на, Йәмил, алдағы тракторҙың сәскесенә баҫҡан беҙҙең әсәйҙер әле? — ти Оксана.

Мин уға табан әйләнеп ҡарайым. Һеңлемдең зәңгәр күҙҙәре тағы ла яҡтырып киткән кеүек була миңә. Уның танау өҫтөндәге ваҡ ҡына сыбар һипкелдәре, ҡояш нурҙарында ялтырап, йымылдағандай күренәләр. Мин Оксанаға тағы ла һыйыныбыраҡ ултырам.

— Оксана, — тим мин, — әйҙә, етәкләшеп ултырабыҙ! — Һеңлем шунда уҡ миңә ҡулын һуҙа. Мин уны етәкләп алам. Әсәй ҙә беҙҙе күреп торалыр әле. «Ана, минең балаларым ҡайҙа менеп ултырғандар!» — тиҙер әле ул. — Үҫкәс, беҙ ҙә бойҙай сәсербеҙ әле, Оксана, эйе бит?

— Эйе шул. Һин тракторҙа йөрөрһөң, ә мин, әсәй кеүек, сәскескә баҫырмын, йәме? — ти Оксана. Ул шунда уҡ бүрәнә өҫтөнә баҫып күрһәтә.

Оксана тағы минең эргәмә ултыра. Ул ҡапыл күңелһеҙләнеп киткән кеүек тойола. Мин һынаным инде. Шундай саҡта һеңлемдең асыҡ зәңгәр күҙҙәре ҡараһыу булып китәләр. Ул шыбырлап ҡына һөйләй башлай:

— Беҙҙең тағы бер әсәй бар ине бит, Йәмил. Ул бик алыҫта, алыҫта ҡалды...

— Әкиәттәме, борон-борон замандамы, Оксана?

— Түгел. Ул да бик һәйбәт ине.

Мин һеңлемдең һүҙҙәрен аңламайым. Нисек инде ул ике әсәй булһын, ти? Мин беләм инде — донъяла бөтә кешеләрҙең дә атаһы ла, әсәһе лә берәр генә була. Өләсәйем шулай тип үҙе әйтте. Мин, Оксана иламаһа ярар ине, тип, ҡурҡып киттем. Юҡ, һеңлем иламай. Ул бер һүҙ ҙә өндәшмәй, тик кенә ултырып тора. Ел уның ҡуңыр сәсенә ҡушып үрелгән ҡыҙыл таҫманы һелкетә. Ул таҫма, түбән остағы клуб түбәһенә ҡуйылған флаг кеүек, елберләп тә ҡуя. Үҙем таҫмаға ҡарайым, үҙем Оксананың әйткән һүҙҙәрен ҡабатлайым: «Алыҫта, алыҫта ҡалды...» Кем ул алыҫта ҡалған әсәй? Әсәйем өйгә ҡайтҡас, мин унан да һораным инде. «Оксана һиңә, моғайын, төшөн һөйләгәндер», — ти әсәйем. Ниңә улай төштәр күрә икән минең һеңлем? Оксанаға ниндәйҙер һәйбәт һүҙҙәр әйткем килә.

— Әйҙә, баҡсаға инәбеҙ, Оксана, — тим мин, бик оҙаҡ торғас, — анау ҡайын төбөндәге хазинаны һиңә бөтөнләйгә бирәм. Күрһәң, иҫең китер.

Һеңлем баҡса яғына ҡарай:

— Ҡайын төбөндә әле ер ҙә кибеп бөтмәгән...

— Бөтмәһә ни? Саҡ ҡына ҡалған инде. Ҡояш уны барыбер киптереп бөтәсәк... Әйҙә инде, Оксана!

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
2. *Бәп-бәләкәс* һүҙенең мәғәнәһен аңлатығыҙ, уны руссаға тәржемә итегеҙ. Ошондай юл менән яһалған һүҙҙәрҙән миҫалдар килтерегеҙ.
3. *Һөйләй-һөйләй, тотоп-тотоп* һүҙҙәре ни өсөн икешәр ҡабат ҡулланылған?
4. «Тауыҡтар йырлап йөрөйҙәр», — ти яҙыусы. Һеҙ тауыҡтың йырлағанын ишеткәнегеҙ бармы? Улар, бәлки, һайрайҙыр? Ә кәкүк, һандуғас, ҡарға, күгәрсен һәм башҡа ҡоштар йырлаймы? Уларҙың һәр береһенең нимә эшләүен яҙып сығығыҙ. Белмәгәнегеҙҙе ололарҙан һорашығыҙ.
5. *Һеңлемдең күҙҙәре тағы ла яҡтырып киткән кеүек була* һөйләменең мәғәнәһенә төшөнөгөҙ. Күҙҙәр яҡтырамы? Яҡтырһа, ул ҡараңғылана ла алалыр бит? Нисек уйлайһығыҙ?

**6.** Яҙ билдәләрен нимәлә күрҙегеҙ? Текстан миҫалдар килтерегеҙ.

**7.** Өҙөк ни өсөн «Һеңлемдең төшө» тип аталған? Оксана ниндәй төш күргән?

**108-се күнегеү.** *Е, э* хәрефтәре белдергән өндәрҙе сағыштырығыҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| егет | кейем | эш | эшсе |
| емеш | бейек | эт | эте |
| еңел | тейен | эл | элгес |
| еүеш | мейес | эс | эсен |

**109-сы күнегеү.** Һүҙҙәрҙе диктант итеп яҙығыҙ, һуңынан китап буйынса тикшерегеҙ.

1. Ватан, ауыл, вәзир, майлау, өйөү, ватыу, ҡауын, еүеш, көләү, быуат, ваҡыт, кәүҙә, ҡыуыш, бейеү, ваҡлау.

2. Урам, буран, матур, ултырғыс, үлән, күләгә, үткер, һүрән.

**У, ү, в** хәрефтәре белдергән өндәргә иғтибар итегеҙ.

**110-сы күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең бөтәһен бергә бер һүҙ менән нисек атап була?

Дуға, ҡамыт, айыл, өҙәңге, ҡойошҡан, ҡанъяға, йүгән, дилбегә, ауыҙлыҡ, ыңғырсаҡ, үңдек, һыртлыҡ, түшелдерек (күмелдерек).

«Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге»н файҙаланып, ошо һүҙҙәр белдергән һәр әйберҙең аңлатмаһын яҙығыҙ.

Был һүҙҙәр атты егеү, менеү өсөн кәрәкле әйберҙәрҙең исемдәре **сбруй** тип атала.

*Ҡадир Даян*

## ТОРНАЛАР

Торналар:

Эй, балалар, әйтегеҙ,
Ҡайҙа оя ҡорайыҡ?
Күҙгә тиклем был яҡта
Ҡайһы ерҙә торайыҡ?

Б а л а л а р:

Эй, торналар, торналар,
Һаҙҙа оя ҡороғоҙ.
Күҙгә тиклем ул һаҙҙа
Шатланышып тороғоҙ.

1. Ролдәргә бүленеп, шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Торна ниндәй ҡош ул? Һеҙҙең уны күргәнегеҙ бармы? Һүрәтен төшөрөгөҙ.
3. Торна тураһында тағы ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар?
4. Балалар торналарға һаҙҙа оя ҡорорға ҡуша. Ни өсөн икән?

*Рәми Ғарипов*

## ҺАБАНТУРҒАЙ

Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай,
Ҡарҙар бөткәнен дә көтөп тормай…
Һабансылар күңелен нурлай-нурлай,
Һай, йырлай ҙа һуң был һабантурғай!

Йә атылып күккә менә уҡтай,
Йә йомолоп ергә төшә туптай,
Ерҙе күккә әйҙәп яна уттай,
Был еҙ шөңгөр ҡасан ялға туҡтай?

Ҡанатынан яҙҙы түгә, буғай,
Яҙға ҡойона бар ялан-туғай.
Түгелдер был, ахыры, һабантурғай,
Был йөрәгем, ахыры, шулай йырлай.

1. Ниндәй ҡош ул һабантурғай? Уны ни өсөн шулай атағандар?
2. Һабантурғай нимәгә ҡыуанып һайрай? Уның һайрауын шағир нимә менән сағыштыра?

3. Һеҙҙең кешеләргә ҡарата *һабантурғай* тип әйткәндәрен ишеткәнегеҙ бармы? Ололарҙан һорашып, шул турала һөйләшеү ойоштороғоҙ.
4. Шиғырҙың аҙаҡҡы ике юлының мәғәнәһенә төшөнөргә тырышығыҙ.
5. Шиғырҙа ниндәй тыныш билдәләре ҡуйылған? Ниңә икәнен аңлатығыҙ.
6. Һүҙҙәрҙең баҫымдарын билдәләгеҙ: *тормай, уҡтай, туптай, уттай.*
7. Шиғырҙы ятлағыҙ.

**111-се күнегеү.** Һорауҙарға яуаптар яҙығыҙ. Уң яҡ бағаналағы һүҙҙәрҙе файҙаланығыҙ.

| | |
|---|---|
| Алмас ҡайҙа йәшәй? | Учалы |
| Ул нисәнсе класта уҡый? | дүрт |
| Уның атаһы ҡайҙа эшләй? | завод |
| Әсәһе ҡайҙа эшләй? | балалар баҡсаһы |
| Был кемдең туғандары? | Алмас |
| Улар кемде көтәләр? | ағай |

**112-се күнегеү.** Түбәндәге һөйләмдәрҙе төҙәтеп уҡығыҙ.

Йәшәйем мин Өфө ҡалаһында. Уҡыйым мин 112-се мәктәптә. Атайым менән әсәйем эшләйҙәр заводта. Атайымдың бар ордены. Әсәйемдең һүрәте ҡуйылған почёт таҡтаһына. Яҙғы каникулға мин барам олатайымдарға ауылға. Улар йәшәйҙәр Өфөнән йыраҡ түгел.

## ЙӘНЛӘНДЕРЕҮ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Әҙәби әҫәрҙәрҙә телде байыраҡ, образлыраҡ итеү өсөн йәнләндереү алымы йыш ҡулланыла: әҙиптәр тәбиғәт күренештәрен, йәнһеҙ әйберҙәрҙе көлдөрәләр, ҡайғырталар, йылмайталар, ғорурландыралар — уларҙы тере йән эйәһе кеүек итеп һүрәтләйҙәр. Йәнләндереү Рәшит Ниғмәти, С. Әлибаев һәм башҡа шағирҙарҙың шиғырҙарында ла күп осрай:

Буйҙары зифа ҡамыштар
Шым ғына йырлап тора;
Күк йөҙөндә тулы айы
Йылмайып ҡарап тора;
Елдәре ағас баштарын
Иркәләп тарап тора.
*(Р. Ниғмәти)*

## БАШҠОРТОСТАН ҠОШТАРЫ

Башҡортостанда кейек ҡоштарҙың 300-ҙән артыҡ төрө бар. Уларҙың күбеһе – **күсмә ҡоштар.** Беҙҙә оялап, бала сығаралар ҙа ҡышҡылыҡҡа йылы яҡтарға осоп китәләр. Сыйырсыҡ, һандуғас, торна, аҡҡош, ҡарлуғас, сәпсек һәм башҡалар, мәҫәлән, яҙ көнө киләләр ҙә көҙ көнө кире көньяҡҡа юл алалар.

Йыл әйләнәһенә беҙҙә йәшәгән **ултыраҡ ҡоштар** ҙа байтаҡ. Мәҫәлән, һайыҫҡан, ҡарабаш турғай, һуйыр, ҡор, сел, буҙ турғай, сәүкә, өкө, бөркөт һәм башҡалар бер ҡайҙа ла китмәйҙәр.

Ҡоштарҙың күбеһе иген, үлән орлоҡтары, бөжәктәр менән туҡлана. Зарарлы бөжәктәрҙе ҡырып, улар тәбиғәткә бик ҙур файҙа килтерәләр. Һунар итеп, вағыраҡ ҡоштар, йәнлектәр менән туҡланыусы йыртҡыс ҡоштар ҙа бар. Шоңҡар, мәҫәлән, сысҡанды, йомранды ғына түгел, ҡуянды ла тотоп ашай. Бөркөт иһә төлкөгә лә, хатта бүрегә лә ҡурҡмай һөжүм итә. Элек башҡорттар былдай ҡоштарҙы һунарға йөрөү өсөн ҡулға эйәләштергәндәр. Ғәлим Хисамовтың «Аҡъяурын сал бөркөт» хикәйәһендә бөркөт ярҙамында һунар итеү ваҡиғаһы тасуирлана.

Ҡайһы бер ҡоштарҙың итен ашайҙар. Ҡыр ҡаҙына, ҡыр өйрәктәренә, һуйырға, ҡорға, ғәҙәттә, шуның өсөн һунар итәләр.

Элек киң таралған ҡайһы бер ҡоштар төрлө сәбәптәр арҡаһында хәҙер бик һирәк осрай. Бөтөнләй юҡҡа сыҡмаһындар өсөн, улар Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгәндәр. Ағуна (белая куропатка),

сапсан, шоңҡар (кречет), ялан бөркөтө (степной орёл), туғаҙаҡ (дрофа) кеүек, 52 ҡош закон тарафынан ҡурсалана – уларға һунар итеү, ояларын туҙҙырыу йәки башҡа берәй төрлө зыян килтереү ҡәтғи рәүештә тыйыла.

*(Эрнст Ишбирҙиндең «Башҡортостан ҡоштары» китабы буйынса)*

1. Белешмәнең йөкмәткеһенә нигеҙләнеп, ата-әсәләрегеҙҙән, ололарҙан һорашып, Башҡортостанда йәшәгән ҡоштарҙың исемлеген төҙөгөҙ. Уның менән бер-берегеҙҙе таныштырығыҙ.
2. Башҡортостанда Ҡыҙыл китапҡа индерелгән ҡоштарға характеристика бирегеҙ, уларҙы һаҡлау саралары тураһында фекер алышығыҙ.
3. Йорт ҡоштары тураһында белешмә төҙөгөҙ. Кеше уларҙы ни өсөн ҡулға эйәләштергән? Уларҙың һүрәттәрен төшөрөгөҙ (яттан).
4. Ҡоштар тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар? Уларҙа ҡоштар ниндәй сифатта һынландырыла?

**113-сө күнегеү.** Ҡоштар үҙ-ара нисек «һөйләшә»? Дауам итегеҙ.

Кәкүк саҡыра, бөркөт саңҡылдай, барҡылдаҡ ..., әтәс ..., тауыҡ ..., һандуғас ... .

*Барый Ноғоманов*

## ҠАРҺЫЛЫУ МЕНӘН ЯҘҺЫЛЫУ

*(«Йыл бабайҙың дүрт ҡыҙы» экиәтенән өҙөк)*

Ағастың алтын алҡаһы
Өҙөлөп бөткәс елгә,
Йондоҙ иленең илсеһе —
Ҡарһылыу төштө ергә.
Елеп йөрөп, тирә-яҡҡа
Ап-аҡ ынйылар һипте,
Алҡаһыҙ ҡалған ағасҡа
Аҡ шәлен бәйләп китте.
Йылтыр көҙгө — түңәрәк
күл,
Кил дә ҡупшылан хәҙер.
Йылғыр йылға
юлды быумай,
Күпер ҙә бына әҙер.
Йондоҙ илсеһе
Ҡарһылыу
Уңған да икән үҙе:
Әйтерһең, мамыҡ
эҫкерте
Тигеҙ ергә тау өйҙө.

Выжлап сана, саңғыларҙа
Тау шыуалар малайҙар.
Ҡыуанышып,
шау-гөр килеп,
Ҡарһылыуҙы маҡтайҙар.
Эшсән дә икән Ҡарһылыу:
Ултырып ул он иләй,
Күңелдәрҙе елкендереп,
Моңло ғына көй көйләй.
Ҡай саҡ, шаярып, бәйгегә
Саҡыра етеҙ елде.
Ҡар тауҙарын күсерә ул,
Уйлаһаң, ғәжәп инде!..
Бына шулай айҙар буйы
Ҡарһылыу байрам ҡорҙо.
Ҡояш иленән Яҙһылыу
Барын күҙәтеп торҙо.
Ҡаршылар көндәр ҙә етте
Ҡояш илсеһен бына.
Яҙһылыу килде, юл һалып
Алтын нурҙарҙан ғына.
Мөләйем генә йылмайып,
Ҡарһылыуға ҡул һуҙҙы.
Бөркә-бөркә
һалҡын тынын,
Ҡарһылыу башлай һүҙҙе.

**Ҡарһылыу:**

Буран туҙҙырып уйнаным,
Яптым ергә аҡ юрған.
Айҙар буйы тырышҡаным
Бушҡамы инде булған?
Ҡөҙрәтемдән ни ҡалыр
һуң,
Ынйы ҡарҙарым ирер...

**Яҙһылыу:**

Ҡар тауҙары ҡеүәтенән
Ташҡан һыуҙар гөр килер.
Борсолма артыҡ,
Ҡарһылыу,
Күп һинең файҙаң ергә.
Матурлығың кире ҡайтыр,
Дуҫ булһаҡ икәү бергә.

**Ҡарһылыу:**

Нисек инде?
Былдай хәлдә,
Ҡалыр кем тыныс, түҙем?..
Дуҫлыҡта — бар көс,
күркәмлек,
Хаҡ булһа әгәр һүҙең...

**Яҙһылыу:**

Һүҙем — алтын.
Бергә булһаҡ,
Мөғжизә — беҙҙең ҡулда.
Кешеләр, һине һағынып,
Көтөп алырҙар йыл да.
«Улайһа — дуҫлыҡ!» —
Ҡарһылыу
Һуҙҙы ап-аҡ ҡулдарын...

Ил буйлап сәфәр сыҡтылар,
Изге булһын юлдары!
Ҡар тауын гөрләүек итеп
Ҡуштылар моңло йырға.
Ағастарҙың шәлен сисеп,
Таҡтылар йәнә һырға.
Йәшәреп китте ужымдар,
Алғас ап-аҡ нурҙарын.
Күпере киткәс йылғаның,
Шашып тулҡын уйнаны.

Асылды сиҙәм. Малайҙар
Аунаһындар шатлыҡтан.

Күлдең боҙҙарын
ваттылар —
Тонсоҡмаһын балыҡтар.
Яҙһылыу юлынан менеп,
Һабантурғайҙар һайрай.
Ер йәшел келәм ябына,
Ә урман кейем һайлай.
Тракторҙарҙың йырынан
Баҫыу өҫтө гөр килә.
Күпереп ятҡан бураҙнаға
Тос орлоҡтар күмелә.
Эй ҡыуаныша кешеләр:
Ҡарһылыуҙан бик уңдыҡ,
Быйыл туйғансы эсерҙе
Ер-әсәбеҙгә дымды.
Баҫыуҙарҙа иген булып,
Ҡарһылыу сыҡты ҡалҡып.
Туғайҙарҙы ҡапланы ул
Гөл-сәскә булып балҡып.
Ҡарһылыу менән Яҙһылыу
Үткән ер булды хозур.
Ҡарһылыу бирһә ҡөҙрәтен,
Яҙһылыу өҫтәне нур.
Йәм һәм йән өләшеп, улар
Бар донъя буйлап үтә.
Тәбиғәттә Ҡарһылыуҙың
Ғүмере дауам итә.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе текстан табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Уларҙы ҡулланып, бер нисә һөйләм төҙөгөҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.
2. Ағастың *алтын алҡаһы* тип шағир нимәне атаған?
3. Ҡарһылыу менән Яҙһылыу башҡарған эштәрҙе һанап сығығыҙ. Һеҙгә уларҙың ҡайһыһы нығыраҡ оҡшаны? Ни өсөн?
4. Ни өсөн шағир Ҡарһылыуҙы *Йондоҙ илсеһе* тип, ә Яҙһылыуҙы *Ҡояш илсеһе* тип атаған икән? Һеҙ уларҙы нисек күҙ алдына килтерҙегеҙ — һүрәттәрен төшөрөгөҙ.
5. Ҡарһылыуҙың мамыҡ эҫкерте өйөүен, ултырып он иләүен, көй көйләүен нисек аңланығыҙ? Был төшөнсәләрҙе бирер өсөн шағир ниңә нәҡ ошо һүҙҙәрҙе ҡулланды икән? Шул турала фекер алышыу ойоштороғоҙ, үҙ фекерегеҙҙе дәлилләү өсөн, текстан тағы миҫалдар килтерегеҙ. Ундай миҫалдарҙы үҙегеҙ ҙә уйлап сығарығыҙ.
6. Ҡарһылыу менән Яҙһылыу диалогын ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.
7. Текста ҡарҙың, боҙҙоң *иреүе* ниндәй һүҙҙәр менән тасуирланған?

Башҡорт телендә ҡаты әйберҙең шыйыҡҡа әйләнеүе **иреү** һүҙе менән белдерелә. Ә **эреү** һүҙен әсегән һөткә ҡарата әйтәләр. Бутарға ярамай. Мәҫәлән, *ҡар ирей, боҙ ирей, күңел ирей,* ләкин: *һөт эрей.*

**114-се күнегеү.** Һөйләшеүҙе дауам итегеҙ.

1. Һин ҡайһы районда йәшәйһең?
2. Мин Баймаҡ районында йәшәйем.
3. Үҙегеҙҙең ауылығыҙ тураһында һөйлә әле.

**115-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

1. Батыр ғүмере ике. 2. Батыр бер үлер, ҡурҡаҡ мең үлер.

## АЙЫУ МЕНӘН БАЛ ҠОРТТАРЫ

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Борон-борон заманда, өйрәк үрәтник, һайыҫҡан дисәтник саҡта, булған, ти, бер тайыштабан айыу. Уның ҡойроғо төлкө ҡойроғо кеүек, оҙон да, йөнтәҫ тә булып, ҡабарып торор булған, ти.

Айыу бал яратҡан. Балһыҙ йәшәй ҙә алмаған. Гел генә бал ашауҙы уйлаған да йөрөгән.

Бал ҡорттары йәшәгән ағас ҡыуышын күрҙеме, айыуҙың шатлығы эсенә һыймай башлай икән. Ул ағас башына менә лә, солоҡто туҙҙырып, бал ашарға тотона, ти. Бал ҡорттары айыуҙы һырып алалар ҙа сағырға маташалар икән. Әммә булдыра алмайҙар, сөнки айыуҙың йөнө оҙон, ә бал ҡорттарының ҡаяуҙары ҡып-ҡыҫҡа. Улар, айыуҙың тәненә яҡынлашырға тырышып, йөнө араһына инәләр, инәләр ҙә шунда сырмалып бөтәләр. Айыуға шул ғына кәрәк тә. Ул ағастан төшә лә ергә ятып аунай башлай. Йөн араһында буталып ҡалған бал ҡорттары иҙеләләр ҙә бөтәләр. Улай ҙа булмаһа, һыуға барып сумып ала, ти, был. Бал ҡорттары шунда һыуланып, ҡойолоп төшәләр икән. Шунан һуң айыу тағы ағас башына менеп, солоҡтағы бал бөткәнсе һыйлана, ти.

Бер ваҡыт урманға утын алырға бер кеше килгән, ти. Иплəберәк ҡараһа, ағас башында бал ашап ултырған

айыуҙы күреп ҡалған был. Үҙе бал ашай, ти, айыу, ә йөнтәҫ оҙон ҡойроғо менән бал ҡорттарын ҡыуа икән.

— Ах һин, тайыштабан! Ҡорттарҙы ҡырып, әҙер балды ашап йөрөйһөң икән әле! Муйыныңды өҙмәһәмме, бына күр ҙә тор! — тип, теге кеше ағас башына менеп киткән.

Ул айыуға ҡарап балтаһын һелтәп ебәргән. Әммә балта айыуҙың муйынын түгел, ә ҡойроғон сабып өҙгән, ти. Шулай итеп, тайыштабан айыу оҙон йөнтәҫ ҡойроғо менән бөтөнләйгә хушлашҡан. Ул ағас башынан нисек етте шулай килеп төшкән дә, ҡото осоп, урманға инеп юғалған.

Шунан бирле айыуҙар сонтоҡ ҡойроҡло булып ҡалғандар икән.

Теге кеше солоҡто ҡарап, йүнәтеп сыҡҡан, кәрәҙҙәрҙе үҙ урынына ҡуйған да ҡайтып киткән.

Бал ҡорттары, быны күреп, бик ғәжәпләнгәндәр. Улар Инә ҡорттан:

— Ниңә был кеше беҙҙең балыбыҙҙы ашап бөтөрөп китмәне икән? — тип һорағандар.

Инә ҡорт ни тип яуап ҡайтарырға ла белмәгән. Шулай ҙа ул бал ҡорттарына:

— Барығыҙ, ҡыуып етегеҙ ҙә ул кешене, беҙҙең балыбыҙҙы ниңә алмағанлығын һорағыҙ, — тигән, ти.

Бал ҡорттары, теге кешене ҡыуып етеп, һорағас, ул:

— Әгәр мин балығыҙҙы ашаған булһам, үҙегеҙгә ҡышлыҡҡа нимә ҡалыр ине? — тип яуап биргән, ти.

Бал ҡорттары солоҡҡа әйләнеп ҡайтҡандар ҙа Инә ҡортҡа теге кешенең һүҙҙәрен еткергәндәр. Шул саҡ Инә ҡорт бөтә ҡорттарҙы ла кәңәшкә йыйған. Бал ҡорттары, ул кешегә күмәкләп барырға һәм үҙҙәрен айыуҙан һаҡлауын һорарға, тип кәңәш иткәндәр, ти.

Ҡорттар, теге кеше янына ауылға барып:

— Беҙҙе яуыз айыуҙан ҡотҡара күр, үҙ эргәңә ал. Ә беҙ һиңә быны өсөн рәхмәт әйтербеҙ, — тигәндәр, ти.

— Яҡшы! Мин һеҙгә һәйбәт итеп умарта эшләрмен. Һеҙ шунда йәшәрһегеҙ, бал йыйырһығыҙ, — тип яуап биргән, ти, кеше.

Шул көндән бирле бал ҡорттары умартаға бал йыйып, кешеләрҙе бал менән һыйлай башлаған икән.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, яҙма һәм телдән күнекмәләр эшләгеҙ (дөрөҫ әйтергә, үҙ телмәрегеҙҙә ҡулланырға өйрәнегеҙ, улар менән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ).
2. *Урәтник, дисәтник* һүҙҙәренең русса яҙылышын табығыҙ, өлкәндәрҙән һорашып, уларҙың мәғәнәһен асыҡлағыҙ. Хәҙер ундай һүҙҙәр ҡулланыламы?
3. Кеше айыуҙы ни өсөн *тайыштабан* тип атай? Рус телендә лә ошоға оҡшаш ҡушамат бармы?
4. Был әҫәрҙең әкиәт икәнлеген һеҙ нимәләргә ҡарап белдегеҙ? Шул билдәләрҙе табып, уҡып күрһәтегеҙ.
5. 3-сө абзац буйынса изложение яҙығыҙ. Уны руссаға тәржемә итегеҙ.
6. Һеҙҙең бал ҡортон күргәнегеҙ бармы? Башҡорт бал ҡорто тураһында нимә беләһегеҙ? Үҙегеҙ күреп, ишетеп, уҡып йәки өлкәндәрҙән һорашып, белгәндәрегеҙҙе файҙаланып, «Башҡорт бал ҡорто» тигән белешмә төҙөп яҙығыҙ.
7. Һеҙҙә ҡорт саҡҡаны бармы? Ҡорт ағыуының файҙаһы, унан эшләнгән дарыуҙар тураһында бер-берегеҙ менән уртаҡлашығыҙ.
8. Бал ҡортона оҡшаған ниндәй бөжәктәрҙе беләһегеҙ. Уларҙың һүрәтен төшөрөгөҙ, файҙалы йәки зыянлы сифаттары тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ.
9. «Ауыҙыңды ҡорт саҡҡыры» тигән әрләү бар. Ниңә икән?
10. Умарталарҙың ниндәй төрҙәрен беләһегеҙ?

**116-сы күнегеү.** Ағастарҙың һәм ағаслыҡтарҙың исемдәрен башҡортса яҙығыҙ.

Берёза, березняк, осина, липа, ильм, вяз, черёмуха, ива, дуб, клён, сосна, пихта, ель, лиственница, куст, кустарник, рябина, калина, боярышник, урёма.

**117-се күнегеү.** Бирелгән темалар буйынса һөйләшегеҙ.

1. Өйгә ҡунаҡ килгәндә, ни эшләр инегеҙ?
2. Ял көнөн нисек үткәрҙең?

**118-се күнегеү.** Ҡайһы һүҙ һүҙлектә алда килер?

Ҡарама, Ҡарабай, Ҡарамалы.

**119-сы күнегеү.** Ф хәрефенән Я-ға тиклем алфавит буйынса хәрефтәр ҡуйып сығығыҙ.

**120-се күнегеү**. Туғанлыҡты белдереүсе ҡайһы һүҙ ир-аттарға ҡарамай?

Ҡустым, ағайым, балдыҙ, еҙнә, ҡоҙа, олатай.

*Ноғман Мусин*

## АТАЙЫМДЫҢ ОС ҺӘНӘГЕ

*(Ҡыҫҡартып алынды)*

### I

— Кинйәбай, тор, улым, тор. Бар, тышҡа сығып, йоҡоңдо осороп ин.

«Ниңә былай иртә торғоҙа икән әсәйем? Бүтән саҡта Хәшейә апайым уятырға итһә лә:

— Ниңә бимазалайһың уны? Йоҡоһо бөткәнсе йоҡлаһын, — тип, уны тыя торғайны».

Шулай уйланып, икеләнеберәк ята инем, ишек асылды, кемдер инде.

— Һаумы, Хәтирә килен.

Тауышынан танының — Йәноҙаҡ бабай. Ул, бесән эшләү өсөн көндәрҙең матурланып китеүенә ҡыуанып, аҙыраҡ хәбәр һөйләп ултырҙы, шунан йомошон әйтте.

— Хәтирә килен, бөгөн бакуйҙы төшкә тиклем йыйып бөтһәк, кәбән ҡойоп ҡайтырмын, тигәйнем. Ос һәнәгеңде биреп тор әле. Шул бер ос һәнәклек тура килтереп, эшләп ала алмай ҡартайылды инде.

Бесән ваҡыты еттеме, йыл да ошо йомошҡа инә, ошо уҡ һүҙҙәрен һөйләй Йәноҙаҡ бабай. Ауылыбыҙҙы осһоҙ-сикһеҙ урмандар уратып алһа ла, ос һәнәклек табыу уйын эш булмауын мин дә беләм. Һабы дүрт-биш метрлы, өс йә дүрт йәпле һәнәк эшләрлек матур асалы ҡайын табыу өсөн, әллә ни ҡәҙәрлем урман гиҙеп тә, буш ҡул менән ҡайталар. Ә бына атайым шундай ҡайынды

тапҡан булған. Уны йышып, шымартып, йәптәрен һелкәүесләндереп бөгөп, шундайын матур итеп эшләгән, бесәнде күбәнән һоҫоп ҡына алмалы. Шулай бик ҡулайлы булғанға, ипкенеп торғанғалыр инде, Йәноҙаҡ бабай:

— Ир маҡтаныр, ҡорал эшләр, тип белмәй әйтмәгәндәр шул. Ошо һәнәк менән кәбән һалғанда, һис арымайым, — ти.

Эйе, атайым үҙе үлгәндән һуң ҡалған ҡомартҡы ул — ос һәнәге. Уны әсәйем, бесән ваҡыты үтеү менән, йәптәре тарбағайланмаһын өсөн, йүкә менән бөрөп бәйләп, һыу төшмәҫлек ергә — өй ҡыйығы эсенә һалып ҡуя. Һораған бер кешегә биреп тә бармай уны әсәйем. Атайымдан ҡалған берҙән-бер ҡомартҡыны һындырып-фәлән ҡуйырҙар, тиҙер инде. Ә мин, шул ос һәнәген күргән һайын, атайымдың тере һынын күҙ алдына килтерәм. Уны һәр саҡ әлеге ос һәнәге менән кәбән һалып йөрөүсе, оҙон кәүҙәле, киң яурынлы, көслө кеше итеп күҙ алдына баҫтырам.

Шулай итмәй, атайым, ос һәнәген ҡулына тотҡан көйө, яҡты донъя менән хушлашты ла инде...

Атайымдың түшендә икенсе яраһы — үлемесле яраһы ла булғанлығын мин ай самаһы үткәс кенә белдем.

Бесән өҫтө ине. Әсәйем хәҙер бесәнгә яңғыҙы йөрөмәй — атайым менән китәләр. Атайым бер көндө бесән сабып ҡайтты ла урынға ятып торҙо. Уның сырайҙары ағарып, күҙҙәре эскә батҡан һымаҡ булып киткәйне.

— Ҡабат йөрөмәҫһең бесәнгә. Быға тиклем эшләгәнде, бер һыйырлыҡ бесән үҙем дә әҙерләрмен әле, — тине уға әсәйем.

Атайымдың төнө буйы ыңғырашып, йоҡламай сығыуын мин дә һиҙеп яттым. Аяғы һыҙлаймы икән, тип уйлайым йоҡо аралаш, уны йәлләп. Атайым иһә иртәнсәк торҙо ла, әсәйем, йөрөмә, тиһә лә, тағы сабынлыҡҡа китте.

— Эш һағындырған, өйҙә ятып нисек түҙмәк кәрәк. Бөгөн сабырға түгел бит, бесән йыйырға, — тип, үҙ һүҙен бирмәне.

Тағы ике көндән атайым промартель рәйесенән ат һорап алып ҡайтты. Арбаға кәбән һәнәктәрен тейәп, үҙебеҙ ҙә теҙелешеп ултырып, кәбән ҡойорға киттек. Юлда әсәйемдең:

— Һин юҡ саҡтарҙа иң оло ҡайғы — кәбән ҡойоу була торғайны. Бөтә ауылға кәбән ҡойорҙай дүрт-биш кенә кеше ҡалғайны бит, Сәлмән, — тип һөйләнеп барғаны, атайымдың уны:

— Был һуғыш ғүмере онотмаҫ ыҙалар кисертте инде. Ярар, хәҙер ундай ҡайғың бөттө, Хәтирә, ҡабат күрергә генә яҙмаһын, — тип йыуатҡаны хәтерҙә.

Атайым ул көндө һис тә ҡабаланмай ғына йөрөп, кәбәнде төш ауыуҙарға ҡойоп бөттө. Шунан беҙ ләпәш ҡайын төбөнә ултырып сәй эстек. Ашап туйғас, атайымдың:

— Һай!.. Һуғышҡа тиклемге сәләмәтлектәремде ҡайҙан алайым?! — тип ҡайын күләгәһенә ятып торғаны бөгөнгөләй күҙ алдымда.

Көнбайыш яҡта өйкөм болоттар ҡарайып күренгәс, атайым ятҡан еренән йәһәт кенә торҙо ла:

— Ямғыр яуырға самалай, ҡайта һалайыҡ, — тип, ҡабаланып, ат егергә тотондо.

Тик беҙгә ыңғай ғына ҡайтып етергә тура килмәне. Ауылға саҡрым ярым самаһы ер ҡалғас, Ташморон аҫтындағы туғайға атайым атын туҡтатты.

— Күрәһеңме, Хәтирә? — тип әрәмә яғына ымланы атайым. — Ғөбәйҙә инәй шикелле бит?

Атайым күрһәткән яҡҡа мин дә ҡараным. Унда, әрәмә буйында берәү япа-яңғыҙы кәбән ҡойоп маташа. Бесәнен күбәнән өҙә-йолҡа сәнсеп алған була ла еректән генә таған һөйәп ҡоя башлаған кәбәне өҫтөнә ырғыта. Бына ул һәнәгенең төбөн ергә ҡаҙап, юрмалап үргә менергә маташа, ләкин ҡурап кипкән бесән, аяғын терәргә лә өлгөрмәҫ борон, шауҙырлап аҫҡа ишелә. Күрәһең, ул кәбәне башына менеп, уны тапап төшөргә самалай. Ғөбәйҙә инәйҙе мин дә танып алғайным инде. Уның ире Граждан-

дар һуғышы мәлендә үк үлгән, ә ике улы был һуғышта ятып ҡалды: һуғыш йылдарында, Ғөбәйҙә инәйҙе, кәбәнде бер үҙе ҡоя икән, тип һөйләгәндәрен ишеткәнем дә бар ине...

— Былай үтеп китеү ирлек булмаҫ, Хәтирә, — тине лә атайым атының башын уңға тартты. — Ҡойошоп китәйек кәбәнен. Ямғыр яуып ебәрһә, этләнеп-гүрләнеп сапҡан бесәне әрәм булыр.

Килһәк, Ғөбәйҙә инәйҙең йән тиргә төшкән бите, муйыны, беләктәре бесән ҡауағына буялған, эскә батҡан күҙҙәре генә тоноҡ йылтырай.

— Бар, Хәтирә, кәбән башына мен, — тип атайым арбанан һәнәген алды ла, Ғөбәйҙә инәйгә ул-был хәбәр һөйләп тә тормай, кәбән ҡойорға тотондо.

Ул арала дөбөр-шатыр күк күкрәне, ҡайҙандыр ел күтәрелде. Оҙаҡламай ямғыр яуа башлаясағы көн кеүек асыҡ. Тик атайым болоттарға ла, күк күкрәүенә лә, Ғөбәйҙә инәйҙең:

— Һы, йә инде... Бына бит Хоҙайҙың рәхмәте. Ҡайҙан ғына килеп сыҡтығыҙ, — тип һөйләнеүенә лә иғтибар итмәй, бесәнде кәбән башына елгәрә генә.

Кәбән башында торған әсәйем:

— Сәлмән, ипләберәк! Аяғыңды йә түшеңде ауырттырып ҡуйма! — тип хәүефләнеп ҡысҡыра.

— Ҡурҡма! Бер ни ҙә булмаҫ, тапа әйҙә. Хәҙер бөтәбеҙ, — тип, атайым тын алырға ла уйламай.

Ямғыр күҙҙәре төшә башлағайны, атайым ос һәнәген алды. Ул оҙон һәнәк менән бесән сәнсеп ала ла, төбөн ергә ҡаҙап, һәнәкте турайтып баҫтыра, шунан уны күтәреп, яҫмарҙы кәбән башына ырғыта. Бына кәбән осланып та бара инде. Өс-дүрт һәнәк бесән булһа, ул ҡар ҙа ятмаҫлыҡ хәлгә киләсәк.

Шул саҡ мин ғүмере онотолмаҫ хәлдең шаһиты булдым. Бесән ырғытырға, тип күтәрә башлаған ос һәнәге атайымдың ҡулынан ысҡынып китте. Атайым, һәнәген тотоп ҡалырға теләгән төҫлө, уның өҫтөнә ауҙы. Әсәйем кәбән башынан:

— Ни булды, Сәлмән? — тип ҡысҡыра.

Уғаса атайым эргәһенә Ғөбәйҙә инәй килеп етте, ҡурҡып ҡысҡырып ебәрҙе:

— Хәтирә, төш әле, төшә һал!..

Ул саҡта мин әсәйемдең бейек кәбән башынан нисек төшкәнен дә хәтерләмәйем. Бер ҡулы менән һәнәк һабын, икенсеһе менән күкрәген тотоп ятҡан атайымдың ауыҙынан ҡып-ҡыҙыл ҡан һарҡып сыҡҡанын күргәс, иҫемде юйғанмын...

Өлкәндәр аҙаҡтан, ныҡ көсәнеүҙән Сәлмәндең күкрәк яраһы эстән асылған икән, тип һөйләнеләр. Нисек кенә булмаһын, беҙ күҙ менән ҡаш араһында атайһыҙ ҡалдыҡ. Уны беҙ Ташморон аҫтындағы туғайҙан ҡойоп яуған ямғыр аҫтында арбаға һалып алып ҡайттыҡ.

...Ошо хәлде хәтерләһәм, хәҙер үҙемдең дә шул ҡыл тартҡандай төҙ һаплы, дүрт йәпле һәнәкте ҡулыма алғым, уның менән ҡойоп ҡуйғандай итеп кәбән һалғым килеп китә. Тик быныһы әлегә хыял ғына шул. Бесән сәнсеп түгел, ос һәнәгеН былай күтәрергә лә саҡ-саҡ көсөм етә...

## II

Бына мин, һәнәк күтәреп, ғүмеремдә тәү тапҡыр бесән йыйырға китеп барам. Шулай әсәйемә ҡуш булып, эшкә китеп барғаныма һәр өйҙөң тәҙрәһенән һоҡланып ҡарайҙарҙыр кеүек. Әсәйемдең дә аҙымдары ышаныслы, сырайы бүтән саҡтағынан яҡтыраҡ тойола миңә.

Беҙҙең сабын Көнтөшмәҫ тигән ерҙә булыуын, ул яландың нисегерәк икәнен дә беләм. Былтыр атайым, һуғыштан ҡайтҡас, үҙебеҙгә кәбәнде шунда ҡойғайны. Шунан ҡайтып килгәнендә, Ғөбәйҙә әбейгә ярҙам итәм тип, үлде лә инде. Ауылдан ике саҡрым самаһы алыҫлыҡта ул. Өс яҡтан ҡуйы, шыйҙан ҡарағай урманы уратып алған, түбән яғы Ҡыҙылташ ярындағы әрәмәлеккә барып тоташҡан. Ҡояш байтаҡ күтәрелмәйенсә нур төшмәгәнлектән, ул күп ваҡыт күләгә булып тора. Шуға Көнтөшмәҫ тип атағандарҙыр инде уны.

Сабынлыҡҡа еткәс, ашантыны бер ағас төбөнә ҡуйыу менән, әсәйем бакуйҙарҙың нисек кипкәнен ҡарарға тотондо. Яландың урта ерендәгеләре кипһә лә, уларҙың урман ситендәге баш-баштарының аҫты шәмәреп, йәшел ята ине әле.

— Их, этләнеүем барҙыр ошо сабын менән, — тип йәне көйә әсәйемдең. – Бүтәндәрҙең бакуйы ҡурап кипкәндә лә, бында әйләндермәйенсә йыйып булмай. Улым, бына шулай итеп һәнәгеңдең йәбен ипләп кенә аҫҡа тыҡ та бакуйҙағы бесәнде туҙҙырмай ғына ҡояш яғына ҡаратып әйләндер. Ергә лыпын ятҡырмай, бына шул рәүешле баҫтырыбыраҡ ҡуйһаң, ел ҡағып киптереүгә арыу булыр.

Эш ырамлы ғына барҙы. Төшкә тиклем бакуйҙарҙың кипмәгән ерҙәрен әйләндереп сыҡтыҡ. Төшкө сәйҙе эскәс, мин ятып торғайным, йоҡлап киткәнмен. Уянып китһәм, йән тиргә төшкәнмен, аяуһыҙ ҡыҙҙыра. Әсәйем дә эргәлә күренмәй. Сабынлыҡ яғына ҡараһам, ул, төшкә тиклем әйләндергән бакуйҙарҙы йыйып, күбәләп тә йөрөй.

— Кинйәбай, һәнәгеңде алып бында кил, — ти әсәйем. — Минең артта ҡалған ваҡ-төйәк бесәндәрҙе ҡырғыслап йыйып, күбә төбөнә өй.

Ә мин иһә йүнләп атлай ҙа алмайым, баҫҡан һайын һәр һөйәк, һәр быуын ауырта, йөрәккә үтеп иңрәй. Һылтыҡлап атлап килгәнемде абайлағандыр инде.

— Берәй ерең ауыртамы әллә, улым? — тип һорай әсәйем.

— Юҡ… — Кәүҙәмде тура тотоп, баҙыҡ баҫып атларға тырышам.

Әсәйем миңә әллә йәлләп, әллә күңелемде күтәрер өсөн:

— Бирешмә, улым, — ти, — йәш һөйәк ана шулай итеп сыныға ул.

Өндәшмәнем, ваҡ бесәнде йыйырға керештем. Һәнәк тә ауырая төшкән кеүек, ҡулым да ипкенмәй тора. Бер аҙҙан һуң ғына тәнем яҙыла төшә, күңелем дә күтәрелә.

Ҡояш түбәнәйеп, көн һүрәүләнгәнсе, ялан буйынса ун күбә яһап ҡуйылғайны инде. Ҡайтырға йыйынып йөрөгәндә әсәйем:

— Бөгөн байтаҡ эш эшләп ташланыҡ бит әле, улым, — тине. — Яңғыҙым ғына булһам, ул тиклем үк ырата алмаç инем.

Минең баш күккә тейгәндәй булды, хатта арығандарым онотолдо.

Ул арала беҙҙән арыраҡ бесән эшләүсе кешеләрҙең ҡайтып килгәне күренде. Беҙ ҙә, уларға ҡушылып, ауыл яғына ыңғайланыҡ.

— Бер үҙең булһаң да, байтаҡ йыйып ташлағанһың әле һин, — ти әсәйемә бер апай.

Әсәйем тамағын ҡыра, уға көләмһөрәп ҡарай.

— Атаҡ-атаҡ, ниңә бер үҙем булайым мин?! Улым менән йыйҙымсы.

Тағы ҡыуаныс тойғоһо солғап ала мине. Ҡулымдағы тоҡсайҙы нығыраҡ һелкеп, эрерәк аҙымлап атлайым.

— Сәлмән мәрхүмгә оҡшаһа, эшкә тилбер булыр, — ти әлеге апайҙың ире, миңә күҙ ташлап.

Ҡасан ҙурайырмын да, ос һәнәген бер кемгә бирмәй, үҙем кәбән һала башлармын? Ҡапыл эсем боша, күңелһеҙләнәм. Тирләгән арҡама киске һалҡын ел килеп бәрелә. Ытырғанып, яурындарымды бөрөштөрәм.

Һуғыш бөтһә лә, уның ҡара еле һаман йәндәрҙе ҡыя ине. Ана бит, шунда алып ҡайтҡан яранан атайым үлде. Ә 1947 йылдың яҙы алып килгән аслыҡ тағы ауыр һуғыш йылдарын хәтерләтте. Әсәйем көҙҙән үк ондо бермә-бер ҡәҙерләп тотона башлағайны. Барыбер ҡыш уртаһына уҡ бөттө. Ҡайһылай етте, шулай итеп ҡыш сыҡтыҡ. Был хәл беҙҙең күңелдәрҙе лә һүрәүләндерҙе. Уйындар һирәкләнде, Ғимран бабайҙарҙың өйө эргәһенә йыйылған саҡта ла һүҙ күберәк тамаҡ тураһында бара. Кем күпме һарына ҡаҙып алып ҡайтҡан, монар

көпшәһе тәмлерәкме, әллә балтырғанмы? Онға әтлек* ҡушып бешергән икмәк яҡшымы, әллә бәрәңге ҡушһаң туҡлыҡлыраҡмы?..

Артель эшенә һаман кеше етешмәгәс, быйыл әсәйемә өс тонна бесән эшләп бирергә задание һалдылар. Ул тиклем бесәнде нисек эшләмәк кәрәк, тип әсәйем тәүҙә бик борсолғайны, шунан, илгә килгән ауырлыҡты иң менән күтәрергә тура килә инде, тип, Йәноҙаҡ бабайҙан бер бәләкәйерәк салғы һаплатып, тапатып алып ҡайтты.

— Ҡыҙым, быйыл һиңә әкренләп бесән сабып өйрәнергә тура килер инде, — тине апайыма. — Хәл ҡәҙәрлем ярҙам итерһең. Йыйышырға быйыл Кинйәбайыбыҙ ҙа ныҡлап йөрөр. Кеше ыңғайына ҡыштырларбыҙ әле.

Әсәйем менән апайым тәү башлап бесәнгә китергә йыйынып йөрөгән көндө беҙгә һуҡыр Шәһит әллә ниндәй ят кешене эйәртеп килеп инде.

Шәһиткә бик үк ҡатнашып бармай инем мин. Атаһын ауыл советына рәйес итеп ҡуйғандан бирле, танауын күтәреп йөрөгәнгәме, хәҙер бигерәк яратмайым. Әле лә ана өй эсенә әллә кемдәй күҙ йүгертеп сыҡты ла, миңә әйләнеп тә ҡарамай, әсәйемә һүҙ ҡушты:

— Хәтирә апай, бынау ағайҙар ос һәнәге эҙләй. Һеҙҙең һәнәгегеҙ барыбер тик торалыр, тип атайым ебәргәйне. Улар ялан яғынан бесән эшләргә килгән. Бойҙай оно биреп һатып алабыҙ, тиҙәр.

Сикәһен һаҡал баҫҡан, етек** сәсле кеше, берсә әсәйемә, берсә Шәһиткә ҡарап:

— Үҙегеҙгә кәрәкмәгәс, һатһағыҙ арыу булыр ине, — тип һүҙгә ҡушылды. — Хаҡына тормаҫ инек. Сиңкә кеүек бойҙай оно бирәбеҙ.

Әсәйем был көтөлмәгән тәҡдимдән тәүҙә аптырабыраҡ ҡалғайны шикелле. Шунан, эшенән туҡтап, урындыҡ ҡаҙнаһына терәлде лә, эйәген усына терәп, ауыҙын бөрөштөрҙө. Белеп бөткәнмен, ул уйланған саҡтарында гел шулай итә.

---

* *Әтлек* — күк ҡыңғырау сәскәле үлән һәм уның һары төҫтәге йыуан тамыры (ҡытлыҡта тамырын ашағандар).

** *Етек* — үҫеп оҙонайған, еткән.

— Әлләсе, кәрәкмәгәс тип... Аталары үлде шул... Хәҙер өй ҡыйығында тора ана... — тип һүҙҙәрен өҙә-йолҡа һөйләнде. — Кеше алып торғолай.

— Һат һин уны, ҡәрендәш. Ярты бот бойҙай оно бирәм, — ят кеше үҙ хаҡын әйтеп, ныҡлап һатыулаша башланы.

Ошонан аҙаҡ ҡына мин аңыма килгәндәй булдым. Хатта тертләп киткәндәй иттем. Әсәйем ос һәнәгенән һатып ебәрһә, уның менән ошо һаҡалтай, йәмһеҙ кеше кәбән ҡойоп йөрөрмө икән? Ос һәнәге тормағас, өй башы ла бушап, етемһерәп ҡалыр инде. Ә мин, ҙурайғас, шул һәнәк менән атайым кеүек үк матур итеп кәбән ҡойорға хыялланған булам тағы... Ни әйтер икән тип, әсәйемдең ауыҙына ҡарап ҡатҡанмын. Ул өҙә генә һөйләшергә ҡабаланмай. Йә, килешәйек, тигән һымаҡ миңә ҡарағас, әйтте:

— Ҡомартҡы һымаҡ итеп тота инем дә... Улым да үҫеп килә.

Эсемә йылы инеп ҡалды. Үҙем дә һиҙмәҫтән:

— Үҙебеҙгә кәрәгер, әсәй, — тип әйтеп һалдым мин дә.

Ошонан аҙаҡ ҡына Шәһит миңә боролоп ҡараны, һыңар күҙе менән мыҫҡыллы йылмайғандай итте.

— Һиңәме? Һин кәбән ҡойғансы әле, сыҡмаған ағас үҫеп, һәнәк алырлыҡ булыр.

Уның был һүҙҙәре мине оторо ярһытып ебәрҙе, өйҙә ят кеше барын да онотоп:

— Ә һинең ни ҡыҫылышың бар? Ана, үҙегеҙҙекен һатығыҙ! — тип, ярһыным да киттем.

— Беҙҙеке атайымдың үҙенә кәрәк, — Шәһит һаман телен бирмәй.

— Ҡуйығыҙ әле, балалар, — ти әсәйем асыуланмай ғына, — ололар һөйләшкәндә тик кенә тороғоҙ. — Шунан ят кеше яғына боролдо. — Он да кәрәк инде ул.

— Знамы, кәрәк, — уның һүҙен ят кеше эләктереп алды. — Хәҙер ана баҙарҙа он хаҡы тағы ла күтәрелде.

Аҙаҡҡы ике ауыҙ һүҙ әсәйемдең икеләнеүен бөтөнләй бөтөрөр, бына хәҙер, ярар, алығыҙ инде этеү, тип әйтер

һымаҡ тойолдо. Атайымдың ос һәнәген әллә кемдәр ҡулына биреп ебәрерме? Миңә шул һәнәк менән, исмаһам, бер кәбән дә ҡойорға тура килмәсме икән ни? Ни әйтергә лә белмәйем. Тәнемде әллә ниндәй көсөргәнеш ҡалтырата, күҙемә йәш төйөлә. Башымды күтәреп, әсәйемә ҡарағайным, күҙҙәребеҙ осрашты. Әсәйем ниҙер әйтергә йыйынған еренән тыйылды, эйәген тағы усына терәне. Шул саҡ ишектә Йәноҙаҡ бабай күренде.

— Әле исәнме, Хәтирә килен? — Шунан ят кешегә өндәште. — Бәй, ҡорҙаш, һин бындамы ни?

— Бына килгәйнем дә... Ҡәрендәштә ос һәнәге бар икән, шуны һатмаҫмы тигәйнем.

— Ә-ә-ә... — Йәноҙаҡ бабай һаҡалын һыпырҙы, әсәйемә һораулы ҡараны. — Үҙең, килен, ни тинең һуң?

— Әллә... Бер ни тип тә әйтмәнем әле. Он бирәбеҙ, тиҙәр ҙә...

— Он да кәрәк инде, — Йәноҙаҡ бабай әсәйемә, унан миңә һынаулы ҡараш ташлай.

— Һәнәк кәрәкмәйме ни? Атайымдың һәнәге... — Шулай тинем дә аҫҡа төбәлдем, күҙгә тағы йәш төйөлә башланы.

— Күрәһеңме, ҡорҙаш, — быныһы Йәноҙаҡ бабай тауышы, — егет булаһы кешенең атай ҡомартҡыһын биргеһе килмәй. — Мин башымды ҡалҡытып, Йәноҙаҡ бабайға өмөт менән ҡарайым. Ул иһә: — Хәтирә килен, һатыулашып торма инде ос һәнәгеңде, улыңа кәрәк булыр, — тине, бүтәнсә һүҙ оҙайтмаҫлыҡ итеп, киҫә генә. Үҙ һүҙен нығытырға теләгәндәй, өҫтәне: — Ҡомартҡыны һатып алып булмай уны.

Йәноҙаҡ бабайымды ҡосаҡлап алырҙай булдым мин ошо мәлдә. Атайымдың ос һәнәген сит-ят ҡулдарҙан тәки ҡотҡарҙы бит.

— Атайым, һатырҙар, тигәйне, — быныһы ишек төбөндә торған Шәһит һүҙ ҡыҫтыра. Йәнәһе, атаһы ауыл советында ултырғас, уның һүҙе һүҙ булырға тейеш.

Йәноҙаҡ бабай уға аптыраған һымаҡ ҡараны. Әллә быға тиклем күрмәгән инде.

— Туҡта әле, һинең атайыңдың ул һәнәктә нindәй ҡыҫылышы бар?

Соландан Шәһиттең: «Уныһын үҙенән һора», — тип һөйләнгәне ишетелде...

## III

Бынан аҙаҡ тағы бер йәй әсәйем үҙе ҡойҙо әле кәбәнде. Быйыл иһә миңә ун дүрт йәш тулды. Унан хәҙер кәбән ҡойҙормаҫҡа иҫәп тотоп йөрөйөм, атайымдың ос һәнәген үҙ ҡулыма алырға кәрәк.

Быйыл бесән эшләү тағы ла ҡыйыныраҡ буласаҡ. Йәшең етте, тип апайыма ла задание һалдылар. Әсәйем менән икәүһе алты тонна бесән әҙерләп тапшырырға тейеш. Уртасараҡ дүрт кәбән тигән һүҙ бит был. Өҫтәүенә, быйыл сабынлыҡтар үҫмәгән.

— Артелгә бесәнде Оҫҡонло туғайында эшләйһегеҙ, — тип, ҡапҡа төбөнә һыбай килеп туҡтап, һуҡыр Шәһит сабынлыҡтың ҡайҙа икәнен дә әйтте. — Ҡайҙа сабыр урын табырһығыҙ, үҙегеҙгә бесәнде шунда еткерегеҙ. Оҫҡонлонан бер һәнәк бесән дә бирмәйбеҙ, — ти бит әле.

Шашты хәҙер Шәһит. Етенсене бөткәне бирле, гел еңел-елпе эштә. Хәҙер ана завхоз булып алды. Артелдең бөтә малына хужа, кешенән бесәнде лә ул ҡабул итә. Урам буйында ла атынан төшмәй һыбай ғына йөрөй. Ат етешмәгәнлектән, бүтәндәр утын-бесәнде һөйрәп ташығанда, шул да булдымы һын? Олоно — оло, кесене кесе тип тороу юҡ, екерә лә бойора. Әсәйем уға:

— Бер сабындан икенсеһенә йүгергәнсе, үҙебеҙгә лә шул тирәнән сапһаҡ, уңайлыраҡ булыр ине лә, — тигәйне, һыңар күҙен асалаҡ-йомалаҡ итеп, екерергә тотондо.

— Башҡортса әйткәнде аңламайһыңмы әллә? — тип ебәрә. — Үҙегеҙгә унан бер һәнәк бесән бирмәйбеҙ. Иң тәүҙә бесәнде артелгә эшләп тапшырығыҙ, унан — үҙегеҙгә.

Их, ҡыланыуы. Ул шулай ҡысҡырмаһа ла, беләбеҙ бит инде: иң тәүге бесән артелгә. Һәм беҙ өс көн буйы Оҫҡонлоға бесән сабырға йөрөнөк. Бесән сабыу хәҙер

минеӊ өсөн эш тә түгел: иӊ алдан йөрөп сабам, минеӊ артымдан апайым, унан әсәйем төшә. Әсәйем ҡайһы саҡта туҡтай ҙа апайым менән миңә һоҡланып ҡарап тора...

Ләкин Осҡонло яланындағы бесәнде бер ыңғай ғына киптереп, йыйып алып булманы, яуынлап ебәрҙе. Шуға күрә икенсе бер урында, алаңғырт ағаслыҡта, үҙебеҙ өсөн бесән саба башланыҡ. Бында үлән йоҡа булһа ла, бик таҙа — ҡыйғаҡ үлән генә, мал яратып ашар әле.

Көндәр аяҙытып ебәрҙе. Бакуй йоҡа булғас ни, үҙебеҙгә тип сапҡан бесән Осҡонлоларынан алда кипте. Шуны йыйып йөрөгәндә әйттем мин әсәйемә быйыл кәбәнде үҙем ҡойорға ниәтләүемде. Көндөҙгөлөккә сәй эсеп ултыра инек. Был һүҙемде ишетеп, әсәйем эсәр сәйен эсмәй туҡтаны, миңә аптыраған һымаҡ ҡараны.

— Әлләсе, улым, кәбән һалыу уйын эш түгел...

— Беләм, әсәй.

— Беләһеңдер ҙә... Быуының ҡатмаҫ борон, ҡыялмаһаң да ярар. Йә имгәнеп-нитеп ҡуйыырһың.

— Ә үҙең имгәнеп ҡуйһаң? — тип апайым да һүҙгә ҡушылды. — Ике йыл буйы этләндең бит инде.

Әсәйем һаман ыңғайларға теләмәй.

— Ике йыл түҙгәс, тағы бер йыл сыҙармын әле, — ти.

Уның үҙһүҙләнеүе йәнемде көйҙөрә.

— Шунан? Минән ҡартайғансы кәбән ҡойҙормаҫ инеңме әллә?

Әсәйем көлөп ебәрә, арҡамдан һөймәк булып ынтыла, мин ситкә тайшанам.

— Һин ҡартайғансы әле, у-лыым!.. Ярар, ярар, улай бик дәрт иткәс, самалап ҡарарһың.

Баш күккә тейә яҙҙы минең. Әйтерһең, тел менән түгел, ҡул менән ҡойоп ҡуйғанмын кәбәнде. Ошо дәрт, ошо ынтылыш мине иртәгәһенә сабынға йүгертеп алып килде. Хәҙер үҙемдеӊ малай-шалай түгел икәнде күрһәтке килеүҙәнме, әсәйем менән апайым, ауыр булыр, тиһәләр ҙә, кәбән һәнәктәрен бер үҙем күтәреп алдым.

Күбә тарттырғас, әсәйем менән икәүләп таған һөйәнек. Тик хәҙер төп эште мин башҡарам, әсәйем кәңәштөңөшө менән ярҙам итеп йөрөй. «Тағаныңдың төбөн таймаҫлыҡ итеп ҡуй, кәбәнең ҡыйшаймаҫ», «Анау оҙонораҡ тағанды аҫ яҡтан һөйәһәң, арыуыраҡ булмаҫмы?», «Ҡабаланма, тәүге эште уйлап ҡына эшләү яҡшы», — тип һүҙ-хәбәрен табып тора.

Бына таған әҙер. Хәшейә апайым төпкә һуҡтырылған күбә башына менеп баҫты. Мин, һалҡын ҡанлы күренергә тырышып, күбәгә ипләп кенә һәнәгемде ҡаҙаным. Ә йөрәк дөп-дөп тибә, тәнем буйынса ниндәйҙер зымбырлау үтә. Уйынмы ни, ғүмеремдә тәүге тапҡыр кәбән ҡойорға тотонам бит! Кәбән ҡойоу — егет ҡорона инеү ул, тип юҡҡа әйтә тиһеңме ни Йәноҙаҡ бабай. Бына әле кәбән ҡоя башлауымды ҡарап торһон ине әле... Туҡта инде, башлауы башлау ҙа, нисек итеп ослап ҡуйылыр бит. Кәбәнем аҙаҡтан ауып ятмаҫмы? Ул саҡта ер тишегенә ин дә кит...

— Бесәнде ауыр күтәрмә, самалабыраҡ сәнс, — ти әсәйем. Минең иһә сәпсеңләп, еңел-елпеләп торғо килмәй, көс еткән тиклем күберәк сәнсеп ырғытырға тырышам. Атайым ауылда бер кәбәнсе булған бит минең, уның исеменә тап төшөрөргә ярамай.

Кәбән күтәрелгән һайын, миңә дәрт өҫтәлә, кәбәнде тиҙерәк ҡойоп бөтөп, уны ситтәнерәк ҡарап торғо килә.

— Улым, кәбәнеңдең уртаһын нығыт, эргәһе ишелеп төшмәһен, — тип кәңәштәрен һаман биреп йөрөй әсәйем. — Хәшейә, һин анау ялпылдап торған бесәнде аяғың аҫтына тартып һалып тапа әле...

Күкрәк һәнәгенә тотонғас, эш әкренәйә төштө. Оҙон һаплы һәнәк менән бесәнде сәнсеп алып күтәреүе ҡыйыныраҡ икән шул. Биттән, бөтә тәндән шыбырлап тир аға. Бесән саңы менән ҡатнаш тир төшөп, күҙҙе әсеттерә. Хәл дә мөшкөлләнә бара, ахырыһы, ырғытҡан бесәнем мин һалырға теләгән урынға ятмай йә кире шыуып төшә. Арығанымды һиҙҙермәҫ өсөн, кәбәндең төҙлөгөн ҡараған кеше булып, ситкәрәк — күләгәгә барып баҫам да аҙ ғына

тын алам. Әле бит ос һәнәге менән кәбәнде ослайһы бар, ниңә йомшарам әле, тип, сәмләнеп, тағы эшкә тотонам.

Күкрәк һәнәге менән буй етмәй башлағас, ҡайында һөйәүле торған ос һәнәген алырға киттем. Нисәмә йылғы хыялымды — ошо һәнәк менән кәбән һалыу уйын бына хәҙер эшкә ашырасаҡмын. Их, атайым үҙе күрһен ине һәнәге менән кәбән ҡойғанымды!..

**121-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ, руссаға тәржемә итегеҙ.

Һөйгән, һырғауыл, септә, ҡалып, ишкәк, туҡмаҡ, таған, аҫҡан, арҡан, һалмауыр, күҫәк, ҡолға, сығыр, баҫырау.

## IV

Эсемдә ҡайнаған уйҙарҙы һиҙҙермәҫ өсөн, аҙ ғына ла тик тормайынса, һәнәгемде күбәгә ҡаҙаным. Бына һәнәкте тубыҡ менән беләккә һалмауырлап һалып, һаптың осон киҫкен хәрәкәт менән ергә ҡаҙарға самалайым. Ә ул ысҡына ла тупраҡты юғарыға сөйә. Бесән вағы йыйып йөрөгән әсәйем дә, эшенән туҡтап, миңә ҡарап тора ине. Улы ос һәнәге менән тәү тапҡыр алған бесәнен күтәреп ырғыта алырмы-юҡмы — шуны белгеһе киләләр инде. Ахырҙа ул түҙмәне, мин һәнәк һабын ҡаҙарға маташҡан ергә йүнәлде. Билдәле инде, ул кәбән ҡойған саҡта, мин уның һәнәк төбөнә баҫып тора торғайным бит, хәҙер ул миңә ярҙам итмәксе. Юҡ инде, был тәүге һәнәкте мин кеше ярҙамынан тыш күтәрергә тейешмен. Тағы ла нығыраҡ сәмләнә төшөп, ос һәнәгенең һабын ҡапыл ергә сәнсәм һәм, бесәнде күтәрә биргәс, һапты нығыраҡ ҡаҙайым да, уны турайтып ҡуям. Бесәнде кәбән башына ырғытыу өсөн, һаптың төбөнән тотоп һәнәкте күтәргәйнем, ҡапыл тәнтерәкләп, тигеҙлекте юғалттым, алға атлау урынына артҡа сигендем. Ос һәнәге мине үҙе ыңғайына елтерәтеп алып китеп бара. Ҡайһылыр арала әсәйем күҙемә салынды: ул туҡтап ҡалған, ҡулын күкрәгенә ҡуйған, ҡарашы миңә төбәлгән. Әйтерһең, мин ҡот осҡос упҡын алдында. Шуны аша һикереп сыға аламмы-юҡмы?..

Туҡта, ниңә был һәнәк ыңғайына артҡа сигенәм әле? Шул тиклем ҡыйынлыҡ менән күтәргән нәмәне ҡабат ергә төшөрөргәме? Әсәйем, әйттем бит, быуының ҡатып етмәгән шул әле, тиһә...

Көсәнеп, һапты нығыраҡ ҡыҫам, беләкте ҡатынҡыланып, һәнәкте саҡ ҡына юғарыраҡ күтәрә төшәм дә, елләнеп, алға атлайым һәм бесәнде ялп иттереп кәбән башына ырғытам. Булды!.. Ап-аруҡ сәнсеп алынған бесән Хәшейә апайымдың өҫтөнә үк барып төштө.

— Ниңә енләнәһең? Ипләберәк ырғытырға булмаймы ни?! — тип ҡысҡыра ул, бесән аҫтынан борһаланып сығыр-сыҡмаҫтан.

Миңә рәхәт, көләһе лә, урман яңғыратып ҡысҡырып ебәрге лә килә.

— Бына бит, ҡайһылай матур ырғыттың. Һин — мин түгел шул. Ир ҡаны һиндә, атайың ҡаны, — әсәйем шулай һөйләнеп, тағы үҙ эшенә тотондо. Уның сырайы, күҙ ҡараштары нисектер яҡтырып киткән һымаҡ ине был мәлдә.

Мин, һәлмәк атлап, тағы күбә эргәһенә ыңғайланым. Хәҙер үҙ-үҙемә ышаныс артып киткәйне минең. Шуғалыр инде, был юлы баяғы кеүек оҙаҡ этләнеп тә тормай, бесәнде йәлп иттереп күтәреп алдым.

Төш етеүгә, кәбән ҡойолоп бөткәйне инде. Мин уны ысын кәбәнселәрсә өйрөлтөп йөрөп һуҡҡылап шымарттым, төбөн күбә һәнәге менән төрткөләп сыҡтым. Хәшейә апайымды арҡандан буйлатып башынан төшөргәс, ситтәнерәк йөрөп кәбәнемде ҡарайым. Шөйлә арыу килеп сыҡҡайны ул: төптән нәҙегерәк, урта тирәһендә күкрәкләнеп китә, осланыуы ла матур ғына, аҙыраҡ ҡар ятһа ятыр, әммә һыу үтерлек түгел.

— Ҡарасы, әсәй, бөтөнләй кәбәнгә оҡшатҡан да баһа был Кинйәбай! — тип сөрелдәй апайым.

Әсәйем баҫалҡы ғына яуап бирә:

— Оҡшатмай әллә. Бынамын тигәнсе. Егет кеше лә инде ул.

Ана бит, әсәйем мине тәү тапҡыр егет тип атаны. Былай булғас, кәбән ҡойоу уның ҡулынан төштө.

Атайымдан ҡалған һәнәк менән кәбәндең икенсеһен дә, өсөнсөһөн дә... ҡоясаҡмын. Бына шундай яҡшы кәйеф менән төшкөләккә ашарға ултырғайныҡ, ситтәгерәк арба юлынан үтеп барған һыбайлы беҙгә табан боролдо.

— Шәһит түгелме һуң? — Әсәйем борсолоп һораны.

— Булһа ни, килһен әйҙә.

— Ниңә артель бесәнен йыйырға барманығыҙ, тип бәйләнерме икән инде.

— Уның ни эше бар? Бәйләнеп ҡараһын!

— Улай һөйләшмә, улым, уның һүҙе — һүҙ...

Уңарсы һуҡыр Шәһит, эргәбеҙгә етеп, атын туҡтатты. Өҫтән аҫҡа ҡарап, һыңар күҙен бәзрәйтте.

— Бармаҡ үҙегеҙгә кәкре!.. Оҫҡонлола бесәнегеҙ ҡурап кипкән, ә һеҙ бында!

Йомшаҡ күңелле әсәйем ошолай асыулы һөйләшкән кеше алдында ҡаушабыраҡ ҡала ине. Әле лә ни тип яуап ҡайтарырға белмәй тик тора.

— Юҡты һөйләйһең, Шәһит. Ундағы бакуй ҡалын, әйләндерһәң дә, бөгөн кипмәй ул, — тип яуапты мин бирҙем.

— Ә һин телеңде тый, ҡустым! Хәҙер үк Оҫҡонлоға китегеҙ! Юғиһә!

— Ни эшләтерһең? — Мин тороп баҫтым. Һөмһөҙ ҡылanған Шәһит алдында һис тә йомшарып төшкө килмәй ине.

— Уныһын үҙем беләм! — Шәһиттең һыңар күҙе алан-йолан килә. — Артелдеке тип кәбәнегеҙгә бирка тыҡтым киттем!

— Ҡабаланма! Мин уны һинән бирка тыҡтырыу өсөн ҡойманым!

Шәһит ауыҙын йырып, самосад тартыуҙан һарғайып бөткән тешен ыржайтып, мыҫҡыллы йылмайҙы.

— Шулаймы ни! Ха-ха-ха!.. Берәү кәбән ҡойған, имеш. Һы!..

Шәһит атынан төштө лә бер нәҙек ағас ҡырҡып алды. Уны юнып, көрән ҡәләм менән ниҙер яҙғас:

— Был кәбәнегеҙҙе тонна ярымға һуғам. Ул ошо минуттан артелдеке, — тип, әле эшләгән биркаһын тотоп, кәбәнгә табан атланы.

Әсәйем тик ошо саҡта ғына телгә килде.

— Абау, ниңә улай ҡыланаһың ул, Шәһит? Артелгә тигән сабынды сабып бөткәнбеҙ бит, йыйып бирербеҙ.

— Уныһын да бирерһегеҙ, быныһын да...

Шәһиттең уғата мәйелһеҙ ҡыланыуы бөтә сабырлығымды өҙҙө. Һөйәүле торған ос һәнәгеп йүгереп барып алдым да юлына арҡыры төштөм.

— Яҡын юлама кәбәнгә!

Һуҡыр Шәһит һөмһөҙләнеп инеп килә.

— Кит юлдан!

— Китмәйем!

Әсәйем, ни эшләргә белмәй, албырғап туҡтап ҡалған.

Шәһит һәнәкте ситкә этеп ебәргәйне, мин яңынан уға юлды кәртәләнем.

— Әле һин шулаймы?! — тип, Шәһит һәнәккә килеп йәбеште. Китте тартыш. Көслөрәк ине Шәһит, мине дөрөп алып бара. Әсәйем менән Хәшейә әллә нимәһенә аңшайып тик тора. Улар ярҙам итһә, бирешмәҫ инем. Бына һуҡыр Шәһит ос һәнәген ҡулымдан тартып алды, яңынан барып йәбешкәйнем, мине йыҡкансы этеп ебәрҙе лә һәнәкте юғары күтәрҙе. Һындыра һуғырға уйлай түгелме һуң ос һәнәген? Атайымдан ҡомартҡы булып ҡалған, бөгөн генә үҙем тәү башлап кәбән ҡойған һәнәктә ни үсе бар икән?..

Оҙаҡ икеләнеп, ниндәйҙер аҡыл уйлап торорға ваҡыт юҡ ине. Шәһит һәнәк менән ҡайын олонона киҙәнгән ыңғайы шунда ырғылдым. Әсәйемдең асырғанып ҡысҡырғаны, Шәһиттең салшайған йөҙө генә күҙгә салынып ҡалды. Артабан бер ни ҙә хәтерләмәйем.

...Шәһиттең кәбәнгә бирка тығыу ҡайғыһы ла киткән, атын менгән дә сапҡан.

Шәһит ҡайын олонона ҡуша һындыра һуғырға киҙәнгән һәнәк миңә эләккән. Беләк һынған, ә ос һәнәге имен

ҡалған. Ҡулым үҙәккә үтеп һыҙлаһа ла, шуға күрә тешемде ҡыҫып түҙәм. Тән яраһы уңалыр әле. Ә атайҙан ҡалған ҡомартҡыны юғалтһаң, уны ҡабаттан табып буламы ни?

1. Текстан үҙегеҙ белмәгән һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Мөмкин тиклем күберәк уларҙың синонимдарын йәки антонимдарын табығыҙ.
2. *Йомшаҡ күңелле* кеше тип кемгә әйтәләр? Кешенең күңеле тағы нисек була? Һеҙҙең үҙегеҙҙең күңелегеҙ ниндәй? Ғөмүмән, нимә ул — *күңел*, һәм, һеҙҙең фекерегеҙсә, ул нисек булырға тейеш?
3. *Ер тишегенә ин дә кит* тип ниндәй осраҡта әйтәләр? Һеҙҙең шундай хәлдә ҡалғанығыҙ бармы? Рустар был осраҡта нимә ти?
4. Нимә була ул — *этләнеү*? Һеҙҙең этләнгәнегеҙ бармы? Ә *әтәсләнеү* нимәне аңлата икән? Рустар был осраҡта нимә ти?
5. *Бармағың үҙеңә кәкре* тип кемгә әйтәләр? Һәйбәт холоҡмо ул?
6. Хикәйәлә ҡайһы осор ваҡиғалары тасуирлана? Һеҙ быны нимәгә ҡарап белдегеҙ? Миҫалдар килтерегеҙ.
7. Хикәйәләге образдарға ҡыҫҡаса характеристика бирегеҙ, үҙегеҙ күҙаллауығыҙса, уларҙың һүрәтен төшөрөгөҙ.
8. «Ҡомартҡыны һатып алып булмай», — ти Йәноҙаҡ бабай. Һеҙ быны нисек аңланығыҙ? Кинйәбай өсөн атаһынан ҡалған ос һәнәгенең ни өсөн ҡәҙерле булыуы, хикәйәнең дә ни өсөн нәҡ ошолай аталыуы тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ.
9. Ата-бабаларҙан беҙгә ниндәй ҡомартҡылар ҡалған? Беҙ уларҙың ҡәҙерен беләбеҙме? Шул турала һөйләшеү үткәрегеҙ.

### Һүҙ күрке — мәҡәл

Һәләтлене һәнәк тотоуынан күреп була.

Һәнәге ҡиммәт түгел, ҡаплағас ҡиммәтләнә.

## КӨЛӘМӘСТӘР

Хужа Насретдиндан:

— Һинеңсә, ҡояш файҙалыраҡмы, әллә аймы? — тип һорағандар.

Хужа:

— Ай, — тип яуап биргән.

— Ни өсөн? — тип һорағас, Хужа:

— Сөнки ҡояш көндөҙ, былай ҙа яҡты ваҡытта, яҡтырта, ә ай төндә — ҡараңғы ваҡытта яҡтырта, — тип яуап биргән.

* * *

Хужа мәктәптә уҡып йөрөгән саҡта, уҡытыусыһы унан:

— Хужа, тәүлек оҙонлоғо нисә сәғәт? — тип һораған.

— Бөгөн егерме биш сәғәт, — тип яуап биргән Хужа.

Уҡытыусыһы:

— Егерме дүрт сәғәт! — тип төҙәткәс, Хужа уға:

— Үҙегеҙ кисә көн бер сәғәткә оҙайҙы, тигәйнегеҙ түгелме һуң? — тигән, ти, аптырап.

* * *

— Мәҙкүрә әбей, репродуктор тотоп ҡайҙа киттең?

— Магазинға барам әле. Һатыусы русса һөйләй торғанын биреп ебәргән. Башҡортса һөйләй торғанына алмаштырайым, тим.

1. Көләмәстәрҙе уҡып, йөкмәткеләрен һөйләгеҙ, уларҙың ни өсөн көлкө тыуҙырыуын аңлатығыҙ.
2. Үҙегеҙ белгән көләмәстәрҙе яҙып сығығыҙ. Уларҙы уҡып ишеттерегеҙ.
3. Рустарҙа, татарҙарҙа һәм башҡа халыҡтарҙа көләмәс нисек атала? Үҙегеҙ белгән берәй телдә көләмәс һөйләгеҙ.
4. Үҙегеҙ көләмәс уйлап сығарып ҡарағыҙ. Һәйбәт көләмәс сыҡһын өсөн, нимә кәрәк?

**122-се күнегеү.** Малай һәм ҡыҙ исемдәре русса яҙылған, шуларҙы башҡортса яҙығыҙ, алфавит тәртибендә ҡуйығыҙ.

Наиль, Ильдар, Гульнар, Айгуль, Ильгам, Рамиль, Гульшат, Гузель, Гадель, Альфия.

## КӨЛӘМӘС ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Көләмәс бөтә халыҡтарҙың да ауыҙ-тел ижадында иң үҙенсәлекле, иң киң таралған һәм әле лә күпләп ижад ителә торған жанр һанала. Рустар уны *анекдот,* украиндар *усмешка,* татарҙар *мәҙәк,* төрөктәр *латифа* тип йөрөтә.

Көләмәстәрҙә халыҡтың тапҡырлығы, үткер телле, йор һүҙле булыуы сағыла. Уларҙа тормошта, кешеләрҙең холоҡ-ҡылығында булған кәмселектәр фашлана, зирәклек, тапҡырлыҡ, аҡыллылыҡ кеүек сифаттар маҡтала.

Көләмәстәрҙең күләме бик бәләкәй була. Улар, ғәҙәттә, ике кешенең һөйләшеүе рәүешендә ойоша. Һөйләшеүселәрҙең береһе ыңғай герой итеп бирелә. Ул аҡыллылығы, зирәклеге, тапҡырлығы арҡаһында бер ҡатлыраҡ әңгәмәсеһен һәр саҡ көлкөгә ҡалдыра.

Башҡорт ауыҙ-тел ижадында Хужа Насретдин, Ерәнсә сәсән, Алдар, Шомбай исеме менән бәйле көләмәстәр күп.

Һаранлыҡты, ялҡаулыҡты, наҙанлыҡты, бер ҡатлылыҡты фашлауы менән көләмәстәр сатирик әкиәттәргә оҡшаш.

*Абдулхаҡ Игебаев*

## ЕҢЕҮ КӨНӨ

Болондарҙы күмеп майҙың
Нәфис гөлөнә,
Еңеү көнө балҡып килде
Тыуған илемә!
Еңеү үҙенән-үҙе бит
Килмәне ергә.
Уны яҡлап ҡаһармандар
Көрәште бергә!

Атай-олатайҙар яуҙа
Еңеү яуланы,
Фашистарҙы дөмөктөрөп,
Илде данланы.
Мәңгелек дан, тигән кеүек,
Батыр халҡыма,
Май ҡояшындай нурланып,
Байраҡ талпына!

1. Шиғырҙа ниндәй еңеү тураһында һүҙ бара? Еңеү көнө ҡасан була?
2. Еңеү көнөн һеҙ нисек байрам итәһегеҙ?
3. Шиғыр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

**Башҡорт телендә лә һүҙҙәрҙең тамыры (корень) һәм ялғауы була. Һүҙҙә бер нисә ялғау булырға мөмкин.**

**123-сө күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең ялғауҙарын табығыҙ. Ялғауҙар нимә белдерә? Һуңынан ошо һүҙҙәрҙе диктант итеп яҙығыҙ.

Балаларҙың, уҡыусыларым, урмандарҙан, ауылымда, баралар, уҡығандар, йөрөнөләр.

**124-се күнегеү.** Түбәндәге ялғауҙарҙың нимә аңлатыуын билдәләгеҙ. Нөктәләр урынына тамыр һүҙҙәр өҫтәп яҙығыҙ.

...лар, ...ның, ...ға, ...ым, ...сы, ...да, ...һы.

Өлгө: *Алма-лар.*

**125-се күнегеү.** Нөктәләр урынына кәрәкле һүҙҙәрҙе ҡуйып, һөйләмдәрҙе яҙығыҙ.

1. Малайҙар бөгөн ... барҙылар. Улар ... ял иттеләр (урманда, урманға).
2. Азамат менән Рәмил ... сыҡтылар. Бөгөн улар ... дежур булдылар (кластан, класта).
3. Шамил менән Таһир ҡысҡырып ... (һөйләйҙәр, һөйләшәләр, әйтәләр).

4. Йоҡлар алдынан атайым утты ... (һүнде, һүндерҙе).
5. Дәрестәр бөткәс, беҙ өйгә ... (китәбеҙ, ҡайтабыҙ).
6. Беҙ башҡорт телен ... (өйрәнәбеҙ, уҡыйбыҙ).

**126-сы күнегеү.** *Ҡап* һүҙенән яһалған тамырҙаш һүҙҙәрҙе уҡығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

*Кем?* — ҡапҡасы, ҡапҡансы.
*Нимә?* — ҡапҡа, ҡабыҡ, ҡабырсаҡ, ҡапсыҡ, ҡапҡас, ҡабым, ҡапҡан, ҡаплама, ҡаптырма.
*Ни эшләй?* — ҡаплай, ҡаба, ҡапҡаслай.

Ошо һүҙҙәрҙе индереп, һөйләмдәр төҙөгөҙ.

*Кирәй Мәргән*

## ҠУРАЙСЫНЫҢ ҮЛЕМЕ

Дошман тылына тәрән разведкаға киткән дүрт разведчиктың өсәүһе генә әйләнеп ҡайтты. Егеттәрҙең иң үткере, Мәхмүт Сабирйәнов тигәне, кире ҡайта алманы. Бындай яҡын иптәште, һәйбәт разведчикты юғалтыу ауыр ине. Бигерәк тә группа командиры Крепак ныҡ ҡайғырҙы уның өсөн. Сөнки Мәхмүтте разведкаға Крепак үҙе алып барғайны.

Батыр разведчик, ҡурайсы Мәхмүт Сабирйәнов дивизияла күптән хеҙмәт итеп килде. Уны «Йәйәүле Мәхмүт» тип йөрөтәләр ине. Был ҡушаматты теге «Йәйәүле Мәхмүт» тигән йырға эйәреп таҡҡандарҙыр инде, моғайын. Иптәштәре уны үҙ һүҙле, ҡаты ихтыярлы кеше булараҡ нығыраҡ беләләр. Уның ошондай характерына бәйләнгән күп кенә ваҡиғалар һөйләп йөрөтәләр. Уларҙың береһе Мәхмүттең нисек ҡурайлы булыуы тураһында.

Шул көндәрҙә бәреп төшөрөлгән дошман самолётының һыныҡтары араһынан тапты ул ҡурайҙы. Шундағы тимер-томор араһында табылған алюмин көпшә, ҡурай яһар өсөн, бик йәтешле булды. Мәхмүт яһаған ҡурайына сәскәләр төшөрҙө, бәкеһе менән соҡоп, биш мөйөшлө

йондоҙ яһап ҡуйҙы һәм, ул ғына етмәç кеүек күренгәс, «СССР» тип яҙып ҡуйҙы.

Ҡурайындағы биҙәктәрҙе күргәс, ҡайһы берәүҙәр:

— Ай-һай, Мәхмүт, быны берәй заводта эшләтеп алдыңмы әллә? — тип төрттөрөп тә алдылар.

— Эйе, заводтан, — тип яуап бирә килде Мәхмүт, иçе китмәй генә. — Заказ буйынса эшләтеп ебәргәндәр!

Һуғышта ҡурай тартып ҡына ятып булмай. «Ҡурайсы разведчик»ка әйләнеп киткән Мәхмүт тә был һөнәре менән оҙаҡ маҡтанып йөрөй алманы. Бер нисә көндән һуң уға нәүбәттәге «һунарға» китергә тура килде.

Был юлы улар дүртәүләп барҙылар. Группаның башында Крепак тигән егет ине. Ҡыйыу разведчиктар дошман тылын өс көн һәм өс төн ҡыҙырып йөрөнөләр. Дүртеһе лә һуңғы көнгә тиклем иçән булдылар. Тик һуңғы төндә, үҙебеҙҙең яҡҡа сығып килгәндә, группа дошман засадаһына тап булды. Ошо бәрелештә Мәхмүт группанан айырылып ҡалды. Ул башта, дошмандың иғтибарын үҙ яғына ылыҡтырып, ҡалған иптәштәрен иçән-һау ғына сығарып ебәрергә булды. Ә һуңынан инде иптәштәре уны ҡотҡарасаҡ. Гитлерсылар, ысынлап та, уның яғына бороллолар. Мәхмүт уларҙы һаман эйәртә килде. Ҡалған өс разведчик «тел» хеҙмәтен үтәү өсөн ҡулға алынған бер немец офицеры менән үҙебеҙҙекеләр яғына шыуышып килеп сыҡтылар. Шунда уҡ улар Мәхмүткә ярҙамға ашыҡтылар. Командир Крепак үҙе, автоматсылар алып, яҡын иптәшен ҡотҡарырға килде. Ләкин... Мәхмүт тә, уны эҙәрләп китеүсе немец һалдаттары ла юҡ ине инде.

Был тигеҙһеҙ бәрелештә Мәхмүт ҡаты яраланды һәм, көсөн йыйып, ни тиклем генә ынтылып ҡарамаһын, ҡуҙғалып китә алманы. Гитлерсылар уны уратып алдылар һәм штабтары урынлашҡан утарға һөйрәп алып киттеләр. Шул сәғәттән алып разведчик Мәхмүттең дошман тылындағы тиңһеҙ батырлыҡтар менән тулы көндәре башланды. Унан күп тапҡыр туҡмай-туҡмай һорау алдылар. Ләкин ул, элеккесә, бер тауыш та сығарманы. Гитлерсылар уны шашынып яҙаларға тотондолар:

сәстәрен берәм-берәм йолҡоп сыҡтылар, ҡыҙҙырылған тимер менән маңлайын көйҙөрҙөләр, ҡолаҡтарын ҡырҡып алдылар, үтмәҫ бысаҡ менән йәрәхәттәрен соҡоп, унда тоҙ һиптеләр. Ғорур егет барыбер уларҙың бер генә һорауына ла яуап бирмәне.

...Сираттағы язалауҙан һуң, еүеш һарайға ябып ҡуйылған Мәхмүт һушына килде. Ҡаты һыҙланыуҙарҙан ҡотолорға тырышып, ул, онотолоп китеп, ирендәрен тешләне. Һарайҙа яңғыҙы ғына икәнлекте белгәс, ул тотҡонда тәүге тапҡыр оҙон итеп ыңғырашып ҡуйҙы. Үҙ тауышынан үҙе тертләп, көрһөнөп ҡуйҙы. Шул саҡ уның күңеленә моң килде. Ул билдәһеҙ бер оҙон көйҙө тауышһыҙ ғына, ауыҙ эсенән генә мөңрәй башланы. Был көй уның хәтер һандығындағы икенсе нәмәләрҙе ҡуҙғытып ебәрҙе. Ҡапыл уның ҡурайы иҫенә төштө. Ҡайҙа ҡуйғайны һуң әле Мәхмүт ҡурайын?..

Хәтер ебе уны ошо һарайға тиклем алып килде. Эйе, эйе, Мәхмүтте яралы килеш тотоп алдылар ҙа, аяҡ-ҡулын бәйләп, палаткаға һалып, һөйрәтеп алып киттеләр. Шунан тәүге «яғымлы» допрос. Тағы ла һарай. Тап шул саҡта инде Мәхмүт үҙенең итек ҡуңысында килгән ҡурайын һарай мөйөшөнә йәшереп күмеп ҡуйҙы... Эйе, эйе, ана тегендә ул. Мөйөштә... Шунан һуң допросҡа күпме инеп сыҡҡандыр — быныһы уның хәтерендә юҡ. Ә ҡурай хәтерҙә. Күмелгән ерен дә белә...

Бик ҙур ҡыйынлыҡ менән ул ҡурайын табып алды һәм йәрәхәтле ирендәренә килтереп терәне. Ҡурай, нисектер, ыңғырашып яуап бирҙе. Мәхмүт тағы өрҙө. Был юлы моңло ғына тауыш сығып ҡуйҙы. Өсөнсө тапҡыр Мәхмүт бер оҙон көйҙө башлап ебәрҙе. Ләкин тыны етмәне. Көй өҙөлдө.

Үҙе өсөн ят булған тауышҡа һарай ишеген асып ебәргән һаҡсы, разведчиктың ҡулындағы нәмәһен күреп, аптырап ҡалды. Ул Мәхмүтте тағы штабҡа килтерҙе.

Бәке менән соҡоп биҙәлгән ҡурайҙы офицерҙар бик оҙаҡ ҡаранылар.

— Вас ист дас? — тип һораны офицерҙарҙың береһе, аптырап. — Что есть этот труба?

Был юлы Мәхмүт яуап бирҙе — ул дошман ҡулына эләккәне бирле, беренсе тапҡыр тауыш сығарҙы.

Көслө итеп, үҙенә генә хас ғорурлыҡ менән әйтте ул һүҙен:

— Был — ҡурай! Ҡурай!

— Ҡурай?

Тәржемәсе аша «ҡурай» тигән нәмәнең ни өсөн хеҙмәт итеүен төшөнгән офицер ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе.

— Ҡара әле, — тине офицер Мәхмүтте алып килгән һалдатҡа, — ошо трубка менән пленный тауыш сығара инеме?

— Әйе, ул уйната ине...

— Яҡшы. Был үҙ һүҙле музыкант уйнатыуын «дауам итһен» — ауыҙын асығыҙ ҙа ошо яратҡан инструментын боғаҙына тығып ебәрегеҙ...

Ике көндән һуң утарҙы беҙҙекеләр һуғышып алды. Утарҙың ситендәге ташландыҡ һарайҙың береһендә гитлерсылар тарафынан язалап үлтерелгән, ауыҙына ҡурай тығылған бер һалдат мәйете таптылар. Гитлерсылар офицерҙарының бойороғон бик тырышып үтәгәндәр. Ҡурай бер нисә урындан бөгөлөп бөткәйне.

Утарҙа булғандар барыһы ла Мәхмүтте ҡәҙерләп күмеүҙә ҡатнаштылар, ҡурайсының үлмәҫ образын үҙҙәре менән алып киттеләр... Үлмәне ул ҡурайсы! Уның даны илгә ҡайтты. Меңәрләгән ҡурайсылар герой Мәхмүттең даны тураһында киң яландарҙа, болондарҙа, тыуған Ағиҙел буйҙарын яңғыратып йырланылар...

1. Нимә ул *хәтер һандығы*? Һеҙҙең хәтер һандығығыҙ бармы? *Ә хәтер ебе* ни өсөн кәрәк?
2. *Кәйеф ҡырылыу, хәлдән тайыу, һуштан яҙыу, тын етмәү* һүҙбәйләнештәре менән һөйләмдәр төҙөп, руссаға тәржемә итеп яҙығыҙ.
3. Һеҙҙең ҡурай үләнен (көпшәһен) күргәнегеҙ бармы? Музыка ҡоралы булараҡ, ҡурай нисек яһала? Уның һүрәтен төшөрөгөҙ. Мөмкин булһа, берәй ҡурайсы менән осрашыу үткәрегеҙ.

4. Әсирлеккә төшкән разведчик Мәхмүттең дошманды нисек еңеүен аңлатығыҙ. Ошо турала текстан табып уҡығыҙ.
5. Разведчиктар тураһында уҡыған әҫәрҙәрегеҙҙе, ҡараған кинофильмдарығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
6. Кем ул — шпион? Ул разведчиктан нимәһе менән айырыла? Разведчик хеҙмәте тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ.
7. Интернеттан ҡурай моңон күсереп алып килегеҙ, дәрестә уны тыңлап, ниндәй көй икәнен әйтеп үтегеҙ.
8. Һеҙҙең мәктәптә ҡурайсылар түңәрәге бармы? Әгәр ҙә булһа, һеҙ ул түңәрәккә йөрөр инегеҙме?

**127-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәргә тамырҙаштарын табығыҙ.

Ел, ҡун (ҡуныу), тот (тотоу), үр.

**128-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәр ямғырға йә ҡарға ҡарата әйтеләләр. Шуларҙы ике төркөмгә бүлеп яҙығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ, хәтерҙә ҡалдырығыҙ.

Ҡырпаҡ, ләйсән, өрпәк, быҫҡаҡ, йомшаҡ, рәшә, күҙе, тамсыһы, бөртөгө, ырашҡы, йәшенле, саба яуыу, ыреү, ябалаҡлап яуыу, ҡойоп яуыу, баҫып яуыу.

**129-сы күнегеү.** Түбәндәге теҙмәләрҙең һәр береһендә бер һүҙ артыҡ. Табығыҙ һәм ни өсөн икәнен аңлатығыҙ.

1. Бүлем, бүлендек, бүлмә, бүләк, бүлеүсе, бүлек, бүлгес.
2. Ҡоролош, ҡорама, ҡорған, ҡоролма, ҡороҡос, ҡорал.
3. Баҫма, баҫымсаҡ, баҫым, баҫрау (нимә?), баҫҡыс, баҫыу (нимә?).

**130-сы күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙең тамырҙарын табығыҙ һәм һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

Ауылдаштарыбыҙ, сабынығыҙҙанмы, балаларығыҙҙыҡын, балаҡайҙарығыҙҙанмын.

Башҡорт телендә һүҙгә ҡушылған ялғау йә һүҙҙе әҙерәк үҙгәртә генә (мәҫәлән, өҫтәл — өҫтәл**гә**), йә яңы мәғәнәле һүҙ яһай (мәҫәлән, ел – ел**кән**, ел**пей**).

*Рәшит Ниғмәти*

## ЕҢЕҮСЕЛӘРГӘ ДАН!

Яу ораны һалды Ватан,
Ат атланды батырҙар —
Ил дошмандарын ҡыйратып,
Яуҙан еңеп ҡайтырҙар.

Ҡушымта: Һай, аҫыл ил улдары,
Яуҙан еңеп ҡайтығыҙ.
Һай, алтын ил ҡыҙҙары,
Ҙур дан менән балҡығыҙ.

Яуға оҙаттыҡ ирҙәрҙең
Аҫылын, батырҙарын.
Яуға оҙаттыҡ ҡыҙҙарҙың
Алтынын, матурҙарын.

Ҡушымта.

Яҙ ҡояшы кеүек балҡып,
Батырҙар ҡайтты яуҙан.
Яҙ ташҡыны кеүек урғып,
Йырҙары килә алдан.

Ҡушымта: Дан һеҙгә, ил улдары,
Ватан йырлай һеҙгә дан.
Дан һеҙгә, ил ҡыҙҙары,
Хөрмәтләй һеҙҙе Ватан.

Дошманды еңде егеттәр,
Еңделәр ил ҡыҙҙары.
Дандары ҡояш кеүектәр,
Алтындан йондоҙҙары.

Ҡушымта.

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ.

2. Йырҙа кемгә дан йырлана? Улар ҡасан һәм кемде еңгәндәр?
3. 1-се һәм аҙаҡҡы куплеттарҙы ҡушымталары менән бергә ятлағыҙ.
4. Көйөн өйрәнеп, йырҙы йырлап ҡарағыҙ.
5. Еңеү тураһында тағы ниндәй йырҙар беләһегеҙ? Ул турала русса ниндәй йырҙар бар?

## Башҡорт телендә һүҙьяһалыш

Башҡорт телендә яңы һүҙҙәр ялғауҙар ҡушыу, ике һүҙҙе бергә ҡушыу юлы менән яһала. Мәҫәлән: *балыҡ-сы, утын-лыҡ, аш-а, эш-лә, аҡыл-лы; ҡулъ+яулыҡ, көн + бағыш, бал + ғалаҡ.*

Ҡушма һүҙҙең беренсе өлөшө тартынҡыға бөтһә, икенсе өлөшө **я, ю** хәрефтәренә башланһа, улар араһына нәҙек һүҙҙәрҙән һуң **ь** билдәһе, ҡалын һүҙҙәрҙән һуң **ъ** билдәһе ҡуйыла:

*көн + яҡ = көньяҡ*
*ар + яҡ = аръяҡ*

**131-се күнегеү.** + билдәһе урынына **ъ, ь** хәрефтәренең тейешлеһен ҡуйып, исемдәрҙе күсереп яҙығыҙ.

Ҡул + яҙма, юл + яҙма, ал + япҡыс, аш + яулыҡ, көн + яҡ, төн + яҡ, ар + яҡ.

**132-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәр ниндәй һүҙҙәрҙән яһалғандар? Уларҙың тамырҙарын һәм ялғауҙарын табығыҙ, һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

Боронғо, тартынҡы, һуҙынҡы, төшөнкө, күтәренке, ҡыҫынҡы, бөгөнгө, яланғас, ултырғыс.

**133-сө күнегеү.** Һүҙҙәрҙе башҡорт теленә тәржемә итеп яҙығыҙ. Тамырҙарының аҫтына һыҙығыҙ.

Рыбак, стул, доверие, односельчанин, письменный, стройка, весло, сеялка, знание, доярка, земляк, лопата, молодость, игрушка, радость, берёзовая роща.

**134-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәр янына ниндәй сифаттар ҡуйып була? Өлгөләгесә яҙығыҙ.

Буран, ямғыр, көн, ел, болот.

Өлгө: *Юл — (ниндәй?) өҙәрем, оло, арба, йомро, ҡышҡы, түтә, сана, берләм, таҡыр, алама, яҡын, һарҡыу, бормалы...*

күсмә мәғәнәлә: *аҡ, ҡыҙыл, тормош, еңел, ҡырын, һуңғы, ҡатмарлы.*

Өлгөлә бирелгән һүҙҙәрҙең һәм һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Шул һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе индереп, хикәйә төҙөгөҙ.

**Башҡорт телендә һүҙҙәрҙе парлау, рифмалау юлы менән дә яңы ҡушма һүҙҙәр яһала ала: *сыбыҡ-сабыҡ* (рифма), *мал-тыуар* (парлау).**

**135-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәргә икенсе бер һүҙ өҫтәп, парлы һүҙҙәр яҙығыҙ.

Сыбыҡ - ..., малай - ..., ҡыҙ - ..., мал - ..., һауыт - ..., ығы - ..., ҡарт - ..., алам - ..., күкле - ..., оҙон - ..., барлы - ..., тора - ..., ир - ..., бала - ..., һирәк - ..., ауа - ... .

Өлгө: *Тимер-томор, ...*

*Вәзих Исхаҡов*

## МИҘАЛ ҺӘМ МАЛАЙ

Уның менән беҙ урамда осраштыҡ. Ун ике-ун өс йәшлек малай арттан килеп етте лә мине уҙып китте. Арҡаһына китап-дәфтәр һалған сумка аҫҡан, түшенә миҙал таҡҡан. Уның миҙалын күреп, мин дә аҙымымды тиҙләттем.

— Нимә, миҙал бирҙеләрме әллә? — тинем, уны ҡыуып етеп.

— Эйе, — тине ул эре генә. — Өләсәйем бүләк итте.

— Уның миҙалымы ни?

— Юҡ, олатайымдыҡы, — тине малай. — Һуғыштағы батырлығы өсөн наградлағандар.

Миҙалға күҙ һалдым. Унда, ысынлап та, «Батырлыҡ өсөн» тип яҙылғайны.

— Эйе, был миҙал менән һуғышта шәхси батырлыҡ күрһәткән яугирҙар ғына наградланған, — тинем мин дә.

Малайҙың күҙҙәре ялтырап китте. Ул миңә табан боролдо.

— Уҡытыусы ағай ҙа: «Олатайың ҡаһарман һуғышсы булған», тине.

— Ә хәҙер ул юҡмы ни?

— Былтыр үлде, — тине малай, ҡапыл күңелһеҙләнеп. — Быйыл мине Волгоградҡа алып бармаҡсы ине...

— Әллә шунда һуғышҡанмы?

— Эйе, — тине малай ғорур ғына. — «Был миҙалды шунда алдым» тип һөйләй торғайны.

— Хәҙер уны һин тағып йөрөргә булдыңмы?

— Юҡ, мин уны мәктәпкә малайҙарға күрһәтергә генә алып барҙым, — тип аңлатты малай. Ул олатаһынан ҡалған ошо ҡәҙерле ҡомартҡыға бик шат ине.

Уғаса булманы, урам сатына ла барып еттек.

— Миңә — тураға, — тине малай, алға күрһәтеп. — Хушығыҙ!

Ул йүгереп китеп барҙы. Ә мин, урам сатында туҡтап, олатаһының Бөйөк Ватан һуғышынан алып ҡайтҡан миҙалын түшенә таҡҡан был малай артынан йылмайып ҡарап ҡалдым. Ауыр һуғыш йылдары, фронттан орден-миҙалдар тағып ҡайтҡан ағайҙар күҙ алдыма килеп баҫҡандай булды. Ә яуҙан ҡайтмағандар ҙа аҙ түгел бит... Фашизмға ҡаршы һуғышта егерме ете миллион совет кешеһе башын һалды. Беҙҙең бөгөнгө бәхетле, тыныс тормошобоҙ, киләсәгебеҙ өсөн һәләк булды улар. Быны онотторға беҙҙең һис хаҡыбыҙ юҡ.

1. Хикәйәсе ни өсөн малай менән һөйләшә башлаған?
2. «Батырлыҡ өсөн» миҙалын кемдәргә бирәләр?
3. Хикәйәсе ни өсөн малайҙан: «Хәҙер уны һин тағып йөрөргә булдыңмы?» — тип һораған?
4. Миҙал таҡҡан малай нимәләрҙе хикәйәсенең хәтеренә төшөрә?
5. *Олатайымдыҡы, күҙҙәре ялтырап китте, уғаса булманы, онотторға хаҡыбыҙ юҡ* һүҙбәйләнештәрен рус теленә тәржемә итегеҙ.

6. Хикәйәнең ҡайһы өлөшөн сәхнәләштереп була? Эшләп ҡарағыҙ.
7. Беренсе абзацты диктант итеп яҙығыҙ.
8. Хикәйәне Мостай Кәримдең «Өс таған» повесынан алынған «Дан — кәпәс түгел» тигән өҙөк менән сағыштырығыҙ. Ата-бабалар ҡаһарманлығына, уларҙан ҡалған дан-шөһрәткә, наградаларға ҡарата мөнәсәбәт, уларҙың тәрбиәүи әһәмиәте тураһында әңгәмә үткәрегеҙ.

**136-сы күнегеү.** Беренсе һәм икенсе бағаналағы һүҙҙәрҙе тура килтереп ҡушма һүҙҙәр төҙөгөҙ.

| | |
|---|---|
| көн | яулыҡ |
| алпан | түш |
| аш | Ҡыйғы |
| ҡыҙыл | Етегән |
| Үрге | байыш |
| бала | толпан |
| Оло | эне |
| ағай | күл |
| Аҡ | аға |

**137-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ. Ҡушма һүҙҙәрҙең нисек яһалыуын аңлатығыҙ.

Лиственница, север, лебедь, черепаха, скатерть, яблоня, жаворонок, детвора, продукты, одежда, посуда, Ново-Белокатаево, Верхне-Серменево, Большой Инзер.

**138-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙән ҡушма һүҙҙәр яһағыҙ. Ниндәй үҙгәрештәр булыуын күрһәтегеҙ.

Аҡ + иҙел; бал + ҡалаҡ; Яҡты + күл; ҡар + ҡош; яр + ҡанат; тере + көмөш; аяҡ + өҫтө; ҡырҡ + аяҡ.

**139-сы күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙән ялғауҙар ярҙамында ҡылымдар яһағыҙ. Яһалған һүҙҙәр **ни эшләй**? һорауына яуап бирһен.

Киң, йүн, аҡ (белый), һимеҙ, юҡ, төҙ (прямой), һыуыҡ, уйын, ел, бәрәс, алма (яблоко), тулы, рәхәт, бер, һау (здоровый), йылы, еҫ, ас (голодный), ныҡ, аҙ, моң.

## АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ

Ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәренең авторы билдәле түгел, ул — дөйөм халыҡтыҡы. Шуға уны һәр кем үҙенеке тип иҫәпләй һәм үҙенсә башҡара. Мәҫәлән, бер үк әкиәтте төрлө кеше төрлөсә һөйләй. Ә бына әҙәби әҫәрҙәрҙең һәр береһенең конкрет авторы бар, улар, ғәҙәттә, китап булып баҫылып сыҡҡандар, һәм уларҙы кем нисек теләй, шулай үҙгәртә алмай.

Яҙыусылар, үҙҙәренең әҫәрҙәрен ижад иткәндә, йыш ҡына ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрен файҙаланалар. Бигерәк тә әкиәттәр, легендалар, йырҙар әҙәби әҫәрҙәр составында йыш осрай, ә мәҡәлдәр һәм әйтемдәр әҙәби әҫәрҙәрҙең телен байытыуға, образлы итеүгә булышлыҡ итә.

Әҙәбиәттә ауыҙ-тел ижады жанрына ҡараған әҫәрҙәр ҙә йыш осрай. Жәлил Кейекбаевтың, Рәми Ғариповтың, Розалиә Солтангәрәеваның, мәҫәлән, ҡобайырҙар ижад итеүе билдәле. Яҙыусылар әкиәт тә ижад итәләр. Уларҙы әҙәби әкиәт тип йөрөтәләр.

*Рәшит Назаров*

## ТРАКТОРСЫ ЙЫРЫ

Колхоз ҡыры,
Хеҙмәт йыры —
Минең шатлығым.
Өҫтөм — ҡара,
Тик һин ҡара
Күңел сафлығын.
Тар кабина
Төйәк миңә
Эштә сағымда,
Бензин еҫе
(Хушбуй төҫлө!)
Тирә-яғымда.

Яҡты көндәр,
Айлы төндәр —
Дуҫтарым минең.
Маҡтаулы эш,
Өлкән бурыс
Тапшырған илем.
Шуға ла беләк
Ял теләп,
Талыҡмай эштән.
Тимер моторға
Минең йөрәгем
Ҡушылып үҫкән!

1. Нимә ул *хеҙмәт йыры?* Хеҙмәт ниндәй осраҡта йырға әйләнә? Йырһыҙ хеҙмәт тә буламы? Һеҙҙең үҙегеҙҙең хеҙмәт йырын ишеткәнегеҙ йәки үҙегеҙ йырлағанығыҙ бармы?
2. 2-се строфала *ҡара* һүҙе ике урында ҡулланыла. Улар икеһе ике һүҙме, әллә бер үк һүҙҙең ике мәғәнәлә ҡулланылышымы? Ошоға оҡшатып, түбәндәге һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ:

| | |
|---|---|
| йәш — слеза | ал — ... |
| йәш — ... | ал — ... |
| йәшен — ... | һал — ... |
| йәшен — ... | һал — ... |

3. Шиғырҙың һуңғы өс юлын иғтибар менән уҡығыҙ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн *тракторсының йөрәге тимер моторға ҡушылып үҫкән* икән? Былай тип кемдәр әйтә ала? Нисек уйлайһығыҙ, һеҙҙең йөрәгегеҙ нимәгә ҡушылып үҫкән? «Минең (йәки атайымдың, әсәйемдең, ағайымдың, дуҫымдың һ. б.) яраткан һөнәрем» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ.
4. Шағир ниндәй *өлкән бурыс* тураһында һүҙ алып бара? Һеҙҙең шундай бурысығыҙ бармы? «Бурыс» исемле кескәй хикәйә төҙөп яҙығыҙ.
5. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

## Ҡушма һүҙҙәр

Башҡорт телендә ҡушма һүҙҙәр рус телендәге кеүек ике тамырҙы ҡушыу юлы менән яһала: *ледокол — боҙватҡыс*. Башҡорт телендәге ҡайһы бер ҡушма һүҙҙәрҙең яһалышы үҙенсәлекле, йәғни рус телендәгегә оҡшамаған. Мәҫәлән: *кәзә һаҡалы, айыу көпшәһе* (һуңғы һүҙгә ялғау өҫтәлә); *ҡыйыш-мыйыш, малай-шалай* (ҡушма һүҙҙең икенсе өлөшө — мәғәнәһеҙ һүҙ).

**140-сы күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәр ниндәй ҡушма һүҙҙәрҙең өлөшө була ала? Мөмкин тиклем күберәк ҡушма һүҙҙәр яҙығыҙ.

Күл, тау, ағас, иҙел, кесе, иҫке, яңы, үрге.

**141-се күнегеү.** Беренсе бағаналағы һүҙҙәр кейем өлөштәрен аңлата. Шул өлөштәр башҡа бағаналарҙа һаналған һәр кейемдә буламы? Өлгөләгесә төркөмләп яҙығыҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| кеҫә | күлдәк | салбар | тун |
| яға | бейәләй | бишмәт | бүрек |
| балаҡ | пальто | кофта | толоп |
| ең | юбка | яулыҡ | пинжәк |

Өлгө: *Итәк — юбка, күлдәк.*

**142-се күнегеү.** Бирелгән темалар буйынса һөйләшеүҙәр үткәрегеҙ һәм хикәйәләр төҙөгөҙ.

1. Башҡортостандан ситтә йәшәгән дуҫыңа тәүге хатыңды яҙаһың. Уны беҙҙең республика менән нисек таныштырырһың?

2. «Тыуған ер менән таныштырыу». Ҡунаҡҡа килгән яҡын дуҫың йәки туғандарыңды үҙең йәшәгән ауыл тирәһендә (йә ҡалала) ҡайһы урындарға алып барыр инең? Ни өсөн? Ул урындар тураһында ниҙәр һөйләр инең? Үҙегеҙ йөрөргә билдәләгән маршрутты һүрәтлә. (Ҡалала ниндәй транспортҡа ултырып барыр инегеҙ?)

3. Үҙегеҙ йәшәгән ерҙән Өфөгә (йәки башҡа урынға) нисек барып була? Ентекләп аңлатығыҙ.

**143-сө күнегеү.** Башҡортостан тураһында әңгәмә үткәрегеҙ.

1. Беҙҙең республика нисек атала?

2. Башҡортостандың тәбиғәте тураһында ниҙәр һөйләй алаһығыҙ?

3. Башҡортостандың иң ҙур ҡалаһын, иң оҙон йылғаһын, иң ҙур күлен, иң бейек тауын, иң ҙур районын әйтә алаһығыҙмы?

4. Беҙҙең республиканың иң данлыҡлы һәм билдәле кешеләренән кемдәрҙе һанай алаһығыҙ?

5. Ағиҙел, Өфө, Асылыкүл, Уралтау, Ирәмәл, Ямантау, Һаҡмар, Ирәндек, Янғантау, Ыҡ — был һүҙҙәрҙе бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙ. Шуларҙың һәр береһе тураһында ниҙәр әйтә алырһығыҙ?

**144-се күнегеү.** Беренсе бағаналағы һүҙҙәрҙе икенсе бағаналағы һүҙҙәр менән тап килтерегеҙ, беренсе бағаналағы һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

| | |
|---|---|
| ҡарт | йыл |
| элекке | пальто |
| иҫке | бабай |
| аҡрын | холоҡ |
| шым | йоҡо |
| йыуаш | океан |
| тыныс | йөрөш |
| тымыҡ | тауыш |

**145-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәр – ҡушма һүҙҙәр. Һәр өлөштөң мәғәнәһен аңлатып ҡарағыҙ.

Ҡушамат, сынаяҡ, ҡарағат, алйырҙан, тутыйғош.

**146-сы күнегеү.** Алдағы эштәге һүҙҙәрҙең аңлатмаһы.

1. **Ҡушамат** — прозвище, ҡушма һәм ат һүҙҙәренән яһалған, **ҡушма** һүҙе аңлашыла, ә **ат** һүҙенең элегерәк исем тигән мәғәнәһе лә булған. Унан яһалған һүҙҙәр әле лә телебеҙҙә бик күп: атама (исем), атҡаҙанған (исем ҡаҙанған), атаҡлы (исеме билдәле), аталған (исемләнгән) һ. б. Шулай итеп, **ҡушамат** ҡушма исем, өҫтәп бирелгән исем тигәнде аңлата булып сыға.

2. **Сынаяҡ** — чашка, **сын** һәм **аяҡ** һүҙҙәренән яһалған. Сын — беҙ Ҡытай тип йөрөткән илдең исеме. Донъяла ла, ҡытайҙар үҙҙәре лә илдәрен Сина тип йөрөтәләр. Һатып алған тауарҙарығыҙҙың байтағында Made in China (Мейд ин Сина, йәғни Ҡытайҙа эшләнгән) тигән яҙыуҙы, моғайын, күргәнегеҙ барҙыр. Ә *аяҡ* һүҙе элегерәк бәләкәй һауытты ла белдергән. Әле лә ул ошо мәғәнәлә бер нисә һүҙҙә тороп ҡалған: *ҡашыҡ-аяҡ* (посуда), *аяҡсы* (тамада). Шулай итеп, *сынаяҡ* һүҙенең төп мәғәнәһе — Ҡытай һауыты. Ысынлап та, фарфорҙы иң тәүҙә Ҡытайҙа эшләйҙәр. Ә сынаяҡ фарфорҙан яһала ла инде.

Син (Ҡытай) һүҙе беҙгә Европа телдәренән ингән тағы ла бер нисә һүҙҙә осрай: апельсин — голланд телендә апель — алманы белдерә. Тәржемәһе: Ҡытай алмаһы. *Крепдешин* — *креп* француз телендә — ебәк, һәм был һүҙҙең мәғәнәһе — Ҡытайҙан килтерелгән ебәк.

3. **Ҡарағат** — смородина, ҡара һүҙе аңлашыла, ә **ҡат** [ҡ] өнө ике һуҙынҡы эргәһендә [ғ] өнөнә күскәнен беләһегеҙ) — боронғо башҡорт һүҙе, емеш тигәнде белдерә. Тағы ла өсҡат исемле уҡмашҡан өс емеше булған урман ҡыуағы атамаһында был һүҙ һаҡланған.

4. **Алйырҙан** — хомяк, ала ирлән һүҙҙәренең икенсе өлөшө бер аҙ үҙгәртелеп яһалған ҡушма һүҙ.

5. **Тутыйғош** — попугай. Был һүҙҙең икенсе өлөшө ҡош икәне күренеп тора. Ә тутый тигәне — түтәй һүҙенең үҙгәртелгән формаһы. Элегерәк сағыу кейенеп, битен, иренен, керпек, ҡаштарын буяп йөрөргә яратҡан ҡатын-ҡыҙға түтәй тигән исем бирер булғандар. Тутыйғош матур, сағыу, төрлө-төрлө төҫтәргә буялған кеүек ҡош булғанға, был исем уға ла йәбешеп ҡалған.

*Зөлфәр Хисмәтуллин*

## УРМАН ҠУНАҒЫ

### I

Тау һыртының ҡарҙан әрселгән урынында ҡоралай тора. Мин, ағастар араһынан һиҙҙермәйенсә генә барып, уны күҙәтә башланым. Беҙҙең яҡта осрай торған иң матур йәнлек бит ул.

Ағас баштарынан ҡар бәҫтәре төшә лә бер тауышһыҙ ғына ергә барып бәрелә. Көн йылына төшкән, күрәһең. Ә миңә хатта эҫе. Арҡанан тир аға. Ҡоралай ҡуҙғалды. Ул һауала йөҙгән һымаҡ. Һоро арҡаһы әле сауҡалыҡтар араһында, әле таштар араһында емелдәй. Ул тауҙан түбәнгә табан бер нисә тапҡыр һикерҙе лә туҡтап ҡалды; оҙон, матур башын юғары күтәрҙе, үткер күҙҙәре менән тирә-яҡты һөҙөп сыҡты. Һәм тағы ла ғәмһеҙ генә үлән ашай башланы.

Шул ваҡытта ҡоралайҙан алыҫ түгел бүре күреп ҡалдым. Ул, таштарға ышыҡланып, боҫоп ҡына ҡоралайға табан килә ине. Йыртҡыс ҡоралайҙы күптәнән бирле һағалап йөрөгән, күрәһең. Асыҡ урындарҙа ул бөтөнләй боҫоп ҡына бара. Минең йөрәгем сығырҙай булып тибә башланы. Ни эшләргә? Атыуҙың файҙаһы юҡ. Ара алыҫ. Етмәһә, минең пуля менән яһалған патроным да юҡ.

Ләкин ни эшләп һөжүм итмәй һуң ул? Ниңә ҡоралайға яҡын бармай.

Ҡоралай туҡтау менән, бүре лә туҡтап ҡалды.

Бүренең хәйләһен мин шунда ғына аңланым. Асыҡ тау башында, ҡар иреп бөткән урында, ҡоралайҙы ҡыуып етеүе ҡыйын. Шуға күрә йыртҡыс буласаҡ ҡорбанының тау итәгенә, ҡар тәрән урынға, төшкәнен көтә һәм шунда ғына һөжүм итергә теләй ине.

Ҡоралайҙың шул тиклем һаҡһыҙлығына минең асыуым килде. Ел икенсе яҡтан иҫкәндер инде. Юғиһә дошманын һиҙгән булыр ине.

Ҡоралай, бөтә һаҡлығын онотоп, аҫҡа табан төшә башланы. «Ҡайҙа бараһың һин? — тип әрләнем мин эсемдән. — Бүренең ауыҙына үҙең инәһең бит!»

Бүре берәй төрлө һаҡһыҙлыҡ күрһәткәндерме, әллә ел арттан иҫә башлағандырмы, ҡоралай башын күтәрҙе лә ҡатып ҡалды. Унан кәүҙәһен һуҙҙы, бер аҙ сүгә төшөп, бик бейек һикерҙе һәм, аяғы ергә теймәйенсә, саба башланы. Бүре лә, хәҙер йәшеренеп тормайынса, уның артынан төштө. Ҡоралай бер нисә тапҡыр артҡа һикерҙе, унан һуң туҡтап, тау битләүе буйлап ҡасты. Ләкин барған һайын уларҙың аралары ҡыҫҡарҙы. Ҡоралай боролған һайын, бүре уның юлын киҫеп алдына сығырға тырышты. Көтмәгәндә ҡоралай, йүнәлешен үҙгәртеп, тауға табан ынтылды һәм тар ғына һырт буйлап сапты. Ҡоралай барған һырт бейек ҡая менән бөтә, һәм ситкә һикерергә бер ниндәй мөмкинлек юҡ — текә. Миңә ҡоралай ҡая башына барып етер ҙә туҡтар, һәм йыртҡыс уны шунда уҡ ботарлап ташлар кеүек тойолдо.

Бына улар ҡыуышып бер-бер артлы бейек ҡая эргәһенә барып еттеләр һәм, туҡтап та тормайынса, башта ҡоралай, уның артынан бүре упҡынға һикерҙе. Унан һуң мин, йән тиргә төшөп, улар яғына табан йүгерҙем. Тауҙы урап, һәләкәт булған урынға килеү менән, аптырап ҡалдым. Был ни хәл? Бүре өҫтөндә ҡоралай баҫып тора. Яҡыныраҡ барҙым. Эйе, ысынлап та, шулай. Йыртҡыстың тәне әкрен генә ҡалтыранып ҡуйҙы. Был бүренең һуңғы һулышы ине. Ләкин ҡоралай ни өсөн бүре өҫтөндә баҫып тороуын һис тә аңлай алманым. Мин уның алдына уҡ килеп баҫтым. Ә ул һаман шаҡ ҡатҡан килеш тора. Мин уның башын һыйпап ҡараным, һәм ул торған урынынан ергә ауҙы. Икеһе лә үлгән булып сыҡты, тип уйланым мин.

Шул ваҡытта артымдан ҡыштырлаған тауыш ишетелде. Әйләнеп ҡараһам… олатайым. Яурынына үҙенең ике көбәкле мылтығын аҫып алған. Көтмәгәндә уның килеүенә ғәжәпләнеп ҡалдым.

— Ҡоралай ҙа имгәнгәнме әллә? — тип һораны ул бер нәмә лә булмаған шикелле.

— Үлгән…

— Үлмәҫкә тейеш ине. Ҡурҡҡандыр ул. Ҡоралай һикереүҙән генә үлмәҫ.

— Һин уның һикергәнен ҡайҙан беләһең?

Олатайым яуап биреү урынына йылмайып ҡына ҡуйҙы. Күрәһең, ул минең артымдан күҙәтеп йөрөгән.

— Олатай, ни эшләп ул бүре өҫтөндә баҫып тора ине?

— Үлемдән ҡотолор өсөн, — тине олатайым. — Ҡоралайҙың нисек һикергәнен күрҙеңме?

— Күрҙем.

— Ул башта бәләкәй ҡаяға, унан һуң ғына ергә һикерҙе. Бүре ҡоралайҙың хәйләһен аңламаны. Бик шәп сабып килеп, ул үҙен үҙе туҡтата алмай, тау башынан йығылып төштө. Ҡоралайға шул ғына кәрәк ине. Йыртҡыстың ятҡанын күреү менән, бәләкәй ҡаянан туп-тура уның өҫтөнә һикерҙе. Юғиһә бүренең үлмәй ҡалыуы ла ихтимал ине.

1. Бүре менән ҡоралай араһындағы алышты тасуирлап һөйләгеҙ.
2. Һеҙҙең урманда булғанығыҙ, йәнлек эҙҙәрен күргәнегеҙ бармы? Ололарҙан һорап, ҡайһы йәнлектең ниндәй эҙ ҡалдырыуын асыҡлағыҙ, һүрәтен төшөрөгөҙ.

**147-се күнегеү.** Түбәндәге ҡушма һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итегеҙ.

Көнбағыш, көньяҡ, ҡара ҡарға, терегөмөш, бала-саға, ҡатын-ҡыҙ, һауыт-һаба, бал ҡорто.

**148-се күнегеү.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәрҙе ҡуйып, һөйләмдәрҙе уҡығыҙ.

Яҙ етте. ... (с юга грачи) ҡайттылар. Тиҙҙән сыйырсыҡтар, ... (жаворонки) килер. Урамдарҙа гөрләүектәр аға. ... (детвора) бик шат.

## II

Беҙ икебеҙ ҙә ҡоралайға ҡараныҡ. Ул, олатайымдың һүҙен раҫлаған кеүек, башын күтәрҙе, торорға тырышып ҡараны. Ләкин ерҙән күтәрелә алманы, тағы ла башын ергә һалды.

— Ҡурҡҡан, һаман һушына килә алмай, меҫкен, — тине олатайым. — Ярар, беҙ уны аяҡҡа баҫтырырбыҙ әле. Өйгә алып ҡайтырға тура килә инде.

Мин бик шат инем. Уны үҙем тәрбиәләйәсәкмен.

— Һин ни эшләп бүрене мылтыҡтан атып ҡурҡытманың? — тине олатайым.

— Ҡоралай, ҡото алынып, көрткә инеп китер, тип уйланым.

— Бик дөрөҫ. Атҡан булһаң, бүрегә уны тоторға ғына ярҙам итер инең. Дөрөҫ эшләгәнһең. Һинән бик яҡшы һунарсы сығасаҡ...

Беҙ, ҡоралай менән бүрене һөргөгә һалып, өйгә алып ҡайтып киттек.

Иртән йоҡонан уяныу менән, ашыҡ-бошоҡ кейендем дә ҡоралай эргәһенә сыҡтым. Таң яңы беленә башлағайны. Һарай эсендә күҙгә төрткөһөҙ ҡараңғы. Мин һарайҙың эсенә индем, һәм шунда уҡ ҡыштырлаған тауыш ишеттем. Ҡоралай аяғына баҫып тора ине. Ул башын юғары күтәргән, үҙе йыш-йыш тын ала.

— Ҡурҡма, — тинем иркәләгән тауыш менән, — мин һинең ҡотҡарыусың бит, танымайһыңмы ни?

Ләкин ҡоралай мине аңларға уйламай ҙа. Яҡынлаша башлау менән, ҡорт саҡҡан кеүек, һарайҙан сығып уҡ китте һәм өс аяҡлап кәртә буйлап һикергеләп саба башланы. Бер аҙҙан һуң ул тынысланды, ләкин элекке кеүек үк үҙенә яҡын ебәрмәне. Мин күрмәгәндә генә, ул ышығыраҡ урынға барып тора ла теле менән йәрәхәтен ялай башлай.

Олатайым торғас, дарыулап, йәрәхәтен бәйләне һәм, аҫтына бесән түшәп, һарайға бикләп ҡуйҙы.

— Ашарға ҡуй ҙа сыҡ, — тине ул миңә. — Бимазалап йөрөмә.

Мин бөтәһен дә олатайым әйткәнсә эшләнем. Ишекте асып ашарға ҡуям да сығып китәм. Ләкин ҡоралай мин биргән нәмәләрҙең береһен дә ашаманы. Әгәр ул тиҫкәреләнеп ашамаһа, бер нисә көндән үләсәк бит. Урманға ебәреп булмай. Бүре уны шунда уҡ тотоп ашаясаҡ. Мин бөтәһен дә олатайыма һөйләп бирҙем.

— Асыҡһа ашар, — тине ул тыныс ҡына.

Ул йәнлектәрҙең ҡылыҡтарын яҡшы белә. Шулай ҙа был юлы ышанып етмәнем. Биш көн ваҡыт үтеп китте, ә ҡоралай һаман ашаманы. Йөндәре йәмһеҙ булып төйөрсөләнде, эсе бөршәйҙе, мороно тағы ослая төштө. Ул тәүге көндәрҙәге кеүек һарайҙан сығырға ла атылып тормай, миңә әйләнеп тә ҡарамай. Көндән-көн ябыға, ҡойолдороҡҡа әйләнә барған йәнлеккә ҡарап тороу миңә бик йәл ине.

Бер көн ғәҙәттәгесә бесән һалдым, һауытты йыуып һыу ҡойҙом һәм ек аша уны шым ғына күҙәтә башланым. Ул ҡыйыуһыҙ ғына бесән эргәһенә килде, уны еҫкәп ҡараны һәм теләр-теләмәҫ кенә бер нисә үләнде ҡапты. Мин шатлығымдан ҡысҡырып ебәрерҙәй булдым.

Ошо көндән башлап, ҡоралай ашай башланы. Һуңынан ул миңә шул тиклем өйрәнеп китте, ишекте асыу менән йүгереп килеп тә етә һәм, биргәнде лә көтөп тормайынса, ҡулымдан ашарға тотона.

Йәрәхәте лә күренеп төҙәлде, хәле яҡшырҙы, иртәнән алып кискә тиклем үҙ алдына уйнап йөрөнө. Тик тормаҫ өсөн әллә ниндәй хәйләләр таба. Ихатала тыныс ҡына атлап йөрөй ҙә көтмәгәндә, башын юғары күтәреп, ҡолаҡтарын һикертә һәм бышҡырып ебәрә. Унан һуң ихата буйлап саба башлай, әйтерһең дә, артынан бүре ҡыуа. Ә иң ҡыҙығы — уның һикергәнен ҡарап тороу. Тик торған урындан ул шул тиклем бейек һикерә ала, әгәр мин уның яртыһы тиклем генә һикерһәм дә, мәктәптә беренсе урынды алған булыр инем. Һикереп арыһа, бағана эргәһенә килеп һөҙөшөргә тотона. Бер-ике аҙым артҡа сигенә лә бөтә көсөнә бағананы килеп һөҙә. Унан һуң тағы ла артҡа сигенә.

Бер көн олатайым ҡоралайҙың яраһын ҡараны ла:

— Сығарырға кәрәк, урманын һағынғандыр, үҙ көнөн үҙе күрһен инде, — тине.

Тау битләүҙәрендә, яландарҙа ҡар иреп бөттө. Тау баштарынан шарлауыҡтар аға. Яҙ ҡояшы ағас араларында йәшеренеп ятҡан ҡарҙарҙы ла иретә. Ә уйһыулыҡтарҙа һәм тау битләүҙәрендә йәшел үләндәр күренә башланы. Хәҙер ҡоралайға бер ниндәй йыртҡыс та ҡурҡыныс түгел ине. Мин ҡапҡаны астым да, үңәсенән тотоп, уны тышҡа сығарҙым. Ул аҡыллы ҡара күҙҙәре менән миңә ҡараны һәм, рәхмәт әйткән һымаҡ, башын һелкте лә тигеҙ аҙымдар менән, ашыҡмайынса, урманға табан атланы. Урман янына еткәс, ул, башын бороп, беҙҙең яҡҡа ҡараны һәм, күҙ асып йомғансы, ағастар араһына инеп китте.

— Хәйерле юл! — тип ҡысҡырҙым мин. — Һаҡ бул, урманда бүреләр күп!

1. Малайға характеристика бирегеҙ. Уның ниндәй сифаттары һеҙгә оҡшаны?

**2.** Тәбиғәтте, ҡырағай йәнлектәрҙе, ҡоштарҙы һаҡлау ни өсөн кәрәк? Шул турала әңгәмә ойоштороғоҙ.

**149-сы күнегеү.** Бирелгән һорауҙарға тулы яуаптар яҙығыҙ.

1. Һиңә туған тел дәрестәрендә ниндәй эштәр оҡшай?
2. Быйыл уҡыған әҫәрҙәрҙең ҡайһылары нығыраҡ оҡшай? Ниңә?
3. Ниндәй шиғырҙарҙы яттан һөйләй алаһығыҙ?

## Фразеологик берәмектәр

Ҡайһы бер һүҙ теҙмәләре, үҙҙәренең төп мәғәнәләрен белдермәйенсә, икенсе төрлө мәғәнәләр аңлаталар. Бындай һүҙ теҙмәләрен **фразеологик берәмектәр** тиҙәр (башҡортса: **нығынған һүҙбәйләнештәр).** Мәҫәлән: табанын ялтыратты — *ҡасты,* ете ҡат ер аҫтында — *бик алыҫта*, һә тигәнсе — *бик тиҙ*, ҡуш йөрәкле — *батыр* һ. б.

**150-се күнегеү.** З. Хисмәтуллиндың «Урман ҡунағы» тексында нығынған һүҙбәйләнештәр бармы? Эҙләп ҡарағыҙ әле.

**151-се күнегеү.** Нөктәләр урынына тейешле фразеологик берәмекте ҡуйығыҙ.

1. Быға тиклем ... кенә йәшәгәнмен икән. *(Ғ. Ибраһимов)* 2. Сәмиғулла ... ултырған урынынан ырғып торҙо. *(Ж. Кейекбаев)* 3. Барыһы ла ... йоҡлайҙар. *(Ғ. Дәүләтшин)* 4. Аптырашта ҡалған Зәйтүнәнең ... . *(Ғ. Ибраһимов)* 5. Егет өсөн егерме лә еткән, ... алтмыш та аҙ. *(Б. Бикбай)*

*Белешмә: йән белмәй, май эсендәге бөйөр кеүек, күҙ асып йомғансы, асыҡ ауыҙға, күҙҙәре дүрт булды.*

Һөйләмдәрҙе телдән руссаға тәржемә итегеҙ.

**152-се күнегеү.** Рус һәм башҡорт телдәрендә мәғәнәләре яғынан тура килгәндәрен парлап яҙығыҙ.

| *башҡорт телендә* | *рус телендә* |
| --- | --- |
| балтаһы һыуға төшкән | молоко на губах не обсохло |
| ҡыҙыл ҡар яуғас | яблоку негде упасть |
| танау аҫты кипмәгән | как в воду опущенный |
| башы һуҡҡан яҡҡа | кататься как сыр в масле |
| май эсендәге бөйөр кеүек | после дождика в четверг |
| энә төртөр урын юҡ | куда глаза глядят |
| ҡапсығыңды тот | быть на седьмом небе |
| ҡурҡҡанға ҡуш күренә | в подмётки не годится |
| тырнағына ла тормай | держи карман шире |
| түбәһе күккә тейеү | много шуму из ничего |
| яр аҫтынан яу сығарыу | у страха глаза велики |
| табан ялтыратыу | только пятки засверкали |

**153-сө күнегеү.** Башҡорт һәм рус телдәрендә иҫәпте белдергән һүҙҙәре булған яҡын мәғәнәле фразеологизмдарҙы сағыштырығыҙ. Ике телдә лә һандарҙың тап килеүенә йә тап килмәүенә иғтибар итегеҙ.

1. Обеими руками — ҡуш ҡуллап.
2. Заблудиться в трёх соснах — ике ағас араһында аҙашыу.
3. За семью замками — ете ҡат ер аҫтында.
4. Один в поле не воин — бер тарынан бутҡа булмаҫ.

**154-се күнегеү.** Түбәндәге фразеологик берәмектәрҙең һәр береһенең бер нисә мәғәнәһе бар. Һәр фразеологизмдың ике мәғәнәһен билдәләгеҙ.

Аяҡҡа баҫтырыу; ҡулға алыу; бүреһе олоу; ҡул аҫтында; өҫкә сығыу.

Өлгө: *йән биреү — үлеү; теләп эшләү; үҫеү.*

**155-се күнегеү.** Һөйләмдәрҙе төҙәтеп яҙығыҙ.

Күп тә түгел баҡса алыуына Айраттарҙың артыҡ. Тора ынтылып шунда атаһы менән әсәһе буш ваҡыттарында. Тырышалар алып барырға унда балаларын да.

**156-сы күнегеү.** Бирелгән темалар буйынса һөйләшегеҙ.

1. Олатайҙарығыҙ йәшәгән ауыл (ҡала) ҡайҙа урынлашҡан? Унда ниндәй йылға, күл, тау һ. б. бар? Унда нисек барып була?

2. Һеҙҙең баҡсағыҙға (туғандарығыҙҙың баҡсаһына) нисек барырға?

**157-се күнегеү.** 150-се күнегеүҙәге эштең яуабы.

Ауыҙына инәһең, аяғы ергә теймәйенсә, йән тиргә төшөп, аяҡҡа баҫтырырбыҙ, ҡото алынып, күҙгә törtкөһөҙ, ҡорт саҡҡан кеүек, күҙ асып йомғансы.

*Сәғит Агиш*

## ТУРЫҠАЙ

Бөтә йылҡылар, ҡышҡы ҡураға ҡайтыр алдынан, ҡар менән ҡапланған яланға һуңғы тапҡыр сығып киттеләр. Бында ҡарт малдар ҙа, шулай уҡ ҡолондар ҙа бар. Оло малдар, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, һуған кеүек йәшел, йомшаҡ үләндәрҙе ашарға, тамаҡтарын туйҙырырға тотондолар. Йәш ҡолондарға нимә, улар үҙҙәренең әсәләренең һөттәре менән туйынғандар, арҡалары, янбаштары ике бәләкәй мендәр кеүек күпереп тора. Үләнгә артыҡ иҫтәре китмәй, ҡойроҡтарын буйға һуҙып, муйындарын кәкрәйтеп алалар ҙа ялан буйлап сабалар, һикерәләр, уйнайҙар.

Турыҡай башта уларға ҡарап һоҡланып торҙо. Үҙенең йәш саҡтары, бала саҡтары иҫенә төштө. Уның да

шулай сапҡыһы, уйнағыһы, киң яланды бер итеп йүгергеһе килде. Тик ул бала түгел: уға быйылғы яҙ, дүртте тултырып, бишенсе йәште килтерҙе. Йылҡылар араһында ундайҙарға «егет» тип йөрөйҙәр. Шуға күрә ул үҙен ҡарттарҙы һәм йәштәрҙе һаҡларға бурыслы итеп һананы. Быларҙы ул бөтә ҡурҡыныстарҙан һаҡларға тейеш.

Турыҡайҙа көс юҡ түгел. Уның йөндәре, ҡояш нурҙарына сағылып, йылҡылдап тора. Ҡара ҡойроғо һәм ике яҡҡа һалынып төшкән ялдары ҡуйы, ауырҙар. Улар уға матурлыҡ бирәләр.

Бейәләрҙе һәм ҡолондарҙы, һис шикһеҙ, ул һаҡларға тейеш. Быны ул бик яҡшы төшөнә. Шуға күрә уларҙың янынан китмәй. Аҙ ғына тарала башлаһалар, бөтәһен дә йүгертеп бер урынға алып килә. Унан, ҡолаҡтарын торғоҙоп, тирә-яҡты ҡарай. «Берәй нәмә юҡмы икән?» — тип шикләнә. Шикләнмәҫ ине, ул бабаларының, аталарының «бүре» тигән уҫал йыртҡыс тураһында һөйләгән ваҡиғаларын, әкиәттәрен хәтерләй...

Бына бер ваҡыт көнбайыш яҡтан ниндәйҙер ҡара нөктәләр күренде. Турыҡай, ҡолаҡтарын торғоҙоп, шул яҡҡа ҡарай башланы. Был нөктәләр туп-тура уларға табан киләләр. Яй ғына түгел, шәп киләләр. Турыҡай уларҙың һандарын белергә тырыша. Береһе алдан килә. Уның артынан тағы ла дүртәү күренә.

Юҡ, былар, һис шикһеҙ, бүре булырға тейештәр. Эттәр ни эшләп ул яҡтан килһендәр? Эттәр булһа, ауыл яғынан килерҙәр ине. Былар, әлбиттә, бүреләр.

Турыҡай бөтә йылҡыларҙы бер ергә килтереп ҡуйҙы:

— Берегеҙ ҙә, — тине, — бер ҡайҙа ла китмәгеҙ! Ҡолондарҙы, ябағаларҙы уртаға алығыҙ, ҙурҙар, баштарығыҙ менән түңәрәктең эске яғына ҡарап, ҡойроҡтарығыҙ менән түңәрәктең ситенә боролоп баҫығыҙ.

Бөтәһен дә шулай урынлаштырып бөтөргәс, үҙе ҡойроғон торғоҙҙо, муйынын дуғаландырып, матурлап ебәрҙе. Күкрәгеν киреберәк ҡуйғандай булды. Тамам һоҡланғыс ыҫпай бер баһадир хәленә килде.

Теге биш нөктә бөтөнләй яҡынлашты. Уларҙың бөтәһе лә һоролар, ҡыҫҡа йыуан муйынлы бүреләр ине.

Турыҡай уларҙың яҡын килеүҙәрен көтмәне. Баҫып торған ерендә йәшен тиҙлеге менән боролдо ла бүреләргә табан уҡ төҫлө атылды. Ул баҫҡан урындағы үләндәр, тамырҙары менән ерҙән һурылып, һауаға һикерҙеләр. Уның тулы көс менән баҫыуынан тупылдаған тауыштар ғына ишетелеп ҡалды.

Турыҡай бүреләр янына барып та етте, алдан килгән ҡарт бүренең елкәһенән алып, уң яҡҡа ырғытып та ебәрҙе. Ошо мәлдә икенсе бүре Турыҡайҙың ҡойроғона йәбешмәксе ине, ләкин Турыҡай быны һиҙеп ҡалды һәм артҡы аяҡтары менән уның яңағына бик ныҡ итеп тондорҙо. Бүренең күҙҙәренә бейешеп йөрөгән иҫәпһеҙ күп йондоҙҙар күренде, ҡойроҡ төбөнә ултырып, күккә ҡарап олорға тотондо. Турыҡай ошо арала тағы ла бер нисәһенең елкәһенән алып ырғытырға һәм тояҡтары менән яңаҡтарына тибергә өлгөрҙө. Яңаҡтарына алған һайын, бүреләр ултырып олойҙар.

Йылҡыларҙың эстәренә йылы инеп китте. Бәләкәйерәк ҡолон һәм ябағалар кеткелдәп көлә башланылар. Ололар үҙҙәренең йәш саҡтарындағы ғәйрәттәрен хәтерҙәренә төшөрҙөләр. Күренеш ҡурҡыныс һәм ҡыҙыҡлы төҫкә әйләнде.

Бүреләр, бөтә көстәрен йыйып, тағы ла ынтылмаҡсы булдылар. Быныһы ла уңышлы сыҡманы, хатта Турыҡай берәүһенең ҡойроғон да өҙөп сығарҙы. Аптырағас, улар ҡасырға булдылар — үҙҙәренең килгән яҡтарына һыҙҙылар. Турыҡай уларҙы сигендереү менән генә сикләнмәне, ҡайҙан килеп сыҡҡандар, шунда уҡ илтеп ташларға теләне.

Ул ҡойроҡло дүрт, ҡойроҡһоҙ бер бүрене ҡыуып китте. Еткән һайын һәр береһенең йә ҡойроғонан, йә елкәһенән алып ырғыта, йә тояғы менән яңаҡтарына, баштарына тибә ине.

Ун биш минуттан ул бөтөнләй күҙҙән юғалды.

Йылҡылар тағы ла ҡурҡыуға төштөләр, ләкин ҡарттар: «Бер нәмә лә булмаҫ, беҙҙең батыр Турыҡай улар менән генә көрәшә алыр», — тип тынысландылар.

Байтаҡ ваҡыт үтте. Ҡояш байыу, һалҡын төшә башлау менән, үҙе ҡыуып киткән яҡтан Турыҡайҙың ҡайтып килгәне күренде. Хәҙер ул ҡыҙып сапмай, аҡрын ғына юрта. Ике яҡҡа һалынып төшкән ҡара ялдары, һалмаҡ ҡына булып, бер юғары күтәреләләр, бер түбән төшәләр.

Йылҡылар янына килеп етеү менән, ул туҡтаны. Арыған һәм тирләгән, аҡ күбеккә батҡайны ул.

Йылҡылар иркенләп тын алып ебәрҙеләр, үҙҙәрен һаҡлаған батырға ҡарап һоҡландылар.

— Һыу эсергә ине! — тине Турыҡай.

— Юҡ, — тинеләр ҡарттар, — ярамай, тирең ҡатһын, унан һуң эсерһең. Тирең ҡатмайынса эсһәң, яныръһың.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе эҙләп табып, хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Уларҙы ниндәй мәғәнәлә ҡулланылыуҙарын асыҡлағыҙ.
2. *Турыҡай уҡ төҫлө атылды; Бүренең күҙҙәрендә иҫәпһеҙ күп йондоҙҙар күренде; Йылҡыларҙың эстәрендә йылы инеп китте* тигәндә һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Был һөйләмдәрҙе икенсе һүҙҙәр менән яҙып ҡуйығыҙ.
3. Текстан йылҡы малының төрлө исемдәрен яҙып алығыҙ. Уларға үҙегеҙ белгән башҡа исемдәрҙе лә ҡушығыҙ. Был һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.
4. Текстан Турыҡайҙы һүрәтләгән урынды табып, иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Уны нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ? Турыҡайҙың һүрәтен төшөрөгөҙ.
5. Турыҡайҙың бүреләр менән һуғышыуын тасуирлаған урынды бер нисә рәт уҡып, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Аҙаҡ шуны изложение итеп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшереп, баһалағыҙ.
6. Текст буйынса тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.

**158-се күнегеү.** Фразеологик берәмектәрҙе белешмәләге һүҙҙәр менән парлап яҙығыҙ.

Айыу майы һөрткән; күҙе маңлайына менде; ҡойроҡто һыртҡа һалыу; сепрәк баш; елкәһе соҡор; ут йотоу; хәтерҙән сығыу; кәкре ҡайынға терәтеү; эт күрмәгәнде күреү; борсаҡ ярыу; дуға бөгөү; битен йыумаған; бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға; бармаҡ менән һанарлыҡ.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *тыңламай, ыҙалау, алдау, аңра, аптыраны, урлаған, ҡасыу, ялҡау, өшөү, әҙ, оятһыҙ, онотоу, ҡайғырыу, маҡтаныу.*

**159-сы күнегеү.** Түбәндәге ҡылымдарҙы ике төркөмгә бүлегеҙ. Беренсе төркөмгә аттың эшен белдергән һүҙҙәрҙе, икенсеһенә кешенең атҡа ҡарата эшен белдергән һүҙҙәрҙе яҙығыҙ, һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Хикәйәлә ошо һүҙҙәр осранымы?

Егеү, кешнәү, менеү, юртыу, менгәшеү, тышау, сабыу, эйәрләү, туғарыу, юрғалау, һөрөнөү, дағалау, өркөү, сығынлау, мисәү, һуғарыу, ҡолаҡ ҡайсылау, аунау, йыуыу, юшау, ашатыу, үрәпсеү, ауыҙлыҡлау, бәйләү, йомрайыу, көтөү, бышҡырыу, сабыштырыу, ҡолонлау, биленләү, ҡарау, шаҡарыу.

Өлгө: *1. Саба, кешнәй, ... 2. Егә, эйәрләй, ...*

Ошо һүҙҙәрҙе индереп, хикәйә төҙөгөҙ.

**160-сы күнегеү.** Бирелгән фразеологик берәмектәрҙең барлыҡҡа килеүен үҙегеҙсә аңлатып, хикәйә төҙөгөҙ.

Төп башына ултыртыу, тыумаған ҡолондоң билен һындырыу, ҡомдан арҡан ишеү, ике ағас араһында аҙашыу.

**161-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ һәм рус теленә тәржемә итегеҙ.

Шөшлө, шәшке, шамбы, шәре, шырау, шекәрә, шама, шаталаҡ, шомаҡа, шыбаға, шылыу, шыңшыу, шыя, шәлкем.

**162-се күнегеү.** Шиғыр юлдарын сәсмә формала яттан яҙығыҙ.

Туған телем тыуған еремдә
Яңғыраһа мәңге йыр булып,
Һис үкенмәҫ инем, гүремдә
Ятҡанда ла ҡара ер булып.

*(Р. Ғарипов)*

*Мәжит Ғафури*

## ҺАРЫҠТЫ КЕМ АШАҒАН?

*(Мәҫәл)*

Бер аусының бер һарығы ҡырҙа ҡалған,
Эҙләп тә тапмағандар, ул юғалған.
Бер-ике көн үтеп киткәс, беҙҙең аусы:
«Бүре ашаған һарыҡты», — тип хәбәр алған.

Быны ишеткәс, аусы сикһеҙ асыуланды,
Йыртҡыстарҙың был эшенә көйҙө, янды.
Һарыҡтың үсен алмай ҡалмамын, тип,
Януарҙарға ошолай тип хәбәр һалды:

«Ҡыҙғанып тора инем үҙем һеҙҙе,
Асыуланһам, ҡалдырмамын берегеҙҙе,
Һарығымды кем ашаған булһа, шуны
Талап итәм миңә тотоп биреүегеҙҙе».

Аусыны белә урманда һәр бер януар,
Был хәбәрҙе ишеткәстән таң ҡалдылар.
Аусыны тиҙерәк риза итәйек, тип,
Кәңәш өсөн бер урынға йыйылдылар.

Мәжлестә төлкө кәтип*, бүре рәйес**,
Рәйес һүҙ башлап әйтте: «Был ниндәй эш!..
Аусының һарығын кем ашаны? —
Танмайынса, ошо ерҙә әйтеү тейеш.

Шул эш өсөн саҡырҙым мин бында һеҙҙе:
Асыуланһа, аусы ҡырыр һәммәбеҙҙе.
Кем ашаһа, шуны биреп ҡотолайыҡ,
Тоғролоҡтан айырмағыҙ үҙегеҙҙе».

---

* *Кәтип* — секретарь.
** *Рәйес* — председатель.

Әүәл бүре: «Ашаманым», —
тине, танды,
Төлкө лә тоғролоғон һөйләп алды.
Һәммә йыртҡыс үҙҙәрен сафланылар.
Бер яҡ ситтә йыртҡыс түгел,
ҡуян ҡалды.

Тине бүре: «Ситтә тороп яңғыҙ үҙең,
Бур кешенең күҙе төҫлө ике күҙең.
Һарыҡты ашаған кеше һин түгелме?
Әйтеп ҡал, бында килеп, әйтер һүҙең!..»

Ҡуян меҫкен ҡурҡыуынан ҡалтыранды,
«Ашаусы мин түгел», — тип саҡ әйтә алды.
Ул шикле кеше һымаҡ ҡына яуап биргәс,
Бөтә йыртҡыс: «Ашаусы шул!» —
тип һөрән һалды.

Ашамай ҡуян һис бер ваҡытта ит.
Әйтә алманы, ашаған мин түгел, тип.
«Һарыҡты ашаған дуңғыҙ ошо икән, —
Тине бүре, — килтерегеҙ бәйләргә еп!»

Шул минутта әллә ҡайҙан еп таптылар,
Ҡуяндың муйынына еп таҡтылар.
«Уҫаллығың язаһын тарт бына инде!» —
тип,
Аусының ауылына оҙаттылар.

Бүре төҫлө йыртҡыстарға киңдер йыһан*,
Һәр ҡайҙа золом** күрер меҫкен ҡуян.
Зарарлы бәндә булып күренерһең,
Башҡаларға ҡылмаһаң да һис бер зыян.

---

* *Йыһан* — донъя.
** *Золом* — яфа.

1. Әҫәрҙә осраған бөтә яңы һүҙҙәрҙе дәфтәрегеҙгә яҙып алып, уларҙың мәғәнәләренә төшөнөгөҙ, бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
2. Мәҫәлдә һүрәтләнгән ваҡиғаның асылы нимәлә?
3. Бүре, төлкө образдарына характеристика бирегеҙ. Улар йөҙөндә шағир ниндәй кешеләрҙе күрһәткән?
4. Мәҫәлдә һүрәтләнгән төп ғәҙелһеҙлек нимәлә күренә? Ахыр сиктә ҡуян ни өсөн ғәйепле булып ҡалған? Әҫәрҙең һуңғы дүрт юлын иғтибар менән уҡып, мәғәнәһен аңлатып бирегеҙ.
5. Мәҫәлдең үҙегеҙгә оҡшаған бер өлөшөн ятлағыҙ.

Һүҙ аҙағындағы йә һүҙ башындағы һаңғырау **[к]**, **[ҡ]**, **[п]** өндәре, ике һуҙынҡы араһында йә **[р]** өнө янында шәп әйткәндә, яңғырау өндәргә әүереләләр. Мәҫәлән: *ҡаҙ — ҡыр ҡаҙы (ҡыр ғаҙы); күк — күк Ирәндек (күг Ирәндек); туп — туп алдым (тув̊ алдым).*

**163-сө күнегеү.** Һүҙҙәрҙе уҡығыҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| ваҡыт | ауыл | кеүек | вәзир |
| ваҡиға | ҡауын | еүеш | вәхши |
| ватыу | тауыҡ | әүәҫ | вәкил |
| Ватан | ҡыуаҡ | тәүлек | вәғәз |
| вәғәҙә | алыу | үҫеү | |
| Вәхит | тау | сәсеү | |

Башҡорт телендә **[в]** өнө юҡ. Шуға күрә башҡорт һүҙҙәрендәге **в** хәрефе **[в]** өнөн түгел, ә **[уы]** өнөн белдерә. Мәҫәлән, яҙыла: *ваҡыт*, уҡыла: *уаҡыт*.

**164-се күнегеү.** Һәр төркөмдән бер артыҡ һүҙҙе табығыҙ һәм аңлатығыҙ.

1. Эйәр, ҡойошҡан, айыл, ҡаптал (эйәр таҡтаһы), ҡанъяға (эйәр артына әйбер бәйләү өсөн бауҙар), өҙәңге, ҡамсы, үңдек (эйәр аҫтына һалына торған кейеҙ).
2. Картуф, ҡыяр, ҡарағат, кишер, сөгөлдөр, кәбеҫтә, ҡабаҡ.
3. Һыйыр, һарыҡ, кәзә, ҡаҙ, эт, ат, бесәй.

**165-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙең ниндәй хайуан, йәнлек, ҡошҡа ҡарағанын асыҡлағыҙ һәм өлгөләгесә яҙығыҙ.

Кешнәү, мөңрәү, баҡырыу, ҡытҡылдау, ҡаҡылдау, баҡылдау, өрөү, олоу, мыяулау, саҡырыу, һайрау, сырылдау, үкереү, сипылдау, ҡарҡылдау.

Ө л г ө: *һайысҡан шыҡырыҡлай.*

**166-сы күнегеү.** Һүҙҙәрҙе башҡортса яҙығыҙ.

Ку-ка-ре-ку, хрю-хрю, гав-гав, га-га-га, кря-кря, и-го-го, ку-ку, ква-ква, мур-мур.

**167-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Шулар менән һүҙбәйләнештәр йә һөйләмдәр төҙөгөҙ.

Лар-лор, сап-соп, жыу, ҡаптыр-ҡоптор, мырт, даңҡ, йылт, елбер-елбер, сырт, тырт-мырт, дөбөр-шатыр, һөрп-һөрп.

*Лев Толстой*

## ИКЕ ИПТӘШ

*(Мәҫәл)*

Ике иптәш урман буйлап китеп барғанда, ҡапыл ҡаршыларына айыу килеп сыҡҡан. Быларҙың береһе, ҡасып, ағас башына менеп киткән, икенсеһе ерҙә тороп ҡалған. Ул, ни эшләргә лә белмәйенсә, ергә ятҡан да үлгәнгә һалышҡан. Айыу эргәһенә килеп еҫкәнә башлағас, хатта тын алыуын да туҡтатҡан. Айыу уны ысынлап та үлгән тип уйлаған: еҫкәнеп торған-торған да боролоп китеп барған.

Ул киткәс, ағас башындағыһы төшкән дә, иптәшенән көлә-көлә:

— Айыу һиңә нимә тине? — тип һорай икән.

— Айыу миңә, яҡшы кеше, ҡурҡыныс килгәндә, иптәшен ташлап ҡасмай, тине, — тип яуап биргән иптәше.

*(Гөлнур Сәғитова тәржемәһе)*

үлгәнгә һалышыу — притворяться мёртвым

1. *Һалышыу* һүҙе менән тағы бер нисә һүҙбәйләнеш төҙөп яҙығыҙ. Мәҫәлән: *аңламағанға һалышыу*.
2. Айыу ниңә ерҙә ятҡан кешегә теймәй икән? Уның үлгәненә ысынлап та ышандымы, әллә йөлләнеме икән? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Ысынбарлыҡта шулай булыуы ихтималмы?
3. Юлдаштарға характеристика бирегеҙ. Һеҙ уларҙы нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ? Һүрәттәрен төшөрөгөҙ.
4. Был әҫәрҙе автор ни өсөн мәҫәл тип атаны икән? Әҫәрҙең йөкмәткеһенән сығып, шуның дөрөҫлөгөн дәлилләп ҡарағыҙ.
5. Кем ул Лев Толстой? Уның тағы ниндәй әҫәрҙәрен уҡығанығыҙ йәки ишеткәнегеҙ бар? Күмәкләп иҫегеҙгә төшөрөгөҙ ҙә исемлеген төҙөп яҙығыҙ.
6. Ошоға оҡшатып үҙегеҙ мәҫәл яҙып ҡарағыҙ.

## МӘҪӘЛ ҺӘМ АЛЛЕГОРИЯ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Мәҫәл — бик үҙенсәлекле әҙәби жанр. Мәҫәлдең төп геройҙары — хайуандар, ҡоштар, үҫемлектәр. Улар кеше һымаҡ эшләйҙәр, һөйләшәләр. Йәғни мәҫәлдәрҙә, хайуандар тураһында һүҙ барһа ла, кешеләрҙең тормошо сағыла. Был һүрәтләү алымы **аллегория** тип атала. Тимәк, **мәҫәл** — аллегорияға ҡоролған шиғри әҫәр ул.

Мәҫәлдә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттә етешһеҙлектәр тәнҡитләнә, яуызлыҡҡа, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы тороу кәрәклеге әйтелә. Автор әйтергә теләгән фекер, ғәҙәттә, мәҫәлдең аҙағында өгөт-нәсихәт (мораль) рәүешендә бирелә. («Һарыҡты кем ашаған?» мәҫәленең һуңғы дүрт юлына иғтибар итегеҙ.) Был өгөт-нәсихәт автор фекерен дөйөмләштереп, йомғаҡлап ҡуя.

# ЙӘЙ

*Сөләймән Муллабаев*

## ЙОМАРТ ЙӘЙ

Беҙ йомарт йәйҙә
Барҙыҡ ҡунаҡҡа,
Емешкә бай ер —
Йәшел ҡыуаҡҡа.

Йәй беҙҙең алға
Ашъяулыҡ йәйҙе,
Ашамлыҡтарын
Мул итеп өйҙө.

Йәнең ни теләй,
Төрлөләре бар:
Ер еләгенең
Эреләре бар.

Ул сейә, алма,
Бик күп бөрлөгән.
Бөрлөгәндәр ҙә
Бешкән төрлөнән.

Ҡара ҡарағат
Һәм дә суҡ муйыл.
Йыйып бөтөрлөк
Түгел, күп быйыл.

Бөтәһенән дә
Беҙ ауыҙ иттек,
Һый-хөрмәтенә
Ҙур рәхмәт әйттек.

1. *Йыйып бөтөрлөк түгел, ауыҙ иттек* һүҙбәйләнештәрен руссаға тәржемә итеп яҙығыҙ.
2. Йәйҙең йомартлығын шағир нимәлә күрә? Быға текстан миҫалдар килтерегеҙ, һеҙҙеңсә нисек, йәй кеүек, яҙ, көҙ, ҡыш та йомарт була аламы?
3. Текстан емеш-еләк исемдәрен яҙып алығыҙ. Улар тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.
4. Шиғыр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәрегеҙ.
5. Шиғырҙы ятлағыҙ.

*Булат Рафиҡов*

# ЙОНДОҘ ҺАНАУСЫ МАЛАЙ

## I

Мин яр аҫтында ҡармаҡ һалып ултыра инем. Ҡалҡыуыс һыу өҫтөндә әкрен генә бәүелә. Ҡармаҡҡа ҡуйылған һимеҙ селәүсенде балыҡтар тәмләргә лә теләмәй — мин уларҙы әрләһәм дә, ҡармаҡҡа яҡын да килмәйҙәр.

— Ҡармағыңды тәлмәрйен менән емлә, — тигәнгә артыма әйләнеп ҡараным. Унда, ҡулына йүгән тотоп, ялан аяҡлы бер малай баҫып тора ине.

— Суртан да, йәйен дә тәлмәрйенде бик ярата, — тип өҫтәне был.

Малай минең йәштәр самаһында ине. Уның белдекле булып һөйләнеп тороуы минең асыуға тейҙе.

— Юлыңда бул, Йәйен Иваныч! — тип ҡул һелтәнем, өлкәндәрҙән ишеткән һүҙҙе хәтерләп. Ул үпкәләмәне.

— Ышанмаһаң, ана, Мөхтәр бабайҙан һора. Йәйен күп был ятыуҙа. Мөхтәр бабай элек уларҙы көн дә тота торғайны.

— Кем ул, балыҡсымы?

— Юҡ, конюх. Бергә ат көтәбеҙ. Әле ауырып тора.

Мин инде уға ҡыҙыҡһыныбыраҡ ҡараным. Әйе, минең ҙурлыҡ малай. Иҫке һалдат гимнастёркаһы, галифе салбар кейгән. Һары сәсле, бикябыҡ. Ә күҙҙәре «Әйҙә дуҫ булайыҡ!» тип саҡырып тора һымаҡ. Ат көтөүе дөрөҫтөр, юғиһә ниңә уға йүгән һөйрәп йөрөргә? Минең йомшара башлағанымды һиҙеп, яныма һикереп төшә һалды.

— Әйҙә танышайыҡ. Мин Азамат булам.

Исемемде әйтеп, тегенең һуҙған ҡулын ҡыҫтым.

Үҙемдең ҡалала һөнәрселек училищеһында уҡыуымды, әле өләсәйемә ҡунаҡҡа килеүемде әйттем. Атайым менән ағайымдың һуғышта үлеүен, ярым етем икәнлегемде ишеткәс, Азамат миңә тамам эҫенде лә китте.

Уның да атаһы һуғыштан ҡайтмаған икән, әсәһе менән икәүләп көн итәләр. Яҙмыш уртаҡлығы кешеләрҙе тиҙ яҡынлаштыра. Беҙ ҙә тиҙ аңлаштыҡ. Бөгөн кискә Мөхтәр бабай ысулы менән эре балыҡ тотоп ҡарарға килештек.

Азамат дүрт бармағын ауыҙына ҡапты ла әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе. Усын ҡолағына ҡуйып, ниҙер тыңлап торҙо ла тағы һыҙғырҙы. Минең аптырап ҡарап тороуымды күреп, ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Хәҙер килеп етәсәк.

— Кем? Мөхтәр бабаймы ни?

— Юҡ, нишләп? Саптар тайҙы әйтәм, һыҙғырып саҡырғанға килергә өйрәтеп алдым үҙен. Ат йәнлеһең, ти Мөхтәр бабай.

Мин ышанмайыраҡ бер яр башына, бер Азаматҡа ҡараным. Уның ауыҙы йәнә йырылды.

— Тояҡ тауышын ишетәһеңме? Саптар бында килә.

Ысынлап та, ҡайҙалыр ат бышҡырҙы, тояҡтар тыпырланы. Бер аҙҙан беҙҙең тапҡырҙа шат кешнәү ишетелде һәм һомғол кәүҙәле тай күренде. Азамат кеҫәләрен һәрмәп ҡараны ла:

— Бер нәмә лә юҡ бит әле. Күстәнәс биргәнде бик ярата ла бит, — тип һөйләнде.

— Һин берәй ергә китергә булдыңмы әллә?

— Ауылға, Мөхтәр бабайҙың ҡармаҡтарын алып килергә. Һинекеләрҙе суртан йә йәйен сүп урынына ла күрмәй. Мин килгәнсе, һин тәлмәрйен тота тор, йәме!..

Азамат саптарға һикереп менде лә ауылға сапты, хатта йүгән дә кейҙереп торманы. Мин уның артынан бер аҙ ҡарап торҙом да тәлмәрйен ауларға тотондом. Һалҡын тәнле был мәхлүктәрҙән ерәнһәм дә, тотмай хәл юҡ. Беренсенән, дуҫҡа һүҙ биреп ҡалдым. Икенсенән, өләсәй янына бер ботлоҡ йәйен күтәреп ҡайтыуы!.. Унан да бәләкәйерәгенә мин риза түгел инем, әлбиттә...

Азамат әйләнеп килеүгә, мин унлап тәлмәрйен тотҡайным инде.

— Әҙерәк! — тине Азамат, ҡаштарын йыйырып. Шунан һүҙҙе тиҙ генә икенсе яҡҡа борҙо. — Яланда ҡыуышта ҡунырбыҙ, йәме? Өләсәйеңә һуғылып әйтеп киттем. Картуф күмеп ашарбыҙ.

Мин ҡыуанып риза булдым.

Беҙ икәүләп тағы унлап тәлмәрйен тоттоҡ. Уларҙы мәрйен кеүек итеп ҡармаҡтарға теҙеп сыҡтыҡ. Хәҙер ҡармаҡтар тағылған бауҙы йылға аша тартып бәйләргә генә ҡалды. Азамат сисенеп арьяҡҡа йөҙөп сыҡты ла шунда ҡыуаҡтар араһында шаптыр-шоптор килә башланы. Шымып ҡалды ла йылға аша ашығып бышылданы:

— Минең кейемдәрҙе йәшер! Тиҙерәк!..

Аптырап ҡалһам да, Азаматтың гимнастёркаһы менән салбарын йәһәт кенә күнәккә тыҡтым. Яр башында беҙгә табан сабып килгән ике һыбайлы малай күренде. Килеп еттеләр ҙә аттарын ҡапыл туҡтаттылар.

— Ҡарағыҙ әле, был ниндәй ҡарасҡы тағы? — тип ҡысҡырҙы береһе.

— Фуражкаһына кокарда тағып алған булған! — тип ҡушылды икенсеһе.

— Таҡмағайы! Барыбер ҡурҡаҡ!

— Ҡайҙан беләһең? Ауылға кисә генә килде бит ул.

— Әллә ҡайҙан күренеп тора патамушто.

Уларҙың шулай һөйләнеүенә минең асыу килде.

Нисек кенә тимә, ҡала һәм училище тормошо мине лә ҡайһы бер нәмәгә өйрәткәйне бит. Тегеләрҙе ғәжәпләндереп, юрамал ҡысҡырып һөйләндем:

— Был хәстрүштәрҙең береһе хәҙер үк үләсәк. Уныһын һыуға таш тағып ырғытырға!.. Икенсеһе ҡасырға маташыр, тик барып сыҡмаҫ! Мин башламаным, үҙҙәре ғәйепле!..

Шулай тип ҡысҡыра-ҡысҡыра яр башына атылып барып сыҡтым. Тегеләрҙең аттары өркөп китте, артҡа сигенә башланы. Малайҙарҙың береһе шул ыңғай сабырға тотондо. Бер үҙе ҡалғас, икенсеһе лә уға эйәрҙе. Мин уларҙы ҡысҡырып, һыҙғырып, хатта эт булып өрөп оҙатып ҡалдым.

**168-се күнегеү.** Бирелгән фразеологик берәмектәрҙең аңлатҡан мәғәнәләрен яҙығыҙ.

Ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ, сиртһәң һытылырға тора, ҡыҙыл ҡар яуғас, дүрт күҙ менән, күҙ асып йомғансы, һуйған да ҡаплаған, ауыҙ астырмайҙар, бер ҡатлы, ярыҡ барабан, ҡыл да ҡыбырлатмай, һүҙен ергә ташламай, оҙон ҡуллы, иләк ауыҙ, тел биҫтәһе.

Ошо фразеологик берәмектәрҙең өсәүһе менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

## II

Азамат, оялыуынандыр, ҡыуаҡ араһында йәшенеп, байтаҡ ултырҙы әле. Был ярға йөҙөп сыҡҡанда, дер-дер ҡалтырана, миңә тура ҡарамаҫҡа тырыша ине. Ә мин ғәжәпләнеүемде йәшерә алманым.

— Ниңә шул тиклем ҡурҡаһың уларҙан? — тип һораным.

— Улар бит һуғыш суҡмары!.. — тип мығырланы Азамат. — Бер кешегә икәүләп, өсәүләп йәбешәләр. Көстәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәйҙәр...

— Кем һуң улар?

— Бәй, аталары һуғыштан иҫән ҡайтҡанға маҡтаналар инде! Йәнәһе, улар хәлле, беҙ йолҡош. Аталары бесәндә ат егә, ә былары ат тышарға йөрөй. Киләләр ҙә бәйләнәләр.

Бер аҙҙан уйсан ғына итеп өҫтәп ҡуйҙы:

— Аттарҙы тыңлата белгәнем өсөн күрә алмай шикелле улар мине. Бигерәк тә саптар тай өсөн.

Шунан ул теге малайҙарҙы нисек ҡурҡыта алыуымды һорашты, үҙенең дә шундай хәйләгә өйрәнергә теләүен әйтте. Мин вәғәҙә иттем.

Күмеп бешергән картуф менән тамаҡ туйҙырып, бесән күбәһенә менеп яттыҡ. Ямғыр килһә, ҡыуыш эргәлә генә.

Ҡараңғы төштө. Күктә һанһыҙ йондоҙҙар балҡый.

— Мин ошолай, күккә ҡарап, таңға тиклем йоҡлай алмай ятам, — тип һөйләп китте Азамат. — Эй матур ҙа инде күк йөҙө! Шулай бит?

Бер аҙ шым ятты ла ҡапыл һорап ҡуйҙы:

— Һин Андромеда томанлығын таба беләһеңме?

Мин ул хаҡта ишетеп кенә белә инем, ә эҙләп табыу, күреү ҡайҙа инде! Шулай ҙа һораған булдым:

— Ниңә кәрәк ул һиңә?

— Уны миңә бүләк иттеләр.

— Нисек инде — бүләк иттеләр?! — Мин хатта тороп ултырҙым. — Ул һиңә нимә, ҡулъяулыҡмы ни?!

— Бына шулай, бүләк иттеләр ҙә ҡуйҙылар! — Азамат етди ине. — Берәүгә лә әйтмә, йәме?

Ул миңә ҡыҙыҡ ҡына ваҡиғаны һөйләне. Яңыраҡ ауылға каникулға бер ҡыҙ ҡайтҡан. Беҙҙән аҙ ғына өлкәнерәк икән, ҡалала техникумда уҡып йөрөй. Бына шул ҡыҙ ятыуға һыу инергә төшкән дә бата башлаған. Азамат уны күреп ҡалған да көс-хәл менән һөйрәп сығарған. Иң ҡыҙығы һуңынан башланған. Ҡыҙҙы ҡотҡарған өсөн рәхмәт әйтергә тәүҙә атаһы килгән. Ул Азаматҡа Германиянан алып ҡайтҡан матур бәкеһен бүләк итергә маташҡан. Азамат алмаған. Шунан ҡыҙҙың әсәһе килеп еткән, ул бүләккә күркә тотоп килгән. Алмағандар.

— Шунан? — тип ашыҡтырҙым мин Азаматты.

— Шунан ни... Кис сәй эсеп ултыра инек, теге ҡыҙ үҙе килеп инде. Күктән Андромеда томанлығын эҙләп тап, шул минең һиңә бүләгем булыр, ти. Тәүҙә рәхәтләнеп көлгәйнем дә...

— Хәҙер шуны эҙләйһеңме инде?

— Бирелгән бүләкте табып алырға кәрәктер ул.

Тағы бер аҙ өндәшмәй яттыҡ. Азамат һүҙен дауам итте:

— Теге малайҙар шул көндән һуң миңә бигерәк ҡаныҡты. Йәнәһе, мин герой булырға, гәзиткә эләгергә теләйем...

Иртәнсәк беҙ болонға таралышҡан аттарҙы ауылға алып ҡайттыҡ та ҡармаҡтарҙы ҡарарға киттек. Уларҙың берәйһенә булһа ла ҙур йәйен эләгеүенә шикләнмәй инек. Барып еттек тә аптырап ҡалдыҡ — беҙ ҡармаҡтарға ҡуйған тәлмәрйендәр, һыу ситенә теҙелеп, ҡояшта ҡыҙынып ултыралар ине. Күрәһең, кисә Азамат ҡурҡышынан бауҙың теге осон насар бәйләгән — ул ысҡынған да ағым менән был яҡ ярға һуғылған.

Минең бик асыуым килде.

— Әлеге һинең ҡурҡаҡлыҡ! Их һин, маҡтансыҡ! — тинем Азаматҡа.

— Туҡта инде, тағы бер ҡуйып ҡарайыҡ, — тине ул, илай яҙып.

— Үҙең ҡуй! Мин ҡурҡаҡтарға иш булырға теләмәйем! — Ҡырт боролдом да ауылға табан атланым.

Ҡаршыма кисәге малайҙар тап булды, улар, һуҡмаҡтан ситкәрәк сығып, миңә юл биреп тороп ҡалдылар. Мин улар янынан маһайып үтеп киттем. Өләсәйемә йәйен алып ҡайта алмағанға бик ғәрләнгәйнем.

Артымда шау-шыу ишетелгәс, шулай ҙа әйләнеп ҡараным. Унда Азамат баяғы малайҙар менән алыша ине. Улар янына ҡайҙандыр саптар тай атылып килеп сыҡты. Хужаһының бәләгә эләккәнен һиҙеп ҡалғандыр инде...

* * *

Шул ваҡиғанан һуң күп ваҡыт үтте. Мин йыш ҡына бер үк төштө күрәм: имеш, беҙҙең теге тәлмәрйендәр һыуҙан сыҡҡан да Андромеда томанлығына менеп ултырған. «Азамат ҡотҡарған ҡыҙҙың бүләген таптыҡ беҙ!» — тип баҡылдайҙар, имеш. Әйе, Азамат йондоҙҙар араһынан үҙенә кәрәк галактиканы күптән тапҡандыр. Беҙ күптән өлкәнәйҙек бит инде.

Ә миңә ошоғаса берәү ҙә бәләкәй генә йондоҙ бүләк итмәне. Бүләк итһә лә алмаҫ инем. Сәбәбен әле генә һөйләп бирҙем.

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе табып, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Улар менән бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.
2. Азаматты Мөхтәр бабай *ат йәнлеһең* ти. Былай тип кемгә әйтәләр? Кешегә эт йәнле, кәзә йәнле һ. б. тип тә әйтеп буламы?
3. *Уның йәнә ауыҙы йырылды; Өләсәйеңә һуғылып әйтеп киттем* һөйләмдәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Уларҙы рус теленә тәржемә итегеҙ.
4. Хикәйәлә һүрәтләнгән ваҡиғалар ҡайһы осорҙа булған? Һеҙ уны нимәгә ҡарап белдегеҙ? Ошо ваҡиғаларҙы һүрәтләп, автор нимә әйтергә теләне икән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?
5. Ҡунаҡ малайҙың ҡылығына баһа бирегеҙ. Уның урынында һеҙ ни эшләр инегеҙ?
6. Азаматҡа характеристика бирегеҙ, һеҙгә уның ниндәй сифаттары оҡшаны? Ни өсөн автор уны «йондоҙ һанаусы малай» тип атай?
7. «Ул миңә ҡыҙыҡ ҡына ваҡиғаны һөйләне» тип башланған абзацты изложение итеп яҙығыҙ.

**169-сы күнегеү.** Түбәндәге тексты башҡортса дөрөҫ булырлыҡ итеп төҙәтегеҙ.

Булды бер саҡ ауылда олатайымдарҙың был хәл. Эттәренең бар ине көсөгө. Эте олатайымдың бик яҡшы, аҡыллы. Шуға ла соседтары һорап алдылар өс көсөктө. Ҡалды бер көсөгө генә эттең. Үтмәне бер аҙна ла, үлде лә ҡуйҙы көсөк ауырып. Ҡайғыра бына эт, олой ҙа шыңшый. Күршеһенең бер олатайымдың бесәйенең дә бар ине балалары. Ул бесәй сыҡҡанда урам аша ҡала машина аҫтында яңылыш. Эте олатайымдың ҡалды көсөктәрһеҙ, ә ҡалды әсәйһеҙ бесәй балалары күршенең. Олатайым әйтә:

— Әйҙә, күрше, ҡарайыҡ биреп бесәй балаларын һинең эткә минең.

Эшләнеләр шулай. Ҡуймаһын бесәй балаларын ашап тип, эт янында торҙо тәүҙә олатайым. Ашаманы, юҡ. Еҫкәне, еҫкәне лә зализывать итә башланы аҙаҡ уларҙы.

Үҫтеләр инде бесәй балалары хәҙер. Күрәләр әсәләре һымаҡ этте улар.

*Рәшит Солтангәрәев*

# ЭШЛӘП АШАҺАҢ…

## I

— Әсәй, икмәк! — Айрат тыштан килеп инде лә, аяғын сисеп-нитеп тормайынса, туп-тура кухняға ынтылды. Тик эстә әсәһе түгел, апаһы булып сыҡты. Ул шунда ятҡан һыныҡты алып бирҙе. Айрат ҡабып ҡына ҡараны ла икмәкте кире ырғытты:

— Нимә ҡатып бөткән һыныҡ тоттораһың?!..

— Һы, ҡатып бөткән һыныҡ!.. Кем ҡатырған уны? Үҙең, ашап бөтмәйенсә, ҡалдырып киткәнһең дә… Ашап ҡуй һынығыңды!

— Ярар, аҡыл һатма әле бында! Икмәк бөткәнме ни! — Ул эскә үтте. Апаһының, ҙур кешеләй булып, өйрәтеп маташыуы малайҙың сәменә тейҙе. Әммә тегенең дә бирешкеһе килмәне, икмәк һауытын ябып уҡ ҡуйҙы.

Быларҙың шулай шаулашыуына түрьяҡтан әсәләре килеп сыҡты. Эштең ниҙә икәнен төшөнгәс, Айратҡа:

— Апайың дөрөҫ әйтә, улым, бар тип, икмәкте тәләфләргә ярамай. Унан да ҡәҙерле ни бар донъяла? Ана, беҙ һуғыш ваҡытында…

— Башланды тағы… Хәҙер һуғыш заманы түгел!.. — тине Айрат белдекле ҡиәфәт менән.

— Шул заман булмағанға, ҡәҙерен белеп кенә йәшәргә кәрәк.

— Ҡәҙерен белгәнгә күрә лә, ҡатҡан икмәк ашағы килмәй инде!

Әсәһе, хәҙерге балаларҙың алдына сығырһың, тигәндәй, йылмайып ҡарап торҙо ла икмәк телеп бирҙе:

— Оҙаҡ йөрөмә, баҡсаға китәбеҙ!

— Баҡса ла баҡса, рәхәтләнеп уйнарға ла ваҡыт юҡ, — тип мыжыны Айрат.

— Уйнағандан тамаҡ туямы ни? Әҙерәк эшләп тә алырға кәрәк. Һинең кеүек саҡта беҙ…

— Әлеге шул тамаҡ. Әйттем бит, хәҙер һеҙҙең заман түгел, ул тарих китабында ғына.

— Ярар, күп теленә һалышма.

Төшкә табан улар баҡсаға китте. Айрат, арбаға арҡанлап тағылғандай, арттан ғына мыжый-мыжый килә:

— Йөрөйһөгөҙ шунда донъя етмәгән кешеләй. Баҙарҙа алмаһы ла, ҡыяр-помидоры ла өйөлөп ята...

— Ятһа һуң, һатып алырға аҡса кәрәк бит, улым.

— Ниңә, аҡса алыр өсөн эшләйһегеҙ бит!

— Ә үҙең бик тә ыҫпай кейенергә яратаһың. Йәй һайын туфли, көҙгә ботинка, яңы салбар, күлдәк һорайһың. Эш аҡсала ла түгел, үҙең эшләп ашаһаң, тәмлерәк булыр, тим.

— Бөтә кешегә лә ҡыяр, помидор үҫтерергә тимәгән. Берәү иген игә, икенсеһе машина яһай, бына һин фабрикала кейем тегәһең.

— Ә тамаҡ бөтә кешелә лә бар.

— Кейемде лә һәр кем кейә, ә барыһы ла кейем тегеп ултырмай бит.

— Ярар, һинең алдыңа сығып булмаҫ. — Әсәһе тыштан һуҡранған кеүек итһә лә, улының шулай, ун өс йәштә генә булыуына ҡарамаҫтан, оҫта һөйләшә алыуына маһайып та ҡуя шикелле. Тик апаһы Фәниә генә бирешергә теләмәне:

— Ярар, әсәй, бармаһын! Бына беҙ үҙебеҙҙең ҡыяр, помидорҙы ашарбыҙ, ә ул баҙарҙан һатып алыр.

Һүҙ көрәштерергә китһә, Айрат апаһын тиҙ генә еңә алмаҫын белә, шуға ла:

— Ярар, эсең тулы этлек кенә! — тине лә кейенергә тотондо.

Айраттарҙың баҡса алыуына артыҡ күп тә түгел. Атаһы менән әсәһе буш ваҡыттарында шунда ынтылып тора, ҡала кешеһенә ер эше файҙалы ул тип, балаларын да алып барырға тырышалар. Барһаң инде, күңелле лә кеүек, хатта ҡайтҡы килмәй ҙә ҡуя, тик бына өйҙән сығып китеүе генә ауыр. Әсәһе уға артыҡ эш тә ҡушып

бармай, ваҡ-төйәк менән булышып йөрөһәң дә файҙа, өйҙә нисек ултыра икән был, тип хафаланып йөрөгәнсе, ти. Ә теләһә, Айратҡа ла эше табыла. Әле лә әсәһе унының усаҡ яғырға яратыуын белеп:

— Ана, ҡыштан ҡалған сүп-сарҙы йыйып яндыр, — тине.

Айрат:

— Картуф бешерәйемме? — ти һалды.

— Бешер-бешер…

Ысынлап та, баҡсала иң ҡыҙыҡтырған нәмә — ҡуҙға күмеп картуф бешереү. Усаҡ яғып ебәрә лә өҫтөнә картуф ырғыта. Унының тиҙ генә бешә һалып бармай, көтөүе бик ауыр. Айрат, картуфтың ҡабыҡтары көйә башлау менән, ауыҙ-моронон ҡоромға буяп, сейле-бешле нәмәне ашарға тотона. Баҡсала аш шундай тәмле, өйҙәге бер аҙыҡҡа ла тиң түгел. Әле лә, усаҡ яғып ебәрҙе лә, сысҡан һаға-лаған бесәй шикелле, ҡуҙ араһында ятҡан картуфтарын күҙәтергә тотондо. Тегеләр күрмәгән арала, бер-икеһен әүәләп ашап алырға ла уйы юҡ түгел.

Апаһы, ситтә эш менән булып йөрөһә лә, ҡустыһын күҙҙән яҙҙырмай икән:

— Һыу килтер ҙә сәй ҡайнат, һыуһаттырҙы, — тип һөрәнләне.

— Нимә, мин һиңә кухаркамы ни?

— Кухарка булмаһаң, кухарь, — тип төрттөрҙө теге.

— Һыуһағас, үҙең килтер ҙә эс! — Ул апаһының нимә-гә шулай һөйләнеүен аңлай ине.

— Беҙ эш эшләйбеҙ, ә һин ашарға әҙерләргә тейеш.

Айрат өндәшмәне. Тураһын әйткәндә, ҡатын-ҡыҙ шикелле, усаҡ тирәһендә булашыуына үҙенең дә сәме килеп ҡуя ҡуйыуын. Ҡатын-ҡыҙ ер ҡаҙа, ә ул ир башы менән ҡаҙан тирәһендә ҡайнаша, тигәндәй. Апаһы шуға төрттөрә лә бит инде. Барып эшкә тотоноп та китер ине, бик ялҡыткысҡа оҡшаған, туҡтауһыҙ ҡаҙы ла ҡаҙы. Етмәһә, апаһының һүҙенә бирешкән кеүек күренәсәк.

## II

Ә тегеләр шулай ҙа күңелле эшләйҙәр: ер ҡаҙалар, тырматалар, түтәл яһайҙар, тегеләйтһәк нисек булыр, былайтһаҡ нисек булыр, тип үҙ-ара кәңәшләшеп, бәхәсләшеп тә алалар, көлөшөп тә ебәрәләр. Ҡыҫҡаһы, Айрат кеүек түгелдәр.

Ул шулай икеләнеп ултырҙы-ултырҙы ла көрәккә барып тотондо:

— Мин дә түтәл яһайым!

— Йөрөмә, ҡулыңдан килмәгәнде! Ашарға бешереүеңде бел! — Апаһы көрәген бирмәне.

Апаһы, әлбиттә, уның сәменә тейер өсөн, юрамал әйтә, шулай ҙа барыбер Айраттың ғәрлеге килде, көрәкте көслөк менән тартып алырға итте. Белмәйем, эш ни менән бөтөр ине икән, әсәләре тыйҙы.

— Эш бөтәгеҙгә лә етерлек. — Ул Айратҡа икенсе көрәк килтереп бирҙе.

— Мин түтәлде үҙемә башҡа яһайым!

— Яһа әйҙә, яһа!

Айрат, нисек тә быларҙан ҡалышмаҫҡа тырышып, ер ҡаҙырға тотоноп китте. Артыҡ самалап тормай, туҙҙыра ғына бирә. Ә ер эше ҡыҙыҡ, ҡаҙған һайын, бына түккән көсөңдөң һөҙөмтәһе тигәндәй, тупраҡ ҡарайып ятып ҡала.

Бер тына маташҡас, Айрат та, әсәһе шикелле, ситкәрәк китеп ҡарап торған булды: ниңә, эшләһә, уның да ҡулынан килә!

Тора-торғас ул шарҡылдап көлгән тауыш яғына боролдо. Баҡһаң, апаһы уның эшен ситтән генә күҙәтеп йөрөгән икән:

— Ҡара, яһаған түтәлең карталағы Африка һымаҡ булған бит!

Айрат аптырап ҡалды, ысынлап та, әллә нисек кәкре-бөкрө килеп сыҡҡан.

— Мин әле яһап бөткәндер шул... Кем рөхсәт итте ҡарап торорға? — Уның күҙенә йәштәр бәреп сыҡты.

Башҡаһына әллә ни иҫ киткән юҡ, бына эшеңдән көлһәләр, бик ауыр икән.

Быны әсәләре лә тойоп алды шикелле, шым ғына килеп өйрәтергә тотондо:

— Әллә нәмәһе юҡ, ситтән бына ошолай тигеҙ генә итеп ҡаҙып сыҡ та, тырма менән тигеҙлә.

— Китегеҙ, үҙем яһайым.

— Ярар, яһа, яһа.

— Сәсеүен дә үҙем сәсәм.

— Шулай ит, үҙең сәсеп үҫтергән нәмә тәмле була ул.

— Айрат сәскән үҫер, тиһеңме ни... — Апаһы һаман телләшә бирҙе, тик сәмләнгән малай ғына, уның һүҙенә иғтибар итмәҫкә тырышып, эшен белде. Шулай ҙа күңелдә шик ҡалды: ысынлап та, ул сәскән орлоҡтар шытып сығырмы икән? Бәлки, һәр кешенеке үҫеп тә бармайҙыр?

— Әсәй, мин сәскән сығырмы икән һуң?

— Бәй, ниңә сыҡмаһын, ти, ергә сәскәс.

— Ергә сәскән бөтә нәмә лә сығамы ни?

— Сыға инде, шуның өсөн ер бит ул.

Әсәһенең ошо һүҙҙәренән һуң Айрат тағы ла дәртләнеберәк тотондо. Ана, апаруҡ эшләп ташлаған да. Эш менән хатта ваҡыт үткәне лә һиҙелмәй ҡалған, әсәһе ҡулын йыуа башлағас ҡына, төш еткәнен аңланы. Ҡайһылай асыҡтырған икән дә!

— Әсәй, тышта ғына ултырып ашайыҡ! — Айраттың үҙе матурлап түтәл яһаған ерҙе ташлап киткеһе килмәй ине. Ул бая ҡуҙға күмеп киткән картуфтарын сүпләргә тотондо. Әсәһе сәй әҙерләй, ә апаһы ашъяулыҡҡа икмәк килтереп һалды. Айраттың төҫө боҙолоп китте:

— Шуны ғына алып килдегеҙме?

— Икмәк алырға оноттоҡанбыҙ...

— Оноттоҡан?! Ошоно ғынамы? Үҙе ҡатып бөткән!..

— Шул ғына шул. Уныһы ла сумка төбөндә булған.

— Сумка төбөндә... Кем оноттоҡан, шул икмәк ашамай. — Айрат һыныҡты һәрмәп алды ла ашарға ла тотондо. Картуфты ла үҙенәрәк тартты.

Бер аҙҙан әсәһе килде, муҡсайҙан төрлө ашамлыҡтар, бер түтәрәм икмәк килтереп сығарҙы. Айраттың күҙҙәре аҡайҙы:

— У-у, алдаҡсы!

— Мин белгәндер шул… — Апаһы ла аптырап киткән кеше булды, әммә күҙҙәренән алдашҡаны күренеп тора ине. Ә бер ни аңламаған әсәһе быларға ҡараны:

— Нимә булды һуң тағы?

— Алдап, миңә ҡатҡан һыныҡ ашатты.

— Ҡатҡан һыныҡ? Ни эшләп улайттың, ҡыҙым?

— Үҙенең баяғы икмәген бирҙем.

— Был тиклем яуыз булыр икән!.. — Айрат, ғәрләгенән ни эшләргә белмәй, тороп уҡ китте.

Әсәһе, кешене гел генә шулай ирештереп торма, тип ҡыҙына һуҡранып ҡуйҙы. Шунан Айратҡа ҙур ғына киҫәк икмәк телеп бирҙе.

— Туйҙым инде, — тине Айрат, иларҙай булып. Апаһы пырх итеп көлөп ебәрҙе…

— Мин һинең үҙеңде лә шулай итермен әле! — тине Айрат үпкәсел ҡиәфәт менән.

— Ә мин һыныҡ ҡалдырмайым, — тине тегенеһе…

Баҡсаға икенсе килгәндә, Айрат элекке шикелле инәлтеп торманы. Автобустан төшөү менән, һикергеләп йүгерә-йүгерә, баҡса яғына ысҡынды.

— Ур-ра, сыҡҡандар! — Ул, килеп етеү менән, баҡса яңғыратып ҡысҡырып ебәрҙе. Ышанһаң ышан, ышанмаһаң — юҡ: уның түтәлендә йәп-йәшел һуғандар матур булып үҫеп ултыра! Айрат шаҡ ҡатып, ауыҙын йырып тора бирҙе. Ысынлап та, ул сәсеп киткән орлоҡтар сыҡтымы икән ни? Баш етерлек түгел. Әсәһе үҫтергәндә бер ҙә иҫе китмәй, шулай булырға тейеш кеүек күренә ине. Ә был инде бер ысын мөғжизә һымаҡ! Айраттың бер ҡасан да донъяла ошо тиклем үк ҙур эш эшләгәне юҡ ине, буғай.

Ул арала апаһы ла килеп етте. Айрат шатлыҡлы тауыш менән:

— Һуғандар сыҡҡан!.. — тине.

— Һуған түгел, һуған балаһы ғына әле улар.

— Улайға китһә, һин дә әле кеше балаһы ғына. Һәр кем дә башта — бала, шунан оло була. — Айрат үҙе лә һиҙмәҫтән шәп һүҙҙәр әйтеп ташланы.

Апаһы ла һоҡланып ҡарап торҙо ла түтәлдән бер ҡыяҡты өҙөп алды.

— Ниңә өҙәһең?! — Айрат асырғанып ҡысҡырып ебәрҙе.

— Һуғанды ашар өсөн сәсәләр инде... — Апаһы, бер ни булмағандай, ҡыяҡты ҡабып сәйнәргә тотондо.

— Ашар өсөн булғас, ана, үҙеңдекен аша! Аңһат, кеше сәсеп үҫтергәнгә шәп икән! — Айрат, яраһын дауалағандай, ҡыяҡтың өҙөлгән урынын һыпырғылап ҡуйҙы. — Үҙеңде шулайтһалар, килешер инеме?

— Мин бит кеше, ә ул үҫемлек.

— Үҫемлектең дә йәне була.

Әсәләре лә килеп еткән дә быларҙың бәхәсләшкәнен рәхәтләнеп тыңлап тора икән. Торҙо-торҙо ла улының арҡаһынан ҡағып ҡуйҙы:

— Ярар, улым, үҙең үҫтергән нәмә шулай ҡәҙерле була ул. Әле һин һуғанды йәлләйһең, ә бер игенсе һинең икмәкте тәләфләп ашауыңды күрһә, бигерәк тә үпкәләр ине, — тине.

Айрат ниҙер әйтергә тип ауыҙын асҡайны ла, яраҡлы ғына һүҙ таба алманы...

1. Текстан ашамлыҡ исемдәрен яҙып алығыҙ, улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.
2. *Ҡолаҡҡа элмәү, иғтибар итеү, телеңә һалышма, һүҙ көрәштереү, күҙҙән яҙҙырмау, шарҡылдап көлөү, иҫ китеү, шаҡ ҡатыу* һүҙбәйләнештәрен файҙаланып, үҙ-ара әңгәмә ойоштороп ҡарағыҙ. Уларҙың ҡайһыһын ҡайһы осраҡта ҡулланырға кәрәк?
3. Айрат кем ул? Уның ыңғай һәм кире сифаттарын һанап сығығыҙ. Һеҙҙә ул сифаттарҙың ҡайһыһы бар? Уларҙың ҡайһыһы башҡаларға оҡшай, ә ҡайһыһы — юҡ? Ни өсөн?
4. «Беҙҙең баҡса» тигән темаға һүрәт төшөрөгөҙ.

5. Баҡсала Айрат ҡатҡан икмәкте лә бик тәмләп ашай. Ни өсөн тип уйлайһығыҙ? Һеҙҙең менән шулай булғаны бармы? «Икмәк ҡасан тәмле була?» тигән темаға телдән әңгәмә ойоштороғоҙ.
6. Тексты өлөштәргә бүлеп, исем ҡуйып сығығыҙ. Үҙегеҙгә оҡшаған бер өлөш буйынса изложение яҙығыҙ.
7. Һеҙҙең баҡсағыҙ бармы? Унда нимәләр үҫә? Уларҙы үҫтереүҙә һин ҡатнашаһыңмы? «Беҙҙең баҡса» тигән кескәй хикәйә төҙөп яҙығыҙ. Хикәйәгеҙҙә сағыштырыуҙарҙы, синонимдарҙы, антонимдарҙы ҡулланырға тырышығыҙ.

**170-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе башҡортсаға тәржемә итегеҙ.

Дедушка, бабушка, отец, папа, мать, мама, дядя, тётя, старик, старуха, брат, братишка, сестра, сестрёнка, товарищ, друг, подруга, сосед, соседка, ученик, ученица.

Башҡорттар бик ҙур территорияла йәшәгән һәм йәшәйҙәр. Шуға ла төрлө урындарҙа бер үк әйберҙе, төшөнсәне төрлөсә атағандар. Мәҫәлән, әҙәби телдәге **ҡурай еләген** (малина) әберсә, торна еләге тип тә атайҙар. Туғандарҙы белдереүсе һүҙҙәр ҙә төрлө урындарҙа төрлөсә яңғырай. Мәҫәлән, **әсәйгә** ҡайһы бер башҡорт ауылдарында **инәй, әней** тип өндәшәләр. Олатай һүҙе лә бөтә урында ла атай-әсәйҙең атаһын белдермәй. Ҡайһы бер төньяҡ райондарҙа **олатай** һүҙе атайың менән әсәйеңдән оло ир кешегә әйтелә: Оморҙаҡ олатай, йәғни әҙәби телдәге бабай һүҙен алмаштыра. Апа, апай һүҙҙәре лә бик ҡыҙыҡлы. Әҙәби телдә был һүҙҙәр үҙеңдән оло ҡатын-ҡыҙҙы белдерә. Ә төрлө райондарҙа ошо ике һүҙҙе ир-егеттәргә ҡарата ла әйтеүҙәре мөмкин. Бер урында **апа** һүҙе — әҙәби телдәге **бабай** һүҙенең синонимы. Икенсе урында **апай** — үҙеңдән бәләкәй ир балаға ла, ҡыҙҙарға ҡарата ла ҡулланыла ала. Йәғни Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарында берәй егеткә, малайға **Зариф апайым** тип

өндәшәләр икән, был һис тә көләүҙе аңлатмай, ә әҙәби телдәге **Зариф ҡустым** һүҙҙәренә тиң урындағы һөйләү формаһы ғына. Шул уҡ **ҡустым** һүҙен төрлө урында **энем, мырҙам, мыртый,** шулай уҡ өҫтә әйтеп киткән **апайым** кеүек һүҙҙәр алмаштыра. **Һеңлем** һүҙенең дә варианттары күп: **ҡарындаш, һылыу, иркә** һ. б.

**171-се күнегеү.** Һеҙҙең олатай, өләсәйҙәрегеҙ тыуған, йәшәгән ауылдарҙа туғандарҙы белдергән һүҙҙәрҙе шул туғандарығыҙҙың исемдәре менән яҙығыҙ: Мәҫәлән: *Зәйнулла бабайым.*

**Һүҙ күрке – мәҡәл**

Көсһөҙ көрәк һындырыр, хәлһеҙ һәнәк һындырыр.

Һәнәктән көрәк булған.

Кәбән аҫтында сысҡан үлмәҫ.

## ҮТЕЛГӘН ТЕМАЛАР БУЙЫНСА ҺОРАУҘАР

1. Башҡорт алфавитында нисә хәреф бар? Уларҙы әйтеп сығығыҙ. Улар араһында рус телендә булмағандарын күрһәтегеҙ.

2. Башҡорт телендәге ниндәй өндәр рус телендә юҡ?

3. Башҡорт телендә нисә һуҙынҡы бар? Ниндәйҙәр? Уларҙың ҡайһылары рус телендә юҡ?

4. Башҡорт телендә ниндәй тартынҡылар һүҙ башында килә алмай?

5. Башҡорт телендә һүҙ башында ике тартынҡы йәнәш киләме?

6. Башҡорт телендә баҫымлы өндәрҙең әйтелеше баҫымһыҙ өндәрҙең әйтелешенән нимәһе менән айырыла? Баҫым, ғәҙәттә, ниндәй ижеккә төшөүсән?

7. Башҡорт һүҙҙәренең тамыры, ялғауҙары буламы?

8. Башҡорт телендә яңы һүҙҙәр нисек яһала?

9. Башҡорт телендә омонимдар, синонимдар, антонимдар бармы?

10. Ниндәй һүрәтләү сараларын беләһегеҙ?

11. Йыл буйына ятлаған шиғырҙарығыҙҙы яңынан ҡарап, хәтерегеҙҙе яңыртығыҙ.

12. Халыҡ ижады, әҙәбиәт жанрҙары тураһында төшөнсәләрҙе яңынан ҡарап сығығыҙ.

## ҺҮҘЛЕК

### А

**абыныу** — һөрөнөү; спотккнуться
**ағуна** — белая куропатка
**аждаһа** — дракон
**аҙарыныу** – үтенеү, теләнеү, ялбарыу; умолять, упрашивать
**аҡбуҙ** — сизый, серый (масть лошади)
**аҡыл һатыу** — өйрәтеү; учить, заниматься нравоучениями
**алама** — туҙған, насар, иҫке; ветхий, плохой
**алҡышлау** — сәпәкәйләү; аплодировать
**алсаҡ** — асыҡ күңелле, эскерһеҙ; открытый, приветливый
**аманат** — изге васыят; священное завещание
**ант** — нәҙер; клятва
**аңғармаҫтан** — һиҙҙермәҫтән; неожиданно
**аңҡыу** — көслө еҫ сығарыу; сильно пахнуть, благоухать
**аптырау** — юғалып ҡалыу; растеряться
**арғымаҡ** — сабыш аты; беговая лошадь, аргамак
**артмаҡлау** — йөкмәү, арҡаға һалып күтәреү
**аршын** — боронғо оҙонлоҡ берәмеге (дүрт сирек); мера длины в прошлом (4 вершка)
**арыҡ** — арык; (оросительный) канал
**аҫыл** — ҡиммәтле, ҡәҙерле; благородный, драгоценный
**аусы** — һунарсы; охотник
**афарин** — «бик яҡшы» мәғәнәһендәге хуплау һүҙе
**афәт** — бәлә-ҡаза; бедствие
**аһ-зар** — ҡайғы; горе, стенания
**ашъяулыҡ** — скатерть

### Б

**бағыу** — ҡарау; смотреть
**баҙау, баҙап төшөү** — аптырап, юғалып ҡалыу; растеряться
**байғош** — меҫкен, ярлы; бедняга
**бакуй** — покос
**баҡта** — шерсть весенней линьки
**балаҡ** — штанина

**балҡкыу** — яҡтырыу яныу; гореть, светиться, сиять
**балтыр** — икра ноги
**балтырған** — борщевик
**батман** — ағастан соҡоп яһалған тәрән һауыт; глубокая деревянная кадка
**баçалҡылыҡ** — тотанаҡлылыҡ; сдержанность, уравновешенность
**баçма** — мостик
**бахыр** — меçкен, бедный,
**башкиçәр** — головорез, разбойник, грабитель
**бей** — ырыу башлығы; вождь племени
**бер тына** — бер ни тиклем ваҡыт; немного (времени), мгновение
**белеш** — знакомый
**бешәлек** — йәш ҡарағайҙарҙан торған урман; молодой сосняк
**бил** — пояс
**биләмә** — владение
**биртенеү** — ҡаймығыу, ауыртыу, йомшарыу, хәлһеҙләнеү
**бисура** — кикимора
**биштәр** — вещмешок
**боғаҙ** — тамаҡ; горло
**боғалаҡ** — элмәк; петля
**борғоланыу** — извиваться
**боçоу** — йәшенеү; спрятаться
**ботарлау** — разрывать, раздирать на части
**бөлөү** — хәйерселеккә төшөү; разоряться, остаться нищим
**бур** — уғры; вор
**бурыс** — долг
**былбыл** — һандуғас; соловей
**бышҡырыу** — фыркать
**бәке** — перочинный нож
**бәндә** — подневольный, зависимый, слабый человек
**бәрәс** — кәзә (һарыҡ) балаһы; козлёнок (ягнёнок)

## В

**васыят** — завещание
**вәзир** — придворный, министр

## Г

**ғазап** — мучение, мука, страдание
**ғаләм** — донъя, ер йөҙө; мир, вселенная
**гәрәбә** — янтарь; **гәрәбәләй** — янтарный (о зерне)
**ғилем** — белем; знание
**гиҙеү** — бороздить

**ғорур** — гордый
**ғәмһеҙ** — битараф; беззаботный, беспечный
**ғәрсел** — обидчивый

### Д

**дарыу** — лекарство
**дегәнәк** — лопух
**дилбегә** — вожжи
**дөмөктөрөү** — үлтереү, юҡ итеү; уничтожить
**дуңғыҙ** — суҫҡа; свинья
**дыуамал** — сумасбродный, безрассудный
**дәғүә итеү** — претендовать
**дәү** — ҙур; большой, огромный
**дәһшәтле** — ҡурҡыныс, ҡот осҡос; ужасный, жуткий, чудовищный

### Е

**егәрле**— эшһөйәр; трудолюбивый
**еҙ** — латунь (металл);
**еҙ шөңгөр** — медный (латуневый) бубенец, колокольчик
**ек** — ярыҡ; щель
**елгәреү** — сүп-сарҙан таҙартыу; провеивать
**ем** — ашамлыҡ (ҡоштар өсөн); корм (для птиц)
**еҫкәнеү** — вынюхивать
**етем** — сирота

### З

**затлы** — ҡиммәтле; ценный, дорогой
**зиһен** — аң, аҡыл, хәтер; сознание, ум, память
**зыян** — вред, ущерб, урон
**зәғиф** — хәлһеҙ; слабый, еле заметный
**зәһәрләнеү** — асыуланыу; злиться, злобствовать

### И

**илгәҙәк** — доверчивый, общительный
**инәлеү** — үтенеү, ялбарыу; умолять
**иргәйел** — буйға бәләкәй кеше, кәрлә; карлик, лилипут
**иргәләшеү** — һүҙ көрәштереү, әрепләшеү; спорить, пререкаться
**иренеү** — ялҡау килеү; лениться, делать нехотя
**ирештереү** — дразнить

**ирәйеү** — эреләнеү, маҡтаныу

**итәк** — подол

**ихлас** — ысын күңелдән; от души, искренне

**ишара** — ым; намек

## Й

**йөнтәҫ** — ялбыр; волосатый, пушистый

**йөпләү** — поддакивать, подтверждать

**йүгән** — уздечка

**йылыу** — полынья

**йыуатыу** — күңелен күреү, тынысландырыу; утешать, успокаивать

**йышҡы** — рубанок, фуганок

**йәйен** — сом

**йәйләү** — йәй көнө йәшәй торған урын; летовка

**йәймә** — тонко раскатанное тесто для лапши

**йәлләүес** — жалкий, беспомощный

**йәм** — матурлыҡ; красота

**йәмәғәт** — общество

**йәнә** — тағы; снова, ещё, опять

**йәр** — яратҡан егет (ҡыҙ)

**йәрәбә** — жребий

## К

**кейеҙ итек** — войлочные сапоги

**кейәү** — зять

**кендек** — пупок

**кереш** — тетива лука

**кешнәү** — ржать

**килбәтһеҙ** — йәмһеҙ, шөкәтһеҙ; неуклюжий, безобразный

**килен** — сноха

**кинәйә** — ситләтеп (серле итеп) әйтеү; иносказание

**кинәнеү** — рәхәтләнеү; наслаждаться, испытывать удовольствие

**кисеү** — брод, переправа

**көйшәнеп алыу** — ашап алыу; пожевать

**көйәнтә** — коромысло

**көлөн күккә осороу** — дөмөктөрөү, юҡ итеү; разгромить в пух и прах

**көпө** — стёганка, ватник

**көсәнеү** — напрягаться, тужиться, силиться

**күбек** — пена

**күңелсәк** — шат күңелле; весёлый

**кәбәк** — отруби

**кәйеф** — настроение

**кәйлә** — кирка

**кәмһетеү** — унижать

**кәңәш** — совет

## Ҡ

**ҡаймыҡтырыу (аяҡты)** — вывихнуть (ноги)
**ҡайрау** — үткерләү, сарлау; точить
**ҡалаҡ һөйәге** — лопатка (кость)
**ҡалас** — (аҡ) икмәк; (белый) хлеб, калач
**ҡалпаҡ** — баш кейеме; головной убор
**ҡалтағай** —саңғы; лыжи
**ҡама** — ҡиммәтле тиреле йәнлек; выдра
**ҡамсы** — кнут
**ҡамыр** — тесто
**ҡана** — ну-ка (вводное слово)
**ҡарағош** — стервятник
**ҡарасҡы** — пугало
**ҡарыш** — сирек; пядь
**ҡарышыу** — киреләнеү, тыңламау; противиться
**ҡаушырыу** — бөгөү; сгибать
**ҡаяу** — жало
**ҡиәфәт** — наружность, внешность, облик
**ҡойроҡ** — хвост
**ҡомартҡы** — ҡәҙерле иҫтәлек
**ҡонан** — өс йәшлек айғыр
**ҡоралай** — ҡыр кәзәһе; косуля
**ҡором** — сажа
**ҡөҙрәтле** — көслө, ҡеүәтле
**ҡуңыр** — ҡараһыу, ҡоңғорт, һорғолт ҡара; чернявый
**ҡупшы** — матур, килешле; красивый, привлекательный
**ҡура** — аҙбар, һарай
**ҡыҙғаныу** — йәлләү; жалеть
**ҡыҙыҡ** — интересно
**ҡыланыш** — проделка
**ҡыл** — струна
**ҡыр** — баҫыу; поле
**ҡырау** — заморозки
**ҡырыҫ** — неприветливый, неуютный
**ҡыу** — ҡыуарған, кипкән; высохший, сухостой
**ҡыуаҡ** — куст, кустарник
**ҡәтғи** — категоричный, твёрдый

## Л

**лапаҫ** — әүеҫлек; навес, лабаз, сарай

## М

**маһайыу** — маҡтаныу; эреләнеү; хвастаться, возгордиться
**мауығыу** — увлечься

**мираҫ** — ҡомартҡы; наследство

**мотлаҡ** — обязательно

**мөгөҙ** — рог

**мөғжизә** — чудо

**мөлдөрәмә (тулы)** — доверху, до краёв (налитый)

**мөлкәт** — милек, мал, байлыҡ; имущество, богатство

**мөһабәт** — величественный

**мөрхәтһенеү** — риза булыу, ҡәнәғәт булыу; довольствоваться

**муйын** — үңәс; шея

**мыжыу** — ризаһыҙлыҡ белдереү; проявлять недовольство

**мәңгелек** — вечность

**мәргән** — төҙ атыусы; меткий стрелок

**мәрйен** — бусы

**мәрхәмәт** — милость, пощада

**мәрхүм** — үлгән кеше; покойный

**мәтәлләү** — тәкмәсләү, тәгәрләү; кувыркаться

**мәхлүк** — йән эйәһе; тварь

## Н

**наҙланыу** — иркәләнеү; нежиться, ласкаться

**ныҡыш** — тырыш, сәмсел, үҙ һүҙле; настойчивый

## О

**олоу** — выть

**олпат** — солидный

**оран** — клич

**осҡон** — искра

**оя** — гнездо

## Ө

**өйөр** — төркөм, көтөү; стадо, табун (лошадей)

**өйәҙ** — элекке административ бүленеш; уезд

**өрлөк** — матица, потолочная балка

## П

**пак** — саф; чистый

## С

**сабаҡ** — ваҡ балыҡ; мальки, сорожка

**сабата** — лапоть

**сайпылтыу** — плескать, расплёскивать

**саҡрым** — оҙонлоҡ үлсәме; верста

**сал** — седой

**салғы** — коса
**салғый** — итәк; полы (одежды)
**салҡан ятыу** — арҡаға (өҫкә ҡарап) ятыу; лежать лицом к верху
**сапсан** — проворный, прыткий, резвый
**сарсау** — ныҡ һыуһау; сильно жаждать
**саңҡылдатыу** — клекотать
**сатраш** — шахматы
**сатыр** — көмбәҙ, ышыҡ; шатёр
**селәүсен** — червь
**септә** — йүкәнән һуғылған ат ябыуы; рогожа
**сигеү** — һырыу, нағышлау; вышивать
**силәк** — күнәк, биҙрә; ведро
**силек** — силки
**сир** — ауырыу; хворь, болезнь
**сихырлау** — колдовать
**солғап алыу** — ялмап, ҡаплап алыу; покрыть, охватить
**соҡор** — яма
**солоҡ** — борть
**сөй** — ҡаҙаҡ; гвоздь
**сөйөү** — ырғытыу; подкидывать
**суйын** — чугун
**суртан** — щука
**сүл** — пустыня
**сыланыу** — һыуланыу, еүешләнеү; мокнуть
**сынығыу** — закаляться
**сырай** — лицо, лик
**сырай һытыу** — нахмуриться
**сытыр** — сыбыҡ-сабыҡ; хворост
**сәбәләнеү** — суетиться
**сәкмән** — өҫ кейеме; чекмень
**сәңгелдәк** — бишек; люлька
**сәменә тейеү** — раззадорить
**сәмреғош** — мифик ҡош; мифическая птица
**сәп** — мәрәй; мишень
**сәскес** — сеялка
**сәтләүек** — орех
**сәфәр** — путешествие

## Т

**табыш** — находка, добыча
**таҙ** — паршивый, шелудивый
**тай** — бер йәшлек йылҡы; годовалая лошадь
**талығыу** — арыу, хәл бөтөү; обессилеть, устать
**тамға** — билдә; символ, (родовой) знак

**танмайынса әйтеү** — йәшермәйенсә, дөрөҫөн әйтеү; говорить, не скрывая правду
**тарлауыҡ** — ущелье
**татлы** — тәмле; сладкий
**текә** — крутой
**телләшеү** — әрепләшеү, әрләшеү; пререкаться
**тибен** — тебенёвка
**тилмереү** — умолять
**тир** — пот
**тоҡом** — порода
**толпар** — ҡанатлы ат (мифик зат); крылатый конь
**тонсоғоу** — задыхаться
**тоҫҡау** — целиться
**төйәк** — торған, йәшәгән ер; родные места, обетованная земля
**төйөнсөк** — свёрток, котомка
**төкөшөү** — бодаться
**төнәк** — тауыҡтарҙың төнәү (йоҡлау) урыны; насест
**төрттөрөү** — намекать на что-либо (на недостатки)
**төш юрау** — толковать сон
**туп** — *бында*: тупланыу, йыйылыу урыны; место сбора
**тупһа** — киртләс, баҫҡыс; ступень, выступ, порог
**түрә** — начальник
**түтәл** — грядка
**түшәк** — тюфяк, постель
**тыйнаҡлыҡ** — тотанаҡлылыҡ, әҙәплелек; скромность, воспитанность
**тырма** — грабли
**тырматыу** — бороновать
**тырпайтыу** — растопырить
**тәбрик итә** — сәләм бирә, ҡотлай; приветствует
**тәкмәсләү** — кувыркаться
**тәкмәстерә һуғыу** — йыға һуғыу; валить с ног, пускать вверх тормашками
**тәлмәрйен** — баҡа; лягушка
**тәләфләү** — исрафлау, әрәм-шәрәм итеү; растранжирить
**тәм** — вкус
**тәмләү** — ауыҙ итеү, ашап ҡарау; пробовать (кушать)
**тәнтерәкләү** — көс-хәл менән барыу; еле-еле шагать, ковылять
**тәхет** — трон

## У

**уба** — ҡалҡыулыҡ, түбәләс; холм, горка
**уҡлау** — скалка

**уҡталыу** — ынтылыу
**упҡын** — пропасть
**урғыу** — бурлить
**уртәкә** — хөкөм сығарыусы; судья
**уфтаныу** — ауыр һулау; вздыхать

### Ү

**үҙән** — долина (реки)
**үләт** — мор
**үпкәләү** — обидеться
**үрмәләү** — менеү; подниматься, карабкаться

### Ф

**фатир** — квартира
**фәһем** — поучение

### Х

**хайран ҡалыу** — аптырау; сильно удивляться
**хаким** — батша; властелин, правитель
**харам** — ғәҙел булмаған, эшләп алынмаған; незаработанный, добытый нечестным путём
**хасил булыу** — барлыҡҡа килеү; образоваться, возникнуть
**хафаланыу** — ҡайғырыу; беспокоиться
**хозур** — матур, йәмле; красивый
**хөрмәтләү** — ололау, ҙурлау, ихтирам итеү; уважать
**хуш еҫ** — тәмле еҫ; душистый запах, аромат
**хушбуй** — духи, одеколон
**хыянатсы** — һатлыҡ йән; предатель
**хәжәт** — кәрәк; необходимость, потребность
**хәйләкәр** — хитрый
**хәнйәр** — кинжал
**хәсрәт** — ҡайғы; горе
**хәстрүш** — бахыр, меҫкен
**хәстәрле** — заботливый
**хәтфә** — утопающий в зелени (о луге)

### Һ

**һабантурғай** — жаворонок
**һағалау** — аңдып, күҙәтеп тороу; выжидать, караулить
**һағыныу** — күрге килеү; скучать, тосковать

**һаҙ** — болото
**һаҙаҡ** — уҡ һалып йөрөй торған һауыт; колчан
**һалабаш** — йүкә; лыко
**һалабаш йүкәһе** — вымоченное лыко
**һандыҡ** — сундук
**һармаҡ** — алйот; чудак
**һарына** — саранка (растение)
**һеләүһен** — рысь
**һерәйеү** — торчать
**һимеҙ** — жирный, тучный
**һипкел** — веснушка
**һипкелле** — конопатый
**һоғаланыу** — ҡабаланып, ҡомһоҙланып ашау; есть жадно
**һоғоноу** — ҡабып йотоу; проглотить
**һоҡланыу** — восхищаться, удивляться
**һомғол** — стройный
**һөжүм** — атака
**һөҙәк** — пологий
**һөйкөмлө** — мөләйем, матур; обаятельный, привлекательный
**һөмһөрө ҡойолоу** — төҫө боҙолоу; нахмуриться
**һөрлөгөү** — спотыкаться
**һөрәнләү** — ҡысҡырыу; кричать
**һуғарыу** — малға һыу эсереү; поить скотину
**һуғыш суҡмары** — һуғышырға яратыусы кеше; драчун
**һуйыр** — глухарь
**һулыш** — тын алыш; дыхание
**һуҡраныу** — ризаһыҙлыҡ белдереү, еңелсә әрләү; ропать, сетовать
**һурығыу** — кибеү; сохнуть
**һуҫар** — куница
**һут** — сок, нектар
**һүрән, һүлпән** — вялый, неторопливый, медленный
**һығылмалы** — гибкий, упругий
**һыҙат** — очертание, контур
**һыҙлау** — болеть
**һыҙыу** — ҡасыу
**һый** — угощение
**һылыу** — һеңле; (младшая) сестра
**һыныҡ** — икмәк киҫәге (һыныҒы), ашалып бөтмәгән телем; ломоть (недоеденного) хлеба
**һырға** — серьга
**һырғый (ағас)** — бейек, төҙ, ботаҡһыҙ (ағас); высокое, стройное, дерево без ветвей
**һырт** — хребет (гора)

**һыртаҡ (үгеҙ)** — (бык) с белой полоской вдоль спины
**һырынты** — ҡар өйөмө, көрт; сугроб
**һыуһау** — һыу эске килеү; жаждать

## Ш

**шаһит** — свидетель
**шарт** — условие
**шик** — ышанып етмәү; сомнение
**шифа** — дауа, исцеление, выздоровление
**шом** — хәүеф; опасение, тревога
**шөкәрә** — кипкән икмәк; сухари
**шуҡ** — шаян, тыңлауһыҙ; озорной, непослушный
**шыбаға** — жребий
**шыйҙан** — ботаҡһыҙ, оҙон, төҙ (ағас)
**шыҡыйыу** — ташланыу; полететь вниз, пикировать
**шыр тиле** — алйоттоң-алйото; набитый дурак
**шәжәрә** — нәҫел-нәсәп, ырыу тарихы; родословная
**шәйләү** — күреп ҡалыу; увидеть, заметить
**шәхси** — личный

## Ы

**ынйы** — жемчуг
**ыңғырашыу** — стонать
**ыҫпай** — ҡупшы, матур; аккуратный, опрятный
**ысул** — способ
**ыҫылдау** — шипеть
**ытырғаныу** — сирҡаныу, ерәнеү; брезговать, испытывать отвращение

## Э

**энәнән-ептән** — бәйнә-бәйнә; со всеми подробностями
**эңер** — вечерние сумерки
**эре генә** — гордо, высокомерно
**эркелеү** — һарҡыу, ағыу; течь бурным потоком
**эҫенеп китеү** — яҡынайып, дуҫлашып китеү; стать близким

## Ә

**әмәл** — ысул, сара, мөмкинлек; способ, возможность
**әмер** — бойороҡ; приказ, веление
**әрепләшеү** — һүҙ көрәштереү; пререкаться

**әрәм итеү** — тратить впустую
**әрәмәлек** — туғайлыҡ; урёма
**әүлиә** — святой
**әүәләү** — лепить
**әхирәт** — иптәш ҡыҙ; подруга

## Ю

**юлығыу** — тап булыу, осрау; встретиться
**юрамал** — нарочно
**юрғалау** — йүгереү, сабыу; скакать иноходью
**юрған** — одеяло
**ютыу** — аҡрын ғына сабыу; трусить, идти трусцой

## Я

**ябаға** — йәш тай
**ябыҡ** — ҡаҡса; тощий
**яғымлы** — мөләйем; ласковый, добрый
**язаһын тартыу** — получить по заслугам
**ял** — грива
**ялбарыу** — инәлеү; умолять
**ялбыр** — лохматый, пушистый
**ялҡын** — пламя
**ялҡытҡыс** — ялҡау килтергес; надоедливый, нудный
**янбаш** — оса, арт һан; круп
**януар** — йән эйәһе, мәхлүк, кейек; зверь
**яныу, көйөү** — ҡайғырыу
**ярҙамсыл** — ярҙам итергә әҙер тороусы; готовый помочь, отзывчивый
**ярма** — крупа
**ярпы** — киҫәк, өҙөк-йыртыҡ; лоскут
**ятаҡыл** — иҫәр, алйот; полоумный
**ярыҡ** — щель
**ятыу** — омут

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### Көҙ

*С. Муллабаев.* Шатлыҡлы иртә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Фонетика. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре . . . . . . . . 4
*Б. Бикбай.* Туған тел . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
Башҡорт халыҡ ижады . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
Әминбәк *(Башҡорт халыҡ әкиәте)*. . . . . . . . . . . . . . . . . . 7
Аҡъял батыр *(Башҡорт халыҡ әкиәте)* . . . . . . . . . . . . . . 14
Башҡорт телендә [үы] өнө . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 26
Әкиәт тураһында төшөнсә. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 27
*Н. Иҙелбай.* Дүрт миҙгел . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 28
*Р. Ғарипов.* Торналар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 29
*Б. Ногоманов.* Йәйбикә менән Көҙбикә *(“Йыл бабайҙың дүрт ҡыҙы” әкиәтенән өҙөк)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 31
Башҡорт телендә [й] өнө менән һуҙынҡылар ҡушылмаһы. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 35
*Ф. Исәнголов.* Хәмит күпере. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 35
Сағыштырыу тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . 41
*М. Кәрим.* Сыйырсыҡ балаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 42
*А. Йәғәфәрова.* Яҡшылыҡ *(Әкиәт)*. . . . . . . . . . . . . . . . . 46
Синоним тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
*Н. Әминева.* Тыуған ер. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 50
Башҡортостан тауҙары. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 51
Тыуған ер *(Ҡобайыр)*. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 52
*Т. Ғәниева.* Уралиә тигән ил *(Әкиәт)* . . . . . . . . . . . . . . 53
*Р. Нигмәти.* Йәмле Ағиҙел буйҙары *(Поэманан өҙөк)* . . . . 57

*Ф. Рәхимғолова.* Мин – Башҡортостандан! . . . . . . . . . . . . . . 60
Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 61
*Ә. Вахитов.* Аҡһаҡал аманаты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 62
Башҡорт һуҙынҡыларының үҙенсәлектәре . . . . . . . . . . . . . 64
Башҡорт шәжәрәләре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 70
Антоним тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 73
*А. Йәғәфәрова.* Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар *(Әкиәт)*. . . . . . . 73
*Ф. Мөхәмәтйәнов.* Ҡыҙыҡ һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 76
*Ф. Иҫәнғолов.* Йылмайыу *(Әкиәт)*. . . . . . . . . . . . . . . . . 77
*Р. Ғарипов.* Алма . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 81
*Ғ. Хисамов.* Аҡъяурын сал бөркөт . . . . . . . . . . . . . . . . 82
Омоним тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 96

## Ҡыш

*С. Әлибаев.* Ҡыш. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
*Н. Мусин.* Ҡоралайҙар. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 99
*В. Әхмәҙиев.* Ҡышҡы урманда . . . . . . . . . . . . . . . . . . 102
*М. Кәрим.* Ҡыш бабай бәләкәй саҡта . . . . . . . . . . . . . . 103
Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре . . . . . . . . . . . . . . . 108
Ҡамыр батыр *(Башҡорт халыҡ әкиәте)* . . . . . . . . . . . . . 108
Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 122
Мәҡәл тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 124
*З. Биишева.* Йәшәү – хеҙмәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 125
*Ф. Туғыҙбаева.* Яңы күлдәк . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 126
Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән
*(Башҡорт халыҡ әкиәте)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 128
*М. Кәрим.* Башлыҡ һайлау
*(“Өс таған” повесы буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 136
Башҡорт халыҡ йомаҡтары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 144
Йомаҡ тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 147
*Д. Бүләков.* Яралы китап . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 148
*Ғ. Рамазанов.* Ағайым хаты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 154
*Ә. Вахитов.* Өс бөртөк бойҙай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 155
Ижек. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү . . . . . . . . . . . . . . . . 161

*М. Кәрим.* Дан – кәпәс түгел
*(“Өс таған” повесы буйынса)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 162
*Т. Молдағәлиев.* Атайым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 165
Хикәйә тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 167
*Ә. Әминев.* Әсикмәк . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 168
*Ф. Мөхәмәтйәнов.* Әсәйемдең ҡулы . . . . . . . . . . . . . . . . 172
Әсә йөрәге *(Көнсығыш легендаһы)* . . . . . . . . . . . . . . . . 174
Башҡорт телендә баҫым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 176
*Ғ. Аллаяров.* Таҫтамал . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 177
Башҡорт халыҡ йырҙары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 181
Алфавит. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 186

## Яҙ

*Р. Назаров.* Яҙ килә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 188
*З. Хисмәтуллин.* Сыйырсыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 190
*С. Әлибаев.* Яҙҙы кем килтергән? . . . . . . . . . . . . . . . . . 194
*М. Кәрим.* Һеңлемдең төшө
*(“Беҙҙең өйҙөң йәме” повесынан)* . . . . . . . . . . . . . . . . 196
*Ҡ. Даян.* Торналар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 199
*Р. Ғарипов.* Һабантурғай. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 200
Йәнләндереү тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . 201
Башҡортостан ҡоштары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 202
*Б. Ноғоманов.* Ҡарһылыу менән Яҙһылыу
*(“Йыл бабайҙың дүрт ҡыҙы” әкиәтенән өҙөк)* . . . . . . . . . 203
Айыу менән бал ҡорттары *(Башҡорт халыҡ әкиәте)* . . . 206
*Н. Мусин.* Атайымдың ос һәнәге . . . . . . . . . . . . . . . . . . 209
Көләмәстәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 227
Көләмәс тураһында төшөнсә. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 228
*А. Игебаев.* Еңеү көнө . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 228
*К. Мәргән.* Ҡурайсының үлеме . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 230
*Р. Нигмәти.* Еңеүселәргә дан! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 235
Башҡорт телендә һүҙьяһалыш. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 236
*В. Исхаҡов.* Миҙал һәм малай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 237
Ауыҙ-тел ижады һәм әҙәбиәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 240
*Р. Назаров.* Тракторсы йыры . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 240
Ҡушма һүҙҙәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 241

*З. Хисмәтуллин.* Урман ҡунағы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 244
Фразеологик берәмектәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 250
*С. Агиш.* Турыҡай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 252
*М. Ғафури.* Һарыҡты кем ашаған? *(Мәҫәл)* . . . . . . . . . 257
*Л. Толстой.* Ике иптәш *(Мәҫәл)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 260
Мәҫәл һәм аллегория тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . 261

## Йәй

*С. Муллабаев.* Йомарт йәй . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 262
*Б. Рафиҡов.* Йондоҙ һанаусы малай. . . . . . . . . . . . . . . . . 263
*Р. Солтангәрәев.* Эшләп ашаһаң... . . . . . . . . . . . . . . . . . 270
Һүҙлек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 280

*Учебное издание*

**Хажин** Вакил Исмагилович
**Вильданов** Ахат Ханнанович
**Аккужина** Фаурия Ахтямовна
**Карабаев** Мунир Иделович
**Аминева** Зубаржат Рафкатовна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА**

**Учебное пособие для 5 класса для изучения родного (башкирского) языка и литературы в общеобразовательных организациях с русским языком обучения**

*(на башкирском языке)*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Хажин** Вәкил Исмәғил улы
**Вилданов** Әхәт Ханнан улы
**Аҡкужина** Фәүриә Әхтәм ҡыҙы
**Ҡарабаев** Мөнир Иҙел улы
**Әминева** Зөбәржәт Рәфҡәт ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *А. В. Иҙелбәкова*
Биҙәлеш мөхәррире *З. И. Кәримова*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *Г. Ә. Таһирова, З. М. Камалова, Г. Р. Попова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.06.2017. Форматы $60\times90^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы.
Офсет ысулы менән баҫылды. BTSchoolBook гарнитураһы.
Шартлы баҫма таб. 18,50+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 20,00.
Иҫәп-нәшер таб. 10,28+0,40 форз. Тиражы 11560 дана. Заказ 1.0136.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.





КИТАП